# БАШҠОРТ ТЕЛЕ ҺӘМ ӘҘӘБИӘТЕ

# 8









# БАШҠОРТ ТЕЛЕ ҺӘМ ӘҘӘБИӘТЕ 8

**Уҡытыу рус телендә алып барылған
дөйөм белем биреү ойошмаларында
туған (башҡорт) телен һәм әҙәбиәтен
өйрәнеү өсөн уҡыу ҡулланмаһы**

КИТАП
ӨФӨ • 2017

УДК 373.167.1:811.512.141
ББК 81.2 Баш-922
Б28

## Шартлы тамғалар

— һүҙлек эше
— әҙәби-теоретик төшөнсә
— тасуири уҡығыҙ
— ятлағыҙ
— парлашып йәки төркөмдә эшләгеҙ
— иҫегеҙҙә ҡалдырығыҙ
— өҫтәмә уҡыу өсөн
— проект эше
— ижади эш
— дөрөҫ уҡығыҙ
— тел материалына аңлатма
— өйҙә ололар ярҙамында эш
— тәржемә итегеҙ

Б28 Башҡорт теле һәм әҙәбиәте: уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 8-се класы өсөн туған (башҡорт) телен һәм әҙәбиәтен өйрәнеү өсөн уҡыу ҡулланмаһы / [төҙ.-авт.: В. И. Хажин, Э. Х. Вилданов, Ф. Э. Аҡҡужина, М. И. Ҡарабаев]. — Өфө : Китап, 2017. — 280 бит.

ISBN 978-5-295-06744-0

УДК 373.167.1:811.512.141
ББК 81.2 Баш-922

ТП — 084/17

ISBN 978-5-295-06744-0

© Хажин В. И., Вилданов Э. Х.,
Аҡҡужина Ф. Э., Ҡарабаев М. И., 2017
© Кәримова З. И., дизайн, 2017
© БР-ҙың Зәйнәб Биишева ис. Башҡортостан «Китап» нәшриәте ДУП-ы, биҙәлеш, 2017

# МӘКТӘП — БЕЛЕМ ШИШМӘҺЕ

*Сафуан ӘЛИБАЙ*

ТУ

## МӘКТӘП ЮЛЫ

Ерҙә, күктә, диңгеҙҙәрҙә —
Был донъяла юлдар тулы,
Тик барынан яҡынараҡ,
Ҡәҙерлерәк мәктәп юлы.

Үтһәк тә беҙ күпме юлдар,
Хәтерләрбеҙ һәр саҡ уны:
Күңелдәрҙә, Ҡош юлындай,
Балҡып торор мәктәп юлы.

Ер аҫтында, ер өҫтөндә
Күпме юлдар — таҫма һымаҡ;
Диңгеҙҙәрҙе ярып үтә,
Йондоҙҙарға илтә һуҡмаҡ.

Һәр көн беҙгә изге юлдар
Әсәйебеҙ теләп ҡала.
Әсәйҙәй, саф уйҙар менән
Уҡытыусы ҡаршы ала.

Еҙ ҡыңғырау саҡырғанға,
Беҙ ҙә бөгөн ошо юлда.
Яңы өмөт, хыял менән
Һиҙелмәйсә үтер йылдар.

1. Үҙегеҙҙең мәктәпкә килгән юлығыҙҙы иҫкә төшөрөгөҙ һәм тәьҫораттарығыҙ менән бүлешегеҙ.
2. Ни өсөн мәктәп юлы барыһынан да ҡәҙерлерәк? Донъяла, тормошта тағы ниндәй юлдар була? Фекер алышығыҙ.
3. (П) Мәктәп тормошон сағылдырған һүрәттәр, картиналар ҡарағыҙ һәм телдән бәйләнешле текст төҙөп һөйләгеҙ. «Белем көнө» байрамын үткәреүгә сценарий төҙөгөҙ.

4. Ниндәй ҡыңғырауҙар була? Теҙеп әйтегеҙ: *еҙ ҡыңғырау*, ...
5. *Ҡыңғырау* һүҙенең синонимы — *зеңгер (зыңғыр, шөңгөр)*. Был һүҙ ниндәй йырҙа осрай?

**1-се күнегеү.** Шиғырҙың 1-се, 2-се строфаһын сәсмә телмәрҙә яҙығыҙ. Шиғри телмәр менән сәсмә телмәрҙәге һөйләмдәрҙең төҙөлөшөнә иғтибар итегеҙ. Ни өсөн уларҙың төҙөлөшөндә айырмалар бар?

*Ҡош юлы ул* ниндәй юл? Русса ул нисек атала?

## ЯБАЙ ҺӨЙЛӘМ СИНТАКСИСЫ

### Һүҙҙәр бәйләнеше. Һөйләм

**Синтаксис** — грамматиканың бер бүлеге. Ул һүҙҙәр бәйләнешен, телмәрҙә ҡулланылған һөйләмдәрҙең төҙөлөшөн һәм төрҙәрен өйрәнә.

Һүҙ ысынбарлыҡтағы әйбер, билдә, иҫәп, эш-хәлде белдерә, тигәйнек. Һүҙҙәр төрлө һүҙлектәрҙә туплана. Һүҙлектәге һүҙҙәрҙе уҡып ҡараһаң, уларҙың күбеһе беҙгә аңлашыла. Ләкин һүҙлекте уҡыуы ҡыҙыҡ түгел, сөнки унда уй-фекер юҡ. Ә әкиәтте, шиғырҙы, хикәйәне, ғөмүмән, тексты уҡыуы ҡыҙығыраҡ, сөнки улар һөйләмдәрҙән тора.

Билдәле булыуынса, һөйләм ысынбарлыҡтағы бәйләнештәрҙе белдерә, унда фекер, уй бар, һәм уның интонацияһы ла була. Һөйләм, ғәҙәттә, бер нисә һүҙҙән тора. Шулай ҙа, бик һирәк осраҡтарҙа, һөйләм айырым һүҙҙәрҙән генә лә тороуы мөмкин. Һүҙ генә булһа ла, ул айырым интонацияға эйә һәм үҙенең эргәһендәге башҡа һөйләмдәр менән мәғәнәүи яҡтан бәйләнеп килә.

Миҫалдарҙы ҡарағыҙ:

*Төн. Ауыл. Йондоҙҙар. Ел иҫә.*
*Алыҫта емелдәй күк уттар.*

(Р. Назаров)

Шулай итеп, һөйләмдең төп билдәләре түбәндәгеләр:
— һүҙҙәр теҙмәһенән тора;
— һүҙҙәр бер-береһенә бәйләнеп килә;
— үҙенә хас интонацияһы була;
— айырым уй-фекерҙе белдерә.

Интонацияһына ҡарап, һөйләмдәрҙең өс төрө була: **хәбәр һөйләм (повествовательное предложение), һорау һөйләм**

**(вопросительное предложение)** һәм **бойороҡ-өндәү һөйләм (побудительно-восклицательное предложение)**: 1. *Иҫке Ҡалҡаштың да ағинәйҙәре бар.* 2. *Быңдай тәртипкә нимә сәбәпсе була һуң?* 3. *Иҫке Ҡалҡаш егеттәре, йоҡлап йөрөмәгеҙ!*

*Ноғман МУСИН*

## ҺАБАҠ

### I

Эй, ҡулынан киләме-юҡмы, хәбәрҙе әйтә лә һала инде был Дәүләтбай. Шулай дыуамал булғаны өсөн дә, «Дәүли» тип кенә йөрөтәм мин уны. Сөнки беҙҙең яҡта «Дәүли» тип алдын-артын уйламай йөрөгән, дыуамал холоҡло кешегә әйтәләр. Дәүләтбай ҙа шулай: йә иң күп тәрбиә талап иткән сөгөлдөр түтәлдәрен ҡарауҙы үҙ өҫтөнә ала, йә зоология уҡытыусыһына, уға был эште ҡушыусы булмаһа ла, йылан, баҡа, кеҫәртке тотоп килтерәсәген әйтә. Йәнәһе, берәү батыр, имеш. Харап. Үткән йыл үҙе менән бер партала ултырған Зәкиә ярҙамлашмаһа, мәктәп участкаһында кәтелүк ҙурлыҡ сөгөлдөр үҫтерә алыр ине, тиһеңме шул. Һоро йыланды тере көйө мәктәпкә алып килеп, зоология уҡытыусыһына биргәс, үҙен маҡтаған булдылар. Маҡтарлыҡ нимәһе бар инде? Бик шәп булғас, һоро йыланды ҡулы менән тотоп килтерһен. Ә бит ул уны балыҡ шикелле итеп мәскәүләп алған да ҡуҡрайып йөрөй.

Быйыл да, бишенсе класты тамамлап, йәйге каникулға таралыу алдынан, шул уҡ Дәүләтбай класс етәксебеҙ Минира апайға тағы ла ҡолаҡҡа яҡмаҫ бер һүҙ әйтеп һалды.

— Мин йәйен мәктәптең ҡуяндарын ҡарайым, — ти был. — Минира апай, бына күрерһегеҙ, әле ҡуяндар ун өс кенә, ә көҙгә улар йөҙ иллегә етәсәк. Миңә ярҙамлашырға өс-дүрт кеше генә бирегеҙ.

Апайыбыҙ уны «молодец» тип маҡтаны ла:

— Үҙең кемдәр менән эшләргә теләйһең? — тип һораны.

— Зәкиә, Миһран, Хисмәт, — тип теҙеп алып китте Дәүләтбай. Шунан миңә табан боролоп өҫтәне: — Ғайсар.

Бына тағы етмәһә, каникулды, шул тоҡос ҡойроҡтарҙы ҡарап, Дәүлигә ярҙамсы булып, мәктәп баҡсаһынан сыҡмай үткәрәм тиме ни! Бер ҡуян балаһы үлдеме, яуап бир. Алған

йөкләмәнде үтәмәнеңме, отряд сборында ҡыҙар, һәйбәт эшләһәң дә, беҙҙе түгел, башлыҡ булғас, шул уҡ Дәүлиҙе маҡтаясаҡтар. Әйҙә, ана, Зәкиәнең атаһы — ветфельдшер, Миһран менән Хисмәттең апайҙары совхоз фермаһында эшләй, мал ҡарау уларға килешә ул.

— Мин йәйен атайыма совхоз умарталығында ҡорт ҡарашам, — тинем ырғып тороп.

Дәүләтбай ҙа ныҡышып ҡабат һүҙ ҡушманы, Минира апай ҙа:

— Тик ҡара, үткән йылғы шикелле, күрше ауылдағы өләсәйеңдәргә барып, бушҡа көн үткәрмә, — тип кенә ҡуйҙы.

Юҡ инде, Минира апай киҫәтмәһә лә, минең уй өләсәйемдәргә барырҙан түгел. Сөнки совхоз быҙауҙарын ҡарамайынса, класташтарымдан айырылып, файҙаһыҙға көн үткәргәнем өсөн, үткән көҙ отряд сборында үҙемә арыу уҡ эләккәнен онотмағанмын әле. Шуға ла быйыл файҙалы эшкә барам: совхоз умарталарын ҡарашыу хөртмө ни? Аҙаҡ килеп, минең был көҙгә бик шәп бер план бар. Ә уны үҙемдән башҡа бер кем дә белмәй. Ҡуян ҡарарға ҡалдырмауҙарына шуға ла шатланып бөтә алманым мин. Тик отряд советы председателе Заһира ғына кәйефте ҡыра биреп ҡуйҙы. Инде эш бөттө, кластан сығам да атайым эргәһенә — умарталыҡҡа сабам, тип кенә торғанда, ул:

— Апай, — тине уҡытыусыға, — «Пионер урманы»н тәрбиәләргә кеше аҙ ҡала бит, Ғайсарҙы ебәрмәйек, — тип әйтеп һалды.

Уның «Пионер урманы» тигәне — лесничествоның үткән йыл ғына ултыртҡан ун ике гектар йәш ҡарағайлығы ине. Уҡыусылар уларҙы тәрбиәләүҙе былтыр уҡ үҙ өҫтәренә алғайны. Киләсәктә был ҡарағайҙар сәселгән ергә «Пионер урманы» тигән исем бирергә лә ҡарар сығарылды. Миңә был көлкө генә тойола.

Әле бер ҡарыштай ғына үҫентеләр ҡасан урман була? Атайым әйтә, ҡарағай, һикһән йыл үҫкәс кенә, бүрәнә итеп ҡырҡырлыҡ хәлгә етә, ти.

Мин, Заһираға ҡаршы ни әйтергә белмәй, башымды түбән эйеп ултыра инем, Минира апай:

— Ғайсарҙы ебәрәйек инде, — тине. — Йәй көнө умарталыҡта эш күп саҡта, уның атаһына, ысынлап та, ярҙамсы кәрәк бит.

Бына мин, йәшерен планымдың тормошҡа ашасағына шатланып, ауылдан өс саҡрымдағы умарталыҡҡа оса-ҡуна китеп барам. Арҡаға әсәйемдең атайыма тип ебәргән аҙыҡ-түлеге һалынған тоҡсайҙы йөкмәп алғанмын. Тоҡсай төбөндә тик үҙемә генә билдәле булған икенсе бер әйбер ҙә бар. Мин уларҙы, өйҙәгеләргә лә күрһәтмәй генә, келәттән сығарып һалып алдым. Минең йәшерен планым ана шул тоҡсай эсендә ятҡан әйберҙәргә бәйле инде...

Класташтарымды күҙгә нисек хайран ҡалдырасағымды уйлап, тирә-яғымда һайрашҡан ҡоштарҙың тауышына ла, урмандың матурлығына ла иҫем китмәй генә барған еремдән, ҡапыл туҡтап, артҡа сигендем: алдымда, юлға арҡыры төшөп, ҙур бер туҙбаш йылан ята ине. Башымдан ниңәлер: «Дәүләтбай ҡурҡмайынса һоро йыланды терелэй нисек алып ҡайтты икән?» — тигән уй үтте. Ләкин шунда уҡ: «Шул бер маҡтансыҡ тиклем була алмаҫлыҡмы ни мин», — тип, ғәйрәтләнеп, юлдан ситтәрәк ятҡан ағас ботағына үрелдем. Ләкин, әйләнеп ҡарауыма, юлда бер нәмә лә юҡ ине инде. Мин үлән араһына инеп барыусы йыландың ҡойроғон ғына күреп ҡалдым. Таяғымды уның артынан бәреп ебәрҙем дә ары ҡуҙғалдым.

Ана, Бүҙәнәле яланы ла күренде. Был оҙон яландың үрге башында — һирәк сауҡалыҡ менән ҡапланған яғында — умарталыҡ. Саҡай йылғаһын кисеп сыҡҡас, әрәмәлеккә боролоп кереп, арҡамдан тоҡсайҙы һалдым да унан йүкә бауға теҙелгән егермеләп ҡапҡанды алдым. Бына ул Дәүләтбай кеүектәрҙең күҙен аҡайта торған нәмәләр! Нисек итеп, тиһегеҙме? Ғәжәпләнерлек әллә ни юҡ бында. Мин был ҡапҡандарҙы ҡороп, көн һайын кәмендә ун-ун биш һуҡыр сысҡан тотасаҡмын. Ә һуҡыр сысҡан тиреһе — бик хаҡлы әйбер. Һәр береһе ун ике тин тора уның. Ана, беҙҙең күрше сулаҡ Ғибат ағай шул һуҡыр сысҡан аҡсаһына мотоцикл һатып алды. Бына мин дә йыйылған аҡсама күҙгә велосипед алып ебәрәсәкмен. Шунан, беренсе сентябрь көндө, тотҡаһына сумкамды элеп, мәктәп алдына зыйлата һуғып барам да инәм. Бөтә уҡыусыларҙың күҙе дүрт буласаҡ. Мин уларға велосипедты ниндәй аҡсаға һатып алыуымды әйтеп тормаясаҡмын, әлбиттә. «Атайым алып бирҙе», — тим дә, бөттө-китте.

Ошо ерҙә минең башҡа, был планды әлегә атайыма ла әйтмәй торорға кәрәк, тигән уй килде. Шуға күрә ҡапҡандарҙы әрәмә араһына йәшереп ҡуйҙым. Иртәгә иртүк атайыма,

Саҡайға балыҡ тота барам, тип кенә китәм дә Бүҙәнәле яландан ауылға тураға йөрөй торған һуҡмаҡтағы һуҡыр сысҡан юлдарына ҡапҡандарҙы ҡорам. Ә унан һуң инде, әйҙә, көн дә ун-ун биш сысҡан тиреһен киреп сөйләп, киптереп кенә өлгөр.

Әрселгән ҡабыҡтан эшләнгән аласыҡ эргәһенә барып еткәнемдә, атайым, умарталар айырған саҡта ҡорт инәһен тотоп бикләү өсөн, йүкәғастан ситлек эшләп ултыра ине.

— Шунан, уҡыуыңды бөтөрөп килдеңме? — тип ҡаршылаңы ул мине.

— Уҡытыусы мине һиңә ярҙамлашырға үҙе ебәрҙе, — тинем, тоҡсайҙағы икмәк-фәләндәрҙе ала-ала. Сөнки ҡабаланып, мәктәптән сыҡҡас, ашап та тормағайным, асыҡтырған. Атайым эшен ташланы ла аласыҡ алдындағы таганға элеп ҡайнатырға ҡуйған сәйнүге аҫтындағы утындарҙы ҡағыштырырға кереште.

Умарталыҡҡа быға тиклем дә килеп-китеп йөрөһәм дә, мин аласыҡ эсен тағы бер өйөрөлтөп ҡарап сыҡтым. Иркен генә ул. Түрҙә — ике кеше ятырлыҡ һике, уның эргәһенә унанбынан әтмәләп бәләкәй генә өҫтәл эшләнгән. Аласыҡтың стеналарында иһә атайымдың мылтығы, моҙға, күрек, күҙелдерек, балауыҙһыҙ рам кеүек умартасыға кәрәкле нәмәләр элеүле тора. Атайым әлеге өҫтәл ишаратына борхолдап ҡайнауҙан һаман туҡтамаған сәйнүген алып килеп ултыртты ла ике көрөшкә, мин алып килгән бер яҙым майҙы, икмәк, ҡорот ҡуйҙы. Бик тәмле тойолдо миңә сәй, тирләгәнсе рәхәтләнеп эстем. Хатта атайым:

— Әллә һине әсәйең өс-дүрт көн ас йөрөткән инде, — тип көлөп тә алды.

Сәй эсеп туйғас, атайым арлы-бирле итте лә:

— Мин ауылға ҡайтып киләйем. Ҡорт сәскәгә оса башланы, центробежканы килтерергә кәрәк. Хәҙер, төш ауғас, ҡорттар айырмаҫ та, шулай ҙа күҙ-ҡолаҡ булып тор.

Ул киткәс, ары һуғылдым, бире һуғылдым. Шунан башҡа ҡапыл һәйбәт уй килде. Ни эшләп көндө әрәм үткәрәм һуң әле? Булмаһа, ҡапҡандарҙы ҡороп килергә кәрәк. Иртәгә тиклем ун бөртөк кенә һуҡыр сысҡан эләкһен, ти, ярамаймы ни ул миңә?

Аласыҡтың ишеген ябып, ағас менән терәттем дә кисеү ауыҙы яғына йүгерҙем. Ә бер нисә минуттан мин, ауылға туранан ҡайта торған һуҡмаҡҡа төшөп, һуҡыр сысҡан юлын ҡарай-ҡарай китеп бара инем инде. Үксәм ҡапыл йомшаҡ ергә батты. Шатланып, аяҡ аҫтына ҡарайым: бына ул шайта-

ның, һуҡыр сысҡанды әйтәм, дымлы ҡара тупраҡты өҫкә ҡалҡытып, ерҙе күпсетеп, яңы ғына үтеп киткән, һуҡмаҡты ике яҡ эргәләп ике ҡапҡанды һуҡыр сысҡан юлына ҡороп ҡуйҙым. Сәғәт тә үтмәгәндер, барлыҡ ҡапҡандарымды ҡороп бөтөп, аласыҡҡа ҡайтыу яғына боролдом. «Бына ҡайһылай шәп иттем бит әле, — тип шатланам күңелемдән. — Иртәгә минең кеҫәгә керә торған аҡса йыйыла башлаясаҡ. Әйҙә, Дәүләтбайҙар ҡуян ҡарай бирһендәр, ә көҙөн мин мәктәпкә велосипед менән барасаҡмын».

Тунап алынған сысҡан тиреләрен атайыма күрһәтмәй генә киптерергә кәрәк ине. Бының әмәлен дә тиҙ үк уйлап таптым. Балта алдым да, аласыҡтан ситкәрәк китеп, бер йыуан ҡайындың туҙын ҡайыры-ние менән ҡуптарырға керештем, һә тигәнсе уныһы ла әҙер булды. Иртәгә тәүге тиреләрҙе ошо ҡайынға киреп ҡаҙаҡлаясаҡмын.

Бар булған әҙерлек эштәремде бөтөргәнгә һанап, ҡайттым да тынысланып һикегә аунаным. Ярайһы уҡ арығанмын да, ахырыһы, йоҡо баҫа башланы. Ә бер аҙҙан бөтөнләйгә онотолдом...

— Бына ниндәй шәп минең ҡарауылсы, — тигән тауышҡа уянып, ырғып торғанымда, аласыҡ эсе ҡараңғыланғайны инде. Аласыҡ алдында егеүле ат тора, атайым унан центробежканы төшөрөп маташа.

— Кил, йоҡосо малай, ярҙамлаш, — тине ул минең яҡҡа әйләнмәй генә.

Центробежканы аласыҡҡа индереп, атын туғарып, уны дилбегә менән ағасҡа бәйләп ҡуйғас, эш тә бөттө. Ашанып алдыҡ та йоҡларға яттыҡ. Ятҡас та, һуҡыр сысҡан тиреләре, уларҙы һатҡандан һуң аласаҡ өр-яңы велосипед минең күҙ алдынан китмәне. Хатта төшөмдә лә шулар менән һаташтым.

**2-се күнегеү.** Әҫәрҙән алынған һүҙҙәрҙең ниндәй телдән килеп ингәнен билдәләгеҙ (ғәрәп, фарсы, латин, грек һ. б.).

Кәтелүк, зоология, мәктәп, отряд, совхоз, кәйеф, ҡарағай, келәт, һике, центробежка, сәйнүк, ҡапҡан, ҡайын, ат, өҫтәл, балыҡ, аҡса, йүкә, урман, Хисмәт, Зәкиә, минут, һуҡмаҡ, һуҡыр сысҡан.

**3-сө күнегеү.** Алдағы текстан икешәр хәбәр, һорау һәм бер бойороҡ-өндәү һөйләм яҙып алығыҙ.

Ниндәй һөйләмдәрҙе табыуы еңелерәк? Ниңә? Һорау һөйләмдәр үҙҙәре генә тулы мәғәнә бирә аламы?

**4-се күнегеү.** Үҙегеҙ һайлаған ике хәбәр һөйләмде һорау һәм бойороҡ-өндәү һөйләм итеп үҙгәртеп яҙығыҙ. Ниндәй үҙгәрештәр булды?

Өлгө: 1. *Бөтә уҡыусыларҙың күҙе дүрт буласаҡ.* 2. *Бөтә уҡыусыларҙың күҙе дүрт буласаҡ!* 3. *Бөтә уҡыусыларҙың күҙе дүрт буласаҡмы?*

Бөтә һөйләмдәрҙе лә шулай үҙгәртеп буламы? Һорау һөйләм төҙөгәндә ниндәй үҙгәреш индерергә кәрәк булды?

Һорау һөйләм башҡа һөйләмдәрҙән интонацияһы буйынса ғына айырылмай. Һорау һөйләм составында күпселек осраҡта йә **һорау һүҙе** була, йә **һорау киҫәксәһе** бирелә. Рус телендәге *Урок начался?* формаһындағы һорау һөйләм башҡорт телендә *Дәрес башланды?* формаһында ғына була алмай. Ул йә *Дәрес* ***ҡасан*** *башланды?* йә *Дәрес башланды****мы****?* рәүешендә генә дөрөҫ була.

## II

...Иртәгеһен атайым, тамаҡҡа ашау менән, атын егеп, йүкә урманына китте. Көн ҡыҙҙырып, ҡорт айырыу башланғансы, моҙға эшләү өсөн, ҡабыҡ әрсеп алып ҡайтмаҡсы ине ул. Атайымдың күҙҙән юғалыуы булды, ҡапҡандарымды ҡарарға саптым. «Нисәү äлэкте икән?» — тигән уй башымдан сыҡмай. Бына беренсе ҡапҡан. Өҫтөнә япҡан үләнде ҡалҡытып ҡарайым (шайтан алғыры, һуҡыр көйө нисек итеп күрә икән!) ҡапҡанымды ситләтеп йырған да үткән. Һуҡмаҡтың икенсе яҡ эргәһенә барам. **Ҡапҡанды тупраҡ аҫтынан һурып алғас, шатлығымдан ҡысҡырып уҡ ебәрҙем. Уға йып-йылтыр, шыма йөнлө һуҡыр сысҡан эләккәйне. Тотоп ҡарайым — йылы ғына, күрәһең, яңы эләккән. Сысҡанды ысҡындырып алғас, ҡапҡанды урынына яңынан һалдым да икенселәрен ҡарарға йүгерҙем. Ләкин өмөтөм ни ҡәҙәр генә ҙур булмаһын, миңә был көндө шул тәүге бер табыш менән әйләнеп ҡайтырға тура килде, һуҡыр сысҡандар ҡапҡанымды йә ситләтеп, йә аҫтынан йырып үткән. Ике-өсө эләккән еренән ысҡынған, хатта ҡапҡанға йөндәре ҡыҫылып ҡалған. Шулай ҙа тәүге көн бит, эләгер әле, тип, артыҡ көйәләнмәнем.**

**Ысынлап та, иртәгеһенә бишәү эләккәс, түбәм күккә тейгәндәй булды. Мин инде мәктәпкә велосипед менән барасағыма ныҡлап ышандым.**

Ләкин эш көн дә улай шәп барманы, ҡайһы саҡта берәү ҙә эләкмәй ҡуя. Ә мин һаман да ныҡышып йөрөй бирәм. Ҡапҡандарҙы яңы урындарға күсереп һалдым.

Ун-ун биш көн үтеүгә, минең утыҙға яҡын сысҡан тиреһе бар ине инде. Уны аҡсаға әйләндереп, иҫәпләп тә ҡарайым. Әллә ни ырамай ҙа һуң... Шулай ҙа әкренләп йыйылыр ине әле. Көтмәгәндә хәтәр хәл килеп сығып, эште боҙҙо.

Бер көндө, кискә табан, һурҙыртып алынған балды совхоз келәтенә тапшырыу өсөн, атайым, флягаларын арбаға тейәп, ауылға ҡайтып китте. Ғәҙәтенсә, мине аласыҡ эргәһенән ситкә йөрөмәҫкә киҫәтте.

**Ул китеп, нимәгә тотонорға белмәй, байтаҡ йөрөгәс, аласыҡтың ҡабыҡ ҡатына ҡыҫтырып ҡуйылған һыҡыр сысҡан тиреләрен алып, ҡат-ҡат һанарға керештем. Нисә һанаһам да, шул инде — егерме һигеҙ. Шунан уларҙың нисә һумлыҡ булырын, велосипед алыу өсөн, тағы нисә сысҡан эләктерергә кәрәклеген иҫәпләргә тотондом. Шул саҡ умарталар араһынан нимәнеңдер шатыр-шотор иткән тауышын ишетеп, атайым әйләнеп тә килдеме икән әллә, тип аласыҡ ярығынан ғына тышҡа <u>күҙ һалдым</u>. Көтөлмәгән хәлде күреп, <u>сәстәрем үрә торҙо</u>, баҫҡан урынымда <u>шаҡ ҡаттым</u>. Урман яҡ ситтәге умарталар араһында, башын тегеләй-былай һелккеләп, тана ҙурлыҡ бер айыу тора. Күрәһең, ҡапҡасы асып ташланған умартаның ҡорттары уны һырып алған, айыу умартаға табан бер-ике атлап ҡуя ла кире сигенә. Бына ул асыуынан яман итеп ажғырып ебәрҙе лә икенсе бер умартаға барып тотондо. Быныһын инде ул асып торманы, күтәрҙе лә, бирән ҡорһаҡлы кеше төҫлө, алпан-толпан килеп, йылғаға табан атланы. Мин, <u>тын да алмай,</u> уны күҙәтәм. Мине һиҙеп ҡалып, кире боролоп, был яҡҡа ташланһа, ни эшләрмен, тип уйлайым, <u>ҡотом осоп</u>. Ишеккә күҙ һалам. Ах, ул асыҡ тора ла баһа! Һис юғында ябып ҡуйырға ине. Ләкин мин урынымдан ҡуҙғалыр хәлдә түгел инем. Ҡаҡҡан шикелле тик торам.**

Бына айыу умартаны йылға эсенә алып барып ауҙарҙы, үҙенең аҡыллы эшенә һоҡланғандай, хәҙер инде, моғайын, ҡорттары һыу өҫтөнә күпсеп сығып аға башлаған умартаға, башын ҡыйшайта биреп, бер аҙ ҡарап торҙо, шунан бер рамды тартып алды ла, борх-борх килеп, бал ашарға тотондо.

Артабан был ҡарап тороуға ҡыҙыҡлы ла, ҡурҡыныс та эш ни менән бөтөр ине, — белмәйем. Шул саҡ Саҡай кисеүе яғынан мылтыҡ атҡан тауыш ишетелде. Атайым булырға тейеш был. Моғайын, ул да айыуҙы күреп ҡалғандыр. Батырайып китеп, тышҡа йүгереп сыҡтым һәм, умарталар аша һикерә-һикерә, йән-фарманға үҙемә табан сабып килгән айыу күҙемә салынғас, ҡотом осоп, аласыҡ алдына йығылдым.

Күҙемде асҡанда, янымда яурынына мылтыҡ аҫҡан, зәңгәр гимнастёркалы бер кеше баҫып тора ине. Мин уны ҡапыл ғына таный алманым.

— Юҡҡа ҡотоң осҡан, улым, айыу үҙе һинән өрктө бит, — тип көлдө ул һәм мине күтәреп торғоҙҙо.

Тик шунан һуң ғына уны таныным. Был беҙҙең класс етәксебеҙ Минира апайҙың атаһы урмансы Сәхи бабай ине. Бер һүҙ ҙә әйтә алмай, үҙем дә аңламаҫтан, үкереп иланым да ебәрҙем. Сәхи бабай мине тынысландыра:

— Илама, улым, айыу ҡасты бит инде. Хәҙер был тирәгә яҡын юламаҫ, — тип мине аласыҡҡа етәкләп индерҙе.

Унда кергәс, уның күҙенә тәүге эләккән нәмә, әлбиттә, һикелә туҙышып ятҡан һуҡыр сысҡан тиреләре булды.

— У-у-у, шул ҡәҙәре һин тоттоңмо? — тип Сәхи бабай уларҙы ентекләп ҡарай башланы. Мин, уға ни тип әйтергә лә белмәй, тик торам. Уғаса булмай, аласыҡ алдына аты менән атайым килеп туҡтаны. Тимәк, хәҙер сысҡан тиреләрен атайымдыҡы тип тә әйтеп булмаясаҡ. Бына нисек ҡаптым мин. Ни эшләйһең, велосипед тураһындағы хыялымды йәшерһәм дә, атайым менән Сәхи бабайҙан тиреләрҙең үҙемдеке булыуын йәшерә алманым.

— Улыңды тый, — тине атайыма Сәхи бабай, әле генә булып үткән ҡот осҡос хәлде һөйләп биргәс, ҡоро ғына итеп. — Умарталығыңды ҡарауылламаһа ла, ағас имгәтергә белә икән. Ана ниндәй ҡайынды ҡайырын әрсеп харап иткән. Уның иптәштәре урман тәрбиәләй, ә ул…

— Бына йүнһеҙ малай, — тип асыуланды атайым. — Мин уны үҙем юҡта ҡорттарҙы ҡарарға ҡалдырам, ә ул бына ни артынан йөрөй икән. Йыйып ал хәҙер үк был нәмәләреңде. Икенсе, сысҡан тип аяҡ атлайһы булма!

Мин башымды түбән эйҙем.

Юҡ инде, хәҙер мине көсләп тә ситкә ебәрә алмаҫтар. Әлеге айыу тап була ҡалһа, ни эшләрһең? Шулай итеп, велосипед тураһындағы хыялдарым һә тигәнсе юҡҡа сыҡты минең…

...Уҡыу башланыр саҡ еткәс, ауылға ҡайттым. Ҡайттым, ә күңел буп-буш. Мәктәп яғына ла барғы килмәй, уйнарға сығырға ла күңел тартмай... Ниңә былай икән? Бына әле, иртәгә уҡыу башлана тигән көндә, кискә табан шулай уйланып, атайым алып ҡуйған яңы китаптарҙы ҡарап ултыра инем, беҙҙең өйгә Дәүләтбай килеп керҙе. Күрәһең, йүгереп килгән, тынын йыш-йыш ала, биттәре ҡыҙарған.

— Ғайсар, әйҙә мәктәпкә, — тине ул, аҙыраҡ тынысланғас, яныма килеп. Шунан тантаналы итеп өҫтәне: — Телевизор ҡарарға!

Аптырап киттем. Ни һөйләй был Дәүләтбай? Мәктәптә ниндәй телевизор булһын, ти? Ләкин миңә оҙаҡ уйланырға тура килмәне.

— Беҙ бит ҡуяндар һатҡан һәм ҡарағайҙар тәрбиәләгән өсөн лесничество биргән аҡсаға мәктәпкә телевизор һатып алдыҡ. Кисә генә ҡороп ҡуйҙылар. Бөгөн бөтә мәктәп менән тәү тапҡыр ҡарайбыҙ... Әйҙә инде, тиҙ бул. Башланып ҡуйыр, — тип ашыҡтырҙы Дәүләтбай.

Барыһы ла аңлашылды хәҙер, ләкин икеләнеп ҡалдым: «Һинең, һуҡыр сысҡан тиреһе һатып, һуҡыр бер тинең дә юҡ, ә беҙ телевизор алдыҡ», — тигән һымаҡ тойолдо миңә Дәүләтбай. Хәҙер ни йөҙөм менән иптәштәрем янына барайым да нисек итеп телевизор ҡарайым?..

Класташым, минең уйымды белгән шикелле:

— Тартынма инде, — тине, мине тағы ла ғәжәпкә ҡалдырып. — Беҙ бит һинең умарталыҡта һуҡыр сысҡан артынан йөрөүеңде лә, унда айыу күргәнеңде лә беләбеҙ, Минира апайға Сәхи бабай әйткән. Ярар, онот уларҙы. Әйҙә, киттек.

Башымды түбән эйеп, иптәшем артынан эйәрҙем. Ә күңелемдә, үҙемдең ихтыярҙан тыш: «Юҡ инде, был һабаҡты бер ваҡытта ла онотмаясаҡмын», — тигән уй ҡабатланды.

1. Уҡыусыларҙың йәйге каникулда башҡарған эштәрен һанап сығығыҙ.
2. Ғайсарҙың Дәүләтбай тураһындағы уй-фекерен һәм баһаһын текстан табып уҡығыҙ һәм фекерегеҙҙе әйтегеҙ.
3. Ғайсарҙың эше йәмғиәт һәм тәбиғәт өсөн файҙалы, ләкин уның эшендә ниндәй хата бар?
4. Һуҡыр сысҡандар тәбиғәт өсөн файҙалымы? Улар тураһында энциклопедиянан йәки Интернет селтәренән мәғлүмәт табып уҡығыҙ.
5. Башҡорт балы, умартасы һөнәре тураһында әңгәмәләшегеҙ.

6. Ғайсарҙың йәшерен кәсебе нисек асыла? Сәхи бабай ни өсөн уны ҡаты шелтәләй?
7. Әҫәр ни өсөн «Һабаҡ» тип атала?
8. Текстан ҡортсолоҡҡа ҡараған һүҙҙәрҙе яҙып алып мәғәнәләрен аңлатығыҙ, рус теленә тәржемә итегеҙ.
9. «Әҙәп барҙа — иман бар» тигән темаға әңгәмә ойоштороғоҙ.
10. Әҫәрҙе түбәндәге план буйынса һөйләргә өйрәнегеҙ.

План

1. Ғайсарҙың Дәүләтбайға ҡарата мөнәсәбәте.
2. Ғайсарҙың сере һәм хыялы.
3. Умарталыҡтағы йәшерен кәсеп.
4. Айыу менән осрашыу.
5. Сәхи бабайҙың кәсепте фашлауы һәм киҫәтеүе.
6. Дәүләтбайҙың шатлыҡлы хәбәре.
7. Малайҙың үҙ хатаһын аңлауы.

**5-се күнегеү.** Алдағы хикәйәнең ҡалын хәрефтәр менән бирелгән тәүге өлөшөн рус теленә тәржемә итегеҙ.

**6-сы күнегеү.** Ҡалын хәрефтәр менән бирелгән икенсе өлөштө өсөнсө зат исеменән һөйләгеҙ. Аҫтына һыҙылған фразеологик берәмектәрҙе мәғәнәләренә тап килгән һүҙҙәр менән алмаштырып уҡығыҙ.

**7-се күнегеү.** «Һабаҡ» хикәйәһенән өсәр хәбәр, һорау һәм бойороҡ-өндәү һөйләмдәрҙе яҙып алығыҙ. Һорау һөйләмдәрҙең һорауҙы белдергән һүҙҙәренең, өлөштәренең аҫтына һыҙығыҙ.

**8-се күнегеү.** Түбәндәге тексты уҡығыҙ. Ҡалын хәреф менән бирелгән һүҙҙәрҙең яһалышын билдәләгеҙ.

## ЙЫЙЫН

Йыйын — башҡорттарҙың халыҡ йыйылышы, ҡәбилә йәки ырыуҙың үҙидара органы, халыҡ байрамы. **Йыйын** һуғыш һәм солох, ихтилал ойоштороу йәки унда ҡатнашыу мәсьәләләрен хәл иткән, **ырыу-ҡәбилә** сиктәрен, күсенеп йөрөү тәртибен асыҡлаған, ырыу-ара йәки ырыу эсендәге төрлө бәхәстәрҙе ҡараған. Йыйын, эшендә ырыу йәки ҡәбиләнең бәлиғ булған **ир-егеттәре** ҡатнашҡан. Халыҡ йыйыны алдынан, ғәҙәттә, аҡһаҡалдар советы (ҡоролтай) үткәрелгән, ул хәл иткес тауышҡа эйә булған. Йыйын, ҡунаҡтар йыйып, байрам итеү менән тамамланған. XVI быуаттың урталарында улус идараһын индереү йыйындың **үҙидара** эшмәкәрлеген юғалтыуға килтерә.

XVIII быуатта йыйын билдәле бер ваҡытта үткәрелеүсе **байрамға** әйләнә. **Көньяҡ** башҡорттары йыйын тип туй тантанаһын, кәләште оҙатыу алдынан ҡунаҡ саҡырыуҙы ла әйтәләр, төньяҡ **башҡорттарҙа** ул йәрминкә һымаҡ үткәрелә.

**9-сы күнегеү.** Өҙөктө уҡып сығығыҙ. Кемдәрҙе туған тип атайҙар? Туғанлыҡты белдергән ниндәй һүҙҙәр бар? Һеҙҙең туғандарығыҙ күпме? Улар тураһында ҡыҫҡа ғына сығыш әҙерләгеҙ.

Иң ҙур байлыҡтың береһе — туғандар. Әммә туғанлыҡты бәләкәйҙән үк һаҡлай белергә, ғүмерҙең һуңғы көндәренә тиклем үпкәләшмәй, араны һыуытмай, ят кешегә әйләнмәй йәшәргә кәрәк. Кеше йөрәге бик наҙлы. Уны һәр саҡ наҙлап торорға кәрәк. Ташҡа әйләндерһәң, кире иретеп алыуҙары күп ваҡытты, көстө талап итә. Башҡорттар быға ҡарата бик иғтибарлы булғандар. Шуның өсөн туған яҡынлығы тураһында эпостар, легендалар, риүәйәттәр, мәҡәлдәр күп ижад ителгән. Уларҙа туғанлыҡ мөнәсәбәтен һаҡлауға ҙур урын бирелә.

**10-сы күнегеү.** Һөйләмдәрҙе тулыландырып яҙығыҙ.

Кишерҙе мөмкин тиклем күберәк ашарға ... . Уның һуты көҙгө-ҡышҡы осорҙа иммунитетты нығыта, һыуыҡ тейеүҙән ... . Ныҡ йүткергәндә, йылы кишер һутын бал ҡушып ҡулланырға ... . Бындай иҙмә ангина ваҡытында ла ярҙам итә.

Был йәшелсә күҙҙәр өсөн дә ... . Яңы ғына һығылған һутты күберәк эсергә тырышығыҙ, салат итеп тә ... . Иртән ярты стакан кишер һутын һөткә ҡушып эсһәгеҙ, көнө буйы үҙегеҙҙе көслө һәм дәртле итеп ... .

Ҡулланыу өсөн һүҙҙәр: *файҙалы, ҡотҡара, тойорһоғоҙ, кәрәк, ашағыҙ, тәҡдим ителә.*

**11-се күнегеү.** Бирелгән һүҙҙәр һөйләм була аламы? Ни өсөн уларҙы һөйләм тип атап булмай? Һәр төркөмдән һөйләмдәр төҙөп яҙығыҙ.

1. Көн, көҙ, матур. 2. Һигеҙенсе, быйыл, мин, уҡый. 3. Спорт, шөғөлләнеү, һаулыҡ, менән, файҙалы, өсөн. 4. Тейеш, кеше, һәр, белергә, туған телен. 5. Тыуған яғым, матур, бик, минең, һоҡлан, уның, сикһеҙ, менән. 6. Мәктәп, битендә, урынлашҡан, ауыл, тау, беҙҙең.

*Рәдиф ТИМЕРШИН*

## УЙЛАП ТАБЫУСЫ

Башлы малай ҙа инде был Хәйҙәр! Нимә генә уйлап тапмай ул! Бер ваҡыт ҡустыһына уйынсыҡ крокодил яһап бирҙе. Ысын тип уйларһың: ҡойроғон һелкетә, ауыҙын киң итеп бер аса, бер яба. Ауыҙын асҡан саҡта, сөйҙән эшләнгән тештәре ҡотто алырлыҡ булып ыржая. Ҡустыһының ҡулын тешләп алды хатта. Шунан һуң ҡустыһы был йыртҡыс уйынсыҡты, ҡойроғонан һөйрәп алып барып, соланға бикләп ҡуйҙы. Әле лә шунда, ауыҙын киң итеп асҡан килеш, салҡан ята.

Ярай, крокодилы крокодил инде. Бер тапҡыр ул, Хәйҙәрҙең үҙенсә әйтһәк, АҠТ приборы уйлап тапты. АҠТ ул автоматлаштырылған ҡош тотҡос була. Уның хикмәте ошонан ғибәрәт. Аҙбар түбәһенә ҠАС (ҡош алдатҡыс система) урынлаштырыла. Аңлатыбыраҡ әйткәндә, автоматик рәүештә ябыла торған ситлектә күгәрсен макеты «туҡ» та «туҡ» ем сүпләй. Ем сүпләгән «күгәрсен»де күреп, башҡа ҡоштар ҙа килә. Улар ситлеккә инеү менән, ҡоштар эләгеүҙе хәбәр итеүсе система эшләй башлай. Хәйҙәр, стеналағы ҡыҙыл лампочканың «күҙ ҡыҫыуын» күреү менән, верандалағы карауатта ятҡан еренән һикереп тора ла махсус төймәгә баҫа. Ҡоштар бикләнгән ситлек һарай түбәһенән верандаға һуҙылған тимерсыбыҡ буйынса малайҙың карауат башына килеп терәлә. Әммә Хәйҙәр быны менән генә ҡәнәғәтләнмәй. Ҡоштарҙың аяғына ул өрөп ҡабартылған төрлө төҫтәге шарҙар тағып ҡуя. Унан һуң күгәрсендәрҙе осороп ебәрә. Күп тә үтмәй, шарҙар «шарт» та «шорт» шартлай башлай. (Баҡһаң, уларҙың эсенә махсус иретмә һалған икән ул.) Әй ҡыҙыҡ була шул саҡ Хәйҙәргә! Тәгәрәй-тәгәрәй рәхәтләнеп көлә...

Икенсе тапҡыр ул әсәһенең ҡотон ала яҙҙы. Әсәһе, ҡамыр йәйергә тип, уҡлауын алмаҡсы булған ине — тик торған ерҙән тәгәрәне лә китте уҡлау. Әсәһе йәнә үрелде, ә теге, инде алам ғына тигәндә, ары тәгәрәне. Баҡһаң, әлеге лә баяғы, Хәйҙәр этләшкән икән. Уҡлауға ул «йән кереткән». Быны белгәс, әсәһе әрләне генә. Ә Хәйҙәргә уның әрләүе бар ни ҙә, юҡ ни.

Бер көндө ул йәнә этлек ҡылды: аҙбарға ҙур ғына көҙгө сығарып ҡуйҙы. Уларҙың һөҙгәк кәзәләре бар. Шул кәзә көтөүҙән ҡайтып инеүе булды, көҙгөлә үҙен күреп, сит кәзә икән, тип һөҙмәһенме килеп! Көҙгө, әлбиттә, селпәрәмә килде, ә бахыр кәзә әле лә һыңар мөгөҙ менән йөрөй.

Бер заман Хәйҙәр урамға үҙе йөрөй торған уйынсыҡ автомобилгә ултырып сыҡты. Елдерә генә малай! Артынан туҙандар ғына туҙып ҡала. Ә малайҙар: «Беҙҙе лә ултырт әле! Машинаңда нисә ат көсө?!» — тип ҡысҡыра-ҡысҡыра, уның артынан йүгерәләр. Ҡайҙа инде ултыртыу?! Иҫе лә китмәй Хәйҙәрҙең. Уға рәхәт, уға күңелле. Тик был нимә? Урам аша Фәхриә инәйҙең ҡара бесәйе сығып килә түгелме? Ҡара бесәй юлды киҫһә, юл уңмай икән, тигәнде ишеткәне бар ине Хәйҙәрҙең. Шулай булып сыҡты ла. Автомобиль ҡапыл... теге ҡара бесәй артынан елдерә башламаһынмы?! Бесәй автомобилдән ҡурҡып саба, ә автомобиль иһә уның артынан ҡалмай. Хәйҙәрҙең рулде уңға-һулға борғолауын бар тип тә белмәй машина. Бына бесәй, йән-фарман сабып, быуа аша һалынған күпер аша сығып китте. Автомобиль дә уның артынан күпергә килеп менде. Тик ул, ҡапыл боролоп, һыуға осто! Ярай әле күпер бейек түгел, быуа ла һай. Малайҙар, көләшә-көләшә, манма һыу булған Хәйҙәргә ярға сығырға ярҙамлаштылар. Ә автомобилде һөйрәп сығарырға тура килмәне. Ул... үҙе йөҙөп сыҡты! Сыҡты ла, Хәйҙәрҙе лә көтмәй, йәнә ҡара бесәй артынан сапты! Баҡһаң, Хәйҙәр мотор урынына үҙҙәренең этен — Тузикты файҙаланған икән.

Хәйҙәр ниндәй этлектәр ҡылыр ине — билдәһеҙ, әммә уның мажараларын күптән күҙәтеп йөрөгән уҡытыусы апай үҙен генә осратып былай тине:

— Һүҙ ҙә юҡ, һин башлы малай. Ләкин шуны иҫтә тот: кеше аҡылы бары тик кешеләргә файҙа килтереү менән ҡиммәт. Һин уйлап тапҡан нәмәләр кемгәлер зыян килтерә икән, уларҙың булыуынан булмауы мең ҡабат артыҡ!.. Шул хаҡта ла уйла әле, Хәйҙәр!..

1. Хәйҙәрҙең уйлап табыу «һәләтен» нисек баһалайһығыҙ? Уны аҡыллы малай тип әйтеп буламы?
2. *Ҡара бесәй юлды киҫһә, юл уңмай икән* тигән ырымға ышанаһығыҙмы?

**12-се күнегеү.** Хикәйә тексынан дүртәр хәбәр, һорау һәм бойороҡ-өндәү һөйләмдәр һайлап, күсереп алығыҙ. Уларҙы дөрөҫ интонация менән уҡығыҙ. Ни өсөн ҡайһы бер һөйләмдәр аҙағында һорау билдәһе лә, өндәү билдәһе лә ҡуйылған?

Ҡайһы бер һорау һөйләмдәрҙе көслө хис-тойғолар менән әйтергә кәрәк булһа, һорау билдәһенән һуң өндәү билдәһе лә ҡуйыла.

**13-сө күнегеү.** Хикәйәләге һорау һәм өндәү билдәләре бергә ҡуйылған һөйләмдәрҙе күсереп алығыҙ, мәғәнәләрен аңлатығыҙ.

**14-се күнегеү.** Бирелгән хәбәр һөйләмдәрҙе бер нисә һорау һөйләмгә әйләндерегеҙ.

Өлгө: *1. Урам аша Фәхриә инәйҙең ҡара бесәйе сығып килә түгелме? 2. Фәхриә инәйҙең ҡара бесәйе ҡайҙан сығып килә? 3. Урам аша кемдең бесәйе сығып килә?*

1. Малайҙар Хәйҙәргә ярға сығырға ярҙамлаштылар. 2. Уҡлау торған ерҙән тәгәрәне лә китте.

**15-се күнегеү.** Түбәндә бирелгән һүҙҙәр төркөмөн ҡулланып, һөйләмдәр төҙөгөҙ. Рус теленә тәржемә итегеҙ.

Республикала, эшләй, 60 милли мәҙәниәт, барлығы, үҙәге. Татар, 1990, йәштәре Союзы, йылда, теркәлә. 1998 йылда, Соборы, Башҡортостан, үткәрелде, рустарының. Башҡортостан, 1999 йылда, сыуаштарының, ойошторолдо, Канаш (Кәңәш). Үҙәге «Масторава», мордваларҙың, эшләй. «Мари ушем», 1991, дөйөм, йылда, мари, ойошторола, хәрәкәте. 1992, йәһүд, барлыҡҡа, «Штерн», килә, мәҙәниәте ойошмаһы, йылда.

**16-сы күнегеү.** Түбәндәге һүҙбәйләнештәрҙе башҡорт теленә тәржемә итеп, күсереп яҙығыҙ.

Климат Башкортостана, башкирский народ, река Сакмар, история башкирского народа, Зилаирский район, башкирский мёд, Уральские горы, башкирские племена, Отечественная война 1812 года, Великая Отечественная война, мирная жизнь, долгая дорога, памятник Салавату Юлаеву, произведения народного творчества.

## Һүҙҙәрҙең үҙ-ара бәйләнеше

Һүҙҙәр үҙ-ара ике юл менән бәйләнеп йөрөй: **теҙмә бәйләнеш (сочинительная связь)** һәм **эйәртеүле бәйләнеш (подчинительная связь).** Теҙмә бәйләнеш менән бәйләнгәндә, һүҙҙәр үҙ-ара тиң булалар, бер-береһенә буйһонмайҙар. Мәҫәлән, *Илдар менән Илгиз, Илдус һәм Филүс.*

Һүҙҙәр эйәртеүле бәйләнеш менән бәйләнгәндә, бер һүҙ икенсеһен асыҡлап килә, береһе икенсеһенә буйһона, бер һүҙҙән икенсеһенә һорау биреп була. Ҡайһы һүҙҙән сығып һорау бирһәк, шуныһы төп, йәғни эйәртеүсе, һүҙ була. **Төп** йәғни **эйәртеүсе** һүҙгә эйәреп, уны асыҡлап йөрөгән һүҙ **эйәреүсе һүҙ** тип атала.

ниндәй?

*Ҡыҙыл сәскә*. Был һүҙбәйләнештә *ҡыҙыл* һүҙе — эйәреүсе, ә *сәскә* — төп, эйәртеүсе һүҙ. Уларҙы һорау ҡуйыу аша билдәләргә мөмкин.

**17-се күнегеү.** Һүҙҙәрҙән һөйләмдәр төҙөгөҙ, һүҙбәйләнештәрҙе билдәләгеҙ.

Мәликә, ҡыҙы, батшаның, исемле, борон, булған, заманда. Сәлим, ғашиҡ булған, төшөндә, егет, күреп, уны, исемле. Эҙләп, егет, сығып, ҡыҙҙы, китә. Диңгеҙгә, барып, ул, етә. Юҡ, аша, нәмә лә, бер, сығырға. Һал, талды, эшләй, ҡырҡып, үҙенә. Диңгеҙ, һалға, аша, баҫып, китә, сығып. Таба, ул, Мәликәне. Егетте, өлгөрә, яратып, ҡыҙ ҙа.

**18-се күнегеү.** Түбәндәге тексты иғтибар менән уҡып сығығыҙ. Уны нисек атарға мөмкин? Текста ниндәй һүҙҙәр йыш ҡабатлана? Ни өсөн? Ул берәмектәрҙең актив ҡулланылыуын аңлатып бирегеҙ. Һөйләмдәрҙә ниндәй заман ҡылымдары күберәк урын алған? Ни өсөн?

Борон-борон заманда үҫмәгән ҡыуаҡлыҡ араһында тыумаған ҡуян балаһы булған, ти. Уны тотоп алырға тип, сығып китте, ти, сатан, ике ҡулдан да сулаҡ, һаңғырау, һуҡыр, шыр яланғас.

Китеп баралар, ти. Ҡапыл һаңғырау ҡысҡырып ебәрҙе, ти:

— Ишетәһегеҙме?! Шыптырлай!

Һуҡыр шунда уҡ һөрән һалды, ти:

— Ана бара ҡуян балаһы!

Сатан торҙо ла сапты, ти. Уның артынан бүтәндәре төштө, ти. Тыумаған ҡуян балаһын сулаҡ бара килеп тәгәрәтә һуғып та ебәрҙе, килә-килеп, йәһәт кенә салып ташланы, шыр яланғас, кеше-фәлән күрмәгәндә, тип ҡуйынына тығып ҡуйҙы, ти. Шунан былар шау-шыу килеп ҡайттылар ҙа, ут өҫтөнә ҡаҙан түңкәреп, теге тыумаған ҡуян балаһын ҡаҙан өҫтөндә һурпалап тороп бешереп, туйғансы бер ашап алдылар, ти. *(«Балалар фольклоры»нан)*

**19-сы күнегеү.** Көләмәстәрҙе башҡорт теленә тәржемә итеп яҙығыҙ. Һүҙбәйләнештәрҙе күрһәтеп, эйәреүсе һәм эйәртеүсе һүҙҙәрен билдәләгеҙ.

1. — Очень хорошо выглядите, видно, помогло лекарство, которое я Вам прописывал? — говорит врач пациенту.

— Уж бегал, бегал за этим лекарством целых три месяца, ни в одной аптеке нет. Считай, без лекарств поправился.

— Я ведь на рецепте по-латыни написал: «Бег — лучшее лекарство».

2. Едет Хужа Насретдин на своём осле. На него приличный мешок навьючен. Ехал, ехал он да переложил мешок себе на плечи, а сам с осла не слез.

Прохожий спрашивает его:

— Ты что это с мешком на плечах едешь?

— Осла жалко, думаю — пусть ему полегче будет, — отвечал Хужа.

**20-се күнегеү.** Аптырауҙы, һоҡланыуҙы, тыйыуҙы, саҡырыуҙы белдергән өндәү һөйләмдәр төҙөп яҙығыҙ.

**21-се күнегеү.** *Йырла* ҡылымы янына ниндәй ярҙамсы ҡылымдар өҫтәп яҙырға мөмкин. (*Йырла* ҡылымының формаһы төрлөсә булырға мөмкин.) Уларҙы мәғәнәләренә тап килтереп, рус теленә тәржемә итегеҙ. Был ҡылымдарҙы ҡулланып, һөйләмдәр төҙөгөҙ.

Өлгө:

| | | |
|---|---|---|
| | *башланы* | *начал читать* |
| | *ине* | *читал* |
| *Уҡый* | *торҙо* | *продолжал читать* |
| | *алды* | *смог прочитать* |
| | *белә* | *умеет читать* |
| | *ултыра* | *читает* |
| *Уҡып* | *бөттө* | *закончил читать* |
| | *сыҡты* | *прочитал* |
| | *алды* | *прочитал* |
| | *булды* | *решил читать* |
| | *алды* | *взял прочитать* |
| *Уҡырға* | *китте* | *ушёл учиться* |
| | *ине* | *надо было читать,* |
| | *барҙы* | *есть желание читать* |
| | | *пошёл учиться* |

**22-се күнегеү.** Һүҙбәйләнештәрҙе табып, аҫтарына һыҙығыҙ. Эйәртеүсе һәм эйәреүсе һүҙҙәрҙе табып, уларҙың ниндәй һүҙ төркөмөнән килгәнлеген билдәләгеҙ.

Мәшһүр көрәшсе Килмөхәмәт Байбулатов менән Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев — бер ауыл һәм бер дәүер кешеләре. Хатта туғандар. 1855 йылдарҙа Йомран-Тоҡос ауылында Килмөхәмәт Байбулатов киң билдәлелек алды. Ул көрәшеп йыҡмаған бер батыр ҙа ҡалманы тирә-яҡта. Килмөхәмәт батыр ҡаршы сыҡҡан көрәшсене ҡулына күтәргәс, һәр саҡ һорай икән: «Һин ниндәй ырыуҙан, ҡайһы ерҙән?» Дыуандыҡы, тип әйтһәләр, дыуандар алдына ташлаған, әгәр Кәлсерҙән, тиһәләр, кәлсерҙәргә ырғытҡан. Элек бит йыйындарҙа һәр кем үҙ ырыуы кешеләре менән бер төркөм ойошоп, түңәрәк яһап ултырған.

**23-сө күнегеү.** Һөйләмдәрҙәге һүҙҙәрҙе дөрөҫ формала ҡуйып йәки төшөп ҡалған һүҙҙәрҙе табып яҙығыҙ.

Сыуаштар Рәсәйҙә күп һанлы халыҡтар иҫәбенә инә. Улар 2 миллион самаһы кеше... *(кемде?)* тәшкил итә. Сыуаштар Татарстан..., Башҡортостан..., Мәскәү ҡалаһы..., Үзбәкстан..., Эстония..., Латвия... *(ҡайҙа?)* йәшәйҙәр. Ә Башҡортостанда бөтөн сыуаштар... *(кемдәрҙең?)* 6 проценты йәшәй. Улар... *(кемдәрҙең?)* 83 проценты *(ниндәй?)* телен туған теле тип иҫәпләй.

Сыуаштар Башҡортостан райондарының яртыһы... *(ҡайҙа?)* тиерлек, бөтәһе 265 мең кеше йәшәй. Башҡортостанда һан буйынса *(кемдәр?)* дүртенсе урында килә.

Сыуаштар элек-электән игенселек һәм малсылыҡ менән *(ни эшләгән?)*. Арыш һәм һолоно күпләп *(ни эшләгәндәр?)*. Киндер, етен *(ни эшләгәндәр?)*. Был үҫемлектәрҙән еп эшкәртеп, *(нимә өсөн?)* файҙаланғандар.

**24-се күнегеү.** Ҡалын хәрефтәр менән бирелгән һүҙҙәрҙе синонимдар менән алмаштырып яҙығыҙ.

Кейеҙ баҫыу — йөндө эшкәртеү **ысулы** йәһәтенән иң боронғо шөғөлдәрҙең береһе. Тарихи сығанаҡтарҙан күренеүенсә, **әҙәм балаһы** йөндө үҙе өсөн кәрәкле сифатҡа индереү серен бынан һигеҙ мең йыл элек асҡан. Кейеҙҙән **эшләнгән** иң боронғо ҡомартҡылар араһында балаҫ һәм сепрәктәрҙең һаҡланыуы беҙгә күп **мәғлүмәт** бирә.

Кейеҙ донъя мәҙәниәтенә Евразияла **тамырланған** күсмә халыҡтың ижад емеше булараҡ килеп ингән. Йөн менән эш итеү Көнсығышта барлыҡҡа килгән тигән **ҡараш** менән ҡайһы бер ғалимдар килешеп бөтмәй.

Беҙҙең **көндәргә** тиклем кейеҙ баҫыу традицияһының өс төрө килеп еткән. Беренсеһе — Иран варианты. Аҡ, ҡара һәм ҡыҙыл төҫтәр өҫтөнлөк иткән келәмде һарыҡ мөгөҙө **рәсеме** биҙәй. Икенсеһендә Пазырык традицияһы ҡулланыла. Өсөнсөһө — Бүрәт республикаһындағы кейеҙ баҫыу алымы — борондан алып һаман **үҙгәрмәгән.** Уның үҙенсәлеге шунда: кейеҙ бер генә төҫлө.

Уңайлы ла, йылы ла, шифалы ла кейеҙҙе бик күп маҡсатта файҙаланғандар: уны тирмәгә лә япҡандар, келәм, балаҫ эшләү өсөн дә ҡулланғандар, яҫтыҡ тышы ла теккәндәр.

**25-се күнегеү.** Һорауҙарға яуап бирегеҙ.

1. Һөйләү маҡсатына ярашлы ниндәй һөйләм төрҙәре була?
2. Текстарҙа ниндәй һөйләмдәр әҙерәк була?
3. Һорау һөйләм төҙөлөшөнөң ниндәй үҙенсәлектәре бар?

Һорау һөйләмдәрҙең ҡайһы берҙәре һорауҙы белдермәҫкә лә мөмкин; киреһенсә, көслө тойғо менән әйтелгәндә раҫлауҙы белдерә. Миҫалды ҡарағыҙ: *Хәтерләмәй буламмы һуң?* (М. Кәрим) Формаһы менән — һорау һөйләм, ләкин мәғәнәһе буйынса «*мин хәтерләйем*» тигәнде белдерә.

**26-сы күнегеү.** Төшөп ҡалған хәрефтәрҙе алфавит тәртибендә яҙығыҙ.

1. А, ... Н.
2. Т, ... Ы.

**27-се күнегеү.** Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ.

## НӘФРӘТ ҺӘЙКӘЛЕ

*Беҙҙең яҡта ҡарттар «Тәфтиләү»ҙе ҡысҡырып йырларға ҡушмай*

«Тәфтиләү» ҙә тигән ҡарғыш йырын
Йырламағыҙ берүк ҡысҡырып.
Йәберенән, башҡорт нәфрәтенән
Еребеҙ бит китер ысҡынып.

Бар йыһанды ҡара һөрөм баҫыр,
Мөхәббәткә нәфрәт өйкәлер.
Ижад емешеме, юҡ, «Тәфтиләү» —
Тевкелевкә нәфрәт һәйкәле.

Кемдер уға һәйкәл ҡуймаҡ була,
Беҙҙең йыр тип, кемдер йырламаҡ.
Ҡәбәхәткә һәйкәл ҡуялармы,
Әрнеүҙе һуң нисек урламаҡ?!

Тыңлағанда йәшәгеләр килмәй,
Йәнде үртәй һаман Тевкелев.
Ҡан көҫәргә бөгөнгөгә килеп,
Һаман йөрөй, һаман еҫкәнеп.

...Утҡа ырғытылған сабыйҙарҙың
Илауҙары килә алыҫтан.
Нисек инде ҡысҡырып йырламаһын
Ирмен тигән башҡорт арыҫлан!

*(Әхмәр Үтәбай)*

Шиғыр йөкмәткеһенә ярашлы үҙегеҙҙең фекерҙәрегеҙҙе дәфтәрегеҙгә яҙығыҙ.

**28-се күнегеү.** Килеш исемдәрен һәм һорауҙарын иҫкә төшөрөп яҙығыҙ. Һәр килешкә Р. Тимершиндең «Уйлап табыусы» әҫәренән бер һүҙ табығыҙ.

Өлгө: Төп килеш. *Кем? нимә? — Малай.*

## ХӘТЕР ҺАНДЫҒЫНА...

Белеме барҙың ҡәҙере бар.

* * *

Белеме ҙурҙың телеме ҙур.

# ХАЛЫҠ ИЖАДЫ — ХАЛЫҠ ХАЗИНАҺЫ

## ИКЕ СӘСӘН

Беренсе сәсән:

Үҙеңә йомаҡ әйтәйем,
Тапһаң, улым итәйем,
Тапмаһаң, ҡолом итәйем:
Көндөҙ ҡуйым күтәрһөң,
Кисен йөнөн тетерһең,
Йоҡом ҡалды тимәҫһең —
Көндөҙ серем итерһең.

Тимер, ҡорос, булатты
Ҡамыр иткән бар микән?
Оҙон-оҙон, оҙон юл
Осона сыҡҡан бар микән?

Арҡауылдың **утынан**
Ат **утлатҡан** бар микән?
Тибенгеһен тирләтеп,
Төндә юртҡан бар микән?

**Ҡонан** ҡуйҙың ҡойроғон
Яңғыҙ **ейгән** бар микән?
Иҙел менән Яйыҡтың
Билен быуған бар микән?

Ҡош тырнағы теймәгән,
Күк ыласын типмәгән
Ҡош та бүтән бар микән?
Затынан ер ерәнгән,
**Атынан** ил ерәнгән
Ил эсендә бар микән?

Икенсе сәсән:

Һөйләһәң, һүҙ оҙайыр,
Ҡолағың шәмдәй төҙәйер.
Кем булһа ла булайым,
Яуап биреп уҙайым.

Тимер, ҡорос, булатты
Ҡамыр иткән — оҫталыр.
Оҙон-оҙон, оҙон юл
Осона сыҡҡан — сауҙагәр.

Арҡауылдың **утынан**
Ат **утлатҡан** — каруансы.
Тибенгеһен тирләтеп,
Төндә юртҡан — юлаусы.

**Ҡонан** ҡуйҙың ҡойроғон
Яңғыҙ **ейгән** — һунарсы.
Иҙел менән Яйыҡтың
Билен быуған — балыҡсы.

Ҡош тырнағы теймәгән,
Күк ыласын типмәгән
Торомтай тигән бер ҡош бар.
Затынан ер ерәнгән,
**Атынан** ил ерәнгән
Хаин тигән йолҡош бар.

Ҡобайырҙың йөкмәткеһенән сығып, ике сәсәндең дә һүҙ оҫтаһы булыуын иҫбатлағыҙ.

**29-сы күнегеү.** Әҫәрҙең тәүге строфаһында бирелгән ҡылымдарҙың ниндәй заманда килеүен билдәләгеҙ. Текста ниндәй модаль һүҙ актив ҡулланылған?

«Ике сәсән» ҡобайырында бөгөн телдә ҡулланылмаған һүҙҙәр бар. Улар ҡалын хәрефтәр менән бирелгән.

Ваҡыт үтеү менән, һүҙҙәр йә төшөп ҡалалар, йә икенсе һүҙ менән алмаштырылалар. Икенселәре менән алмаштырылғандарын – **иҫкергән һүҙҙәр (архаизмдар),** ә төшөп ҡалғандарын **тарихи һүҙҙәр (историзмдар),** тиҙәр. Ҡалын хәрефтәр менән бирелгән һүҙҙәр — архаизмдар, бөгөн уларҙы икенсе һүҙҙәр алмаштырған. *Ут — үлән, утлатҡан — үлән ашатҡан; ҡонан — ике йәштән өс йәшкә тиклемге айғыр; ейгән — ашаған; атынан — исеменән.* Иғтибар итегеҙ: *ат — конь* мәғәнәһендә лә (*ат утлатҡан*), *ат — имя* мәғәнәһендә лә осрай.

**30-сы күнегеү.** Ҡобайырҙан бер һорау һөйләмде яуабы менән күсереп яҙығыҙ.

**31-се күнегеү.** Ҡобайырҙағы әйтеш формаһында ике һорау (йомаҡ) уйлағыҙ һәм уларға яуап табығыҙ.

## СУРА БАТЫР

Яуға китеп барамын,
Ҡазан илен аламын,
Ҡазанға китеп барамын.
Мин Ҡазанға барғансы,
Ҡар яумағай, ҡан яуғай;
Мин Ҡазанға барған һуң,
Ҡан яумағай, ҡар яуғай.

Ҡанатбайҙың алаты,
Ҡултығында ҡанаты,
Яуҙы күрһә, сәйнәй, ти,
Ҡуй-һарыҡтай әйҙәй, ти.
Анауыл менән мынауыл,
Ике уртаһы ҡарауыл.
Буҙса турғай булайым,
Ҡапҡаһына ҡунайым,
Тулып ятҡан дошмандың
Ҡайһы береһенә булайым.

Өйҙә бармы ир заты,
Йортта бармы ир заты?

Ир-ат — батыр ҡанаты,
Ир-ат — яуҙың ҡанаты.
Өйҙә ята ҡыҙ-ҡортҡа,
Түрҙә ята ҡыҙ-ҡортҡа;
Ҡатын булһа, сара юҡ,
Әгәр иркәк булғанда,
Булыр ҙа ине бер тотҡа!
Яуға китеп барамын,
Ҡазан илен аламын,
Ҡазан илен алған һуң,
Ҡайтып ҡылысым
һаламын.

**1.** Сура батыр Ҡазанға ниндәй маҡсат менән бара?
**2.** Ни өсөн Сура батыр Ҡазанға барғансы, ҡан яуа, ул барғас, ҡар яуа?
**3.** *Ҡайтып ҡылыс һаламын* тигән юлды аңлатығыҙ.
**4.** Һеҙ тағы ниндәй батырҙар тураһында ҡобайырҙар беләһегеҙ? Миҫалдар килтерегеҙ.
**5.** Ҡобайырға хас үҙенсәлектәрҙе әйтегеҙ. «Ике сәсән», «Сура батыр» ҡобайырҙарының төп яҙылыу алымын билдәләгеҙ.
**6.** «Сура батыр эҙенән» тигән темаға үҙегеҙ ҡобайыр яҙығыҙ.
**7.** Сәсәндәр тураһында мәҡәл һәм әйтемдәр табып яҙығыҙ, мәғәнәләрен аңлатығыҙ.
**8.** Бөгөнгө көндә ҡобайыр ижад итеүсе һәм әйтеүсе кешеләр тураһында мәғлүмәттәр туплағыҙ һәм сығыш яһағыҙ.

**32-се күнегеү.** «Сура батыр» ҡобайыры тексынан парлы һүҙҙәрҙе табығыҙ. Уларҙың составындағы һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен аңлатығыҙ. Хәҙерге башҡорт телендә ҡулланылмаған ниндәй һүҙ формалары текста осрай?

## Һүҙҙәрҙең һөйләмдә үҙ-ара бәйләнеү юлдары

Һөйләмдә һүҙҙәр бер-береһенә бәйләнеп килә, тигәйнек. Башҡорт телендә лә, рус телендәге кеүек үк, һүҙҙәрҙе бер-береһенә бәйләй торған бер нисә юл бар. Рус телендә ул — согласование, управление һәм примыкание. Башҡорт телендә **ярашыу (согласование), башҡарылыу (управление), йәнәшәлек (примыкание).**

Әгәр рус телендә **ярашыу (согласование)** һүҙҙәр бәйләнеүенең төп төрө булһа, башҡорт телендә уның ҡулланыу

сиге бик бәләкәй. Сағыштырығыҙ: рус телендә һүҙҙәр затта, һанда, родта, килештә ярашалар — *я читаю, он читает* (зат), *мальчик играет, дети играют* (һан), *новый дом, новое дело* (род), *о золотом петушке, красному платью* (килеш). Башҡорт телендә эйә менән хәбәр генә I һәм II затта ярашалар, ә III затта ярашыу ирекле — *мин уҡыйым, һин уҡыйһың, беҙ уҡыйбыҙ,* ләкин *ул уҡый, улар уҡый(ҙар).*

**Башҡарылыу (управление)** бәйләнешендә эйәреүсе һүҙ эйәртеүсе һүҙгә килеш формаһында йә бәйләүес (предлог) ярҙамында бәйләнә. Ике телдә лә был бәйләнеү юлы оҡшаш: *сказать правду — дөрөҫтө әйтеү; я приехал с другом — дуҫым менән ҡайттым.*

**Йәнәшәлек (примыкание)** бәйләнеше, шулай уҡ, ике телдә лә оҡшаш. Былдай бәйләнеш ике һүҙҙе бер-береһенә йәнәшә (формаларын үҙгәртмәйенсә) ҡуйыу юлы менән яһала. Сағыштырығыҙ: *громко кричать, повернули направо;* башҡорт телендә йәнәшәлектең сиктәре киңерәк: *бөгөн ҡайттым, ҡасан бараһың, шундай кеше, ҡыҙыл сәскә.*

Башҡорт телендә тағы ла бер бәйләнеү юлы бар. Ул **һөйкәлеү (изафет)** тип атала. Былдай бәйләнеш ике исем араһында була. Эйәреүсе һүҙ төп йә эйәлек килештә була, ә эйәртеүсе һүҙ III эйәлек заты ялғауын ҡабул итә: *ауыл урамы, ауылдың урамы.*

**33-сө күнегеү.** Һүҙбәйләнештәрҙе бәйләнеш төрҙәре буйынса өскә бүлеп яҙығыҙ.

Ҡазан иле, батыр ҡанаты, яуҙың ҡанаты, ҡапҡаһына ҡунайым, йортта бармы, өйҙә ята, ике уртаһы, буҙса турғай, тулып ятҡан дошман.

**34-се күнегеү.** Түбәндәге тексты иғтибар менән уҡығыҙ. Эйәртеүсе һүҙҙе эйәреүсе һүҙе менән бергә күсереп алығыҙ.

Бәләкәйҙән дарыу үләндәре менән ҡыҙыҡһынам. Йәйгеһен төрлө үләндәр йыйып, йыл дауамында шуларҙы ҡулланам. Ҡайһы берҙәрен сәйгә һалам, ә ҡайһы берҙәрен ҡыҫҡа курстар менән эсәбеҙ. Үләндәр менән дауалау ысулын әсәйем дә һәйбәт белә.

Йәйгелеккә балаларҙы ауылға ебәрәбеҙ. Өләсәй-олатайҙары, уларҙы балыҡҡа ла, бесәнгә лә, емеш-еләккә лә

йөрөтөп, физик һәм психик һаулыҡтары өсөн баһалап бөтөргөһөҙ өлөш индерә. Ҡышҡыһын ял көндәре – сана шыуырға, йәй – велосипед менән йөрөргә яратабыҙ.

Өҙөктөң авторы күрһәтелмәгән. Тексҡа ҡарап, уның кем булыуы, ҡайҙан, нисә йәштәрҙә булыуы тураһында һөйләшегеҙ.

**35-се күнегеү.** Өҙөктө уҡығыҙ. Ҡалын хәрефтәр менән бирелгән һүҙҙәрҙең ниндәй һүҙ төркөмөнә ҡарауын билдәләгеҙ. Текстан һандарҙы, нумератив һүҙҙәрҙе табығыҙ. Нумератив һүҙҙәрҙең мәғәнәһен асыҡлағыҙ.

Һуңғы осорҙа республикала бер килограмм да һибелмә алтын табылмаған. Быны белгестәр уның запасы аҙайыуы **менән** аңлата. Ә руданан алынған алтын ете тонна самаһы тәшкил итә. Был һан һуңғы йылдарҙа үҙгәрмәй.

Республикала 1,1 меңдән **ашыу** төрлө ятҡылыҡ теркәлгән. 2014 йылда 16 мең тонна нефть, 5 миллион тонна баҡыр колчеданы рудаһы, 70 тонна көмөш, 3,5 миллион тонна эзбиз алынған.

Башҡортостанда нефть 26 йылға, ә баҡыр, цинк, алтын 20 йылға етерлек, ти белгестәр. Йыл һайын разведкалау эштәре өсөн федераль бюджеттан 150—200 миллион һум аҡса бүленә. Ә компаниялар үҙҙәре тағы ла күберәк — йылына 5 миллиардҡа **тиклем** аҡса тотона. Уларҙың күп өлөшө «Башнефть» компанияһына тура килә.

*Алтын ерҙә ятмаç, яҡшы исем илдә серемәç; Һүҙ — көмөш, йыр — алтын; Аҡылын алтынға алышҡан алтынын баҡырға алыштырыр* тигән мәҡәлдәрҙең мәғәнәләрен аңлатығыҙ.

**36-сы күнегеү.** Һүҙҙәрҙе килештәргә тап килтереп яҙығыҙ.

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| Төп к. | *атҡа* | *ҡурайҙа* | *илде* | *ҡалаларҙың* |
| Эйәлек к. | *атты* | *ҡурайҙан* | *илдең* | *ҡалаларға* |
| Төбәү к. | *ат* | *ҡурайҙы* | *илдән* | *ҡалаларҙы* |
| Төшөм к. | *аттан* | *ҡурайҙың* | *илгә* | *ҡалаларҙан* |
| У.-в. к. | *аттың* | *ҡурай* | *илдә* | *ҡалалар* |
| Сығанаҡ к. | *атта* | *ҡурайға* | *ил* | *ҡалалар* |

ДУ **37-се күнегеү.** Һөйләмдәрҙе дөрөç интонация менән уҡығыҙ. Рус һәм башҡорт телдәрендәге яһалыу үҙенсәлектәренә иғтибар итегеҙ. Үҙегеҙ һөйләмдәр төҙөп, уларҙың яһалышын сағыштырығыҙ.

| | |
|---|---|
| Салауат бөгөн мәктәпкә бара! | Салават сегодня идёт в школу! |

| | |
|---|---|
| Салауат бөгөн мәктәпкә барамы? | Салават сегодня идёт в школу? |
| Салауат бөгөн мәктәпкә бара. | Салават сегодня идёт в школу. |

**38-се күнегеү.** Һүҙбәйләнештәрҙе һәм һөйләмдәрҙе бәйләнеү юлдары буйынса төркөмләп яҙығыҙ.

Матур көн, ауылды һағыныу, ҡала халҡы, егәрле егет, улар килделәр, тауға менеү, атайымдың хаты, шәп йүгерә, киске һауа, йөрәк тибеше, беҙ барҙыҡ, һиңә бағышлау, аҡыллы бала, ул йырлай, әсә наҙы.

1. Ярашыу: ...
2. Башҡарылыу: ...
3. Йәнәшәлек: ...
4. Һөйкәлеү: ...

**39-сы күнегеү.** Рус теленә мәғәнәһе буйынса һәм туранан-тура тәржемә итегеҙ. Уларҙы ҡулланып, һөйләмдәр төҙөгөҙ.

Уҡып алды, уҡый алды, уҡырға алды, килә ята, эшһеҙ ята, ерҙә ята, йырлап йөрөй, килеп йөрөй, урамда йөрөй.

## «ЯБАЙ ҺӨЙЛӘМ СИНТАКСИСЫ» ТЕМАҺЫ БУЙЫНСА ҮТЕЛГӘНДӘРҘЕ ҠАБАТЛАУ

1. Тел ғилеменең «Синтаксис» бүлеге нимәне өйрәнә?
2. Һөйләм барлыҡҡа килһен өсөн, һүҙҙәр йыйылмаһы ниндәй билдәләргә эйә булырға тейеш?
3. Интонацияһы буйынса ниндәй һөйләм төрҙәрен беләһегеҙ?
4. Һүҙҙәр һөйләм эсендә ниндәй юлдар менән үҙ-ара бәйләнеп йөрөй?

## ХӘТЕР ҺАНДЫҒЫНА...

Батыр яуҙа беленер, сәсән дауҙа беленер.

* * *

Сәсән алдырмаҫ, әйтмәй ҡалдырмаҫ.

* * *

Сәсән күрке һүҙ булыр, мәргән күрке күҙ булыр.

* * *

Сәсәндең сәсе саллана, һүҙе баллана.

* * *

Сәсән һүҙ башлар, батыр ҡул башлар.

* * *

Батыр егет – яу күрке, сәсән егет – дау күрке.

* * *

Сәсән барҙа телең тый, оҫта барҙа ҡулың тый.

* * *

Батырмын тип кем әйтмәй? –
Яу килгәндә, йүне юҡ;
Сәсәнмен тип кем әйтмәй? –
Дау килгәндә өнө юҡ.

* * *

Сәсәндең һүҙе уртаҡ, һөнәрлененң ҡулы уртаҡ.

# КӨҘ — ХЕҘМӘТ ҺӘМ БАЙЛЫҠ МИҘГЕЛЕ

*Зәйнәб БИИШЕВА*

## КӨҘГӨ ЯМҒЫР

Яуа ямғыр, яуа бер өҙлөкһөҙ,
Тәҙрәмдә бейей тамсылар.
Ниңә бейей, ниңә арыу белмәй,
Йәнгә тынғы бирмәй тамсы ла.

Шыбыр-шыбыр… Нимә һөйләй икән?
— Һөйөнсө! — тиме икән. — Көҙ етте!
Һыҡтанма ла, екһенмә лә, — тиме, —
Мин килдем бит, ерҙе үҙ итеп!

Килер йылдың йәшел болондарын,
Алтын баҫыуҙарын ҡоям мин.
Ағастарҙың өмөт бөрөһөнә
Серле мая һалып ҡуям мин…

Шулай тиһең, көҙгө ямғыр, беләм,
Яу, ямғырым, яу ҙа яу әйҙә.
Изге тамсыларың әрәм булмаҫ,
Икмәк булып аңҡыр һәр өйҙә.

1. Шиғырҙа көҙ ниндәй төҫтәр менән һүрәтләнә?
2. *Өмөт бөрөһө, серле мая* тигән һүҙбәйләнештәрҙе нисек аңлайһығыҙ?
3. Текстан йәнләндереү, эпитет, метафораларға миҫалдар яҙып алығыҙ һәм уларҙың ҡулланылыуын аңлатығыҙ.
4. Көҙгө ямғырҙың киләсәк уңыш өсөн файҙаһы тураһында фекер алышығыҙ.

*Хәсән НАЗАР*

* * *

Көҙгө көн. Болотло. Һалҡын.
Һары селтәр ер өҫтө.
Ҡояш-öләсәй ҡунаҡтан
Әле ҡайтмаған төҫлө.

Иҫтәлектәргә бирелеп,
Йылға әкрен, тын аға.
Ул йоҡа боҙ-күҙлек аша
Ҡарай хәҙер донъяға.

Бәҫ, һарылып, һырғаларын
Таға шыйтыҡ талдарға.
Ҡар елдәре өйөрөлөп
Һуҡлығалар туң ярға.

Һыуыҡ тип бошонмай донъя —
Ул уға иҫке таныш:
Яңғырап ҡуя ауылда
Һөйләшкән, көлгән тауыш.

Япраҡтар йыя бер сабый
Әллә ни ҙур эш итеп.
Аңлап уны, һөйөп үтәм
Ҡәҙерле моңдаш итеп.

1. Шиғырҙа көҙгө тәбиғәт ниндәй кәйеф менән һүрәтләнгән?
2. *Һыуыҡ тип бошонмай донъя —*
*Ул уға иҫке таныш:*
*Яңғырап ҡуя ауылда*
*Һөйләшкән, көлгән тауыш,* тигән юлдар менән автор нимә әйтергә теләй?
3. *Һырға* һүҙенең мәғәнәһен аңлатығыҙ. Ниндәй һырғалар була?
4. З. Биишеваның «Көҙгө ямғыр» һәм Х. Назарҙың «Көҙгө көн. Болотло. Һалҡын...» шиғырҙарында көҙҙөң һүрәтләнеүен сағыштырығыҙ һәм йөкмәткеләренең уртаҡлығын билдәләгеҙ.
5. Көҙ билдәләре тураһында һынамыштар табып яҙығыҙ һәм улар нигеҙендә күҙәтеү үткәрегеҙ.
6. Интернет селтәренән күренекле башҡорт, рус рәссамдарының көҙҙөң төрлө мәлдәрен сағылдырған картиналарын табып ҡарағыҙ һәм шиғыр менән сағыштырығыҙ.

**40-сы күнегеү.** Түбәндәге һүҙбәйләнештәрҙең бәйләнеү төрөн билдәләгеҙ. Эйәреүсе һүҙҙәре ниндәй һүҙ төркөмөнә ҡарай?

Йәшел болондар, алтын баҫыуҙар, серле мая, изге тамсылар, көҙгө көн, шыйтыҡ талдар, туң яр, ҡәҙерле моңдаш.

⇆ Һүҙбәйләнештәрҙе рус теленә тәржемә итегеҙ.

**41-се күнегеү.** Зәйнәб Биишеваның «Көҙгө ямғыр» шиғырындағы өноҡшаш һүҙҙе табығыҙ. Ул ниндәй тауышты белдерә? Хәсән Назарҙың шиғырындағы сифаттарҙы билдәләгеҙ. Улар предметтың ниндәй билдәләрен күрһәтәләр?

## ҺӨЙЛӘМ ТӨҘӨЛӨШӨ

Һөйләм тамамланған уй-фекерҙе белдерә. Ул бер генә һүҙҙән дә, һүҙҙәр теҙмәһенән дә килә ала. Уның тамамланыу интонацияһы була. Һәр бер әйбер кеүек үк, һөйләмдең дә өлөштәре бар. Һөйләм өлөштәрен ике төркөмгә бүлеп йөрөтәләр: **баш киҫәктәр (главные члены)** һәм **эйәрсән киҫәктәр (второстепенные члены).**

Баш киҫәктәргә **эйә (подлежащее)** менән **хәбәр (сказуемое)** инә. Эйәрсән киҫәктәргә **аныҡлаусы (определение), тултырыусы (дополнение)** һәм **хәлдәр (обстоятельства)** ҡарай. Хәбәр ителеүсе йәки эш-хәрәкәт башҡарыусы зат, предмет — ул һөйләмдең эйәһе була, ә эйә тураһында хәбәр итеүсе һөйләм киҫәге хәбәр тип атала.

**42-се күнегеү.** Тексты уҡып сығығыҙ. Ысынбарлыҡҡа тап килмәгән ваҡиғаларҙы, хәлдәрҙе табығыҙ. Һөйләм киҫәктәрен күрһәтегеҙ.

Мин йәйгеһен сана шыуырға яратам. Тауҙан түбән төшкәндә саң борҡоп ҡала. Шуныһы ҡыҙыҡ: күбәләктәр шунда уҡ сөскөрә башлай, себен, серәкәйҙәр ап-аҡ булып ағара. Бер көндө тауҙан шыуып төшөп киләм. Ҡаршыма бер тейен саба. Мине күрҙе лә миңә ҡаршы саба башланы. Мин ҡурҡып киттем. Ҡарап торам, санаға баҫтым. Санам шып туҡтаны. Тейен һаман яҡынлай. Минең ҡот осто. «На-а», — тип бауынан тартҡайным, санам кире боролоп сапты. Саҡ йығылып ҡалманым. Мин тау үренә сабам, тейен минең арттан. Йә сана уны уҙып китә, йә тейен сананы. Тейендең асыуы килә башланы. Кеҫәһенән сәтләүек алып миңә бәргеләй. Бер сәтләүек маңлайыма килеп тейҙе. Маңлайым ике сәтләүектәй шешеп сыҡты. Мин

дә кеҫәнән эре картуфтар сығарып тейенде бәргеләйем. Ул ялтанып ҡала. Түҙмәнем, ҡар йомарлап алып, ебәрҙем берҙе тейенгә. Ҡар уға барып тейҙе, сәселеп китте. Тейен ҡар өйөмө аҫтында ҡалды. Ҡойроғо ғына күренеп тора. Ул ҡар аҫтында ятҡансы, мин санамды борҙом да «выжт» өйгә һыпырттым. *(«Балалар фольклоры»нан)*

## Һөйләмдең баш киҫәктәре

**Эйә (подлежащее)** — һөйләмдең баш киҫәге, ул ниндәй ҙә булһа эште башҡарыусы затты, предметты белдерә. Ул *кем? нимә?* һорауҙарына яуап бирә.

**Хәбәр (сказуемое)** шулай уҡ һөйләмдең баш киҫәге, ул эйә башҡарған эште белдерә, эйә тураһында хәбәр итә. Хәбәрҙең төп һорауы — *ни эшләй?* Хәбәрҙең шулай уҡ *эйә кем ул? эйә ниндәй ул? эйә нисәү ул?* һорауҙары ла була.

Эйә ниндәй һүҙ төркөмдәренән килә ала? Эйә урынында исем, алмаш һәм һан килә ала, шулай уҡ исемде алмаштырған (исемләшкән) башҡа һүҙҙәр ҙә эйә булып йөрөй.

Хәбәр ниндәй һүҙ төркөмдәренән килә ала? Хәбәр йышыраҡ ҡылымдан була. Ҡайһы берҙә исем дә, сифат та, алмаш та, һан да, рәүеш тә, мөнәсәбәт һүҙҙәр ҙә хәбәр урынында ҡулланыла. Миҫалдар:

*Азамат яҡшы уҡый.* — Эйә — исем, хәбәр — ҡылым.

*Мин ауылға барам.* — Эйә — алмаш, хәбәр — ҡылым.

*Беҙҙең тәбиғәт матур.* — Эйә — исем, хәбәр — сифат.

*Урманда төрлө йәнлектәр күп.* — Эйә — исем, хәбәр — рәүеш.

*Тырышҡан ташҡа ҡаҙаҡ ҡаҡҡан.* — Эйә — сифат ҡылым (причастие), хәбәр — ҡылым.

*Алмаз — студент* . — Эйә — исем, хәбәр — исем.

*Ауыл эргәһендәге урманда айыу бар.* — Эйә — исем, хәбәр — мөнәсәбәт һүҙ.

*Беҙҙең класта яҡшы уҡыған уҡыусылар бишәү.* — Эйә — исем, хәбәр — һан.

**43-сө күнегеү.** Һөйләмдәрҙең баш киҫәктәрен табығыҙ. Уларҙың ниндәй һүҙ төркөмөнән булыуын асыҡлағыҙ.

1. Балыҡ эләкмәй ҙә эләкмәй. 2. Әхмәт нимәлер әйтергә теләй. 3. Көслө ямғыр яуып үтте. 4. Вәли кәүҙәгә минән таҙа.

5. Беҙ бәләкәй генә йылым үреп алдыҡ. 6. Икмәкте ергә ташлау — туйып һикереү ул. 7. Валерик — йәтим бер малай.

**44-се күнегеү.** Һүҙҙәрҙе баш киҫәктәр урынына ҡулланып, һөйләмдәр төҙөгөҙ.

1. Эйә урынына: *егет, уҡыусы, аҡыллы, уҡыған, көслө.*
2. Хәбәр урынына: *оса, кеше, юҡ, беренсе, уңған.*

*Рәсих ХАННАНОВ*

## ИКМӘК ҠӘҘЕРЕ

### I

Беҙ ураҡ башланғанын түҙемһеҙләнеп көттөк. Беҙ тигәнем, Вәли менән мин инде. Атайҙар комбайнёр булғас, йыл һайын уларҙың ҡул араһына керергә тырышабыҙ. Былтыр ҙа шулай булды, быйыл да. Башта әсәйем ҡаршы килеп маташҡайны ла, атайым яҡлап сыҡты.

— Эйҙә, үҙем менән бергә эшкә өйрәнһен, — тине. — Быйыл игендәрҙе урып йыйыу башҡа йылдарҙағы кеүек булмаясаҡ. Комплекс ысулы менән эшләйәсәкбеҙ.

Комплекс тигәндәрен аҙыраҡ беләм дә. Был — бөтә техниканы бер баҫыуға туплау тигән һүҙ. Урғыстар игенде яҫмаларға һала, комбайндар йыйып һуға, улар артынан һалам өйөүселәр эшкә тотона. Таҙартылған ерҙе туңға һөрөргә төшәләр...

**Көткән мәл дә етте.** Игендәрҙе ура башлауға ике-өс көн үткәс, атайымдар «Сибиряк»тарын баҫыуға алып сыҡты. **Башҡа йылдарҙа беҙ руль тотошоп йөрөй торғайныҡ. Быйыл эш ҡатмарлыраҡ булып сыҡты.**

— Яҫмалар тигеҙ төшмәгән, һеҙгә шуларҙы рәтләп барырға тура килер, — тине беҙгә атайым.

**Бик еңел генә булыр кеүек тойолғайны был эш.** Йәнәһе, ике йәпле һәнәк менән ситкә таралған игендәрҙе яҫмалар өҫтөнә һалып ҡына бараһың. Ләкин яңылышҡанбыҙ икән. Ҡамыл араһынан абына-һөрөнә йүгерә торғас, бик тиҙ әлһерәп төштөм, устар ут кеүек яна, етмәһә, бер-ике урындан ҡабарып та сыҡты. Вәлигә нимә, ул кәүҙәгә минән таҙа, үҙе йылғыр, милли көрәш менән шөғөлләнә. Ана, һәнәге менән ниндәй етеҙ эшләй, күҙ ҙә эйәрмәй! Мине әллә күпмегә артта ҡалдырҙы.

Төш етәрәк, көслө ямғыр яуып үткәс, комбайндар туҡтап ҡалды. **Бөтәбеҙ ҙә бер урынға йыйылдыҡ.**

— Дә-ә, — тине, һуҙып, Вәлиҙең атаһы Нур ағай. — Мул ғына быйыл гектарҙан. Әгәр шулай барһа, ҡырҡар центнерға етер ул!

— Артыҡ булмаһа, — тине атайым, тәмәкеһен тоҡандырып. — Тик ямғыр ғына яумаһын.

Атайым сибек кәүҙәле, ҡаҡса йөҙлө, башҡаларҙы ауыҙына ҡаратып, ихлас күңелдән һөйләшергә ярата. Ләкин бөгөн ул да етди ине.

— Әйҙәгеҙ, форсаттан файҙаланып, тамаҡ ялғап алайыҡ. Һуңынан төшкә туҡталып тормабыҙ, — тине.

Беҙ күпереп бешкән ҡаласҡа май яҡтыҡ та, йомортҡа менән ҡушып, ләззәтләнеп ашарға тотондоҡ. Атайым бындай саҡта һөйләгәнде яратмай. «Ашағанда кешенең ҡолаҡтары ғына һелкенеп торорға тейеш», — ти ул. Уның был ғәҙәтен бөтәһе лә белә, шуға ла һәр ҡайһыбыҙ тып-тын ғына үҙ эшендә булды. Ашап туйғас, мин ҡалған икмәк һынығын, уны-быны уйлап тормаҫтан, ҡамыл араһына ырғыттым. Быны күреп, атайымдың төҫө үҙгәрҙе.

— Нимә ырғыттың? — тип һораны ул, тауышын күтәрмәй генә.

— Икмәк.

— Тә-ә-к, — тип һуҙҙы атайым, — тимәк, икмәк һынығы. Беҙ бөртөкләп иген йыябыҙ, бүтәндәр икмәкте ергә ташлай, әрәм итә, имеш. Шулай килеп сыға түгелме һуң?

— Уны хәҙер ҡоштар ашап бөтөрә, — тип аҡланырға теләнем.

— Ҡоштарға аҙыҡ былай ҙа етерлек. Бар, ал!

**Мин теге киҫәкте тиҙ генә кире барып алдым.** Атайым, уның туҙанын өрөп, башҡа ашамлыҡтар янына ҡуйҙы:

— Икмәкте ергә ташлау, белгегеҙ килһә, туйып һикереү ул.

Байтаҡ ваҡыт һүҙһеҙ ултырҙыҡ. Миңә бик уңайһыҙ ине. Бәлки, атайым әрләп ташлаһа, еңелерәк тә булыр ине. Юҡ, улай итмәне.

— Икмәктең ҡәҙерен белмәйбеҙ, — тине ул бер аҙҙан. — Ә бит уны йылдар буйына күрмәй йәшәгән саҡтар ҙа бар ине. **Бер ваҡиға күңелемә мәңгелеккә һеңеп ҡалды.** Һуғыш йылдарында яҙын аслыҡ була торғайны. Хәйер, һеҙгә быны белеү кәрәк тә түгелдер.

— Ниңә улай тиһең, атай? — тинем мин.

— Хәким ағай, һөйләгеҙ әле шул ваҡиғаны, — тип ялынды Вәли ҙә.

Атайым, күрһөнә биреп, бер аҙ уйланып торҙо.

— Йә, улайһа, һөйләйем, тыңлағыҙ.

...Ул йылда Ҡарлыман йылғаһы, туғайҙарға йәйелеп, аҡтарылып ташты ла, егергә өйрәтелә торған тай шикелле, әкрен-әкрен генә йыуашланып, элекке тыныс хәленә ҡайтты. Урыны-урыны менән умырылып төшкән ярҙар тарайып ҡалды. Һыу ҡайтҡан ерҙәрҙәге соҡорҙарҙа кескәй генә күләүектәр хасил булды. Улар өҫтөндә, бер туҡтауһыҙ саңҡылдашып, аҡсарлаҡтар оса.

Беҙ бәләкәй генә йылым үреп алдыҡ та иртәнән бирле ошо күләүектәрҙә һыу болғатабыҙ. Ә балыҡ эләкмәй ҙә эләкмәй.

— Ниндәй балыҡ булһын бында, юҡҡа маташабыҙ, — тим мин, ризаһыҙлыҡ белдереп.

— Ә аҡсарлаҡтар ниңә бында оса? — тип ҡаршы төшә дуҫым Әхмәт. — Ана, өләсәйем әйтә, бындай ерҙән элек ботлап-ботлап балыҡ тотоп алалар ине, ти.

Һүҙһеҙ генә тағы һөҙәбеҙ. Унып һайын һыу буръяҡлана ғына.

— Ана, теге күләүектә балыҡ ҡарпыны, ахырыһы, — ти Әхмәт, аҡланғандай итеп.

— Башаҡ йыйырға бараһы ҡалған, — тим мин. — Һинең һүҙеңә ҡарап...

**Әхмәт нимәлер әйтергә теләй, ауыҙын аса биреп, ҡоласын йәйә.** Әммә өлгөрә алмай, ҡаршылағы яр башынан:

— Эй-й, килегеҙ әле бында! — тигән тауыш ишетелә.

Ҡараһаҡ, Валерик ҡул болғап тора.

— Ниңә шул ҡәҙәр ҡысҡыраһың, балыҡтарҙы ҡурҡытаһың бит, — ти Әхмәт уға. — Салбар балағыңа ут ҡапмағандыр бит?

Валерик — һуғышта ата-әсәһе үлгән бер малай ул, беҙҙә тора.

— Һеҙҙе бригадҡа саҡыралар, — тине ул.

— Ниңә?

— Белмәйем. Абдулла бабай, егеттәрҙе тиҙ генә алып кил, эш бар, тине.

Һыныҡҡа һылтау тигәндәй, билдән бысраҡ һыуҙа балыҡ һөҙөү мине ялҡытҡайны инде, шуға йылымды һыуҙан алып та торманым. Әхмәт тә һуҡрана-һуҡрана беҙгә эйәрҙе.

Беҙ бригада йортона килеп етәрәк, Абдулла бабайҙың, уң ҡулын аҡ сепрәккә төрөп, муйынына аҫҡан бер һалдат менән һөйләшеп тороуын күрҙек. Һалдаттың өҫтөндә — ҡояшҡа

ағарып бөткән гимнастёрка, башында — пилотка, аяҡтарында — обмоткалы ботинкалар. Беҙгә арты менән баҫып торған был кешенең кем икәнен тиҙерәк белгем килде.

**Ошо ваҡыт Абдулла бабай беҙҙе күреп ҡалды.**

— Бына, Миҙхәт туған, егеттәребеҙ ошолар инде, — тине ул, йылмая биреп, әлеге һалдатҡа.

— И-и, былдай бөркөттәр менән тау-таш емерергә мөмкин, — тине тегеһе. Унан, беҙгә иҫән ҡулын һуҙып өҫтәне: — Таныш булайыҡ, мин — Миҙхәт ағайығыҙ. Ә һеҙ кемдәр?..

Ул беҙҙең барыбыҙ менән дә танышып сыҡты.

— Һәйбәт, унлап кеше йыйылдыҡ, — тине ул, ҡәнәғәт булып. — Тик Хисами ағайҙың ғына малайын күрмәйем. Ул килмәнеме ни?

— Ҡасим башаҡ йыйырға китте. Әсмә апай ауырып ята, — тинем мин.

— Һе, улай икән, — Миҙхәт ағай йөҙөн йыйырҙы.

1. Малай икмәкте ташлап дөрөҫ эшләнеме? Ни өсөн икмәкте ташларға ярамай?
2. Икмәк, игенсе хеҙмәте тураһында ниндәй мәҡәл-әйтемдәр беләһегеҙ?
3. *Ашағанда ҡолағың һелкенһен; Салбар балағыңа ут ҡапмағандыр,* тигән һөйләмдәрҙе аңлатығыҙ.
4. *Икмәк, ҡалас.* Икмәкте тағы нисек атайҙар?
5. *Йылым менән, ҡармаҡлап.* Балыҡты тағы нисек тотоп була?
6. *Әйҙәгеҙ, форсаттан файҙаланып, тамаҡ ялғап алайыҡ* тигән һөйләмдә *форсат* һүҙен икенсе һүҙ менән алмаштырып, һөйләмде уҡығыҙ. Мәғәнәһе үҙгәрҙеме? Һүҙҙе рус теленә тәржемә итегеҙ.
7. ...*Ботлап-ботлап балыҡ тотоп алалар*... һөйләмендә *бот* һүҙе ниндәй үлсәмде аңлата?

**45-се күнегеү.** Алдағы бүлектәге ҡалын хәрефтәр менән бирелгән һөйләмдәрҙә эйә менән хәбәрҙе табығыҙ. Уларҙың ниндәй һүҙ төркөмөнән һәм нисә һүҙҙән килеүен асыҡлағыҙ.

## II

Шул саҡ Абдулла бабай тамаҡ ҡырып алды ла:

— Һеҙ, уландар, үҙегеҙҙе ни өсөн саҡырғанды белмәйһегеҙҙер, — тине, борсоулы ҡарашын беҙгә төбәп. — Бик яуаплы бурыс йөкмәтеү өсөн саҡырҙыҡ беҙ һеҙҙе. Бына райком камсамул һуғыштан яраланып ҡайтҡан Миҙхәт ағайығыҙҙы беҙгә ебәргән. Уның етәкселегендә, ат менеп,

баçыуға сығаһығыҙ ҙа башаҡ йыйыусыларҙы ҡайтараһығыҙ. — Бригадир бабай, бер аҙ туҡтап торғас, ғәйепле кеше тауышы менән дауам итте: — Ә йыйылған башаҡтарҙы яндыраһығыҙ.

— Ә ниңә уларҙы яндырырға? — тип һораным мин, бер ни ҙә аңламайынса.

— Һәр башаҡ — дошман йөрәгенә пуля, — тип ҡысҡырып ҡуйҙы Әхмәт.

— Был осраҡта башаҡ — үҙебеҙҙең йөрәккә пуля. — Миҙхәт ағай иçән ҡулы менән һауаны киçте һәм шунда күкрәгендәге ике миҙалы, бер-береһенә бәрелеп, сыңлап китте. — Улар ҡыш буйы ҡар аçтында ятып боҙолған. Бына ҡарағыҙ, — ул кеçәһенән бер нисә бойҙай башағы тартып сығарҙы, — күрәһегеҙме, энә осондай ғына ҡыҙыл бөрсөктәр менән ҡапланған. Бына шуны ашап кешеләр ағыулана. Үлем осраҡтары ла байтаҡ. Быға һис юл ҡуйырға ярамай. Партия, комсомол беҙгә халыҡты бына шул бәләнән ҡотҡарырға ҡуша. Бурыс аңлашыламы? Һорауҙар юҡмы?

— Бар, — Әхмәт алғараҡ сығып баçты. — Ә улар йыйған башаҡтарын бирмәһәләр?

— Бирмәçкә хаҡтары юҡ, үҙҙәренең сәләмәтлектәре тураһында ҡайғыртабыҙ. Ә инде бирмәçкә теләүселәр табылһа, тартып аласаҡбыҙ.

Оҙон-оҙаҡҡа һуҙып тормайынса, аттарға атланып алдыҡ та юлға сыҡтыҡ. Миңә Усманка эләкте. Элекке бай аты ул. Гел мисәүҙә йөрөгән. Шуға ла һәр саҡ уң яҡҡа ҡайыра. Һис юлдан ғына бара белмәй. Теҙгенен һулға табан тарта-тарта, ҡул талып бөтә. Етмәһә, үтәябыҡлыҡтан ҡабырғалары беленеп тора, арҡаһы бысаҡ һырты кеүек, кавалеристарға оҡшатып, уйнап ҡына ултырып барырмын, тимә. Әхмәттең хәле минекенән һәйбәтерәк. Уға Саптарҙы бирҙеләр. Бәләкәйерәк, әммә бик йылғыр ат ул.

Ауылды сығып, ферма яғынан һулға боролғас, ҙур ҡалҡыулыҡ башлана. Был — Ҡомлокүл һырты. Ҙур-ҙур соҡорҙар менән йырғыланған. Шул соҡорҙарҙың икеһе хаҡында төрлө һүҙҙәр йөрөй. Уларҙың араһынан юл һалынған. Шунан арбалы ат уҙғанда, аçта нимәлер дөбөрләп ҡала.

Әле лә шул сәйер тауыш яңғыраны.

— Ишеттеңме? — тине Әхмәт. — Күк күкрәй, тип торам. Ниндәй сере бар икән, вәт беләһе ине!

Яуапты Миҙхәт ағай бирҙе:

— Аҫта — ҡыуышлыҡ. Бының бер сере лә юҡ.

Әхмәт уның һүҙҙәре менән килешмәйенсә:

— Ә бына беҙҙең өләсәй… — тип нимәләр әйтә башлағайны, Миҙхәт ағай, уны бүлдереп:

— Был хаҡта һуңынан һөйләшербеҙ, — тине лә команда бирҙе: — Отряд, алға!

Баҡһаҡ, йөҙ-ике йөҙ аҙымдай алыҫлыҡта ғына арҡаларына тоҡтар аҫҡан бер төркөм кеше беҙгә табан килә. Улар беҙҙең ни өсөн ат саптырып килеүебеҙҙе белмәй, әлбиттә. Белһәләр, төрлө яҡҡа таралып та бөтөрҙәр ине. «Берәй нәмә булдымы икән әллә?» — тип уйлағандарҙыр инде. Һәр ҡайһыһы, беҙгә ҡыҙығып ҡарап, ситкә сығып, юл бирҙе. Әммә беҙ артабан китмәнек. Миҙхәт ағай үҙенең йылғыр тайын, уларҙың ҡаршыһына еткәс, ҡырт ҡына туҡтатты ла юлға арҡыры ҡуйҙы.

— Тоҡтарығыҙҙа нимә, башаҡ йыйҙығыҙмы? — тип һораны ул тыныс ҡына.

— Эйе.

— Ул башаҡтар ағыулы бит, шуны белмәйһегеҙме ни?

— Белһә һуң, тамаҡ тамуҡҡа индерә.

— Ағыуланып үлһәгеҙ?

— Беҙ үлгәндән, донъя бөтөр, тип уйлайһығыҙмы әллә?

— Шаярыу-шаярыу, ә бына башаҡтарҙы юл өҫтөнә бушатырға тура килер.

— Һе, бушатмай ни, бушатабыҙ хәҙер, көтөп тор, — тип һөйләнә-һөйләнә, беҙҙең ос Мәйсәрә апай алға сыҡты. — Һин, Миҙхәт ҡустым, һуғыштан иҫән-һау ҡайтыуыңа ғына шатланып йөрө, йәме. Беҙҙең ише фронтовик ғаиләләренә ҡағылма.

Төркөм дәррәү алға ҡуҙғалды. Беҙ, малайҙар, нимә эшләргә белмәй, аптырап ҡалдыҡ. Миҙхәт ағай, ботинка үксәләре менән атының ҡорһағына тибеп, йәнә улар ҡаршыһына сыҡты.

— Туҡтағыҙ! Яҡшылыҡ менән әйтәм.

— Яманлыҡ менән ни эшләрһең, ә? Ниндәй юл баҫыу ти ул көпә-көндөҙ, илаһым?!

Миҙхәт ағай былай тупаҫ ҡыланып алдырып булмаҫты аңланы, ахырыһы. Ҡулын күтәреп, тауышланыуҙы туҡтатҡас, ашыҡмайынса ғына хәлде аңлатты.

— Һеҙҙең үҙегеҙ өсөн яҡшылыҡ эшләйбеҙ бит. Ошо бөртөктәрҙе ашап, күбегеҙ ағыуланып үләсәк, башығыҙ менән уйлап ҡарағыҙ. Улар беҙгә кәрәкмәй, хәҙер үк бына шунда яндырабыҙ.

Бөтәһе лә икеләнеп ҡалды. Тик оҙаҡҡа барманы был. Мәйсәрә апай Миҙхәт ағай эргәһенә килде лә атының йүгәнен эләктереп алды.

— Кит юлдан! Юғиһә һөйрәп төшөрәм үҙеңде! Үләһегеҙ, имеш! Үлмәй ни! Унда ас балалар көтә. Яҙғанын күрербеҙ.

Ул арала беҙҙең янға башаҡтан ҡайтып килеүсе ике төркөм дә яҡынлашты. Улар араһында минең иң яҡын дуҫым Ҡасим да бар ине. Ул, хәлде аңлағас, миңә асыуланып ҡараны. Мин, үҙемде үтә ғәйепле һанап, ҡыҙарынып, башымды эйҙем.

— Значит, — тине Миҙхәт ағай, ат өҫтөнән кешеләргә ҡарап, — һеҙҙең менән һәйбәтләп һөйләшеп килешә алманыҡ. Шәп түгел, һеҙ үҙегеҙҙе фронтҡа аяҡ салыусылар менән бер рәткә ҡуяһығыҙ. Шулаймы, түгелме? — Бер кем дә өндәшмәне. Миҙхәт ағайҙың күҙҙәрендә уҫал осҡондар уйнаны, тауышы ҡырыҫлана барҙы: — Мин һеҙҙән һорайым: шулаймы, түгелме? Әгәр шулай түгел икән, хәҙер үк башаҡтарығыҙҙы бушатығыҙ ҙа ут төртөп яндырығыҙ. Мин быны һеҙгә ошо эш буйынса райком вәкиле булараҡ бойорам. Юғиһә көс менән тартып аласаҡбыҙ!

Йәнә тауыш күтәрелде. Кемдер: «Сәнселһендәр ҙә», — тип, йөгөн юл өҫтөнә тоғо-ние менән атып бәрҙе. Уға башҡалар ҙа ҡушылды.

— Тоҡтарығыҙҙы алығыҙ, кәрәк булыр, — тип кәңәш итте уларға Миҙхәт ағай ихлас күңелдән. Уның һүҙенә ҡолаҡ һалдылар. Башаҡтарҙы тоҡтарҙан бушатырға керештеләр. Миҙхәт ағай, атынан төшөп, башаҡтар өйөмөнә шырпы һыҙып ут төрттө. Һауаға ҡуйы төтөн бағанаһы күтәрелде.

Ҡапыл шул ваҡыт юлда ат тояҡтары тауышы ишетелде. Әйләнеп ҡараһаҡ, Миҙхәт ағайҙың атына кемдер атланып алған да ауылға табан оса ғына! Тәүҙә, арҡаһына аҫҡан тоғо ышыҡлағанлыҡтан, «ат урлаусы»ның кем икәнен дә белмәй торҙоҡ. Йән-фарманға сабыуына ҡарағанда, шик тә юҡ, ул атта оҫта йөрөй белә. Бәй, Ҡасим бит был! Мин, атымды ҡамсылай-ҡамсылай, уның артынан саптым. Ауыр һөйәкле, Усманка тәүҙә теләр-теләмәҫ кенә сапһа ла, ҡыҙып алғас, эре аҙымдар менән араны тиҙ ҡыҫҡарта башланы.

— Ҡаси-и-м, туҡта! — тип ҡысҡырам, атымды һаман эйҙәп. — Ҡасим!..

Ҡасим, тауышымды ишетеп, артына әйләнеп ҡараны ла атын йәй көнө беҙ һыу инеп йөрөй торған урынға — Ҡарлыман йылғаһының Тоба тип аталған еренә табан борҙо. Сиҙәм

өҫтөнән байтаҡ барып, һыу буйына килеп еткәс, ул, ҡапыл туҡтап, минең яҡын килеүемде көттө.

— Ҡасим, — тинем мин, ергә һикереп, — әйҙә, кире киттек.

— Аҡылың алтын икән, мә, атты алып кит. — Ҡасим асыу менән теҙгенде миңә тотторҙо һәм үҙе, кейемен дә һалып тормайынса, һыу эсенә инеп китте. Шул ыңғай арҡаһындағы тоғон да алып, баш осона күтәрҙе. Мин нимә эшләргә белмәй торған арала, ул йылғаның арғы яғына сығып та етте. Миңә уның: — Күрһәтермен әле мин һиңә! — тигән асыулы тауышы ғына ишетелде.

— Ҡасим, һин яңылышаһың! — тип ҡысҡырҙым мин, илар сиккә етеп.

— Һинән аҡыл һорамайҙар...

Мин әйләнеп килгәндә, башаҡтар өйөмө урынында көл генә ҡалғайны. Кешеләр ҙә таралған. Миҙхәт ағай, минең ҡулдан атының теҙгенен алып:

— Кем булды ул шайтан малай? — тип һораны.

— Ҡасим, — тинем мин, түбән ҡарап.

— Хисами ағай малайымы?

— Эйе.

— Вәт, молодец! Яратам шундай тәүәккәл егеттәрҙе. Бөгөндән разведкаға ебәрергә була үҙен. — Ул ихлас кеткелдәп көлдө. Уның ҡәнәғәт булыуы күренеп тора ине. Ләкин Миҙхәт ағай шунда уҡ етдиләнде: — Ҡайтыу менән өйҙәренә үҙем барам, ашай күрмәһендәр тағы шул ашлыҡты...

...Атайым шунда еткәс, бер аҙға туҡталып торҙо. Вәли сыҙаманы:

— Шунан, Хәким ағай, шунан, нисек булып бөттө? — тип һораны.

— Был көндә беҙ һуң ғына ҡайттыҡ, — тине атайым. — Әсәйем ҡайҙа булыуыбыҙҙы төпсөнөп торманы, алдыбыҙға серек бәрәңге күмәсе менән һөт ҡуйҙы. Мин үҙемде ниндәйҙер енәйәт эшләгән кешеләй хис иттем.

Валериктың да кәйефе юҡ ине. Ул да уңайһыҙлана кеүек. Ризыҡтарға ҡул тейҙерергә өлгөрмәнек, ишек асылды һәм, тупһанан ҡыйыр-ҡыймаҫ атлап, Ҡасим килеп инде. Уның ҡулында башаҡтар тултырылған тоҡ ине.

— Бына, — тине ул әкрен генә, — килтерҙем... Әсәйем ҡушты...

Әсәйем хәлде шунда уҡ аңлап алды һәм Ҡасимды, иңдәренән ҡосаҡлап, беҙҙең янға килтереп ултыртты.

— Әйҙә, улым, ашап ал!

Мин үҙемдең көмәсте, уртаға һындырып, Ҡасимдың алдына ҡуйҙым. Валерик та шулай итте. Шунда мин Ҡасимдың күҙҙәрендә беренсе тапҡыр йәш бөрсөктәре күрҙем...

— Ҡасим ағай әле иҫәнме? — тип ныҡышты Вәли.

Атайым көлөмһөрәп яуап ҡайтарҙы:

— Иҫән, әлбиттә, иҫән булмай, ҡайҙа китһен ул.

— Беҙҙең ауылда ундай исемле кеше бармы ни?

— Ана, үҙе лә бында ултыра. — Атайым киң йөҙөндә ихлас йылмайыу балҡытҡан Нур ағайға ҡараны.

— Атай, ул малай һин инеңме ни? — тине Вәли ғәжәпләнеп.

Нур ағай тағы ла ныҕыраҡ йылмайҙы, уңайһыҙланғандай яурындарын йыйырып ҡуйҙы, ләкин өндәшмәне. Уның өсөн атайым яуап бирҙе:

— Ул, тап үҙе! Мин исемен юрамал үҙгәртеп һөйләнем.

— Әхмәт ағай менән Валерик ҡайҙа?

— Әхмәт ағайығыҙ — беҙҙең председатель. Уны хәҙер тулы исем менән Миңлеәхмәт тип йөрөтәләр. Валерикка килгәндә, ул — йыраҡта. Лётчик, полковник! Мәскәүҙә хәрби академияла уҡыта. Улар, әлбиттә, икмәктең ҡәҙерен беләләр. Һеҙҙең кеүек түгелдәр...

Ул арала болот йыртыҡтары араһынан ҡояш ялтырап күренде, тирә-яҡ йәмләнеп, ҡоштар һайрарға, сиңерткәләр сырылдарға кереште.

— Ярай, — тине атайым, урынынан тороп, — оҙон һүҙ китапҡа ғына яҡшы, тигәндәр боронғолар. Ә беҙҙең баҫыу китабының ҡул теймәгән биттәре күп әле. Ҡуҙғалайыҡ булмаһа, ваҡыттың ҡәҙерен белергә кәрәк.

Баҫыу өҫтөн күңелле гөрөлтөгә күмеп, комбайндар берҙәм ҡуҙғалды. Беҙ, һәнәктәрҙе тотоп, теҙмәләр буйлап алға ашыҡтыҡ.

1. Р. Ханнановтың «Икмәк ҡәҙере» әҫәре буйынса түбәндәге һорауҙар буйынса викторина үткәрегеҙ:
   1. Р. Ханнановтың «Икмәк ҡәҙере» әҫәрендә ниндәй мәл һүрәтләнә?
   2. Малайҙар баҫыуҙа ниндәй эш башҡаралар?
   3. Хәким ағайҙы ниндәй ваҡиға ауыр йылдарҙы иҫкә төшөрөргә мәжбүр итә?
   4. Ул ниндәй ваҡиға тураһында һөйләй?
   5. Малайҙарға Миҙхәт ағай ниндәй эш ҡуша?
   6. Мәйсәрә апай менән Миҙхәт араһында ниндәй һөйләшеү була?

7. Мәйсәрә апай хаҡлымы? Уның был ҡылығын аҡларһығыҙмы әллә хөкөм итерһегеҙме?
8. Ҡасимдың башаҡ менән ҡасыуын аңлатығыҙ һәм был күренеште баһалағыҙ.
9. Ҡасимды башаҡтарҙы кире алып килергә нимә этәрә? Ул дөрөҫ эшләйме?
10. Ауыр һуғыш йылдарындағы аслыҡты үткәргән малайҙар тормошта үҙ юлдарын нисек табалар?

**2.** Ниңә ҡышлаған башаҡты ашау һаулыҡ өсөн зарарлы? Быны медицина нисек аңлата? Интернет селтәренән мәғлүмәттәр табып уҡығыҙ.

**3.** *Оҙон һүҙ китапҡа ғына яҡшы* тигән әйтемде аңлатығыҙ.

**4.** Райком, комсомол ойошмалары тураһында Интернет селтәренән мәғлүмәттәр табып уҡығыҙ һәм әңгәмәләшегеҙ.

**5.** Икмәк тураһында тексты уҡығыҙ. Әсәйегеҙ йәки өләсәйегеҙ икмәк бешергәнен күҙәтегеҙ һәм эшләгән эште әҙмә-әҙлекле яҙып алығыҙ.

## ИКМӘК

Икмәк бөтәһенә лә баш, ти халыҡ әйтеме. Ысынлап та, ҡабарып бешкән хуш еҫле әпәкәй — һәр табындың күрке, йәме. Бөгөн магазин кәштәләрендә икмәктең ниндәй генә төрө юҡ! Ағы ла, ҡараһы ла, әсеһе лә, сөсөһө лә, төрлө орлоҡтар, тәмләткестәр ҡушылғаны ла етерлек. Тик улар сифаты, файҙалылығы, туҡлыҡлылығы йәһәтенән ауыл мейесендә ҡомалаҡ әсеткеһенән бешерелгән икмәк менән һис тә ярыша алмай. Бындай әпәкәйҙе бер тапҡыр ашап ҡарағандар уның тәмен башҡа бер ни менән дә бутамаясаҡ. Әммә бөгөн күпселек ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ (хатта ауыл ерендә йәшәүселәр ҙә), магазиндан икмәк һатып алыуға ғәҙәтләнеп, ҡомалаҡтан әсетке яһау, икмәк бешереү серҙәрен онотоп бара.

**46-сы күнегеү.** «Икмәк ҡәҙере» әҫәренең икенсе бүлегенән дүртәр хәбәр, һорау, бойороҡ-өндәү һөйләмдәрен яҙып алығыҙ. Уларҙың мәғәнәүи үҙенсәлектәрен аңлатығыҙ.

**47-се күнегеү.** Берәй класташығыҙҙан йәки башҡа бер кешенән уның биографияһын һорашып, интервью алығыҙ. Дәфтәрегеҙгә яҙып, тексығыҙҙағы һөйләмдәрҙең баш киҫәктәрен билдәләгеҙ.

**48-се күнегеү.** Мәҡәлдәрҙе уҡығыҙ. Уларҙың йөкмәткеһенә ҡарап, темаһын билдәләгеҙ. Һөйләмдең баш киҫәктәре аҫтына һыҙығыҙ, хәбәрҙәрен әйтмәйенсә уҡып ҡарағыҙ. Мәғәнә аңлашыламы?

1. Икмәкте башыңдан юғары күтәрмә.
2. Икмәк сәйнәлмәйенсә йотолмай.
3. Татыу табында аш тәмле.
4. Аш ташты иретер.
5. Бутҡа майҙан туймай.
6. Балан ҡамыр ашата.
7. Үҙ икмәгең кеше ҡаласынан тәмлерәк.
8. Хәләл ризыҡ күкрәк көсө менән табыла.
9. Һөт менән ҡатыҡ — йөрәккә ятыҡ.
10. Эшләп тапҡан аш тәмле.

## БАЛАН ҠАМЫР АШАТА

Бешмәгән, боҙолған емештәренән таҙартылған баланды, тәүҙә яҡшы итеп йыуып, ҡапҡаслы табаға йәки көршәккә һалып, әҙ генә һыу, шәкәр өҫтәп, мейескә (духовкаға) бер нисә сәғәткә быҡтырырға ҡуйырға кәрәк. Балан һыуынғас, уны бәлеш ҡамырына төрөп, табаға һалалар.

Бешереү ваҡыты — 50—60 минут.

Ҡушылмаларының күләме: 800 г. ҡамыр, 600 г. балан, 150 г. шәкәр (бал менән алмаштырырға мөмкин), бәлеш өҫтөнә һөртөр (һылар) өсөн йомортҡа. *(И. Арыҫлановағанан)*

Эйә менән хәбәр бер генә һүҙҙән дә, һүҙҙәр теҙмәһенән дә килә ала.

*Ағиҙел Ирәмәлдән башлана.*

*Ағиҙел йылғаһы Ирәмәлдән баш ала.*

**49-сы күнегеү.** Төшөп ҡалған хәрефтәрҙе алфавитҡа ярашлы ҡуйып сығығыҙ.

Ҡ, ... Ю.

## ХӘТЕР ҺАНДЫҒЫНА...

Икмәкте бер ҡап, ҡатыҡты биш ҡап.

* * *

Икмәкте ҡатыҡҡа манған ас булмай.



## Рамазан ӨМӨТБАЕВ

## (1924 — 1997)

Рамазан Ғимран улы Өмөтбаев 1924 йылдың 7 апрелендә Башҡортостандың Әбйәлил районы Әлмөхәмәт ауылында тыуа.

1984 йылда «Ағиҙел» журналында «Сиҙәм яҙы» тигән тәүге документаль повесы баҫылып сыға. Бынан тыш ошо йылдарҙа егермегә яҡын хикәйә, новеллалар яҙа. Улар төрлө газета-журналдарҙа донъя күреп, бер өлөшө генә «Һылыубикә әбей» тигән китапта нәшер ителә. Уның шулай уҡ «Ысыҡтан эйелә ҡылған», рус телендә «Баймаҡ баҡыр иретеү заводы тарих киҫелештәрендә» исемле китаптары, башҡорт һәм рус телдәрендә «Генерал Күсимов» исемле документаль әҫәре билдәле.

## ӘМИР БАҪЫУЫ

### I

Был бик күптәнге ваҡиға инде... Уның еп осо ҡаты һуғыш осорона барып ялғана.

...Ҡәһәрле һуғыштың аяуһыҙ ялҡыны Ағиҙел йылғаһының ҡултығына һыйынып ҡына ятҡан Һалабаш ауылында ялмап үтте. Кисә генә, колхоз баҫыуҙарын гөрләтеп, комбайнда иген урған ирҙәрҙе, ҡеүәтле тракторҙар менән ер аҡтарған егеттәрҙе һуғыш упҡыны һөйрәп алды.

Колхоз идараһының бүлмәһендә, һыңар ҡулы менән сикәһен ҡыҫып, «Ҡыҙыл туғай» колхозына кисә генә райком тәғәйенләп киткән яңы председатель Туғанбаев ултыра. Уның эскә һурыҡҡан яңаҡтарын ҡара мыйыҡ төктәре баҫа башлаған. Туҙғыған сәсен ул ара-тирә уң ҡулы менән өҫкә һыйпай, ләкин, салғы аҫтында боҫоп ҡалған үлән шикелле, уның шырт сәсе тырпайып яңынан өҫкә ҡалҡып сыға. Гимнастёркаһының һул яҡ еңе киң ҡайышына ҡыҫтырып быуылған. Сусайып торған осло яурын башы, ул һөйләшкәндә, раҫлап торғандай, берсә ҡалҡып, берсә аҫҡа төшөп хәрәкәтләнә.

Уның алдында ҡултыҡ таяғына таянып, кисә генә дауахананан ҡайтып төшкән 12—13 йәштәрҙәге түңәрәк бите ҡара янған мөләйем ҡарашлы теремек кенә бер малай баҫып тора. Уны был заманда «малай» тип атауы ла ҡыйын, сөнки улар колхоздың кендеге, ауыл яҙмышы уларға терәлеп ҡалған. Колхоз йөгөн, уртаға егелеп, ошо малайҙар һөйрәй хәҙер. Быны аңлап өлгөргән яңы председатель Туғанбаев ағалары улар менән итәғәтле, ихлас булырға тырыша.

— Йә, Әмир Фәйзрахманович, имен-һау ҡайттыңмы? Таяҡты ҡасан ташлап, йүгереп китергә самалайһың? — тине колхоз председателе, аҫтан өҫкә күҙ ҡарашын һирпеп. — Мә ултырғыс, ултырып һөйләшәйек. Атлы ҡаҙаҡтар шикелле тормайыҡ әле, — тип өҫтәне.

Әмир, таяғын ҡаҡ иҙәнгә таҡылдатып, уға этелгән бүкәнгә килеп ултырҙы. Яланғас бүлмә эсе тын ҡалды.

Тик председатель башы осонда ҡыҫығыраҡ күҙҙәренән мәкерле ҡараш ташлап, колхоз эшен даими күҙәтеп торған Сталин ғына, быларҙан яуап көткәндәй, йылмайып ҡуйҙы һымаҡ тойолдо.

* * *

— Бына нәмә, Әмир ҡусты, — тине председатель етдиләнеп. — Хәҙер больницаларға йөрөр ваҡыт түгел, һөйәген тоташтырһалар, уға ит үҫер. Бына һөйәге булмаһа ғына, ҡыйыныраҡ, — тип ул үҙенең буш ҡуллы сурайып торған яурынын һелкеп ҡуйҙы. — Иртәгәнән атайың кырандаһын ек тә колхозда бригадирлыҡ эшенә тотон. Аяғың шул бригада кырандаһында йөрөп йүнәлер әле.

«Тиҙ генә ризалыҡ белдерһәм, яңы түрә алдында әҙәпһеҙ булып күренермен», — тип Әмир баш тартырға сәбәп эҙләне.

— Грамыт бик һай бит әле, ағай, атай киткәс, мәктәпте ташларға тура килде, — тине.

— Бына һуғыш бөткәс, икәүләп белем алырға тотонорбоҙ, — тип мәрәкәләне председатель.

Әмирҙең атаһы Фәйзрахман ағай ҙа, фронтҡа китерҙән алда, оҙаҡ йылдар колхоз бригадиры булып эшләгәйне.

Шулай итеп, ун өс йәшкә сыҡҡан Әмир, ҡултыҡ таяғын да ташламайынса, колхоз бригадиры булып китте.

Үрге остан иренең йөнтәҫ ҡолаһын егеп ҡайтып килгән улын күреп, әсә шатлығының сиге булманы, ул, ҡаҡса бите буйлап тәгәрәгән әсе йәштәрен ҡул һырттары менән

һөртә-һөртә, беренсе тапҡыр яңы бригадирға ҡапҡа асты. Ашъяулыҡ йәйеп, улына ҡыҫыр ғына сәй яһап эсерҙе. Улының тамаҡ төбө менәнерәк, атаһына оҡшатып ҡай-ҡайыңҡырап, эшлекле хәбәр һөйләп ултырыуы әсә күңеленә хуш килде, эске шатлығынан уның йөрәге күкрәгенә һыймай туланы. Нурлы йөҙөнә сыҡҡан ҡыуаныс һыҙаттарын улына һиҙҙермәҫкә тырышып, әсә кеше:

— Улым, атайың кешегә алъюҫыҡҡа ҡағылып-һуғылып барманы. Эш кешеһен бер ҡасан да әбижәнйәгә бирмәне. Былай ҙа күңеле китек кешеләрҙе йәберләмә, бинахаҡҡа кеше рәнйетеүҙең гонаһы бик ҡаты, яҡшы һүҙ — йән аҙығы, насар һүҙ — йән ҡаҙығы, тигән боронғолар, — тип теҙҙе.

— Ул мәсьәлә, әсәй, уйланылған ул... — тип ебәрҙе Әмир эшлекле генә. Нимәһе «уйланылған»дыр? Уныһын әсә кеше, әлбиттә, аңлап еткерә алманы.

Әмир атаһының бригадаһын ҡабул итеп алған саҡ ҡыҙыу бесән әҙерләү ваҡыты ине. Косилкаға ултырырлыҡ ирҙәр ҡалмағас, ул бөтә бригадаһына тиерлек ҡул салғыһы тотторҙо. Эшкә тотоноп китерҙән алда, атының теҙгенен талға бәйләп ләктерҙе лә, һылтыҡлай-һылтыҡлай, унан күрһәтмә көтөп торған бер төркөм ҡатын-ҡыҙҙар, бала-саға эргәһенә килде. Ҡултыҡ таяғының ергә батҡан осон тартып сығарҙы ла, ҡатҡан суҡраҡҡа терәп, уның тотҡаһына үҙенең кепкаһын элде. Таяғына уңайыраҡ таянып, һүҙ башланы.

**— Бына, апайҙар, еңгәйҙәр, бесән мәле лә етте. Ошо Ағиҙел ҡултығындағы тирмән болонлоғон йыл да косилка менән саба торғайныҡ, ә быйыл ундай мөмкинлектән мәхрүм булып торабыҙ. — Ошо урында ҡайһы бер нескәрәк күңелле ҡатындар танауҙарын мыш-мыш тартып алды. — Шулай булғас, беҙгә был бесәнлекте ҡул менән сабырға тура киләсәк, һәр кешегә сабыу заданиеһы утыҙ сутый. Әгәр ҙә кем дә кем үҙ заданиеһын арттырып үтәһә, уға, колхоз биргән ярты ҡаҙаҡ икмәктән тыш, берәр стакан арыш оно бүлеп сығарам. Идара менән ул хаҡта һөйләшелгән, — тип ашараҡ һуҡтырҙы яңы бригадир. — Ә бына, Сәлимйән олатай, — тип ул алғараҡ сығып шыма һаҡалын кәкре бармаҡтары менән тарап, ниҙер уйланып торған ҡартҡа мөрәжәғәт итте, — арбама һалып түшке, яныуыс алып килгәнмен, һинең бурыс, олатай, салғы тапап, ваҡытында салғы яныып тороу булыр, — тине. — Колхоздың бесән әҙерләү буйынса эш планында быға бер ярым труддин ҡаралған, олатай, — тип өҫтәне яңы бригадир.**

— Ә унығы, улым, ҡасмаҫ әле, бына йәй айында колхозға ғына түгел, үҙебеҙгә лә етерлек бесән эшләп ҡалырға кәрәк. Ҡапылда үлергә йыйынмайбыҙ ҙа баһа, — тине ҡарт. — Йә, балалар, хәйерле сәғәттә! — Ҡарт беренсе бакуйға юл башланы.

Бөтә кеше араһынан, имсәк балаларын күтәреп, бакуйға ыңғайлаған бер нисә ауыл ҡатынын күреп, бригадир уйға ҡалды. «Был нисек була инде? Миһырбаныу еңгәйҙең был бишенсе балаһы, ул бөгөн сабыйын күтәреп, колхоз эшенә килгән, ә ҡалған береһенән-береһе вағыраҡ балалары, уның ярты ҡаҙаҡ икмәген көтөп, өйҙә тилмереп ултыра. Ә уның менән йәнәш атлаған Мәстүрә — әле тормошҡа сыҡмаған, дәрте һәм көс-ғәйрәте артылып торған йәп-йәш ҡыҙ. Әлбиттә, ул Миһырбаныу еңгәгә ҡарағанда нығыраҡ та, яҡшыраҡ та эшләйәсәк, сөнки балалы ҡатын бер бакуй сыҡҡас та, өйҙә ҡарауһыҙ ҡалған сабыйҙарының яҙмышы уға күңел тыныслығы бирмәйәсәк, кәүҙәһе болонда, ә йәне өйҙә буласаҡ. Шулай булғас, колхоз калдауайынан алған ике бот арыш онон стаканлап ғаиләһе ишле ҡатындарға таратырға кәрәк, буйҙаҡ ҡыҙҙар нисек тә түҙер», — тигән фекергә килә колхоз бригадиры. «Ә уларҙың эшен нисек күрһәтергә?» — тигән уй тағы борсой. Кемдер уның ҡолағына: «Арттырып яҙырға кәрәк, бригадир иптәш», — тип бышылдағандай булды.

Ун өс йәшлек бригадир, тартып-һуҙып стаканлап он бүлеп, «Ҡыҙыл туғай» колхозының күп балалы ғаиләләрен аслыҡ тырнағынан ҡотҡарып алып ҡала. «Тик тиҙерәк арыш бешеү көнөн күрергә насип булһа ярар ине», — тип ҡайғыра ул. «Арышҡа төшөп китһәк, унда ҡурмас ҡурып, арыш талҡанын тартып, аяҡҡа баҫып китер инек», — тип өмөтлө хыял менән йәшәй ул.

1. Әҫәрҙә ниндәй осор һүрәтләнә?
2. Әмирҙең бригадир булыуы әсәлә ниндәй тойғолар уята? Ул улына ниндәй өгөт-нәсихәттәр бирә?
3. Әмирҙе бригадир, кеше булараҡ баһалағыҙ.
4. Әмирҙең ололарса дөрөҫ, етди фекер йөрөтә белеүен текстан өҙөктәр табып иҫбатлағыҙ.

**50-се күнегеү.** Алдағы текстағы ҡалын хәрефтәр менән бирелгән абзацта урын алған туғанлыҡ-кәрҙәшлек һүҙҙәрен табығыҙ. Уларҙы рус теленә тәржемә итегеҙ. Тағы ниндәй туғанлыҡ-ҡәрҙәшлек һүҙҙәрен беләһегеҙ? Аҫтына һыҙылған һүҙҙәрҙең синонимдарын табығыҙ, уларҙы ҡулланып, шул уҡ һөйләмдәрҙе уҡығыҙ.

**51-се күнегеү.** Дауам итегеҙ.

1. Үҙ аллы һүҙ төркөмдәре — исем, ...
2. Ярҙамсы һүҙ төркөмдәре — теркәүес, ...

⇆ Һүҙ төркөмдәренең исемдәрен рус теленә тәржемә итегеҙ.

**52-се күнегеү.** Түбәндәге һүҙҙәрҙең, һүҙбәйләнештәрҙең мәғәнәләрен аңлатығыҙ.

Салғы тапау, салғы яныу, салғы һаплау, грамыт һай бит, әбижәнийәгә бирмәне, бер ярым труддин, калдауайҙан алған ике бот он.

## II

Арыш урағының башланыуы бригадир Әмир башына шатлыҡтан күберәк ҡайғы-хәсрәт килтерә. Башаҡ ҡырҡып алып ҡайтыусылар өсөн 1932 йылдың 7 августында уҡ 7 йылға тиклем иркенән мәхрүм итеү язаһы уның йөрәгенә оло ҡурҡыу һала. Ураҡҡа төшкән тәүге көн үк уның ҡурҡыуы дөрөҫ икәнен күрһәтә. Кис эш бөтөрөп ҡайтырға сыҡҡан үҙ колхозсыларының ҡулында ул ҡырҡылған, ыуылған башаҡтар тултырылған төрлө төҫтә, төрлө ҙурлыҡта моҡсайҙар күрә. Уның йөрәге жыу итеп китә, сөнки быны аҙағы яҡшылыҡ менән бөтмәйәсәген, йәш булһа ла, аныҡ күҙ алдына килтерә.

Хәбәрҙең ҡайғылыһы ла, ҡыуаныслыһы ла халыҡ күңелендә оҙаҡ ятамы ни? «Бына кисә генә күрше «Ҡыҙыл ялан» колхозында арыш урлауҙан ҡайтып килгән ҡатын-ҡыҙҙарға тентеү ойоштորғандар. Балалы ике ҡатынды суд язаһына тарттырып, НКВД-ға алып киткәндәр икән», — тигән хәбәр Һалабаш ауылына ла килеп ишетелә. Ләкин бригадир нисек кенә һаҡ булырға киҫәтһә лә, ил өҫтөнә килгән аслыҡ халыҡты яза алыуҙан да ҡурҡытмай, ул законға ҡарағанда көслөрәк булып сыға. Ә ул арала: «Кисә НКВД башаҡ ҡырҡҡан өсөн фәләнде алып киткән, шул ауылда халыҡҡа тентеү үткәргәндәр», — тигән шомло хәбәр ҡуйырғандан-ҡуйыра. Был хәбәрҙәр бригадирҙың башын ҡайғылы уйға һала. «Нишләргә? Һуғылған арышты хеҙмәт көнөнә таратып биреп булмай, бөртөгөнә тиклем дәүләткә тапшырырға», тигән ҡәтғи күрһәтмә бар. Көнөнә һәр кешегә бирелгән бер

ҡаҙаҡ икмәк менән көн итеү мөмкин түгел. Бригадир баҫыу башында ултырыусыларҙы бер көн, эш бөткәс, йыя ла:

— Апайҙар, еңгәйҙәр, мин һеҙҙең көн дә башаҡ урлап алып ҡайтҡанығыҙҙы күреп йөрөйөм, ләкин башҡаса бер ниндәй ҙә сара юҡлығын да беләм. Ғаиләләрегеҙ асыға — уныһы ла миңә мәғлүм. Нишләп ҡарайбыҙ? Берәр аҡыллы кәңәшегеҙҙе бирһәгеҙсе? — тип үтенә бригадир.

Ләкин моҡсайҙарын ҡулына тотоп, яурындарына ураҡтарын һалып торған бригада халҡы, бер нисек тә кәңәш бирә алмай, тынып ҡала. Бөтәһенең талған күҙ ҡараштары барлыҡ затлы ниғмәттәрҙән ҡиммәтерәк башаҡлы моҡсайҙарға төбәлә. «Бөгөн бригадир беҙҙең башаҡтарҙы тартып алырға итә, күрәһең», — тигән шомло уй һәр кемдең йөрәген өйкәй. Бер ниндәй ҙә һүҙ ала алмай аптырауға ҡалған бригадир яңынан телгә килә:

— Апайҙар, еңгәйҙәр, нишләп шул ҡәҙәре батыр ҡыланаһығыҙ, исмаһам, закондан ҡурҡмаһағыҙ, балаларығыҙҙың тере йәтим ҡалыуын уйлағыҙ. Ҡылған енәйәтегеҙ өсөн төрмә ишеге алдында тороуығыҙ һеҙҙе әҙ генә лә борсомаймы ни? Ул тиклем кемгә ышанаһығыҙ? — тип бригадир, алдан үҙе илап ебәреүҙән ҡурҡҡандай, ҡарашын ергә төбәй.

Сафта торған һалдаттар шикелле, уның алдында баҫҡан күмәк ҡатын-ҡыҙ бер ауыҙҙан:

— Әмир ҡәйнеш, бар ышанысыбыҙ тик һин генә. Бала булһаң да, һиндә атайың холҡо. Ул да бер ваҡытта ла кешене ғәйепһеҙгә НКВД ҡулына тотоп бирмәне.

— Әйе, Әмир ҡустым, бар ышанысыбыҙ һиндә генә. Астан үлтерһәң дә, алып ҡалһаң да, тик һин генә — һиңә баш һалабыҙ! — тип шаулашты халыҡ.

Бригада кешеләренең ышанысынан Әмирҙең күңеле тулды, башын ситкә бороп, тамағына тығылған төйөндө йоторға тырышты, ләкин йөрәкте телгеләгән ул төйөн ары ла, бире лә китмәне. Көс-хәл менән үҙен ҡулға алған бригадир күптән уйлап йөрөгән фекерен үҙенә төбәлеп торған кешеләргә асыҡтан-асыҡ әйтергә мәжбүр булды:

— Ағай-әне, улай булһа, бына минең һүҙҙе тыңлағыҙ: хәҙер мин һеҙҙең ҡулығыҙға химик ҡәләм тотторам. Шуның менән моҡсайҙарығыҙ тышына исемегеҙҙе яҙығыҙ ҙа анау торған минең арбаға алып барып һалығыҙ. Тик аҙаҡтан үпкәләштән булмаһын: мин уны өйгә алып ҡайтҡас, һәр кемдең ғаилә һанына ҡарап, яңынан бүләсәкмен. Әгәр инде ошоға

риза булмаһағыҙ, теләгәнегеҙҙе эшләгеҙ, үҙегеҙ тотолғанса, һәр кемегеҙ айырым ташығыҙ, — ти ҙә бригадир яуап көтә. — Мин сүтәки бригадир кеше, мине идара НКВД-нан тентетергә бирмәҫ, — тип өҫтәп ҡуя Әмир.

— Әмир ҡәйнеш, Әмир ҡусты, беҙ риза. Белгәнеңде эшлә, — тип риза була халыҡ.

Кырандасына һалынған бер өйөм башаҡлы моҡсайҙарҙы Әмир бесән менән баҫтыра ла өҫтөнә ултырып, ауылға ҡайтып төшә. Шулай ураҡсылар йыйған башаҡты ул, үҙ өйөндә һуҡыр шәм яҡтыһында көн дә яңынан бүлеп, кешеләргә таратып бирә. Бер аҙ тамағы туйған халыҡтың эшкә дәрте арта, болонлоҡтан өҫкә күтәрелгән Оҙонһырт битендәге арыш баҫыуының майҙаны күҙгә күренеп кәмей, эш ырап ҡала.

Колхоздың яңы председателе Туғанбаев йәш бригадирҙы маҡтап бөтөрә алмай. Идарала йыйылған һайын, уның исемен әйтмәй ҡалмай. Тик уны бер генә нәмә аптырата: бөтә тирәяҡта ураҡ урыусыларға тентеү төшөрөп, НКВД кешеләре көн дә бер-ике кешене алып китеп тора. Ә уның колхозында хәҙергә именлек, эш тә ырамлы ғына алға бара. Был ваҡиға уны ғына түгел, район түрәләрен дә ғәжәпкә ҡалдыра. Һиҙҙермәҫтән колхозға баҫып инеп, Әмир бригадаһы кешеләренә, эш бөткәс, тентеү ойоштороп та ҡарайҙар, ләкин бушҡа ғына... Уларҙың береһендә лә башаҡ таба алмайҙар.

Улының хилаф юлға баҫыуын көн дә күреп йөрөгән әсәһенең йөрәге өҙгөләнә, ул ҡат-ҡат улын был эштән баш тарттырырға ла юл эҙләй, уның кистәрен башаҡ бүлеп ултырыуын күреү әсә кешегә ғазапҡа әүерелә. «Улым, буш менән булма, йәш кенә көйөңдө үҙеңде һәләк итеп ҡуйырҙар. Ошо уҡ ауыл кешеләренең һине тотоп биреүе мөмкин», — тип илайилай киҫәтә.

Ә Әмир әсәһе һүҙенә ҡул ғына һелтәй. «Мин уны үҙемә алмайым да баһа. Кеше өсөн эшләйем. Ас халыҡтан мин нисек ураҡ урҙырайым? Ҡамыт кейҙерерҙән алда, ана атты ла ашатып-эсереп алалар. Был бит кеше, әсәй!» — тип Әмир һаман үҙенекен эшләй. «Ярай, улым бөтөнләй башһыҙ түгел, улайбылай килеп сыҡһа, халыҡ та, идара ла берҙәй тороп, яҡлап алып ҡалырҙар әле», — тип әсә күңеле лә тынысланғандай була, улының эшен яҡшыға юрай.

Ураҡты яртылағас, «Ҡыҙыл туғай» колхозының Оҙонһырт баҫыуында көпә-көндөҙ болотһоҙ зәңгәр күктә йәшен йәшнәне. Колхоздағы ниндәйҙер шымсының ошағы буйынса, баҫыу

ҡырынан бесән менән ябылған моҡсайҙар өҫтөнә ултырып ҡайтып килеүсе бригадирҙы НКВД-ның ике кешеһе юлда ҡаршы ала. Колхоз бригадирын арбанан һөйрәп төшөрәләр ҙә тентеү яһайҙар. Унын таянып торған ҡултыҡ таяғын һыпыра тартып алып, береһе ҡап уртаға һындыра ла юл ситендәге сауҡалыҡҡа ырғыта. Юлда талаш-тартыш барғанын күргән ураҡсылар, эштәрен ташлап, бригадир эргәһенә йүгерә. Һыңар аяғы менән сатанлап, улар юлына Әмир ҡаршы сыға.

— Апайҙар, еңгәйҙәр, ураҡтарығыҙҙы ташлағыҙ. НКВД кешеләренә тейә күрмәгеҙ, барыбыҙ ҙа һәләк буласаҡбыҙ. Самосуд ойоштормағыҙ, — тип ҡысҡыра, үтенә, ялбара.

— Ул ғәйепле түгел!

— Уның тырнаҡ ҡараһындай ҙа ғәйебе юҡ!

— Беҙ минауат, беҙҙең барыбыҙҙы ла ултыртығыҙ! — тип халыҡ ҡысҡырыша-ҡысҡырыша, НКВД кешеләрен этеп-төртөп улар арбаһында ятҡан үҙ моҡсайҙарын тартып алырға тотона. Бал ҡорто кеүек ҡуҙғыған кеше араһына Әмир инеп китә.

— Зинһар өсөн, моҡсайҙарығыҙҙы улар арбаһына кире һалығыҙ. Ураҡтарығыҙға тотонмағыҙ, ҡан ҡоймайыҡ, апайҙар, барыбыҙ ҙа һәләк булмайыҡ, — тип үҙ кешеләрен өгөтләй. Бер аҙ тыныслана төшкән халыҡ алған моҡсайҙарын арбаға кире тейәй башлай, ураҡтарын ергә ҡаҙап, бер урынға өйөлөшөп, инде нимә булырын көтә башлай. Шул саҡ бригадир Әмир башында йәлпәшеп ятҡан кепкаһын ала ла:

— Хушығыҙ, апайҙар, еңгәйҙәр, минең ауылдаштарым. Мине насар итеп иҫкә алмағыҙ. Бына фашистарҙы тар-мар итеп, беҙҙең атайҙар әйләнеп ҡайтһа, ҡурмас түгел, күпертеп ҡалас ашап ятырбыҙ әле. Әгәр һеҙгә берәр насарлыҡ ҡылһам, түбәнселек менән ғәфү үтенәм, — ти ҙә, бер аяғы һынған ҡош шикелле, ырғый-ырғый НКВД арбаһына үҙе барып ултыра.

— Хуш, балам, мир өсөн башың һәләк булды, — тип уның менән беренсе булып салғы яныусы Сәлимйән бабай барып хушлаша.

Күҙ йәштәрен тыя алмай, арба өҫтөндә бойоғоп, әллә ниндәй күңелһеҙ уйҙарға дусар булып ултырған бригадирҙары менән бөтә халыҡ һуңғы тапҡыр күрешеп ҡалырға, устарындағы йөрәк йылыһын уға бүләк итергә тырыша.

— Барыһы өсөн дә рәхмәт һиңә, беҙҙең бригадирыбыҙ.

— Һалабашҡа имен-аман кире әйләнеп ҡайтырға насип булһын! — тип хушлаша уның менән ауыл халҡы. Артҡа

әйләнеп боролоп ултырған йәш бригадир ҙа, күҙенә тығылған йәштәрен йотоп, ҡалтыранған тауышы менән:

— Әсәйемә минән сәләм тапшырығыҙ, минең ауылдаштарым алдында бер ниндәй ҙә ғәйебем юҡ, тип әйтә күрегеҙ, — тип үтенә. Уның һуңғы һүҙе шул була.

Әмир, илай-һыҡтай уны оҙатып ҡалған ауылдаштарына, күҙҙән юғалғансы ҡулын болғап, ҡараштары талғансы ҡарап барҙы. Яңы ғына таҙа дегет менән майланған, сылтлап барған НКВД арбаһының тәгәрмәстәре уны тормош билдәһеҙлегенә алып китте.

Яңғыҙ улы ҡулға алынып киткәндән һуң ярты йыл үтеүгә, уның әсәһе Вәрәкә апайға иренең дә ҡара ҡағыҙы килде.

Йылдар үтте, ләкин һыу төбөнә батҡандай ғәйеп булған колхоз бригадирынан бер ниндәй ҙә хәбәр-хәтер булманы, ул аты-юлы менән юғалды.

**Хәҙер улар ғаиләһенән бер кем дә юҡ инде. Бер нисә йыл үтеүгә, юғалған ике ир кеше өсөн көнө-төнө илап һары ҡайғыға юлыҡҡан Вәрәкә ике күҙенән дә мәхрүм булып ҡалды. Һағыш хәсрәте уның аҡылын да юйҙы, ул эҙһеҙ юғалған улы менән көнө-төнө һаташты. Ағиҙелдең ташҡын миҙгелендә: «Улымды сығып ҡаршы алам», — тип яр буйына китеп барған Вәрәкәне лә Ағиҙел упҡыны йотто.**

**Үҙ бригадирҙары хөрмәтенә Һалабаш ауылы халҡы Оҙонһырт ҡырын «Әмир баҫыуы» тип атаны. Бригадирҙың тере ҡалған ауылдаштары, йыл һайын арыш урағы башланыу менән, беренсе уңыштың игененән күпертеп ҡалас бешереп, ғәйепһеҙгә башын һалған ун өс йәшлек Әмирҙе иҫкә төшөрә. Был көндә тәбиғәт тә, уның яҡты йәш сырайын хәтергә алғандай, үҙенең ләйсән ямғырын һибеп үтә, әйтерһең дә, ул да йәш Әмирҙе һаман һағынып көтә. Баҫыуҙа осрашыуҙан өмөтөн өҙмәй... Ғәйепһеҙ ҡорбандар өсөн тәбиғәт тә һыҡтай...**

1. НКВД һәм уның эшмәкәрлеге тураһында нимәләр беләһегеҙ?
2. Баҫыуҙан башаҡ алып ҡайтыусылар өсөн ниндәй ҡарар сығарыла? Ни өсөн?
3. Әмирҙең халыҡты аслыҡтан ҡотҡарыу өсөн ҡабул иткән ҡарары дөрөҫмө?
4. Бригадирҙың, НКВД кешеләре алып китер алдынан, халыҡҡа әйткән һүҙҙәрен табып уҡығыҙ. Баһалағыҙ.
5. Ауыл халҡы Әмиргә рәхмәтен нисек белдерә? Әҫәрҙе мәғәнәүи өлөштәргә бүлеп, план төҙөгөҙ.

6. *Ҡыҫыр сәй, аша һуҡтырыу, ҡурмас, талҡан, һуҡыр шәм, хилаф юл, һыу төбөнә батыу, аты-юлы менән юғалыу, һары ҡайғыға юлығыу* тигән һүҙҙәрҙе нисек аңлайһығыҙ?
7. *НКВД арбаһының тәгәрмәстәре уны тормош билдәһеҙлегенә алып китте* тигән һөйләмдең мәғәнәһен аңлатығыҙ.
8. Әҫәрҙәге һәр геройға характеристика биреп ҡарағыҙ. Фекер алышығыҙ.
9. Әмирҙе батыр йөрәкле герой тип әйтеп буламы? «Әмиргә асыҡ хат» тигән темаға инша яҙығыҙ.

**53-сө күнегеү.** II бүлектәге ҡалын хәрефтәр менән бирелгән абзацтарҙа эйә менән хәбәрҙе күрһәтегеҙ. Уларҙың ниндәй һүҙ төркөмөнән икәнен билдәләгеҙ.

**54-се күнегеү.** «Әмир баҫыуы» тигән темаға ҡыҫҡа ғына инша яҙығыҙ, йәғни әҫәрҙең аннотацияһын төҙөгөҙ.

Башҡорт телендә һөйләмдең хәбәре, ғәҙәттә, һөйләмдең аҙағында килә. Рус телендә хәбәрҙең һөйләмдә нығынған ғына урыны юҡ. Сағыштырығыҙ:

| *Башҡорт телендә* | *Рус телендә* |
|---|---|
| *Малай өҫтәл эргәһенә* ***килде.*** | *Мальчик* ***подошёл*** *к столу.* |
| | *К столу* ***подошёл*** *мальчик.* |
| | *Мальчик к столу* ***подошёл.*** |
| | ***Подошёл*** *к столу мальчик.* |

Шулай уҡ, шиғри әҫәрҙәрҙә, ҡайһы бер хис-тойғолар көслө булған һөйләмдәрҙә хәбәр һөйләм аҙағында ғына булмаҫҡа ла мөмкин. Мәҫәлән, *Яңғырап ҡуя ауылда һөйләшкән, көлгән тауыш.* (Х. Назар) *Һе,* ***бушатмай*** *ни,* ***бушатабыҙ*** *хәҙер, көтөп тор.* ***Кит*** *юлдан! Югиһә,* ***һөйрәп төшөрәм*** *үҙеңде.* (Р. Ханнанов)

**55-се күнегеү.** Түбәндәге миҫалдарҙа хәбәрҙе дөрөҫ урынға ҡуйып, һөйләмдәрҙе күсереп яҙығыҙ.

1. Улар белем ала бөгөн Рәсәйҙең хәрби вуздарында. 2. Үкенмәйем хәрби училищеға уҡырға инеүемә һис кенә лә. 3. Бында килгәйне уҡырға инергә 1200 абитуриент. 4. Физик әҙерлеккә тапшырҙыҡ имтихан. 5. Ойошторалар училищела төрлө кисәләр.

**56-сы күнегеү.** Һөйләшеүҙе дауам итегеҙ.

— Әйтегеҙ әле, ҡурсаҡ театры (мәҙәниәт йорто, клуб, кинотеатр һ. б.) ошо яҡта, тигәйнеләр. Өйрәтеп ебәрмәҫһегеҙме?

— ...

## ҠУРМАС

Ҡурмас — башҡорт аш-һыуының традицион аҙығы. Был аҙыҡ бүрәт, ҡаҙаҡ, монгол, сыуаш, татар, үзбәк һ. б. халыҡтарҙың аш-һыуында осрай.

Башҡорттар ҡурмасты бойҙайҙан, арпанан, һирәкләп арыштан, борсаҡтан һ. б. яһай. Бөтөн орлоҡтарҙы майланған ҡаҙанда ҡуралар йәки ҡыҙҙыралар. Ҡоро килеш ашайҙар, һаҡлыҡҡа әҙерләйҙәр. Иҙелгән ҡурмасты бутҡа, өйрә, талҡан эшләү өсөн файҙаланалар, бал йәки май менән бутап сәй янына ҡуялар.

Ғәҙәттә, ҡурмасты ҡарғатуй, төрлө ер эшкәртеүгә бәйле йолалар һәм мосолман байрамдары үткәргәндә, ризыҡ әҙерләү өсөн ҡулланалар.

## Ⓣ Художестволы әҫәрҙең композицияһы

Әҫәрҙең һәр өлөшөнөң, һәр эпизодының урынлашыуы, уларҙың үҙ-ара бәйләнеше әҫәрҙе бер бөтөн итеп ҡабул итергә һәм уның идеяһын уҡыусыға еткерергә ярҙам итә. Әҫәрҙең айырым өлөштәренең шул рәүешле үҙ-ара бәйләнештә бер бөтөн итеп ойошторолоуы уның **композицияһы** тип атала.

Композиция әҫәрҙең йөкмәткеһен, ундағы образдарҙың характерын асыу сараһы булып тора. Һәр әҫәрҙең композицияһы уның идея-тематик йөкмәткеһе менән билдәләнә һәм, һәр яҙыусы ижадының индивидуаль үҙенсәлегенән сығып, төрлө-төрлө була.

Эпик, лирик, драматик әҫәрҙәрҙең композицияһы араһында уларҙың жанр үҙенсәлектәре менән бәйле айырмалыҡтарҙы күрергә мөмкин. Ҙур әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһен барыһынан да элек ваҡиғалар теҙеме булған сюжет тәшкил итә. Беҙ түбәнге кластарҙа сюжет һәм уның өлөштәре тураһында төшөнсә алғайныҡ. Сюжеттың нигеҙендә әҫәрҙәге үҙ-ара бәйләнешле һәм эҙмә-эҙлекле үҫә барған тормош ваҡиғалары ята. Сюжет экспозициянан, төйөнләнеүҙән,

ваҡиғалар үҫешенән, кульминациянан һәм сиселештән тора.

Әҫәрҙең композицияһы үҙ эсенә сюжетты ала. Ләкин художестволы әҙәбиәттә бөтә күренештәр ҙә сюжетҡа һыйып бөтә алмай. Әҫәрҙә тағы сюжет менән туранан-тура бәйләнешле булмаған күренештәрҙе лә осратырға мөмкин. Былдай сюжеттан тыш элементтарға портрет, пейзаж, хикәйәләү, тасуирлауҙар, лирик сигенеүҙәр инә. Шул рәүешле композиция әҫәрҙең бөтә өлөштәрен дә берләштерә һәм сюжетҡа ҡарағанда киңерәк йөкмәткеле була. *(Ғ. Хөсәйеновтан)*

## ХӘТЕР ҺАНДЫҒЫНА...

Күҙ өсөн яҙ яҡшы, ауыҙ өсөн көҙ яҡшы.

* * *

Эшең булһа йөҙ, туҡлыҡлы килер көҙ.

* * *

Ҡара көҙҙөң ҡары ятмаҫ.

* * *

Эшләүең кеше өсөн, өйрәнеүең үҙең өсөн.

* * *

Иген төбө — ҡыуаныс.

* * *

Игендең яйын иккән белер, арбаның яйын еккән белер.

* * *

Игенсенең ярты ғүмере яланда уҙыр.

# УҠЫТЫУСЫ — НИНДӘЙ ГҮЗӘЛ ИСЕМ!

*Рәми ҒАРИПОВ*

## УҠЫТЫУСЫМА

*(Мәрйәм апайға)*

Ниндәй бәхет —
Фекерең уртаҡ булған,
Аңлай торған
Кеше табыуы.
Шатлығымдан
Бик-бик түбән булыр
Бейеклеге Урал тауының.

Шиғырһыҙ ҙа
Һеҙ бит аңлайһығыҙ
Йөрәгемдең
Иң саф хистәрен.
Онотмамын
Һеҙҙе, Мәрйәм апай,
Килгәндә лә
Ғүмер кистәрем.

Һәр һүҙегеҙ
Миңә алтын булды, —
Һис бер килмәй
Сереү алтынға.
Улар яныр
Яҡты йондоҙ булып,
Юл күрһәтеп
Алға барырға.

Уҡытыусы —
Ниндәй гүзәл исем!
Кеше итеп
Һине әҙерләй.
Тормоштоң ул
Көрәшсеһе итә,
Кескенәнән
Һөйә, ҡәҙерләй.

Күҙҙәр ҡамашырлыҡ
Яҡты була,
Тиҙ булһа ла,
Йәшен йәшнәүе.
Ниндәй гүзәл,
Бер көн
Булғанда ла
Кеше булып
Ерҙә йәшәүең!

1. Шиғырҙа лирик геройҙың кәйефен билдәләгеҙ. Был кәйеф, уҡытыусыға булған рәхмәт һүҙҙәре ниндәй һүрәтләү саралары аша бирелә?
2. Рәми Ғариповтың уҡытыусыһы Мәрйәм Ғилмитдин ҡыҙы Ғималова тураһындағы иҫтәлектәрен Интернет селтәренән табып уҡығыҙ һәм фекерегеҙҙе әйтегеҙ.

*Раuил ШАММАС*

## КҮПЕРҺЕҘ ЙЫЛҒАЛАР...

### I

Баҫыу юлы текә тау ҡашлағына тоташты. Тигеҙ генә келтерҙәгән арба тәгәрмәстәре инде, таҡыр-тоҡор, таҡыр-тоҡор килеп, алда ятҡан яҫы таштар менән һөйләшә, бүтән көйҙө көйләй башланы. Шамил, аттарҙы юрттыра-атлата бер аҙ барғас, әллә бүтән яҡҡа инеп киттем инде, тип шикләнеп, дилбегәне тартты. Хайуанҡайҙар, уның уйын шунда уҡ аңлағандай, ауыҙлыҡтарын сәйнәп, туҡтап ҡалды. Егет, сәғәткә яҡын инде арба үрәсәһенә башын терәп, бер ни белмәй ғырылдап йоҡлап килгән Ямат Ялаловичты уятып, һорай һалды:

— Ағай, юлды яңылышманыммы икән? Бына тау моронона ла еттек.

Ямат Ялалович шешенә төшкән ҡыҫынҡы күҙҙәрен ыуҙы, ҡалҡына биреп, тирә-йүнде байҡап алды ла ҡул һелкте:

— Дөрөҫ, дөрөҫ бараһың, мырҙам. Әйҙә, ҡыуала, — тине лә, сәсе ҡойолоп, ялтыр аҡланға әйләнеп барған башын яңынан Шамилдың таҡта сумаҙанына һалды.

**Тау текә.** Юл һәр яҡлап төрлө-төрлө яҫы таштар, күк үләндәр менән наҒышланған ошо ғәйәт оло тауҙы уратып быуған күрән билбау һымаҡ ята. Уның түбәнге осо күренмәй ҙә, әллә ҡайҙа упҡынға төшөп юғалғандай тойола. Алыҫ-алыҫтарға һуҙылып, үркәс-үркәс тау теҙмәләрен икегә бүлгән үҙәндән күкшелләнеп болот һымаҡ быу күтәрелә.

Тауҙың әле бер битенә, әле икенсе битенә һуғылып, байтаҡ төшкәс, үҙән төбөнә борғоландырып һалып ҡуйған көмөш таҫма һымаҡ, йылға күренде. **Был — Һаҡмар ине.**

Өҫтән тар ғына булып күренһә лә, килеп етәрәк йылға киңәйҙе, тағы ла матурайҙы. Ашыға-ашыға аҡҡан тау йылғаһының инде тауышы ла ишетелә ине. Уға яр буйы әрәмәлектәрендә ярыша-ярыша һайраған ҡоштар таҡмағы ҡушыла.

**Юл йылғаға килеп төкәлде.** Күпер-фәлән юҡ, ә һыу тәрән генә күренә. Күперһеҙ йылға...

Йәш уҡытыусының тормошонда быға тиклем булған ваҡиғалар ни тиклем ҡатмарлы күренһә лә, һәр ваҡыт кемдеңдер хәстәрлекле ҡулдары уны етәкләп барҙы. Ата-әсәһе, туғандары, уҡытыусылары һәр ваҡыт аҡыллы кәңәшсе, әйҙәүсе ине. Ауыр һуғыш йылдары, класта яҙыу ҡараһы туңырлыҡ һалҡындарҙа ла тырыша-тырыша уҡып йөрөүҙәр, институт аудиториялары — барыһы ла артта инде. Бына ул хәҙер тәүге тапҡыр үҙ аллы хеҙмәт юлына аяҡ баҫа. Кәңәшсеһе — үҙ аҡылы, алға әйҙәүсеһе — ашҡынып типкән йөрәге. Ул уҡытыусы булып эшкә бара. Ниндәй яңы мәшәҡәттәр, ашҡыныуҙар, һөйөнөстәр, көйөнөстәр көтә уны. Шамил әле уларҙың күбеһен башына ла индереп сығара алмай. Алда — күперһеҙ йылға һымаҡ тормош...

Ул аттарҙы туҡтатты ла, тын ғына ҡалып, һыу ағышын тыңланы. Үҙенсә бер көй көйләп, таштарға һуғыла-һуғыла аға тау йылғаһы. Уйҙарҙы әллә ҡайҙарға, алыҫтарға алып китә.

...Шамилда уҡытыусы булыу теләге кесе йәштән тыуҙы. Тәү тапҡыр мәктәпкә барғас, уларҙы бәләкәй генә класс бүлмәһенә ултырттылар. Өҫтөнә сөм ҡара костюм кейгән, ҡуңыр сәстәрен ҡырын һалып тараған бер ағай инде. «Мин, балалар, һеҙҙең уҡытыусығыҙ булам. Исемем — Тәхәүетдин.

Әйҙәгеҙ, дәрес башлайбыҙ», — тине лә өйрәтелгән эттәр тураһында ҡыҙыҡлы китап уҡырға кереште. Был шулай тейеш булғанмылыр, юҡмылыр, әммә уҡытыусы мөлдөрәшеп ҡарап ултырған утыҙлап пар күҙҙе «эт китабы» менән әсир итте лә ҡуйҙы. Һуңынан ул Мәләүездә үҙенең дә өйрәткән эте булыуын, уның шундай тыңлаусанлығын, аҡса биреп ебәрһәң, магазиндан әйбер алып ҡайтыуын һөйләне.

Бына шул көндән башлап Шамил өсөн Тәхәүетдиндең һәр һүҙе генә түгел, уның атлап йөрөшө, ул саҡта модала булған моряктарса киң балаҡлы салбары, хатта костюмында емелдәгән һәр төймә изгегә әүерелде. «Эх, уҡытыусы булһаң ине. Эх, ошо Тәхәүетдин ағай кеүек булһаң ине». Шул хыялдар уның өнөндә лә, төшөндә лә ине. Мәктәптән ҡайтҡас, күршетирәләге үҙенән бәләкәйерәк бөтә балаларҙы йыйып, «дәрес» бирҙе, эттәр тураһында һөйләне. Шамил ул ваҡытта Тәхәүетдин ағаһына ун ете генә йәш булғанын, уның үҙенең дә үҫмерҙәр менән уйнап-көлөп йөрөр сағы икәнлеген иҫенә керетеп тә сығарманы. Беренсе уҡытыусыһының Бөйөк Ватан һуғышында үлеп ҡалыуын да һуңынан ғына ололарҙан ишетте.

Шул «эттәр китабы»нан башланған оло мөхәббәт Шамилды уҡытыусылар институтына әйҙәне. Белемле кеше булып, үҙ ауылына ҡайтып, Тәхәүетдин ағаһы кеүек, балаларға дәрес биреү хаҡында хыялланды ул. Эшкә тәғәйенләүҙәр башланғас та, үҙен тыуған ауылына ҡайтарыуҙарына шикләнмәй ине. Унда әҙәбиәт уҡытыусыһы кәрәк, күптән түгел был хаҡта мәктәп директоры менән һөйләшеп тә килгәйне. Тик бына эш нисек булып китте.

Райүҙәккә килгәс, Шамил тура мәғариф бүлегенә йүнәлде. Мәхмүтов һүҙҙе оҙаҡҡа һуҙманы, шунда уҡ эшкә күсте:

— Беҙ һеҙҙе, Исмәғилев иптәш, Ҡояшлытау ауылына ебәрәбеҙ. Район үҙәгенән алыҫыраҡ алыҫын. Уның ҡарауы, бына тигән урын, Һаҡмар, урман, тау. Кешеләре һәйбәт... — Һәм ул шунда уҡ телефонға йәбеште.

«Әкрен генә тауыш менән һөйләшһә лә, ниндәй тиҙ, етеҙ хәл итә», — тип уйлап ҡуйҙы Шамил. Оҙаҡламай улар колхоз председателе Ямат Ялалович менән юлға сыҡтылар. Оҙайлы юл үткәс, йылғаға килеп етеп, тәбиғәттең иҫ киткес гүзәллеге менән осрашҡас, ул мәғариф бүлегендә Мәхмүтов әйткән һүҙҙәрҙе иҫенә төшөрҙө: «Бына тигән урын, Һаҡмар...»

Ә Һаҡмар, уның күңелен аңлағандай, уйҙарын тыңлағандай, сабыр ғына аға. Алдында — күперһеҙ йылға...

Улар, таштарҙы дөбөрләтә-дөбөрләтә, һыуҙы шаптырлата-шаптырлата, Һаҡмарға кереп киттеләр. **Йылға был тәңгәлдә әллә ни тәрән түгел икән, әммә көслө.** Аттар ағымды бик ҡыйынлыҡ менән еңеп бара, һыу арбаның артын әленән-әле түбәнгә һөйрәп ала.

Йылғаны сыҡҡас, текә генә үр башланды. Урманлы үр. Аттар тирләне. Ямат Ялалович менән Шамил да арба артынан эйәрҙе.

Ана, тау өҫтөнә теҙелеп киткән аҡ өйҙәр күренде. «Сәйер генә, ниңә түбәнгәрәк, үҙәнгәрәк ултырманылар икән, иң түбәгә ҡунаҡлағандар». Уның уйын аңлағандай, Ямат Ялалович әйтеп тә ҡуйҙы:

— Бына, Ҡояшлытау ошо инде, ҡустым. Элек беҙҙең яҡта иген-фәлән сәсмәгәндәр. Гел мал менән көн иткән халыҡ. Тау өҫтө ҡарҙан тиҙ асыла, мал үләнгә туҡ була. Шуға ла, ана бит, ҡалай һыртҡа менеп теҙелгәндәр...

Ауыл уртаһынан үткән юл, Һаҡмарға төшкәндәге һымаҡ уҡ, ташлы. Әйтерһең дә, ҡасандыр кемдер, һоро яҫы таштарҙы түшәп, юл яһап ҡуйған. Юҡ, берәү ҙә юл яһамаған, тәбиғәт эше был.

— Ҡустым, һине ҡайҙа илтәйем икән? — тине Ямат Ялалович, бер аҙ өндәшмәй килгәс.

Ҡапыл ғына әйтелгән был һорау Шамилды тертләтеп ҡуйғандай итте. Ысындан да, ҡайҙа барырға тейеш һуң әле ул? Кеме бар уның бында? Шамил шунда уҡ, үҙенең уҡытыуы булып килеүен уйлап:

— Мәктәпкә инде, ағай, мәктәпкә, — тип әйтә һалды.

— Был заманда унда кем булһын. — Ваҡыттың кискә ауышып барыуын абайлапмы икән, Ямат Ялалович кеҫәһенән тутығып бөткән сынйырға тағылған иҫке генә сәғәтен сығарып, ҡарап алды. Завучтың йортона кереп, ҡаҡса ғына алһыу йөҙлө, оҙон ғына буйлы бер апайҙы алып сыҡты. Шәрифә Булатовна менән танышҡас, мәктәпкә юлландылар.

Апай, нисектер, ҡулдарын ике яҡҡа ҡанат кеүек йәйеп, талпынып-талпынып атлай. Ҡала кешеләренсә, башын һәр саҡ төҙ һәм ыҫпай тоторға тырыша. **Был үҙенә килешеп тә тора.**

1. Тәбиғәт, Һаҡмар йылғаһы һүрәтләнгән урындарҙы табып, ҡабат уҡығыҙ һәм һүрәтләү сараларын табығыҙ. Уларҙың ҡулланылыу осрағын аңлатығыҙ.
2. Шамилда ниндәй хәл-ваҡиға уҡытыусы булыу теләге уята?

3. *...Бына ул хәҙер тәүге тапҡыр үҙ аллы хеҙмәт юлына аяҡ баҫа. Кәңәшсеһе — үҙ аҡылы, алға әйҙәүсеһе — ашҡынып типкән йөрәге. Ул уҡытыусы булып эшкә бара. Ниндәй яңы мәшәҡәттәр, ашҡыныуҙар, һөйөнөстәр, көйөнөстәр көтә уны. Шамил әле уларҙың күбеһен башына ла индереп сығара алмай. Алда — күперһеҙ йылға һымаҡ тормош...* өҙөгөнөң мәғәнәһен аңлатығыҙ һәм рус теленә тәржемә итегеҙ.
4. *Үркәс-үркәс тауҙар, тау мороно, күк үләндәр. Үлән, тау* тураһында тағы нисек әйтәләр? Дауам итегеҙ.

**57-се күнегеү.** I бүлектәге ҡалын хәреф менән бирелгән һөйләмдәрҙең баш киҫәктәрен билдәләгеҙ. Уларҙың ниндәй һүҙ төркөмдәренән килеүен асыҡлағыҙ.

## II

Мәктәп ауылдан аҙ ғына ситтәрәк — соҡорҙоң арғы яғында икән. Шамилды шунда алып барҙылар. «Г» хәрефен хәтерләтеп һалынған, иҫке булһа ла, ауыл өйҙәре кеүек үк, ап-аҡ итеп эзбиз менән ағартылған, түбәһе ҡалай менән ябылған бина. Шул саҡ бер ишектән түңәрәк йөҙөн аҙ ғына күрһәтеп сыбар яулыҡ бәйләгән, бәләкәй генә кәүҙәле, өлкән йәштәрҙәге апай сыҡты. Килеүселәргә мөләйем генә итеп сәләм бирҙе. Күп йылдар буйы кескәй генә бүлмәлә тороп, шунда эшләп, инде мәктәп әсәһенә әүерелгән йыйыштырыусы икән ул.

— Апай, бына һиңә бер егет килтерҙек. Улың итеп ал, — тине Ямат Ялалович.

— Был — Шамил Сабирович, беҙҙең яңы уҡытыусы, — тип өҫтәне Шәрифә Булатовна. — Бөгөнгә ул һеҙҙә ҡунып. Иртәгә фатирға урынлаштырырбыҙ.

— Әйҙүк, балам, әйҙүк! Хәҙер самауыр ҡуйырмын. Әйҙә, балам, әйҙә, — тип апай ысындан да инәйҙәрсә өндәште.

Йыйыштырыусы апай Шамилды димләп-димләп сәй эсерҙе. Ҡайһы яҡтарҙан булыуын, ата-әсәләренең кемлеген һораштты. Һәм, егеттең иҫнәүен күреп: «Арып килгәнһеңдер, балам», — тип һөйләнә-һөйләнә, ҙур бер класҡа урын һалып бирҙе.

...Ул иртәнсәк табанына кемдеңдер ҡағылыуынан күҙҙәрен асты. Аяҡ осонда ҡояш дәүмәле эшләпә кейгән, ҡорһағы алға ҡапайып сыҡҡан бер ағай йылмайып баҫып тора ине. Был мәктәп директоры Иркәбай Хикмәтуллин булып сыҡты.

...Ҡояшлытау ауылына килеү менән, Шамил тиҙ үк үҙ кешегә әүерелде. Уға рус теле һәм туған тел сәғәттәрен бирҙеләр. Бишенсе «А»ға класс етәксеһе лә иттеләр. Күптән хыялланған тәүге дәрес тә үтеп китте. Дөрөҫ, ул, Тәхәүетдин ағаһыныҡы һымаҡ, «эттәр китабы»нан башланманы. Хикмәтуллин ағай уны класына алып инде лә балаларға: «Бына һеҙҙең уҡытыусығыҙ, тыңлашып ҡына ултырығыҙ», — тип ғәҙәти генә таныштырҙы. Шунан ҡәҙимгесә дәрес башланды. Шамил таҡта янына бер уҡыусыны сығарҙы, һөйләм яҙҙырҙы, эйә менән хәбәрҙе табырға ҡушты. Унан эйәрсән киҫәктәрҙең аҫтарына һыҙҙылар.

Шулай ҙа тәүге дәрес Шамил күңелендә юйылмаҫлыҡ матур эҙ ҡалдырҙы. Балалар алдына инеп баҫҡас, иң тәүҙә үҙенә төбәлгән ҡара, һоро, зәңгәр, йәшкелт, тағы әллә ни төҫлө күҙҙәр әсир итте уны. Унан белем көтәләр, киләсәк асҡысын көтәләр. Ул ошо үҫмерҙәрҙе ысын кешеләр итеп тәрбиәләргә тейеш.

Тәүге дәрес... Ғәжәп бер донъя асҡандай ул. Балалар уҡытыусыларының һәр хәрәкәтен, һәр ҡыланышын күҙәтеп, һәр һүҙен йотоп барҙы.

Көндәр бер-бер артлы тәгәрәй торҙо. Балалар, өйрәткәндәрҙе үҙләштереп, иртәгеһен матур итеп һөйләп бирһәләр, Шамилдың түбәһе күккә тейә ине. Шулай ҙа гел генә ҡыуаныс килтермәне дәрестәр уға.

Ғәҙәти бер көндә Шәрифә Булатовна уның дәресенә инеп ултырырға булды. Башҡалар араһында иң ныҡ хөрмәт иткән һәм өлгө итеп ҡараған кешенең дәресенә инәһен белгәс, Шамил тулҡынланды, һәйбәт итеп аңлатып бирә алһам ғына ярар ине, тип борсолдо. Әҙерләнеүен дә яҡшы әҙерләнгәйне. Некрасовтың «Школьник» исемле шиғырын үтергә тейештәр. Балаларға тәрбиә бирер өсөн, бына тигән материал. Шамил, план төҙөгәндә, һорауҙарҙы ҡат-ҡат уйлап, дәфтәренә бит тултырып яҙып ҡуйғайны. Бөтәһе лә һәйбәт үтер, быға ул шикләнмәй. Тик йөрәге һаман дөпөлдәй, ярһый, Шәрифә Булатовна алдында ул нисектер үҙен уҡыусы һымаҡ тоя.

Һәм бына һис көтмәгән хәл килеп сыҡты. Улар класҡа инеүгә, Бикбатыр исемле бер малай өҫтәлгә менеп ултырған да, уҡытыусыларҙы шәйләмәгән кеше булып, маймыллана бирә. Шамил асыуынан шартларҙай хәлгә етте һәм уны кластан ҡыуып сығарҙы.

Шамил үҙен ҡулға алды, дәресте башлап ебәрҙе. Ләкин әлеге секунд эсендә тигәндәй эшләнгән хәл гел үҙен һиҙҙереп торҙо, һуңынан дәрес анализлағанда ла һөйләшеү күбеһенсә ошо хәлгә килеп терәлде. Шәрифә Булатовнаның һәр осраҡта ла уҡытыусы уҡыусынан көслө булырға тейеш, тигән кәңәше Шамилдың күңелендә мәңгелеккә уйылып ҡалды.

— Ә һеҙ, Шәрифә Булатовна, минең урында ни эшләр инегеҙ? — тине Шамил, үҙен борсоған һорауға яуап эҙләп.

— Мин бер нәмә лә эшләмәҫ инем. Инеү менән баҫҡан урынымда туҡтап ҡалыр инем дә көтөр инем. Йәки: «Йә, Бикбатыр, һинең дәрес бөттөмө? Миңә лә башларға мөмкиндер бит», — тип еңелсә генә уйынға борор инем. Ул шунан һуң урынына барып ултырасаҡ, һәм мин дәрес башлап ебәрәм. Һуңынан был хәл тикшерелмәй ҡалмай, әлбиттә.

Завучтың әйткән һүҙҙәре хаҡында Шамил һуңынан бик оҙаҡ уйланып йөрөнө. «Ысынлап та, бындай саҡта сабыр булыуға ни етә. Юҡҡа ғына сабыр төбө — һары алтын, тип әйтмәгәндәр шул. Был, бәлки, Шәрифә Булатовналағы иң мөһим сифаттыр...»

**1.** Ҡояшлытау кешеләренең яҡшы сифаттарын һанап сығығыҙ һәм текстан табып уҡып, дәлилләгеҙ.
**2.** Шамил беренсе дәресендә ниндәй тойғолар кисерә?
**3.** Шәрифә Булатовнаның Шамилға биргән һабағы тураһында фекер алышығыҙ.

**58-се күнегеү.** Әҫәрҙә осраған яңғыҙлыҡ исемдәрҙе түбәндәге төркөмдәргә бүлеп яҙығыҙ.

1. Кеше исемдәре:
   а) ир-ат исемдәре: ...
   б) ҡатын-ҡыҙ исемдәре: ...
2. Фамилиялар: ...
3. Аталарының исемдәре: ...
4. Ер-һыу атамалары: ...

# БАШҠОРТОСТАН — АЛТЫН БИШЕК

*Абдулхаҡ* ИГЕБАЕВ

## БАШҠОРТОСТАН — ИЛГЕНӘМ!

Сабый саҡтан күкрәгемә
Тамыр йәйгән гөл генәм,
Һулыш биргән, тормош биргән
Әсәйемдәй бергенәм —
Башҡортостан — илгенәм!

Һулар һауам, йәнгә дауам,
Сыуаҡ, матур көн генәм,
Күңелдәргә йәйғор һуҙған
Йор һәм сәсән тел генәм —
Башҡортостан — илгенәм!

Күп милләтле дәүләтем һин,
Тиңдәр менән тиң генәм,
Ғүмер иткән, донъя көткән,
Йән ереккән ер генәм —
Башҡортостан — илгенәм!

**1.** Шиғырҙың төп алымын билдәләгеҙ.

**2.** Башҡортостан образы ниндәй сағыштырыуҙар аша һүрәтләнә? Сағыштырыуҙарҙы яҙып алығыҙ һәм рус теленә тәржемә итегеҙ.

3. *Күңелдәргә йәйғор һуҙған*
*Йор һәм сәсән тел генәм, —*
*Башҡортостан — илгенәм!* тигән юлдарҙың мәғәнәһен аңлатығыҙ.
4. Илһеҙ кеше буламы? *Сит илдә солтан булғансы, үҙ илеңдә олтан бул* тигән мәҡәл был шиғырға тап киләме? Ни өсөн?
5. Башҡортостанда төрлө милләт кешеләренең дуҫ, татыу йәшәүҙәре тураһында мәҡәләләр уҡығыҙ, кинофильмдар ҡарағыҙ. Улар буйынса фекер алышығыҙ.

*Абдулхаҡ ИГЕБАЕВ*

## БАШҠОРТОСТАН

Ҡырлас тауҙар иле Башҡортостан —
Ата-бабаларҙың баш йорто.
Баш йортҡайын яҡлап яуға сапҡан
Күк Уралдың ҡыйыу башҡорто.

Сал бөркөттәр осҡан Башҡортостан —
Салауаттай ирҙәр төйәге,
Нисә быуын яугир ҡаһармандар
Россияның булды терәге.

Мең ғазаптар йотҡан Башҡортостан —
Ҡанһырап та баҡҡан ергенәм.
Ни күрһәң дә, ниҙәр кисерһәң дә,
Бөгөлмә һин, Тыуған илгенәм.

Башҡортостан — беҙҙең азатлыҡтың,
Берҙәмлектең ныҡлы ҡалҡаны.
Уралдағы барлыҡ милләттәргә
Һин, атайсал, — дуҫлыҡ Ватаны.

1. Шиғырҙы тасуири уҡығандан һуң тыуған тәьҫораттарығыҙ менән бүлешегеҙ.
2. *Тыуған ил* төшөнсәһе ниндәй һүҙҙәр менән бирелә? Уларға ниндәй мәғәнә һалына?

**59-сы күнегеү.** 1. Һүҙҙәрҙең синонимдарын табығыҙ: *ҡыйыу, азатлыҡ, терәк, ғазап, баҡҡан, бөгөлмә.*

2. Һүҙҙәрҙең антонимдарын билдәләгеҙ: *берҙәмлек, дуҫлыҡ, ныҡ, сал.*

*Ирек* КИНЙӘБУЛАТОВ

## ДУҪЛЫҠ ТӨЙӘГЕ

Иң оло һүҙ беҙҙә — дуҫлыҡ бит ул,
Ни ҡәҙерле ысын дуҫлыҡтан?
Илемдәге был ҡаҡшамаҫ рухты
Алманыҡ беҙ барып бушлыҡтан.
Ул яралды хаҡлыҡ теле менән,
Ҡеүәтләнде туған телемдә.
Ерҙе имен тотор бөгөнгөм дә,
Шунан тыуҙы минең илем дә.
Беҙ, әйтерһең, дуҫлыҡ милләтенән,
Бөтәбеҙ ҙә тиң, шат затлыбыҙ.
Үҙебеҙ тапҡан уртаҡ ҡот-бәхеткә
Бөтәбеҙ ҙә берҙәй хаҡлыбыҙ.
Ерем бөгөн бәхет төйәгендәй,
Бында мәңгелеккә таң атҡан.
Тағы яҡтыраҡҡа талпындыра
Дуҫлыҡ тигән талмаҫ ҡанаттар.
Ул нурҙарҙы, ул йылыны хәҙер
Сабый тоя хатта бишектән!
Ниндәй телдә сәләм бирмәһендәр —
Беҙҙә һәр саҡ асыҡ ишектәр.
Ерем белә: ниндәй дуҫ килһә лә,
Туғанылай башҡорт ҡосҡанын.
Уралымда, дуҫлыҡ түбәһендәй,
Бәхет, шатлыҡ, хаҡлыҡ төйәгендәй,
Балҡый минең Башҡортостаным!

**1.** Шағир *дуҫлыҡ* тигән һүҙгә ниндәй мәғәнә һала?
**2.** Халыҡтар дуҫлығы сағылған юлдарҙы табып уҡығыҙ.
**3.** Башҡортостандың дуҫлыҡ төйәге икәнлеген бөгөнгө көнгә бәйләп иҫбатлағыҙ.

**60-сы күнегеү.** Шиғырҙан оҡшатыу-сағыштырыу формаһында килгән һүҙҙәрҙе улар асыҡлап килгән берәмектәр менән күсереп алығыҙ. Уларҙы рус теленә тәржемә итегеҙ. Оҡшатыу-сағыштырыу формаһының башҡорт һәм рус телендә яһалыу үҙенсәлектәрен сағыштырығыҙ. Ниндәй үҙенсәлектәр күҙәтелә?

**61-се күнегеү.** «Дуҫлыҡ төйәге» шиғырының һуңғы һөйләмен сәсмә стилдә яҙығыҙ.

Эйә менән хәбәр икеһе лә исемдән, һандан, ҡылымдан булһа, улар араһына һыҙыҡ ҡуйыла. Миҫалдарҙы ҡарағыҙ: *Башҡортостан — алтын бишек. Ике икең — дүрт. Ашыҡҡан — ашҡа бешкән.*

**62-се күнегеү.** Һөйләмдең баш киҫәктәре тураһында белгән мәғлүмәттәрегеҙгә ҡарата мөмкин тиклем күберәк һорауҙар төҙөгөҙ.

**63-сө күнегеү.** Башҡортостанды бөтөнләй белмәгән кешегә һин беҙҙең республикабыҙ тураһында ниҙәр һөйләр инең? Шул турала яҙығыҙ.

## ҺӨЙЛӘМДЕҢ ЭЙӘРСӘН КИҪӘКТӘРЕ

Эйәрсән киҫәктәргә **аныҡлаусы (определение), тултырыусы (дополнение)** һәм **хәл (обстоятельство)** инә.

Эйәрсән киҫәктәрҙең исемдәре үҙҙәре үк улар тураһында бик асыҡ һөйләй. **Аныҡлаусы** һөйләмдәге предметтың (шулай уҡ заттың да) билдәһен, иҫәбен, күләмен билдерә. **Тултырыусы** һөйләмдәге ҡылым белдергән эштең объектын белдерә. **Хәлдәр** һөйләмдәге ҡылым белдергән эш-хәрәкәттәрҙең ниндәй хәлдәрҙә (урын, ваҡыт, сәбәп, рәүеш, шарт, күләм) үтәлеүен белдерә.

Шулай итеп, аныҡлаусы исемдәргә, шулай уҡ исем урынында килгән һүҙҙәргә эйәрә, тултырыусы менән хәлдәр ҡылымдарға бәйләнеп килә. Аныҡлаусылар сифат, һан һорауҙарына, эйәлек килеш һорауҙарына яуап бирә *(ниндәй? ҡайһы? кемдең? нимәнең? ҡайҙағы? нисә?).* Тултырыусылар — исемдең килеш һорауҙарына (эйәлек һәм төп килештән башҡа), ә хәлдәр рәүеш һорауҙарына яуап бирә.

Һөйләм киҫәктәренең аҫтына һыҙып билдәләү түбәндәгесә:

Эйә — ____________

Хәбәр — ══════════

Аныҡлаусы — ∼∼∼∼∼∼∼

Тултырыусы — - - - - - - - - - -

Хәл — -.-.-.-.-.-.-.-.-.-

**64-се күнегеү.** Һөйләмдәрҙе уҡығыҙ, аҫтына һыҙылыуына ҡарап, һөйләм киҫәктәрен атағыҙ.

1. Ҡурҡҡанды эт абалай. 2. Алты ағай-эненән айыу-бүре ҡурҡыр. 3. Ҡарайған бит ағармай. 4. Ағас балтанан ҡурҡа. 5. Күмәк ағас дауылдан ҡурҡмаҫ. 6. Ҡоро ағастың емеше юҡ. 7. Ҡаты ағасты йомшаҡ ҡорт ашар. 8. Байлыҡ — бер айлыҡ.

## Тиң һәм тиң булмаған аныҡлаусылар

Аныҡлаусы һөйләмдә предметты төрлө яҡтан аныҡлап, асыҡлап килә, тигәйнек. Ул предметтың билдәһен, иҫәбен, күләмен белдерә. Бер үк предметтың ошондай билдәләре бик күп. Һәм һөйләмдә лә бер үк һүҙҙең аныҡлаусылары бер нисә була ала. Ҡарағыҙ: *Икенсе атыбыҙ — үшән, моңһоҙ, сиктән сыҡҡан тиҫкәре оло башлы һоро алашабыҙ.* (М. Кәрим) Тәүге өс аныҡлаусы атты холҡо яғынан аныҡлай. Улар **тиң аныҡлаусылар (однородные определения)**, шуға улар араһында өтөр ҡуйыла. Дүртенсеһе — аттың тышҡы ҡиәфәтен, бишенсеһе төҫөн белдерә. Улар **тиң булмаған (неоднородные определения)** аныҡлаусылар. Улар араһына тыныш билдәһе ҡуйылмай.

Тиң аныҡлаусыларҙың урындарын алмаштырып була — һөйләмдең мәғәнәһе үҙгәрмәй. Тиң булмаған аныҡлаусыларҙың урындарын алмаштырһаң, мәғәнә үҙгәрә йә мәғәнәһеҙлек килеп сыға.

Шулай итеп, тиң аныҡлаусылар предметтың бер төрлө билдәһен белдерәләр, ә тиң булмаған аныҡлаусылар предметтың йәки заттың төрлө билдәһен күрһәтәләр.

**65-се күнегеү.** Аныҡлаусылар тураһында нимәләр белдегеҙ? Шул белемдәрегеҙгә ярашлы һорауҙар төҙөгөҙ.

**66-сы күнегеү.** Аңлатмаларға ҡарап, туғанлыҡ терминдарын табығыҙ, уларҙы әҙәби телдә һәм йәйә эсендә үҙегеҙҙең һөйләштә яҙығыҙ.

Өлгө: *Минең бәләкәй ир бала туғаным. Ҡустым (мыртыйым, мырҙам, энем).*

1. Олатайымдың берҙән-бер улы.
2. Әсәйемдең еңгәһе.

3. Еңгәмдең һеңлеһе.
4. Еҙнәмдең берҙән-бер ҡәйнеше (балдыҙы).
5. Атайымдың атаһы.
6. Еҙнәмдең әсәһе.
7. Еңгәмә минең әсәйем.
8. Әсәйемдең атаһы.
9. Еңгәмдең ире.
10. Ағайыма еңгәмдең ағаһы.

Ошо һүҙҙәрҙе индереп, дүрт һөйләм яҙығыҙ.

**67-се күнегеү.** Түбәндәге һүҙҙәргә тиң һәм тиң булмаған аныҡлаусылар өҫтәгеҙ.

Ҡапҡа, сәскә, урам.

Өлгө: *Тауыҡ. Сыбар, һары, ҡара тауыҡтар. Күршеләрҙең себеш сығарған оло сыбар тауығы.*

**68-се күнегеү.** Һорауҙарға ҡыҫҡа яуаптар яҙығыҙ.

1. Аныҡлаусылар һөйләмдә ниндәй һүҙгә бәйләнеп киләләр?
2. Аныҡлаусылар ниндәй һүҙ төркөмөнән була алалар?
3. Аныҡлаусылар ниндәй мәғәнә белдерәләр?
4. Аныҡлаусыларҙың ниндәй төрҙәре бар?

Аныҡлаусылар тураһында тағы ла ниндәй һорау бирер инегеҙ?

*Назар НӘЖМИ*

## ӨФӨ ЙҮКӘЛӘРЕ

Йәшлек урамдары,
Тулы хыялдары,
Беҙ шатлыҡҡа туймаҫ иҫәрҙәр.
Өфө йүкәләре
Беҙҙең хаҡта ла әле
Япраҡ яра-яра һөйләрҙәр.

Беҙҙең менгән аттар —
Йылдар, арғымаҡтар,
Көмөш теҙген, алтын йүгәндәр.

Өфө йүкәләре
Беҙҙең хаҡта ла әле
Сәскә ата-ата һөйләрҙәр.

Ғүмер ике килмәй,
Уттар ике һүнмәй,
Беҙ, мең янып, тик бер һүнгәндәр.
Өфө йүкәләре
Онотмаҫтар әле,
Япраҡ ҡоя-ҡоя һөйләрҙәр.

1. Йылдың өс миҙгелендә һүрәтләнгән йүкәгә кеше тормошоноң ниндәй мәлдәре тап килә?
2. Был шиғырға Рим Хәсәнов көй яҙған. Йырҙы тыңлағыҙ һәм үҙегеҙ йырлап өйрәнегеҙ.
3. Өфө тураһында тағы ниндәй яңы йырҙар беләһегеҙ? Уларҙы ниндәй йырсылар башҡара?

## Тултырыусы

**Тултырыусы (дополнение)** һөйләмдең ҡылымдан килгән киҫәгенә эйәреп, шул ҡылым белдергән эште тултырып, уның йүнәлеү объектын белдереп йөрөй. Тултырыусы исемдән һәм исем урынында килә алған башҡа һүҙ төркөмдәре аша белдерелә. Тултырыусы төп, төшөм, төбәү, сығанаҡ, урын-ваҡыт килеш формаларында була, шулай уҡ бәйләүестәр менән дә килергә мөмкин.

Миҫалдар:

1. *Бала ҡәҙерен әсә белер, ил ҡәҙерен ир белер.* (Исем)
2. *Аулаҡ күлгә тәлмәрйен хужа.* (Исем)
3. *Ереккәнде ер ярата.* (Сифат ҡылым)
4. *Күҙ ҡарауҙан туймай.* (Исем ҡылым)
5. *Эшһеҙгә аш юҡ.* (Сифат)
6. *Өсәүҙе берәү ашамаҫ.* (Һан)
7. *Үҙен маҡтаған — бер ахмаҡ,* (Алмаш)
   *этен маҡтаған — ун ахмаҡ.* (Исем)

Тултырыусылар *кемгә? нимәгә? кемде? нимәне? кемдән? нимәнән? кемдә? нимәлә? кем менән? нимә менән? кем өсөн? нимә өсөн? кем тарафынан?* һорауҙарына яуап була.

**69-сы күнегеү.** Түбәндәге шиғырҙарҙа тултырыусыларҙы билдәләгеҙ. Һорауҙарына иғтибар итегеҙ.

1. Тән кәрәкһә, ҡырҡып бирәм тәнемде,
   Йән кәрәкһә, йолҡоп бирәм йәнемде,
   Ҡалдырығыҙ бары телемде.
   Күҙ кәрәкһә, соҡоп күҙем алмаһын
   Бирәм һеҙгә, тик телемдән күҙегергә яҙмаһын!

*(Әхмәр Үтәбай)*

2. **Ҡаялағы яҙыу**
   Йәшәй-йәшәй шуға инандым:
   Күләгәһе юҡ тик йыландың.

3. **Баҫмалағы яҙыу**
   Ҡыш буйы эшһеҙлектән ҡаҡшаным,
   Һағындым өҫтөмә кеше баҫҡанын.

*(Рәйес Түләк)*

**70-се күнегеү.** Тултырыусыларҙы табығыҙ.

Донъялағы һәр кемгә ҡәҙерлеһе — үҙ туған теле. Туған телгә күпме маҡтау һүҙҙәре яуҙырылған. Ғабдулла Туҡай һүҙҙәрен беҙ бала саҡтан ятлап, көйләп үҫтек. «Әсәм теле — сәсән теле», — ти шағир Рәми Ғарипов туған башҡорт теле хаҡында.

Туған телендә кеше донъяны, донъя матурлығын белә башлай. Уның ошо телдә фекерләү мәҙәниәте, зауығы формалаша.

Минең туған башҡорт телем — әсә һөтө менән ҡаныма һеңгән, әсә телем донъяны танытҡан, кешеләр менән аралаштырған, белем, ғилем биргән ғәзиз телем.

Шул телем мине бүтән телдәрҙе белергә, рус телен өйрәнергә юл асҡан. *(Ғайса Хөсәйеновтан)*

«Минең өсөн минең туған телем» темаһына инша яҙығыҙ.

**71-се күнегеү.** Башҡорт халыҡ йырҙарынан алынған һөйләмдәрҙе уҡығыҙ. Шуларҙың береһенә үҙегеҙ легенда уйлап яҙығыҙ.

1. Өйҙөрәкәй буйы бигерәк йәмле
   Аҡ тирмәләр ҡороп шул йәйләргә.

*(«Өйҙөрәкәй буйы»)*

2. Ҡара Сурай һыуы ҡаты аға,
Аҡ өйрәктәр ҡаршы йөҙә алмай.
Саҡыра ла кәкүк, һайрай былбыл,
Йөрәккәйем һис тә түҙә алмай.

*(«Ҡара Сурай»)*

3. Соран да ғына буйы, эй, ҡылғанлыҡ,
Сәскә ҡушып, таҡыя үрәйем.
Сит ерҙәрҙә сәсем ҡылғанланды,
Соранымды ҡайтып күрәйем.

*(«Соран буйы»)*

4. Ике лә егет бесән саба
Уйыл буйҡайында ла сабында.
Ҡайҙа ла ғына бармай, ниҙәр күрмәй
Ир-егеткәй иҫән сағында.

*(«Уйыл»)*

5. Яйыҡҡай ғына буйлап мин йөрөнөм,
Йөрөгән ерем ҡалһын билгегә.
Атам-әсәм, инде хуш булығыҙ,
Ҡайта алмам инде был илгә.

*(«Яйыҡ»)*

6. Арғужа буйлап йөрөгәнемдә,
Ятып ҡалды ҡайыш дилбегәм.
Дилбегәм дә өсөн ҡайғырмайым,
Ятып ҡалды тыуған илгенәм.

*(«Арғужа»)*

Ошо йырҙарҙың ниндәйҙер уртаҡлығын күрәһегеҙме?

**72-се күнегеү.** Ер-һыу атамаларының байтағы, рус теленә тәржемә иткәндә, йә фонетик үҙенсәлеген юғалта, йә бөтөнләй икенсе мәғәнә ала, йә рус һүҙҙәре менән алмаштырыла. Сағыштырығыҙ.

Ағиҙел (йылға) — Белая, Төйәләҫ (йылға) — Худолаз, Дим (йылға) — Дёма, Арғужа (күл) — Аргази, Яҡтыкүл (Мауыҙҙы) (күл) — Банное, Аҡкүл (күл) — Белое озеро, Балаҡатай (район) — Белокатайский, Ейәнсура (район) — Зианчурин-

ский, Башҡорт Самаҙыһы (ауыл) — Башкирская Чумаза, Ҡыйғы (район) — Кигинский, Малаяҙ (ауыл) — Малояз, Күгәрсен (ауыл) — Кугарчи, Ҡуянтау (ауыл) — Куянтаево, Асы (ауыл) — Ассы.

Рус теленең законъдарына ярашлы, шул уҡ ваҡытта башҡорт телендәге яңғыраšты ла мөмкин тиклем теүәл һаҡлап, һеҙ шул һүҙҙәрҙе нисек яҙыр инегеҙ?

### Тура һәм ситләтелгән тултырыусылар

Тултырыусыларҙы ҡылымға эйәрә, эштең объектын белдерә, тигәйнек. Эш нимәгәләр туранан-тура төшә, йүнәлтелә: *китап уҡый, ауылымды яратам, тарихты белергә тырыша.* Бындайҙарҙы **тура тултырыусы (прямое дополнение)** тиҙәр.

Башҡа ваҡыттарҙа эш объектҡа тура ғына төшмәй, эштең йүнәлеү, сығанаҡ, урын объектын белдерә. Сағыштырығыҙ: *Китапты апайыма бирәп торҙом* (*кемгә?* — йүнәлеү объекты). *Китапты апайымдан алып торҙом* (*кемдән?* — сығанаҡ объекты). *Был китапты апайымда күргәйнем* (*кемдә?* — урын объекты). Был миҫалдарҙағы аҫтына һыҙылған һүҙҙәрҙе **ситләтелгән тултырыусы (косвенное дополнение)** тиҙәр. Ә *китапты* һүҙе өс һөйләмдә лә — тура тултырыусы.

Бәйләүестәр менән килгән тултырыусылар ҙа ситләтелгән тултырыусы булалар: *атайым менән ҡайттым; һинән башҡа бармайым; ил тураһында уйла.*

**73-сө күнегеү.** Текстағы ысынбарлыҡҡа тап килмәгән ваҡиғаларҙы күрһәтегеҙ. Тултырыусыларҙы табығыҙ, уларҙың төрөн билдәләгеҙ.

Ғәлләм ағай күршеһе Зиннәт ағайҙан:

— Кисә нисәһе булды әле? — тип һораны, ти.

— Кисә ни июндең ун бише ине, — тине, ти, Зиннәт ағай.

— Кисә атымды санаға ектем дә Киҙгән ауылына һабантуйға киттем. Ауылға барып еттем, тигәндә, ярты юлға етмәҫ борон, сананың ике алғы тәгәрмәсе төштө. Шулай булһа ла барырға ине лә, буран башланып, юлды көрт баҫты. Аттың аяғы тая башланы. Шулай булһа ла барып етеп, һабантуйҙа ҡатнашып, йәшел сиҙәмдә ултырып тороп, ҡымыҙ эсеп, буран баҫылыуға ҡайтып еттем ауылға, — тине, ти, Ғәлләм ағай.

— Кизгәндәге һабантуйҙа мин дә булдым. Төшкөлөктө ашарға ҡайтҡанда, берәү һырғауылға менеп бара ине. Шул һин булғанһың икән, улайһа. Эҙер төшөп килгән ваҡыт булғас ни, Сәлимә еңгәң танымаған, — тигән Зиннәт ағай.

Әкиәтем ары, үҙем бире, сыуал артында тире. *(«Балалар фольклоры»нан)*

## ХӘТЕР ҺАНДЫҒЫНА...

Тыуған ер — яҡын, Тыуған ил — алтын.

* * *

Халыҡ йорто — Тыуған ил.

* * *

Һыу — һыйған ярында, ир — тыуған ерендә.

* * *

Тыуған ерҙең әреме лә хуш еҫле.

* * *

Туйған ерҙән тыуған ер яҡшы.

* * *

Тыуған илдең ҡәҙерен ситтә йөрөһәң белерһең.

* * *

Алтын-көмөш яуған ерҙән тыуған-үҫкән ил артыҡ.

# САЛАУАТ БАТЫР ИР ИНЕ

## САЛАУАТ БАТЫР

Салауат батыр ир ине,
Менгән аты кир ине,
Яуға саҡырып өндәгәндә,
Тауыштары көр ине;
Ҡаршы килгән яуҙарға
Ҡаршы сығыр ир ине,
Ҡаршы сығыр ир ине.

Салауат батыр ир ине,
Менгән аты кир ине,
Дошман менән алышҡанда,
Ил эсендә бер ине;
Халҡы өсөн көн ине,
Дошман өсөн төн ине,
Дошман өсөн төн ине.

Салауат батыр ир ине,
Менгән аты кир ине,
Яурынына уҡ тейһә —
Себен тешләй, тир ине;
Күкрәгенән ҡан сыҡһа —
Тирем сыға, тир ине, ау,
Тирем сыға, тир ине.

**1.** Ҡобайырҙа Салауат батыр нисек һүрәтләнә?

**2.** *Халҡы өсөн көн ине,*
*Дошман өсөн төн ине,* тигән юлдарҙы нисек аңлайһығыҙ?

**74-се күнегеү.** «Салауат батыр» ҡобайырында ҡулланылған сифат ҡылымдарҙы табығыҙ, уларҙың заманын билдәләгеҙ. Хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарынан айырмалы яҡтарын күрһәтегеҙ. Ни өсөн уларҙы хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарынан айырып, сифат ҡылым тип йөрөтәләр?

*Фәүзиә* РӘХИМҒОЛОВА

## САЛАУАТ

Быуындарҙан күсеп быуындарға,
Мәңге ал таң булып атыр ул!
Бөркөт төйәк иткән Уралҡайҙың
Ҡуйынында үҫкән батыр ул!
Бер ҡулында — ҡорал, бер ҡулында
Теҙген булған ярһыу атының.
Көйөү, нәфрәт йөрөткән йөрәгендә
Һис һүрелмәй дөрләр ут-ғәйрәте
Илкәйенә биргән анты ул.
Арыҫландай ҡыйыу ташланған ул
Дошманына туған халҡының.
Әйҙәй-әйҙәй яуға, өләшкән ул
Кешеләргә дәртен, ялҡынын...
Яратҡан ул шундай үҙ Уралын,
Уға арнап йырҙар яралған.
Әминәһе, тыуған еркәйенә
Ҡайнар мөхәббәте күҙҙәренән
Салт осҡондар булып таралған.
Эй, Салауат!
Ҡайтып төшһәң икән,
Буҙ толпарҡайыңа атланып,
Ҡаршы алыр ине азат Урал,
Азат Урал улын шатланып.
Беҙ бит һинең һалған шанлы юлдан,
Ирек һуҡмағынан атланыҡ.
Юҡ, намыҫты, тыуған еребеҙҙе,
Сал Уралды ятҡа һатманыҡ!
Ирек һуҡмағынан атланыҡ!

1. Шиғырҙың йөкмәткеһенән сығып, Салауат образын кәүҙәләндерегеҙ.
2. Салауаттың Уралға булған һөйөүе шиғырҙа нисек һүрәтләнә?
3. Уралдың сал тарихы һәм бөгөнгөһө шиғырҙа нисек бәйләнә?

*Тәнзилә ДӘҮЛӘТБИРҘИНА*

## САЛАУАТ РУХЫ

Ҡәһәрләнгән мәғрур Рогервиктың
Ел кимергән бөйөк ҡәлғәһен.
Ел сәйнәгән ваҡ-ваҡ ташҡа ҡарап,
Әйткем килә: «Һин ни хәлдәһең?!»
Пакри ярҙарының һәр ташына
Айырым-айырым атап өндәшәм.
(Салауаттың ғазап сиккән йөҙөн
Көн дә күргән ерҙән көнләшмәм...)

Өндәшмәй ҙә, көнләшмәй ҙә торған
Төйәк бит ул Балтик буйҙары.
Күҙ иңләмәҫ даръя аръяғына
Талғын оса ауыр уйҙарым.
Салауаттың йәшәү сере бында!
Салауаттың үлем сере бында!
Сер уртлаған диңгеҙ йөҙҙәренә
Ҡарайым мин, алалмайса тын да...

Салауаттың рухын иҫкә алып,
Хәйер итеп һыуға аҡса һалам.
Мин килмәһәм,
                    батыр рухын һағынып,
Ҡан, йән тартып, бәлки, килер балам.
Сер уртлаған диңгеҙ ярҙарынан
Уйҙарымдан йәнем ҡурылып китәм.
Хәҙер инде был ил — күрше баҡса,
Арабыҙҙа бейек, бөйөкситән...

1. Салауат Юлаевтың Рогервик ҡәлғәһендәге ғүмере шиғырҙа нисек һүрәтләнә?
2. Диңгеҙ ярҙары ниндәй сер һаҡлай? Шиғыр юлдарынан сығып, үҙ фекерегеҙҙе әйтегеҙ.
3. *Хәҙер инде был ил — күрше баҡса,*
   *Арабыҙҙа бейек, бөйөк ситән...* тигән юлдарҙы нисек аңлайһығыҙ?
4. Шиғырҙа быуындар бәйләнеше нисек бирелә?

*Фәнил КҮЗБӘКОВ*

## ЯУ ОРАНЫ БИТ ҺИН, САЛАУАТ!

Башҡортомдоң яу ораны төҫлө
Ғорур
        һинең исем,
                        Салауат!
Быуаттарҙы ялғап быуаттарға,
Мең йыллыҡта сыңлар аманат.

Ҡылыс ялтлап, уҡ һыҙғырамы ни —
Исемеңде һинең әйтһәләр.
Доғалыҡтай тылсым бармы әллә?!
Юҡҡа сыға кәртә, йәтмәләр.

Аманат та кеүек исемеңә
Халыҡ яҙмышҡайы туҡылған.
Уралыңа тамғаң соҡолған да,
Тәнең генә илдән йолҡонған.

Тыуған тупрағыңдан йолҡһалар ҙа,
Рухың һеңгән ҡурай моңона.
Өлкәр булып йөрәккәйең баҙлай
Сыҡҡандарға хаҡлыҡ юлына.

Халҡың алғасҡыһы булып һаман,
Саф тығыҙлап, ҡулың иҙәйһең.
«Минең вариҫмы был?» —
                    Һәр башҡортҡа
Үткер ҡарашыңды төбәйһең.

Милләт йәшәгәндә, һин йәшнәрһең,
Яугир сәсән —
            батыр Салауат!
Рухың һүнмәгәнгә —
                    беҙ үлемһеҙ!
Ейәндәргә етер аманат…

1. Салауаттың исеме халыҡ хәтерендә мәңге һаҡланыуын шиғри юлдарҙан сығып иҫбатлағыҙ.
2. Ни өсөн Салауаттың исемен автор яу ораны тигән?
3. Дүртенсе строфаның мәғәнәһен аңлатығыҙ.

**75-се күнегеү.** Шиғырҙан тура һәм ситләтелгән тултырыусыларҙы үҙҙәре эйәреп килгән һүҙҙәре менән яҙып алығыҙ.

Өлгө: *Быуаттарҙы ялғап* (тура тултырыусы), *быуаттарға ялғап* (ситләтелгән тултырыусы).

**76-сы күнегеү.** Тексты уҡығыҙ. Һөйләмдәрҙең баш киҫәктәрен, тултырыусы һәм аныҡлаусыларҙы табығыҙ.

Каторгалағы аслы-туҡлы көнкүреш, ауыр эш, диңгеҙ буйының ҡырыҫ тәбиғәте бер кешегә лә дәрт-дарман өҫтәмәй. Киреһенсә, тәнде, йөрәкте өшөтөп, һуңғы көстө һура.

Төшөндә Салауат Урал тауҙарын, Йүрүҙән буйҙарын, уның матур аҡ ҡаяларын, йәшел хәтфә туғайҙарын күрә. Салауат, Аҡбуҙатҡа атланып, үткер ҡылысын өҫкә күтәреп, ниндәйҙер ҡара көстәрҙе, дейеү-шайтандарҙы тыуған ауылы яғынан ҡыуа. Алыҫта уның балалары, ҡатындары күренгән кеүек була. Башҡорт йыры, ҡурай моңо ишетелә.

Тик, диңгеҙ тулҡындары тауышына уянғас, Салауат быларҙың барыһының да төш икәнен аңлай. *(Ғәли Вәлиуллин)*

1. Йөкмәткегә ярашлы иллюстрация яһап ҡарағыҙ.
2. Текста ҡайһы урын тураһында һүҙ бара? Ниндәй диңгеҙ иҫкә алына?

**77-се күнегеү.** Тексты уҡығыҙ. Тура һәм ситләтелгән тултырыусыларҙы төркөмләп яҙығыҙ.

Башҡорт халҡы ҡунаҡтарҙы эсемлек — ҡымыҙ, буҙа, айран менән ҡаршылаған. Һуңғы йылдарҙа икмәк өҫтөнә тоҙ ҡуйып ҡаршы алыу киң таралды. Был — халҡыбыҙҙың борондан килгән йолаһына ҡаршы килеү.

Урындыҡҡа балаҫты ҡаплап йәйеү башҡорт ғәҙәтендә булмаған. Башҡорттар урындыҡтың йөҙлөгөн һырлап-семәрләп яһағандар ҙа балаҫты йәки кейеҙҙе шул йөҙлөк күренеп ятырлыҡ итеп кенә йәйгәндәр. Йөҙлөгөн көл менән һап-һары итеп йыуа торған булғандар. Һике аҫтына бер ни ҙә ҡуймағандар. *(«Тормош һабаҡтары»нан)*

## Хәлдәр

**Хәл (обстоятельство)** — һөйләмдәге ҡылымға эйәреп килеүсе эйәрсән киҫәк. Ул эш-хәрәкәттең рәүешен, ваҡытын, сәбәбен, урынын, күләмен, шартын, маҡсатын белдереп килә.

Төрлө мәғәнә аңлатыуҙарына ҡарап, хәлдәрҙең һорауҙары ла төрлөсә. Миҫалдарҙы ҡарағыҙ: *нисек?* (рәүеш) — *тырышып уҡый*; *ҡасан?* (ваҡыт) — *кисә күрҙем; ҡайҙа?* (урын) — *ҡалала йәшәйем; ниңә?* (сәбәп) — *арығас эшләп бөтөп булманы; күпме?* (күләм) — *ике көн яуҙы*, *ниндәй шартта?* (шарт) — *уҡыһа, белә*.

**78-се күнегеү.** Һөйләмдәрҙе иғтибар менән уҡығыҙ. Билдәләнгән бер үк һүҙҙең ниндәй һөйләм киҫәктәре булып килеүен асыҡлағыҙ. Ни өсөн бер үк һүҙ төрлө һөйләм киҫәге булып килгән?

1. Күҙ *матурҙы*, тамаҡ тәмлене ярата. Самаҙы ауылын бейек, *матур* тауҙар уратып алған. Беҙҙең класта уҡыған Фәнил *матур* йырлай. Башҡортостан тәбиғәте әйтеп бөткөһөҙ *матур*.

2. Изге күңелле *яҡшы* кешеләр донъяла бик күп. *Яҡшы* һүҙ йәнгә дарыу, яман һүҙ — ағыу. Ике йөҙлө дуҫтан дошман *яҡшы*. Өйөңдө *яҡшы* һаҡла: ҡапыл ҡунағың килер. *Яҡшы* юлдашынан беленер. Ҡояш *яҡшыға* ла, яманға ла бер тигеҙ ҡарай.

**79-сы күнегеү.** Һүҙҙәрҙең баҫым төшкән урындарына иғтибар итегеҙ.

| | |
|---|---|
| бармáҫ | ҡайталáр |
| ҡарамаҫтáн | киләлә́р |
| йөрөмә́м | йөрөйҙә́р |
| килмә́ҫбеҙ | тырышалáр |

**80-се күнегеү.** Һүҙбәйләнештәрҙе башҡорт теленә тәржемә итегеҙ.

1. Высокий рост, высокий голос, высокое давление, высокая гора, высокий лоб, высокая должность.

2. Низкий стол, низкое место, низкий поступок, низкий голос.

3. Мелкий песок, мелкая река, мелкая рыба.

4. Крепкий забор, крепкая дисциплина, крепкая надежда, крепкие руки.



## Яныбай ХАММАТОВ

## (1925 — 2000)

Яныбай Хаммат улы Хамматов 1925 йылдың 16 ғинуарында Башҡортостандың Белорет районы Исмаҡай ауылында тыуа.

Яныбай Хамматовтың ҙур күләмле тәүге әҫәре «Бөртөкләп йыйыла алтын» романы 60-сы йылдар уртаһында донъя күрҙе. Алтын йыйыусылар тормошон сағылдырған был әҫәр аҙаҡ «Аҡман-тоҡман», «Йәшенле йәй», «Юрғашты» һәм «Руда» романдары менән бергә ҙур бер серияға әйләнде.

Яныбай Хамматов 50—60-сы йылдарҙағы колхоз тормошо хаҡында «Йондоҙҙар нисек ҡабына» тигән ҙур әҫәрен, Советтар Союзы Геройы Миңнеғәле Ғәбәйҙуллинға арналған «Тыуған көн» романын яҙҙы.

Талантлы романсының тағы ла «Төньяҡ амурҙары», «Һырдаръя», «Башҡорттар китте һуғышҡа», «Салауат» романдары билдәле.

1979 йылда тәүге өс романы буйынса «Бөртөкләп йыйыла алтын» тигән фильм төшөрөлә.

Яныбай Хамматов — Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты.

## САЛАУАТ

### I

Өсөнсө тәүлектең таңында иң яҡшы аттарға атланған малай-шалай, һөрән һалып ҡысҡырыша-ҡысҡырыша, йәйләүҙең бер осонан икенсе осона сабышты.

— Бәйге уҙғарыласаҡ урынға барығыҙ!

— Еңеүселәргә тәғәйен бүләктәрегеҙҙе апарығыҙ!

— Оло ҡунаҡтар алдында йөҙөбөҙ ҡыҙарырлыҡ булмаһын!..

Ҡунаҡтар хөрмәтенә бәйге уҙғарыласаҡ урынға халыҡ йыйылғас, Салауаттың ҡушыуы буйынса, йыйын аттар сабыштырыуҙан башланды.

Яҡынығраҡ ауылдарҙан тамъян, ҡатай һәм ҡыпсаҡ ырыуы кешеләре лә килеүен белгәс, Юлай аптыраны.

— Беҙҙә уйын ойоштороласағын ҡайҙан белделәр икән?

— Күрше ырыу кешеләре килеүе яманмы ни? — тип һораны академик Лепёхин.

— Яман түгел, киреһенсә, һәйбәт, — тине Юлай. — Бында килергә үҙ старшиналары рөхсәт бирҙеме икән?

— Уйын уҙғарылған ергә килеү өсөн, уларға ниңә рөхсәт һорау кәрәк?

— Аҡ батша менән гөбөрнаторҙың әмере шулай, — тип аңлатты Юлай. — Ҡараһаҡал менән Батырша яуҙары баҫтырылғандан һуң, батша ярандарының башҡорттарға ышанысы бөттө. Старшиналарҙың рөхсәтенән башҡа башҡорттарға күрше ауылындағы туған-тыумасаларына ҡунаҡҡа барыу йәки йыйын йыйыу ҡырҡа тыйылды.

— Башҡорттарҙың яңы бола ҡубарыуҙары, ысынлап та, мөмкинме?

— Әйтә алмайым. — Юлай серле генә аҫҡа ҡараны.

— Һеҙ ҡурҡмайһығыҙ бит бәйге уҙғарырға. Ниңә?

— Үҙ волосымда әлегә үҙем хужа, — тине лә Юлай йәнә уйға ҡалыбыраҡ торҙо. — Һеҙҙең шикелле абруйлы ғалимдар өсөн бәйге уҙғарыуға гөбөрнатор хәҙрәттәре лә ҡаршы булмаҫ ине, моғайын.

— Әлбиттә, — тине Рычков. — Рәхмәт һеҙгә!

Юлай менән Рычков әңгәмәһенә ҡыҫылмайынса, академик Лепёхин аттар сабышында еңеүселәрҙе дәртләндереп ҡысҡырышҡан кешеләрҙе иғтибар менән күҙәтте. Уларҙың күңеле көр, алсаҡ йөҙҙәре, гүйә, нур сәсеп балҡый. Ирҙәр ап-аҡ күлдәк кейгән. Байраҡтарының өҫтөндә салғыйы һырыулы еңһеҙ камзул, баштарында кейеҙ ҡалпаҡ йәки ҡупшы теүәтәй-кәпәс.

Ҡатын-ҡыҙ ирҙәргә ҡарағанда ла ҡупшыраҡ. Уларҙың кейемдәре мәрйен, көмөш тәңкәләр һәм башҡа әйберҙәр менән биҙәлгән. Төрлө төҫтәге биҙәүестәр, күҙ яуын алып, ялан сәскәләрен хәтерләтә.

«Башҡорттар, ысынлап та, ирек һөйөүсе халыҡ», — тип уйлап, академик тирә-яҡты байҡаны. Ана, йылға буйындағылар бәйгелә ҡатнашыусыларға аш-һыу әҙерләй. Тағандарға аҫылған ҡаҙандарҙа ит бешә, самауырҙар быу борҡота.

Лепёхин, ҡалҡыуыраҡ урынға күтәрелеп, кешеләрҙең баштары аша сәнғәт оҫталарының һөнәрен күҙәтте. Бер

урында таҡмаҡ әйтеп бейеү, икенсе ерҙә ҡурай тартыу, арыраҡ сәсәндәр әйтеше бара. Уларҙан бирерәк көрәшселәр бил һынаша...

Кешеләрҙе этә-төртә, Андрей яҡынлашты.

— Салауат ҡайҙа? — тип һораны унан Пётр Иванович.

— Ул тегендә, ярышта еңеүсе аттарҙы ҡабаттан ярыштырырға әҙерләнә. — Андрей быны әйткәс, ҡунаҡтар дәртләнде.

— Аттарҙың иң яҡшыларын ҡабат сабыштырыу — шәп!

— Уларҙы ниңә бында сабыштырмайҙар?

— Бында урын ҡыҫыҡ, — тине Андрей.

— Бәйгенең икенсе ергә күсерелеүен ниңә хәбәр итмәне икән Салауат?

— Был хаҡта хәбәр итергә мине ебәрҙе, — тине Андрей.

— Шөкөр, әйҙә, киттек!..

Беренсе ярышта еңгән аттарҙы сабыштырыу өсөн билдәләнгән яңы урында ла кешеләр шығырым тулы ине.

Ҡола атҡа атланған Салауат, ялан уртаһында торған һыбайлылар төркөмөнән айырылып, ҡунаҡтар эргәһенә килде.

— Йә, икенсе ярышты башлайыҡмы инде?

— Мөмкин, — тине Юлай. — Иншалла, хәйерле сәғәттә!

Ярышта ҡатнашасаҡ аттарҙың һыртында йоҡаҡ кейеҙҙән башҡа нәмә булмауына иғтибар итеп, Лепёхин ҡыҙыҡһынды:

— Аттар ниңә эйәрһеҙ?

— Сабыш аттарын эйәрләргә ярамай, — тине Юлай. — Эйәр, ҡойошҡан менән айыл ярҙамында тарттырып нисек кенә нығытһаң да, артҡа шылып, сабып барған атҡа ныҡ ҡамасаулай.

— Ә егеттең... осаһы ышҡылмаймы ни?

— Осаһы ышҡылмаһын өсөн, егеттең ыштаны төбөнә йомшаҡ кейеҙ тегелгән. Шул кейеҙ йәки үндек ярҙамында алға-артҡа шылып йөрөй.

— Минең өсөн был асыш, — тип Лепёхин ҡуйын дәфтәренә ниҙер сыймаҡланы.

Шул саҡ, иң шәп аттарҙы икенсегә сабыштырыу башланырын белгертеп, еҙ ҡыңғырау сыңлауы ишетелде.

Сафҡа теҙелеүсе һыбайлылар эргәһенә ҡола атҡа атланған Салауат яҡынлаша башлағас, Юлай тулҡынланды.

— Улыма яманлыҡ ҡылмаһалар ғына ярар ине.

— Салауатҡа ниндәй яманлыҡ ҡылыуҙары мөмкин? — тип һораны Андрей.

— Ярышта ҡатнашыусылар араһында көнсөл әҙәм булһа, Салауаттың аты һыртына аңғармаҫтан ҡамсы менән һуғып, йән-фарман елдергән ҡола аттың тиҙлеген кәметеүе ихтимал.

— Намыҫһыҙҙарға тейешле сараһы күрелмәйме ни?

— Эркелешеп сабышыусы күмәк һыбайлылар араһынан кем кемдең атына ҡамсы әләктереүен белеп буламы ни? Бәғзе берәүҙәрҙең йәнәш сапҡан аттың ҡорһағына тибеүе лә зарарлы. Ҡорһағына тибелгән ат ары саба алмай, ҡапыл хәлһеҙләнә...

Ҡыңғырау йәнә сыңланы.

Тигеҙ сафтағы аттар, тояҡтары аҫтынан саң-туҙан урғылтып, һәммәһе бер юлы алға ынтылды. Күҙ асып йомғансы, улар һөҙәк тау аръяғындағы ағастар араһына инеп юғалды.

Ҡунаҡтарҙы ҡымыҙ менән һыйлағандан һуң, күпмелер ваҡыт уҙғас, егерме саҡрым алыҫлыҡтағы ергә етеп, кире әйләнгән һыбайлылар туҙан өйөмө араһында төҫмөрләнде.

Улар тиҙ яҡынлашты.

Алда килгән Салауаттың ҡола аты күренгәс, тамашасылар алҡышлап ҡысҡырышты:

— Салауаттың аты — беренсе!

— Салауаттың атына — төп бәйге!

Улының атына күҙ тейеүенән ҡурҡып, Юлай сытырайҙы:

— Кемдең еңере әле билдәһеҙ. Иң һуңғы минутта бүтән берәйһе уҙып китеүе ихтимал.

Уны тыңламайынса, кешеләр һаман ғауғалашты:

— Салауат беренсе!

— Бүтәндәр нығ артта ҡалды!..

Эйе, Салауаттың аты беренселекте бирмәне.

— Аттарҙы икенсегә ярыштырғанда ла һеҙ еңдегеҙ. Әгәр ҙә ҡыҙ һонған таяҡ осондағы аҡ яулыҡты икенсе егет менән бер үк ваҡытта әләктерһәгеҙ, ярышта еңеүсе исемен нисек бүлешер инегеҙ?

— Ул саҡта беҙгә майҙанда көс һынашырға тура килер ине. Көрәштә еңгән кеше өҫтөн һанала, — тине Салауат.

**Академик Лепёхин йәнә бер нисә һорау бирҙе лә, Салауатҡа рәхмәт әйтеп, ишетеп белгән һәм күргәндәрен көндәлегенә яҙҙы: «...Йәштәрҙең көрәше бик шәп була. Улар рус көрәшселәре һымаҡ бер-береһенең яурынынан алмай, ә билдән тотоп көрәшә һәм ғәҙәттәге алымдарҙы ҡуллана... Яулыҡ ҡиммәтле түгел, әммә арзанлы был бүләкте кем булһа ла тиҙ генә ҡулдан ысҡындырырға теләмәй. Бының үҙ ҡағиҙәһе бар: көрәштә еңгән батыр өсөн бүләкте ауылдағы**

**иң һылыу ҡыҙ әҙерләй... Ярыш тамамланғас, халыҡ Аллаға табына, игендең уңыш биреүен һорай. Унан һуң һый-хөрмәт уҙғарыла, ә йәштәр көрәш, йомортҡа тәгәрәтеү кеүек төрлө уйын-көлкө ойоштора, тағанда бәүеләләр, бергәләп йырлайҙар, бейейҙәр...»**

Лепёхин башҡорт йәйләүе тураһында ла ентекләп яҙҙы: «Күсмә йәйләүҙәрҙә улар күбеһенсә ғаиләләргә бүленәләр, йәғни туған-тыумаса үҙҙәре бер йәйләүҙе тәшкил итә. Йәйләү өсөн һәр саҡ йылға йәки шишмә буйын һайлайҙар һәм, тирмәләре янына мал-тыуар яҡын килмәһен өсөн, уны кәртә менән уратып алалар. Иртәләрен малдарҙың һәр төрөн айырым ҡыуалар. Бейәләрҙе үҙҙәренә башҡа, һыйырҙарҙы үҙҙәренә башҡа күнәктәргә һауалар. Һыйыр һөтөнән май бешәләр, ҡорот киптереп ыҫлайҙар. Әсе ҡатыҡтан шыйыҡланған айранды ғәҙәттәге эсемлек урынына ҡулланалар. Бейә һөтөнән ҡымыҙ яһайҙар, бик тәмле эсемлек, был уларҙың төп аҙығын тәшкил итә...»

Ҡунаҡсыл, илгәҙәк, саф күңелле Шайтан-Көҙәй волосы башҡорттары эргәһенән рус ғалимдары китергә ашыҡманы.

Бер көндә, йәйләүҙәге ырыуҙаштарын йыйып, Юлай улар менән дуҫтарса кәңәшләште:

— Ағай-эне, аҡһаҡалдар! Беҙҙең хөрмәтле ҡунаҡтарыбыҙ, бигерәк тә Пётр Иванович Рычков белешебеҙҙең улы Андрей, әлегә оса алмаған ыласын балаларын эҙләп табыуҙы һәм уларҙы эйәләштереүҙә ярҙамлашыуыбыҙҙы һорай. Йә, ошо турала ни әйтерһегеҙ?

Барыһы исеменән беренсе булып Арыҫлан мулла һүҙ алды:

— Минеңсә, башҡорт өсөн ҡунаҡтың теләге — изге. Ояларында саҡта ыласын балаларын уларға тотоп бирәйек.

— Раҫ!

— Ҡунаҡтар теләгәнсә булһын.

Иртәгеһенә иртәнсәк Салауат ҡарамағындағы бер төркөм һыбайлы менән ҡунаҡтар юлға сыҡты.

Бөтә ерҙе ҡуйы томан томалаған. Шыйыҡланғандан-шыйыҡлана барып, томан таралғас, тирә-яҡ яҡтырҙы, ҡояш нурҙары ергә һибелде. Ләкин төшкә табан көн йәнә боҙолдо. Күк йөҙөн аҡһыл-һорғолт болоттар өйөмө ҡапланы, һәм ваҡ күҙле ямғыр һибәләй башланы. Текә яр ситендәге һуҡмаҡ буйлап барған Лепёхиндың аты, ҡолаҡтарын ҡарпайтып, бер туҡтауһыҙ хорһолданы һәм алан-йолан ҡаранды. Шуныһы ғәжәп: бүтәндәрҙең аты тып-тыныс ҡына бара.

— Мин йәйәү барам, — тип Лепёхин эйәрҙән төштө.

— Йәйәү оҙаҡ бара алмаҫһығыҙ, Иван Иванович, — тип Салауат аттарҙы алмаштырып менергә теләк белдерҙе.

Академик ҡаршы булманы. Ләкин Салауаттың атына менеп тә уңманы. Быныһы ла аландай башланы, ә Салауат менгән үҙенең аты тынысланды.

— Салауат, һинең атың... яманыраҡ! Ул мине ергә тәкмәстерәсәк, — тине Лепёхин, ҡото алынып.

— Бәлки, бәлә үҙегеҙҙәлер? — тип һораны Пётр Иванович Рычков.

— Миндә ниндәй бәлә булыуы мөмкин? — Лепёхин аптыраны. — Кире борolорға тура килер, ахырыһы.

Рычков уның менән ризалашманы.

— Туҡтағыҙ әле, Иван Иванович, тәүҙә аттарҙы ярһытҡан сәбәпте асыҡлау мөһим. Шунһыҙ артабан бара алмаясаҡһығыҙ, — тине лә ул Лепёхинға текләп ҡараны. — Һеҙҙең атығыҙ, бәлки, ямғыр яуғанын яратмайҙыр?

— Ямғырҙың ни ҡыҫылышы бар минең атта? Салауаттың аты ла тынғыһыҙ бит!

— Тимәк, бөтә сәбәп үҙегеҙҙә, Иван Иванович!

— Нисек... миндә? — Лепёхин аптыраны.

— Һеҙҙең аяғығыҙҙағы итек ниндәй йәнлек күненән тегелгән?

— Һыйыр тиреһенән булырға тейеш...

Рычков Лепёхиндың әйберҙәрен тикшерергә тотондо, һәм тиҙ арала мәсьәлә асыҡланды. Аттарҙың борсолоуына ҡыр сусҡаһы күненән тегеүле муҡса сәбәпсе булған икән. Ямғырға ебеп, шул тире күне ҡырағай йыртҡыс еҫен аңҡытҡан. Муҡса ҡоро әйбергә, төрлө тоҡсайға йәшерелгәс, академиктың аты тынысланды, һәм бүленгән юлды дауам итергә мөмкинлек тыуҙы.

Күҙ күреме етмәҫлек бейеклектәге томанға төрөнгән ҡапҡара ҡая таштар аҫтындағы уйһыулыҡта туҡталып, сәйәхәтселәр төн уҙғарырға әҙерләнде.

Аттарҙы йылға буйындағы туғайлыҡта тышаулағандан һуң, әрәмә ситенә ут яғып, баҡырсаларҙа сәй ҡайнаттылар. Тамаҡ туйҙырып алғас, берәүҙәр тауға менәсәк сүс арҡанды оҙайтты, ҡараңғы төшкәс тә сыраҡҡа төшөр өсөн, һалдауҙарын һапланы һәм сыраҡ ярҙы.

Андрей менән атаһы Пётр Иванович Салауаттың киләсәккә уй-хыялын һорашты, ә Лепёхин көндәҙгө тәьҫораттарын

көндәлегенә яҙҙы: «Ике яҡ ярҙағы ҡаялар нindәйҙер боронғо ҡалалар ҡалдығын хәтерләтә, ҡайһы берҙәре башняларға, бағаналарға оҡшай. Беҙ башҡорттарҙың текә тауҙар аша оҫта йөрөүҙәрен ҡәнәғәтләнеп күҙәттек. Башҡорт аттары теп-текә бейеклектән дә, хатта тар ғына һуҡмаҡ буйлап та төшә алалар».

Ҡараңғы төндә, сыраҡҡа төшөүселәр тотоп килтергән беләк буйы бәрҙеләрҙе өтөп ашағас, мәтрүшкәле сәй эсеп, сәйәхәтселәр йоҡларға ятты.

1. Ни өсөн Аҡ батша әмере буйынса башҡорт ырыуҙары рөхсәт менән генә аралашырға тейеш була?
2. Академик Лепёхин һәм Рычков ниндәй маҡсат менән башҡорттарға ҡунаҡҡа килә?
3. Ирҙәр, ҡатын-ҡыҙҙар бәйгегә нисек әҙерләнеп килә? Унда ниндәй милли уйындар уйнала? Бөгөнгө көндә улар һаҡланғанмы? Тексҭан шул урындарҙы табып уҡығыҙ һәм фекер алышығыҙ.
4. Бәйге ваҡытында Юлай старшинаның Салауат өсөн борсолоуын аңлатығыҙ.
5. Академик Лепёхин башҡорт халҡының ниндәй йолаларын көндәлегенә теркәй? Ни өсөн?
6. Ырыу аҡһаҡалдарының ыласынға һунарға сығыу алдынан кәңәш тотоуын аңлатығыҙ.

**81-се күнегеү.** I бүлектәге ҡалын хәрефтәр менән бирелгән өлөштө иғтибар менән уҡып сығығыҙ. Был өлөштә нимә тураһында һүҙ бара? Хәлдәрҙе билдәләгеҙ.

## II

Таң һарыһы беленә башлағанда, һөрән һалып ҡысҡырышҡан тауышҡа уянған Лепёхин, йоҡо аралаш бер ни аңламайынса, ҡото алынып һораны:

— Нимә булды? Айыу-фәләнме әллә?

Яуап ҡайтарыусы булмағас, ул урынынан һикереп торҙо. Эргәһендә бер кем дә юҡ икәнлеген күргәс аптыраны. Ҡайҙа кешеләр?

Лепёхин, ҡурҡышынан ҡалтырана-ҡалтырана, кемдәрҙеңдер ҡысҡырышыуын, таштар шаҡылдатыуын, тимер-томор доңғорлатыуын һағайып тыңланы. Ҡая ташлы тау аҫтындағы һыбайлылар араһында йөрөгән Рычковты күргәс, ул ҡысҡырып ебәрҙе:

— Пётр Иванович, ниңә аҡырышалар? Берәй йыртҡыс бармы әллә?

— Барыһы имен, борсолорлоҡ нәмә юҡ, — тип йылмайып, Рычков Лепёхин эргәһенә килде. — Башҡорттарҙың ҡысҡырышыуы ҡайһы ҡаяла ыласын ояһы барлығын асыҡлау өсөн кәрәк. — Ул, һүҙенән бүленеп, яҡындағы ҡая ташҡа күрһәтте.

— Ана, инә ыласын ояһынан осто! Был өсөнсө ыласын ояһы, Иван Иванович!

— Ниңә мине уятманығыҙ? — Лепёхин тынысланды.

— Салауат уятҡайны, һеҙ торорға теләмәнегеҙ.

— Уй, шайтан алғыры, ҡыҙыҡлы тамашанан мәхрүм булғанмын, — тип Лепёхин ҡул һелтәне. — Салауат ниңә күренмәй?

— Салауат ҡош аулаусылар эргәһендә.

— Улар янында ни эшләй?

— Ҡаялы тауға менерҙәй һөҙәк урынды асыҡларға ниәтләнәләрҙер, — тине Рычков.

Оҙаҡламай Салауат менән ҡош аулаусылар яҡынлашты.

— Хәйерле иртә, Иван Иванович, — тип Лепёхин менән иҫәнләште лә Салауат эйәрҙән төштө.

Иртәнге сәйҙе эскәс, ҡош аулаясаҡ егеттәр тауға менеп үҙҙәренең табышын алырға әҙерләнде. Быңдай табыш уларға еңел бирелмәйәсәк, сөнки ыласындар оя ҡороу өсөн иң текә ҡая таштарҙы һайлаған. Уларҙың оялары утыҙар-иллешәр сажин түбәндәге ҡая таш уртаһындағы иң хәүефле урында ҡоролған.

Әҙерлек эштәре тамамланыу менән, һыбайлы ир-егеттәрҙе ике төркөмгә бүлде Салауат. Бер төркөмдө ҡая ташлы тау аҫтында ҡалдырып, икенсеһен үҙе менән тауға алып менергә тигән теләк белдерҙе.

— Беҙҙе ҡайһы төркөмгә тәғәйенләйһегеҙ? — тип белеште Рычков.

— Үҙегеҙҙең ихтыярығыҙҙа, Пётр Иванович, — тине лә, бер аҙ уйға ҡалыбыраҡ торғандан һуң, Салауат өҫтәне: — Бында ҡалһағыҙ, минеңсә, яйлыраҡ булыр.

— Ниңә улай?

— Ҡаяға үрмәләү һәм аҫҡа төшөү бик хәүефле...

— Яҡшы, беҙ бындағы төркөм менән ҡалабыҙ, — тине Рычков.

Уның менән ризалашмайынса, Лепёхин ҡул һелтәне.

— Һеҙ теләһә ни эшләгеҙ, Пётр Иванович, мин, нисек кенә ҡыйын булмаһын, юғарыға менеп, һәммәһен үҙ күҙем менән күрергә тейешмен!

— Мин дә һеҙҙән ҡалмайым, — тине Андрей йөрәкһеп.

Пётр Иванович улына бармаҡ яныны:

— Андрюш, әсәйеңдең өгөт-нәсихәтен онотма. Ул һиңә минән бер аҙым да айырылмаҫҡа ҡушты.

— Эйе, һиңә бында ҡалыу хәйерле, — тип Салауат та кәңәш иткәс, Андрей артыҡ ныҡышманы.

Салауат төркөмө ҡуҙғалып китте. Текә тауҙың һөҙәгерәк урынына еткәс, йәйәүлеләр һалған һуҡмаҡ буйлап улар юғарыға ынтылды.

Көслө ел-дауылдар тамырҙарынан йолҡоп ауҙарған йыуан-йыуан ағастар араһынан үтеп, түмәләскә сыҡтылар. Сынаяҡ аҫтындай ғына булып күренгән бәләкәй ялан төрлө төҫтәге сәскәләргә күмелгән. Артабан өй бейеклегендәге таштар араһынан барырға тура килде. Ҡая таштарҙан ватылып, тирә-яҡҡа һибелгән һуйырташтар дағаларға һуғылып шаҡылдай. Шыр яланғас текә таштар араһынан һалынған һуҡмаҡ буйлап юғарыға күтәрелгән саҡта, кешеләргә аттарҙың ҡойроғона тотоноп барырға тура килде.

«Бүтән аттар бындай урындан бара алмаҫ ине», — тип Лепёхин башҡорт аттарының сыҙамлығына хайран ҡалды.

Төш мәле етеүгә, тау һыртына күтәрелделәр.

Аҫҡа ҡарауы ҡот осҡос ҡурҡыныс тойолдо Лепёхинға. Күҙ күреме киңлегендәге иркен ялан күкһелләнеп ята. Уны ҡап уртаға бүлеп аҡҡан тау йылғаһы төҫмөрләнә. Текә тауҙың ҡап урта өлөшө тәңгәлендәге асыҡ һауала ике бөркөт, гүйә, аҫылынып тора.

— Аҫҡа ҡарамағыҙ, Иван Иванович, башығыҙ әйләнер, — тип иҫкәртте Салауат.

Үҙе лә башы әйләнеүен һиҙеп, Лепёхин артҡа тайпылды.

— Тамаҡ кипте. Бында шишмә юҡмы икән?

— Бар, хәҙер шунда барабыҙ, — тине Салауат.

Ҡап-ҡара ҡая таш аҫтынан урғылып аҡҡан шишмә янында туҡталып, сәйәхәтселәр танһыҡтарын ҡандырғансы һыу эсте, ҡорот, ҡаҙылыҡ менән бер аҙ тамаҡ ялғаны.

Салауат беренсе булып урынынан торҙо.

— Йә, әҙ-мәҙ ял итеп алдығыҙмы инде? — тип һораны ла сүс арҡандарҙы бер-береһенә ялғарға ҡушты.

Оҙайтылған арҡандың элмәк осо текә ҡая таш уртаһындағы ыласын ояһы тәңгәленә саҡлы төшөрөлгәс, шул уҡ бауға тотоноп, аяҡтарын бер таштан икенсеһенең ситенә алмаш-тилмәш баҫып, Салауат аҫҡа төшә башланы.

Тау һыртындағы ағасҡа ҡуш ҡуллап тотонған академик Лепёхин, ҡурҡыу ҡатыш аптырау ғәләмәте менән сытырайып, Салауаттың һәр хәрәкәтен көсөргәнешлек менән күҙәтте. «Ҡош балаһын тоторға ризалашып хаталандым, ахырыһы! Ташҡа яңылыш баҫһа йәки ҡулы ысҡынһа, Салауат харап буласаҡ! Нисәмә башҡорттоң, ыласын балаһын тотҡанда, ҡаянан осоп үлеүен йәки ныҡ зәғифләнеүен белә тороп, уны туҡтатмауым аҡылһыҙлыҡ. Салауат бәлә-ҡазаға тарыһа, ғүмерем буйы ғазап сигәсәкмен», — тип ул үҙен үҙе яфаланы.

Лепёхиндың сыҙар әмәле ҡалманы. Ҡуш ҡуллап йәбешкән ағас менән аяғы аҫтындағы таш аҫҡа шыуышҡан һымаҡ тойолдо, академик артҡа ташланды.

— Бүтән ҡарай алмайым. Миңә ҡурҡыныс, — тип бышылданы ул.

— Тау ситенә яҡын бармағыҙ. — Лепёхинды көс-хәлгә тынысландырған башҡорт егеттәре Салауаттың нимә эшләүе тураһында әйтеп торорға булдылар.

— Яҡшы, мин бер урында тик кенә ултырам, — тип ризалашты академик. — Салауат әле ҡайһы тирәлә?

— Ҡош ояһы тәңгәленә етте, — тине Кинйә. — Арҡан осондағы элмәккә һыңар аяғы менән баҫып, үҙен арҡанға ҡуша бәйләне.

Егеттәр берен-бере бүлдереп, шаулашты:

— Инә ыласын ояһынан осоп сыҡты!

— Ыласын ояһына йәнәшә бөркөт ояһы ла бар икән!

— Оя тирәһендә уралған ике бөркөттөң береһе Салауатҡа һөжүм итергә самалай!

— Бөркөттәргә тоҫҡап атығыҙ, — тине лә Кинйә керешкә һалған уғын ысҡындырҙы. Уның уғы, бөркөттәргә зыян килтермәй, яҙа осто.

Кинйәнең иптәштәре менән бер үк ваҡытта аҫта тороусы егеттәр ҙә, һөрән һалып ҡысҡырыша-ҡысҡырыша, бөркөттәргә уҡ яуҙырырға тотондо.

— Әһә, бер бөркөт аҫҡа тәкмәсте, — тип ҡысҡырҙы кемдер.

— Икенсеһе лә...

Текә яр ситенә ҡабат барырға баҙнатсылығы етмәгән Лепёхин күкрәк тултырып иркен һуланы.

— Салауат... нисек унда?

— Яурыны аша аҫылыныулы тоҡсайына ике ыласын балаһын һалды ла әкренләп-әкренләп бөркөт ояһына ыңғайлай, — тине Кинйә.

— Бөркөттәр бүтән ҡамасауламаймы?

— Юҡ. Уларҙың береһе үлде, яраланғанын аҫтағылар баҫтырып тотто.

Салауат яҙмышы өсөн борсолған Лепёхинға бер аҙ йән тыныслығы инде.

— Бөркөт ояһынан алыҫмы Салауат?

Бөркөт балаларын да Салауат тоғона һалыуын Кинйә әйткәс, академик шатланды:

— Молодец! Батыр икәнһең!

Егеттәр лабыр-лобор килде:

— Бер бөркөт балаһы уның ҡулынан ысҡынды!

— Эй әттәгенәһе!

— Үкенмәгеҙ! Ул бөркөт балаһы ныҡлап оса алмай, аҫтағылар ҡулына эләкте.

— Бала булһа ла, ҡанаттарын елпендереп тартҡылаша, кешеләрҙең ҡулын суҡырға маташҡан була!..

Эше тамамланғас, юғарынан төшөрөлгән арҡанды үҙе баҫып торған элмәкле арҡанға ялғап оҙатты ла, Салауат аҫҡа төшә башланы.

1. Ыласын балаларына һунар нисек ойошторола?
2. Тау башынан асылған тәбиғәт күренеше һүрәтләнгән урынды табып уҡығыҙ һәм күҙ алдына килтерегеҙ, һүрәтен төшөрөгөҙ.

## III

Ҡош балаларын тотоу менән мауығып, ҡараңғы яҡынлашыуын һиҙмәй ҙә ҡалдылар тау башындағылар. Зәңгәр монарҙан асылған түбә ҡараңғылана башлағас ҡына, улар өтәләнде.

— Һуҙылып-мыҙылып йөрөһәк, эштәр мөшкөл!

— Эйе, ныҡ ҡараңғылағанға саҡлы, текә тауҙан төшөп ҡалырға кәрәк!

Башҡорттарҙың шул тиклем борсолоуына Лепёхин аптыраны.

— Беҙгә ниңә ҡабаланырға? Ҡараңғы төндө тау башында уҙғарырға ярамаймы ни?

— Ярамай шул, — тип яуап ҡайтарҙы Кинйә.

— Ниңә?

— Хатта йәйҙәрен был тау башында төн уҙғарыу мөмкин түгел, һыуыҡ, бик тә һыуыҡ була.

Йәһәтерәк аҫҡа төшөргә кәрәк ине. Ләкин беленер-беленмәҫ ятҡан һуҡмаҡ ҡайҙа юғалды? Ҡараңғы ҡуйырған һайын, күҙ алды ҡамашты, ҡурҡыныс та артҡандан-арта барҙы. Берәй нәмәгә аяғың эләгеп йығылдыңмы — бөттөң!

Еңелсә кейенгән кешеләр өшөй башланы. Берәй ерҙә туҡталып, таң атыуын көтөргә мөмкинлек юҡ. Нисек тә булһа һуҡмаҡты табырға һәм аҫҡа төшөүҙе дауам итергә кәрәк.

Туҙ яндырып, тирә-яҡты ҡарауҙың файҙаһы теймәне — һуҡмаҡ эҙһеҙ юғалды.

— Хәҙер ни эшләйбеҙ? Һуҡыр кешеләй таш араһын һәрмәкләп барыуҙан файҙа булырмы? — Лепёхиндың йөрәген ҡурҡыу алды һәм Рычков менән аҫта ҡалмауына беренсе тапҡыр үкенде.

— Бындай шарттарҙа үҙ яҙмышыбыҙҙы аттарға тапшырыуҙан башҡа әмәл юҡ. — Кинйә, һәммәһен аттар ыңғайына ҡуйырға, тигән фекер белдерҙе.

Хужаһыҙ ҡалған Салауаттың эйәрле аты аҫҡа беренсе булып ыңғайланы. Бүтән аттар уның артынан эйәрҙе.

— Аттарҙан беҙ ҙә ҡалмайыҡ, Иван Иванович, — тип Кинйә көс-хәлгә атлаған академикка ярҙамлашты.

— Бүтәндәр нисек? Ҡайҙа һуң улар?

— Улар ҙа аттарға эйәрә килә.

Күҙгә бүрәнә төртһәң дә бер ни күренмәҫлек ҡараңғыла эре таштар, тамыр-томор араһынан барған Лепёхин үҙен үтә мөшкөл тойҙо. Ана-бына һөрөнөп йығылыр ҙа ҡараңғы бушлыҡҡа осор йәки бәрелеп үлер һымаҡ хис итте үҙен.

— Ҡурҡмағыҙ, Иван Иванович, аттар ышаныслы бара, — тине Кинйә.

Алдағы егеттәрҙән кемдер боролоп ҡысҡырҙы:

— Беҙ юғалтҡан һуҡмаҡ табылды!

Академик шөкөр ҡылып суҡынды. Бүтәндәр ҙә еңелерәк тын алды.

Эйе, аттар өмөттө аҡланы. Уларҙың һиҙгерлеге арҡаһында тауҙың иң ҡурҡыныс текә өлөшөн имен-аман уҙҙылар. Аяҡ аҫтында үлән ҡыштырлауы беленгәс, барыһы ла батырланып аттарына атланды. Үҙ ыңғайына ҡуйылған аттарҙың дөм ҡараңғыла ҡайҙа алып барыуын бер кем дә белмәне. Ер өҫтө бер аҙ тигеҙләнеп, тау-ташлы урындар кәмегәс, кешеләр бөтөнләй тынысланды.

— Аллаға шөкөр, бәләнән ҡотолдоҡ, — тип бышылданы Лепёхин һәм, бер тиҙлектә барған аты хәрәкәтләнеүенә ойоп,

күҙҙәрен йомдо. Эйәрҙән йығылмай, күпме йоҡомһорап ултырғанын ул һиҙмәне. Аттар бер-бер артлы кешнәгәс кенә, ҡапыл йөрәкһенеп, күҙҙәрен асты.

— Беҙ ҡайҙа килеп сыҡтыҡ? — тип һораны һәм, ҡыҙыу итеп яғылған ут эргәһендә ултырыусылар араһындағы Рычковты күргәс, ҡыуанысынан ҡысҡырып ебәрҙе:

— Үҙебеҙҙең лагерь ҙа баһа!

— Иҫән-һау әйләнеп ҡайтыуың менән, Иван Иванович, — тине Рычков, яғымлы йылмайып.

Бүтәндәр ҙә ғауғалашып тау һыртынан төшөүселәрҙе тәбрикләне.

— Һеҙҙе күреүгә шөкөрбөҙ!

— Текә тауҙы ҡараңғыла нисек төшөрһөгөҙ тип ҡурҡҡайныҡ!

Кешеләрҙең ҡысҡырып һөйләшеүенә иғтибар итмәйенсә, Кинйә менән Андрей эргәһендә торған Салауатты Лепёхин дуҫтарса ҡосаҡланы.

— Батырҙарҙың батыры бит һеҙ!..

— Ҡош балаһын тотоу ниндәй батырлыҡ булһын, ти. Быны беҙҙә һәр егет булдыра, — тине тегеһе.

Ҡошсолар оҙаҡ йоҡламаны. Таң һарыһы беленә башлағанда тороп, иртәнге сәйҙе эскәс, Салауат ыласын сепейҙәрен Рычковҡа, бөркөт балаларының береһен Лепёхинға, икенсеһен Кинйә дуҫына бүләк итте.

— Оло бөркөттө ни эшләтәбеҙ? — тип һораны Кинйә.

— Уныһын үҙемә ҡалдырам. Уҡтан йәрәхәтләнгән ҡанатын дауалайым да иреккә ебәрәм.

— Уны дауалауҙың файҙаһы тейерме икән? — тип һораны академик Рычков. — Ырымбурҙа ойоштороласаҡ музейға ҡарасҡы өсөн һәйбәт булыр ине.

Егеттәр быны хупламаны.

— Инә бөркөт тәһә — үлтереүе йәл!

— Уны ебәрәйек, балаларын алғас та еткән.

— Тәҡдире етмәһә, яраһы былай ҙа төҙәлер әле...

Салауат, ырыуҙаштарының теләгенә буйһоноп, инә бөркөттөң аяҡтарын систереп, иреккә ебәртте, һыңар ҡанатын һәлендергән бөркөт йәһәтерәк шырлыҡҡа сумды. Уны күҙ яҙҙырмай ҡарап ҡалған Лепёхин һоҡланды:

— Көслө ҡош! Суҡышы менән тырнаҡтары хәтәр!

Академикты бүтәндәр ҙә йөпләне.

— Ул тырнаҡтарға эләкһәң, ысҡынырмын тимә!

— Кәзә-һарыҡты ояһына нисек ташыуын күрһәгеҙ ине!

— Кәзә-һарыҡ түгел, бала-сағаны ла аямай улар.

— Ундай йыртҡысты, бәлки, ебәрмәҫкә кәрәк булғандыр, — тине Андрей.

— Бер ебәргәс, әйҙә, үҙ йүнен үҙе күрһен инде, — тип Салауат ҡул һелтәне, ә үҙенең күҙ алдында мәйет суҡыған бөркөттәр тамшана һымаҡ тойолдо.

Йәйләүгә ҡайтыу менән, Юлай ҡунаҡтар оҙатыу хөрмәтенә мәжлес уҙғарҙы.

Ҡымыҙ, милли ашамлыҡтар менән һыйланып, хуш еҫле йүкә балы менән тирләп-бешеп сәй эскәндән һуң, ғәҙәттәгесә, ҡурай тарттылар, ҡумыҙ сирттеләр, йырлап-бейеп күңел астылар.

Старшина Юлай ҙа, дәртләнеп китеп, «Урал»ды йырланы һәм Сәйет, Күсем, Алдар, Батырша кеүек батырҙарҙы иҫкә алды.

Старшина һөйләгәндәрҙе сәйәхәт көндәлегенә яҙа барған Лепёхин:

— Шәп, бик тә шәп! — тип өҙлөкһөҙ баш ҡаҡты.

Рычковҡа, киреһенсә, Юлай һөйләгәндәр оҡшаманы.

«Ҡараһаҡал менән Батырша исемдәрен телгә алыу тыйылған икәнлекте оноттомо икән ни Юлай? Бәлки, юрамал ҡыланалыр?..»

Рычковтың уй-фекерен һиҙенгән һымаҡ, Юлай ҡапыл шымды.

— Ниңә юҡ-барҙы ләпелдәйем әле? Йырсыны тыңлайыҡ, — тип оло ғына йәштәге ҡартҡа күҙ ҡарашын һирпте: — Йә, ағай, ҡунаҡтарға һөнәреңде күрһәт!

Шуны ғына көткәндәй, ҡартлас тамаҡ төбө менән оҙон көйҙө һуҙҙы, ул арала әкрен генә сыңрап, ҡурай ҙа ҡушылды.

Алыҫтарҙан, ай, күренә
Ирәндеккәй тауының аҡ ташы...

**Йырсыны иғтибар менән тыңлаған академик Лепёхин үҙенең тәьҫораттарын ҡуйын дәфтәренә яҙа барҙы: «Йырсы уҙамандарҙың тормошо тураһында йырлап ҡына ҡалманы, ә тауышы һәм кәүҙәһе менән уларҙың бөтә хәрәкәттәрен дә, нисек яуҙа алышыуҙарын, үҙ иптәштәрен нисек өйрәтеүҙәрен, дошманды ҡыйратыуҙарын, яраланып хәлһеҙләнеүҙәрен, нисек итеп йән биреүҙәрен ишаралап күрһәтте, йыйылыусыларҙың күбеһе илашып ултырҙы. Әммә ҡарт, ҡапыл**

**теремеклəнеп, «Ҡара юрға»ны йырлап ебəргəс, ҡайғы-хəсрəттəре таралып, барыһы ла ҡабаттан күңелләнеп китте. Был уларҙа иң күңелле йыр булып йөрөй, быны йырлағанда, ҡарт аяҡтарын бейетеп ултырҙы, шунан инде башҡортса тəн хəрəкəттəре менəн йырҙың йөкмəткеһен сағылдырырға тырышты.**

**Бейешеп алғандан һуң, икенсе уйын башланды. Өс-дүрт кеше ауыҙ ҡыуышлығы һəм тамаҡ төбө менəн төрлө йəнлек һəм ҡош тауыштары сығарҙы, шул тиклем оҫта башҡарҙылар — уларҙың тауышын ысын ҡоштоҡонан айырыуы бик ҡыйын.**

**Табындың аҙағы һуғыш күнекмəлəренəн тора. Уҡ атыш ойошторолдо. Уны сəпкə лə тейҙерəлəр, билдəлəгəн аралыҡтан тайшанып ҡотолорға өйрəнгəн яугир башҡортҡа... тоҫҡап та аталар. Берəүҙəре ерҙəн тороп ата, уғата сос һəм мəргəндəре, йəн-фарман сабып барышлай, ат өҫтөнəн тейҙерə. Бындай ярышта фəҡəт ирҙəр генə ҡатнаша, ə ҡатын-ҡыҙға уйын-көлкө табындарында, айырыуса ят кешелəр барҙа, ҡатнаширға рөхсəт юҡ, улар ир-егеттəрҙең батырлыҡтарын ситтəн генə күҙəтə. Табында ҡатнашыусы башҡорттар шаулашып таралышһалар ҙа, һуңынан уларҙың үҙ-ара ыҙғышҡанын һис ишетмəҫһең...»**

Мəжлестə тауыш-тын баҫыла төшкəс, Пётр Иванович Рычков урынынан торҙо.

— Беҙгə ҡуҙғалырға ваҡыттыр инде.

— Эйе, ваҡыт, — тип Лепёхин эйəк ҡаҡты. — Рəхмəт!

Башҡорттар менəн дуҫтарса хушлашҡас, ҡунаҡтар эйəрле аттарына атланды һəм ҡайтыу юлына ҡуҙғалдылар.

1. Ни өсөн һунарсылар тауҙан ҡараңғы төшмəҫ борон төшөп ҡалырға ашығалар?
2. Тауҙан төшкəндə килеп тыуған ҡурҡыныс мəлдə аттар ниндəй ярҙам күрһəтə?
3. Юлай Аҙналин рус ғалимдарын ниндəй хөрмəт күрһəтеп оҙата?
4. Текстан милли аштарҙы, уйындарҙы яҙып алығыҙ. Улар бөгөнгө көндə лə һаҡланғанмы? Фекер алышығыҙ.
5. «Салауат Юлаев образы əҙəбиəттə, фольклорҙа, сəнғəттə» тигəн темаға əҙəби кисə ойоштороғоҙ.

**82-се күнегеү.** Эҫəрҙең III бүлегендəге ҡалын хəрефтəр менəн бирелгəн өлөшөндə рəүештəрҙе табығыҙ. Уларҙың ниндəй һөйлəм киҫəге булып килеүен билдəлəгеҙ.

## ҺӨЙЛӘМ КИҪӘКТӘРЕН БЕР-БЕРЕҺЕНӘН АЙЫРЫУ

**Аныҡлаусы** һәр ваҡыт исемгә йә исем урынында килгән һүҙгә ҡарай.

**Тултырыусы** ҡылымға бәйләнеп килә.

**Хәл** ҡылым аша белдерелгән эш-хәрәкәттең рәүешен күрһәтә.

Аныҡлаусыны дөрөҫ билдәләү өсөн, уның эйәртеүсе һүҙенең предметты белдереүсе һүҙ — исем (бик һирәк кенә исемләшкән сифат, һан, алмаш) икәнен дөрөҫ асыҡлау кәрәк. Ул һүҙ *кем?* йәки *нимә?* һорауҙарына яуап бирергә тейеш. Сағыштырығыҙ:

*Минең алмаш кейемем юҡ ине. Әсәйем тимер ҡоршаулы һандыҡтан атайымдан ҡалған ҙур салбар менән күлдәк килтереп сығарҙы.*

Тултырыусы менән хәл икеһе лә ҡылымға бәйләнә. Уларҙы һорау биреү юлы менән айырып була. Тултырыусының һорауҙарына *кем(де)?* менән *нимә(не)?* һүҙҙәре инә. Ә хәлдең һорауҙары рәүеш һорауҙары менән тап килә:

1. *Беҙ бөгөн атыбыҙҙы Иҙристәргә биреп торҙоҡ* (*кемдәргә?* — тултырыусы). *Әле мин Иҙристәргә китеп барам* (*ҡайҙа?* — хәл).

2. *Мин был китапты апайымдан алдым* (*кемдән?* — тултырыусы). *Мин был китапты магазиндан алдым* (*ҡайҙан?* — хәл).

**83-сө күнегеү.** Һөйләмдәге эйәрсән киҫәктәрҙе билдәләп, һорауҙар ҡуйығыҙ.

Немец халҡының бөйөк шағиры Иоганн Вольфганг Гётеның секретары һәм иң яҡын иптәше Иоганн Петер Эккерман үҙенең «Разговоры с Гёте» тигән хәтирәләр китабында дуҫының бер башҡорт полковнигы менән осрашыуы тураһында яҙып ҡалдырған. Ул көндө Гёте үҙенең имениеһындағы эш бүлмәһендә, асыҡ тәҙрәгә һөйәлеп, уйланып ултырған була. Көтмәгәндә ишек асылып китә, һәм ҡораллы, ғәжәйеп кейемле, ике метр тирәһе кәүҙәле бер баһадир килеп керә. Ул Гёте янына барып баҫа ла: «Мин шиғырҙарығыҙҙы яратып уҡыйым. Талантығыҙ алдында баш эйәм. Һеҙгә башҡорт халҡы исеменән ҡоралымды бүләк итергә рөхсәт итегеҙ!» — тип матур йәйә менән уҡтар тултырылған һаҙаҡ бирә. Гёте,

йәйәне ҡулына алып, керешен тартып ҡарай, тик ул тартылмай. Полковник йәйәне ала ла, уҡ ҡуйып, тәҙрә аша атып ебәрә. Ғәжәпләнеүҙән Гёте креслоһына ултыра төшә...

**84-се күнегеү.** Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәрен бер-береһенән нисек айырырға тигән белешмә төҙөгөҙ.

## ХӘТЕР ҺАНДЫҒЫНА...

Аманатҡа хыянат итмә.

* * *

Аттың яҡшыһы алға сыға, егеттең яҡшыһы данға сыға.

* * *

Ат дағаһыҙ булмаҫ, батыр яраһыҙ булмаҫ.

* * *

Батыр күрке дан менән.

* * *

Батыр тыуһа – ил бәхете, ямғыр яуһа – ер бәхете.

* * *

Батыр үҙ халҡын яҡлай.

# ҠЫШ

*Шәйехзада БАБИЧ*

## ҠЫШҠЫ ЮЛДА

Их, рәхәт шыуа санам, һәм юрта ат алҡын ғына,
Яҡ-яғымда киң ялан йоҡлап ята тып-тын ғына.

Алдымда аҡ ҡар йәйелгән, ялтырап, ап-аҡ булып,
Ынйы-мәрйендәр сәселгән өҫтөнә, ваҡ-ваҡ булып.

Юл ситендә ҡар киҫәктәре торалар теҙелешеп,
Барыһы ла эйелеп ҡалалар, хуш, иҫән бул, тиешеп.

Аҡ ҡояш нурептәрен һуҙған да ергә нур һибә,
Нурлы ептәрҙән ағып, моңло күңелгә йыр килә.

Йырлай башлайым, шунда һалҡын ел иҫеп йырҙы киҫә,
Ай уҫал ел ҡырҙағы бар йәмде, бар моңдо киҫә.

1. Шиғырҙа ҡышҡы тәбиғәт нисек һүрәтләнгән?
2. Ҡышҡы тәбиғәтте тасуирлау өсөн ҡулланылған һүрәтләү саралары текстан яҙып алығыҙ, аңлатығыҙ, рус теленә тәржемә итегеҙ.
3. Ҡышҡы тәбиғәт, ҡыш тураһында һүрәттәр, картиналар ҡарағыҙ һәм тасуирлау тибындағы инша яҙығыҙ.

**85-се күнегеү.** Үрҙәге шиғырҙа күсмә мәғәнәлә ҡулланылған һүҙҙәрҙе табығыҙ. Уларҙың тура мәғәнәләрен билдәләгеҙ.



## Булат РАФИҠОВ

**(1934 — 1997)**

Булат Заһретдин улы Рафиҡов 1934 йылдың 4 авгусында Башҡортостандың Мәләүез районы Дәүләткол ауылында тыуа.

Булат Рафиҡов боронғо тарих менән айырыуса ҡыҙыҡһына. Халҡыбыҙҙың үткәндәре хаҡында йыйылған мәғлүмәттәргә таянып, XVIII быуат ваҡиғаларына арналған «Ҡараһаҡал» романын яҙа. Уның тағы ла «Сал ҡылған», «Ахырызаман көткәндә», «Көнгәк», «Үлсәү йондоҙлоғо» романдары, «Тауҙарҙа ҡар иртә ята», «Ғәрәп», «Өйһөҙ ҡалған тауыштар», «Эйәрләнгән ат», «Тәңреләр һәм төркиҙәр» повестары, «Лоулла», «Йыһан азаматтары», «Һуңғы ахмаҡлыҡ» фантастик повестары һәм бик күп шиғырҙары һәм поэмалары билдәле.

Булат Рафиҡовҡа 1990 йылда «Ҡараһаҡал» романы өсөн Башҡортостандың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы бирелә.

### БҮРЕЛӘР

#### I

Ошо ваҡиғаның башын мин йылдан-йыл артабанyраҡ күсерәм, ә ул үҙе һаман яҡынырaҡ була бара. Тәүҙә хәтерем, тау баштары ҡарҙан асыла башлағанда ғына, ала һәүкәшебеҙ күтәрткән көнгә алып ҡайта ине. Тораraҡ, ни өсөн күтәртте һуң күҙ терәп йәшәгән малҡайығыҙ, тип һорауҙары мөмкинлеген уйлап, эстән генә: «Йортто ҡараусы юҡлыҡтан!» — тигән яуап әҙерләп ҡуйҙым да атайым менән ағайымдың бер йыл эсендә бер-бер артлы донъянан китеүҙәрен иҫкә төшөрҙөм. Шуның артынса уҡ тағы бер көн күҙ алдында йәнләнде — апайҙарым, ҡустым менән картуф баҡсаһында йәшенеп ятҡан көн. Һеңлебеҙ бик бәләкәй ине әле, өйҙә ҡалды. Беҙ боҫоп ятабыҙ, ә ауыл өҫтөнән төркөм-төркөм самолёттар үтә. Ҡояш сығышынан — байышына. Замана балалары инек шул, тимер ҡоштарҙың нимә йөрөткәнен белә инек. Кәнсәләргә киткән

атайыбыҙҙың ҡайтҡанын күреп кенә, картуф araһынан сыҡтыҡ: «Һуғыш башланған, балалар!..»

Мин һөйләргә йыйынған ваҡиғаның сәбәбе түбәндәгесә күҙаллана хәҙер. Беҙҙең картуф араһында боҫоп ятыуыбыҙ. Почта килтергән «ҡара» хаттар. Әсәйебеҙҙең ҡайғынан ауырыуға тарыуы. Оҙаҡлаған яҙ. Ала һыйырҙың ятҡан еренән тора алмауы. Уны һауырға сыҡҡан апайымдың сәрелдәп ҡысҡырыуы һаман ҡолаҡ төбөмдә.

Уртансы апайым ине шулай ҡысҡырыусы. Ә оло апайым Красноусолда ФЗО-ла бөксәңләй ине ул саҡта.

Ошондай бәләнең нәҡ беҙгә төбәп килеүенә ышанманым да шикелле. Бына-бына кемдер яныма килер ҙә: «Баҫлыҡҡанһың, уян. Матур яҙғы көндә шулай оҙаҡ йоҡламаҫ кеше!» — тип өндәшер кеүек ине. Мин уны оҙон кәүҙәле, киң яурынлы баһадир рәүешендә күҙ алдына килтерергә лә өлгөргәйнем инде. Өҫтөнә хатта оҙон шинель менән будёновка кейҙерҙем. Танау аҫтына ҡалын ҡара мыйыҡ һыҙғас, баһадирым маршал Будённыйға оҡшаны ла ҡуйҙы.

Тик Будённый урынына көрт күмгән ситән аша күршебеҙ Исмәғил бабай килеп төштө. Ә ул шул тиклем тәпәш кәүҙәле, үҙҙәренең өңгә оҡшаш ишегенән дә эйелмәй үтә ала. Күрше рус ауылдарына аҡ балсыҡ ташып һатыу менән тамаҡ туйҙыра. Көн дә көрәк, балта тотҡанлыҡтандыр, ахырыһы, бармаҡтары ишек элгестәрен хәтерләтә. Яңаҡтары бер-береһенә ышҡылып тороуға ҡарамаҫтан, тауышы һис тә шығырлап сыҡмай, ә яңғыҙ йөрөүсе үгеҙ мөңгөрләүенә тартым. Көр генә.

— Ҡана, килен, арҡан-фәләнең бармы? — тип өндәште Исмәғил бабай әсәйемә. Ауырыуын онотоп, тәртешкәгә таянып, беҙҙең эргәгә сыҡҡан әсәйем миңә соланда ятҡан бауҙарҙы тиҙ генә килтерергә ҡушты. Күршебеҙ уларҙы ялғай-ялғай ике арҡан ишараһы яһаны. Байтаҡ маташҡандан һуң, хәлдән тайыу сигенә етеп, һыйырҙы ҡорһағынан урҙаға аҫып ҡуйҙыҡ. Быҙауыбыҙ ярҙамлашты. Уны сығарып күрһәткәс, инәһе аяҡтарына баҫырға үҙе көсәнә башланы. Беҙ арҡандарға сат йәбештек, Исмәғил бабай уларҙың остарын бәйләй һалды.

— Еленен тартҡыламай торорғоҙ инде әлегә, — тип кәңәш бирҙе ул. — Үлән еҫкәтергә кәрәк ине лә бит хайуанҡайға, үлән! — тип яҡында ғына ала-ҡолаланып ятҡан тау башына ҡарап торҙо.

— Ҡары бит быйыл, ҡайнаға, арыҡ мал түгел, әҙәм йырып сыҡҡыһыҙ! — тип көрһөндө әсәйем.

— Уландар бәләкәйерәк шул. Көрәп һә тигәнсе юл асырҙар ине лә бит.

— Бәләкәй булғас, ҡалай итәһең!..

Әммә бәләкәй булһаҡ та, беҙ йәшәргә теләй инек. Беҙҙең артабанғы ғүмер ҡорһағынан урҙаға аҫылған ала һыйырҙың иҫән ҡалыуына бәйле, шулай икән... Ер өҫтөндә туғыҙ йыл ярым йәшәп, байтаҡ тәжрибә тупларға өлгөргәнмен бит инде. Тәүҙә әүеҫлек башынан иҫке ҡаҙ ояһын төшөрҙөм, шунан солан урҙаһына ҡыҫтырыулы ураҡты инеп алдым да аҙбар артына ыңғайланым. Ҡаршыма әсәйем тап булды. Ул да, мин дә бер һүҙ өндәшмәнек. Ысын хәстәр аҙ һүҙле шул ул.

Ҡояш ныҡ ҡына ҡыҙҙыра башлап, ҡар мине лә күтәрә алмаҫлыҡ хәлгә килгәйне инде. Ярма менән бер. Аҙым һайын бот төбөнән сумам да үрмәләп тигәндәй сығам. Шулай ун бишегерме метр барғас, көрт йоҡарҙы, ә Исмәғил бабайҙарҙың картуф баҡсаһын беҙҙекенән айырып торған ыҙанда бөтөнләй ҡатыға баҫтым. Батмаһаң, артыбыҙҙағы тауға барып етеү нимә генә инде! Быйма ҡуныстарына тулған ҡарҙы түктем дә ҡылған урырға тотондом. Шунан уны малдың бик үк яратмауын хәтерләп, йомшағыраҡ үлән эҙләп киттем. Ҡайҙа урып, ҡайҙа йолҡоп, ҡаҙ ояһын тыңҡыслап тултырҙым һәм уны бауынан һөйрәп, кире юлға ҡуҙғалдым.

Бер юлланым, ике юлланым. Өсөнсө мәртәбә ҡайтып килгәнемдә, апайҙарымдың аҙбар артында ҡар көрәп аҙапланыуын күрҙем. Көрт йырып, мин һалған һуҡмаҡты киңәйтергә самалайҙар. Алаҡайыбыҙ тауға атлап бара алһын, тип инде. Әсәйем дә, тәртешкәһенә таянып, шул тирәлә урала.

— Һин апҡайтҡан үлән менән, Алланан булып, ныҡынып алһа, яланға ҡыуып ҡарарбыҙ! — тип йылмайҙы ул, мин килеп еткәс. — Атаҡ, манма һыу булғанһың бит! Тиҙерәк өйгә ин, ауырып китмә тағы! — тип өтәләнде ул.

Минең алмаш кейемем юҡ ине, билдәле. Әсәйем тимер ҡоршаулы һандыҡтан атайымдан ҡалған ҙур салбар менән күлдәк килтереп сығарҙы. Уларҙы буйыма үлсәп, тегеләй ҙә, былай ҙа әйләндереп, эсенән ниҙер самалағандай итте лә, көрһөнөп:

— Ҡапылда ошо килеш кейеп тор инде, — тине. — Шәбәйеңкерәгәс, бәләкәйләтеп бирермен.

— Ә миңә? — ти һалды беҙҙе ҡыҙыҡһынып ҡарап торған ҡустым.

— Һиңә ана абзыйыңдыҡы булыр, — тип әсәйем быуындар араһындағы күсәгилешлекте раҫланы һәм мейес янында ҡурсаҡ итеп биҙәлгән һөйәктәр менән шым ғына уйнаусы һеңлебеҙгә ҡарап торҙо. Ҡыҙыҡайҙың өҫтөндә зонтик сепрәгенән әтмәләштерелгән сарафан ине. Ул да бәләкәйләнгән инде. Шуға йәне көйөптөр, әсәйем миңә ҡысҡырҙы: — Йә, кейенә һал да апайыңдар янына сыҡ! Нимә ҡыра алһын улар ир-атһыҙ!..

Ҡыҫҡаһы, мин был юлы өйҙән, өлкәндәр кейемен кейеп, ир-ат мәртәбәһендә килеп сыҡтым. Эш ырамлана төштө, һәр хәлдә төшкә тиклем көрт аша картуф баҡсаһы ситендәге бураҙнаға саҡлы юл ярырға өлгөрҙөк. Тамаҡ ялғағас, күмәкләшеп йәнә аҙбарға йүнәлдек. Был ваҡытҡа һыйырыбыҙ, дерелдәп булһа ла, үҙ аяҡтарында тора ала ине. Бәлки, мин ташыған үләндең файҙаһы тейгәндер, бәлки, хайуанҡай үҙе лә беҙҙең кем өсөн тырышҡанды тоя башлағандыр. Ихатаға сығыу менән, беҙ ярған юлға ынтылды. Бер урында бата башлағас, тубыҡланды ла үрмәләп китте. Ҡатыға юлыҡҡас, ашығып һөрлөгөп тә йығылды, ләкин торорға һәм тау итәгенә барып етергә үҙендә көс тапты. Ҡышлаған үләнгә шундай итеп йәбеште, айырып алырға уйлаған тәҡдирҙә лә уны эшләргә булдыра алмаҫ инек. Хәҙер миңә апайымдар артынса өйгә ҡайтырға ла мөмкин ине, тик кем инде ҡояш нурҙарында мейес башылай йылынған тау битен, һабантурғай моңдарына ҡойоноусы хозур донъяны үҙ ирке менән ташлап китһен?!

Тәүҙә мин, йомшаҡ үләнгә ятып, ҡояшта ҡыҙыныу менән ҡәнәғәтләндем. Оҙаҡламай башҡа әллә ниндәй буш уйҙар килә башланы, уҡыу китабында күрелгән булка, колбаса, ҡыяр, шалҡан һүрәттәре алға килә лә баҫа. Уларҙан ҡотолоу өсөн, һикереп тороп, һыйыр эргәһенә барҙым һәм арҡаһын һыпырып яратырға тотондом. Ҡулыма мул ғына эләгеп сыҡҡан йөндө күреп, оло малайҙарҙың нисек итеп туп эшләгәндәрен иҫемә төшөрҙөм. Бер усма йөндө еүешләп, әүәләп, кейеҙ хәленә индерәләр. Уртаһына таш һалып йомарлайҙар ҙа әйҙә артабан әүәләйҙәр. Шундай түңәрәк ҡаты туп килеп сыға — ҡарап туймаҫлыҡ. Туп уйнағанда арҡаңа килеп тейһә — оһо-һо!.. Үҙем эшләгәнем юҡ. Ә ниңә һынап ҡарамаҫҡа?

Беренсе тубым шәп килеп сыҡманы, тығыҙ түгел, бәлшәйә. Икенсеһен әүәләргә тотондом, ләкин күрше тауҙағы тауыштар эшемде бүлде. Бәй, унда ла малайҙар һыйыр көтә икән. Ниндәйҙер уйын ҡорорға самалайҙар, мине лә саҡыралар.

Барманым, сөнки араларында мин яратмаған Ғәндәлип тә бар. Маҡтансыҡ ул, көсөн күрһәтергә һылтау ғына эҙләгән көнө. Туйып һикерә. Ғәндәлиптең атаһын, ҡылый Ишбирҙене, һуғышҡа алманылар. Колхоз председателе булып йөрөй. Кәштәләрендә һәр саҡ — ҡул тирмәнеләй әсикмәк. Итһеҙ аш ашағандары юҡ. Рәхәтләнеп кимерәләр колхоз елкәһен.

Эйе, байлыҡ шаштыра шул, тип өлкәндәрҙән ишеткәнде ҡабатланым да миҫалға Ишбирҙенең өлкән улы Ғәҙелбайҙы иҫкә төшөрҙөм. Былтыр яҙ уҡытыусы апай малайҙарға сыйырсыҡ оялары яһап элергә ҡушҡайны. Бөтәбеҙ ҙә тырыштыҡ, сөнки мәктәпкә алып барып күрһәтергә тейеш инек. Иң маҡталған уҡыусы Ғәҙелбай булды — ул эшләгән оя ысынлап матур ине, өҫтәүенә, төрлө төҫкә буялғайны. Танауы тағы ла өҫкәрәк сөйөлдө тегенең.

— Һин был нәмәнде утҡа яҡ, барыбер сыйырсыҡ ояламаҫ! — Шулай ғына һалдырҙы ул класташы Басирға.

— Үҙеңдекен яҡ! — тип өржәйҙе Басир. — Һинекенән өркөп ҡасырҙар.

Һүҙе дөрөҫкә сыҡты бит тәки. Күрше тормаһалар, бәлки, был хәл Ғәҙелбайҙың сәменә теймәҫ ине ул тиклем, һис юғы тәҙрәләре Басирҙар яғына ҡарамаһа ла, класташының хөртәмеш кенә ояһына инеп-сығып йөрөүсе сыйырсыҡтар күҙенә йыш салынмаҫ ине. Уларҙы күргәс, үҙеңдең шундай матур биҙәкләп эшләнгән ояңдың ни өсөн буш тороуын уйламай ҡара инде.

— Минең сыйырсыҡтарҙы үҙеңә алғанһың! — тип айбарланды тәүҙә Ғәҙелбай.

— Ҡулыңдан килһә, кире саҡырып ҡара! — тип көлдө Басир. Беҙ ҙә ҡушылып көлдөк. Ғәҙелбай: «Əһә, һин шулаймы, өтөк!» — тип Басирға ташланды, Ғәндәлибе миңә йәбеште. Уҡытыусы сығып айырғансы, ярайһы ғына ҡундырышып та алдыҡ.

Шунан һуң Ғәҙелбай менән Ғәндәлип Басирға ҡабарған үстәрен сыйырсыҡтарҙан алырға йыйынғандар. Рогатка эшләгәндәр, тик аталары, күреп ҡалып, ҡоралдарын утҡа ырғытҡан. Шунан тегеләр Басирҙың ояһы ҡуйылған ағасҡа бесәй мендереп ҡараған, ләкин сыйырсыҡтар, күмәкләп йыйылып, теге мәхлүкте ҡасырға мәжбүр иткән. Үҙем күрмәнем, башҡаларҙан ишеттем. Ахыр siktә ағалы-ҡустылы теге икәү үс алыуҙың иң хәтәр юлын уйлап тапҡан.

Бер көн, күҙ бәйләнгән мәлдә, Басир яһап элгән сыйырсыҡ ояһы яна башлай. Утты Ғәҙелбай төрткән, ә ҡулындағы кәрәсингә маныулы бумаланы, йүгереп барып, аҙбар артына йәшерә һалған, һүндереп бөтмәгәндер, күрәһең: бер саҡ үҙҙәренең аҙбары ла янып китә. Ярай әле мал-тыуарҙы сығарып өлгөрәләр.

Ә сыйырсыҡтар ояла, балаларын һаҡлап, һуңғы сиккә тиклем ултырғандыр, моғайын. Ялпылдап яна-яна осоп киттеләр, тип һөйләне Басир, күҙ йәштәрен тыя алмай. Ҡоштар менән бергә ыҙа күргән ағас быйыл да яртылаш ҡарайып ултыра.

Ғәҙелбай аҡылға еңеләйеп ҡалды шунан һуң, урамда: «Миңә сыйырсыҡ ояланы!» — тип һөйләнеп йөрөй башланы. Өфөгә больницаға алып барып һалғайнылар — шәбәймәгән, яңыраҡ алып ҡайттылар. Ишбирҙе ҡаты туҡмаған да, шул сәбәпле иҫәрләнгән, тигән хәбәр йөрөй ауылда. Мин үҙем сәбәбе икенсерәк икәнен тойомлайым, тик аңлата ғына алмайым.

Бына әле ул ҡустыһы янында аңшайып миңә ҡарап тора. Ғәндәлипкә минең теге тауға күсергә теләмәүем оҡшамаған. Ҡысҡырып мине үсекләргә тотонды, шунан былай табан килә башланы. Мин дә ҡаршы атланым. Арала ятҡан ҡар ситенә үк баҫып, таш бәрешергә керештек. Атыш хәтһеҙ — Ғәндәлиптең ташы танауыма килеп тейгәнсе дауам итте. Ауыртыу менән ғәрлек ҡулыма мәргәнлек өҫтәне, күрәһең: мин бәргән һуңғы таш та тегенең башына туҡ итеп ҡалды. Ғәндәлип, аҡырып илап, ауылға йүгерҙе. Ҡайтып ошаҡлай һалырға инде. Ғәҙелбай башта миңә йөҙрөҡ күрһәткәйне, шунан йөҙроғон болғай-болғай, ҡустыһын да әрләп ҡалды.

Танауымдан субырлап ҡан аға, күкрәккә лә сәсрәргә өлгөргән. Йыуынырға һыуҙы оҙаҡ эҙләргә тура килмәне — уйпатта сана юлынан ысын шишмә сылтырап ята. Тап-таҙа, теләһәң — эс, теләһәң — йыуын. Бер эйелгәнемдә күҙгә таныш бер нәмә салынып ҡалмаһынмы! Уны, балыҡ шикелле ҡасыуынан ҡурҡҡандай, тиҙ генә усым менән баҫа һалдым.

Еүештән бүрткән бойҙай башағы ине ул, ана ҡыҙыл орлоҡтары миңә мөлдөрәп ҡарап тора. Беҙҙе бында ҡалдырма, иптәштәребеҙҙе лә эҙләп йый, тигән һымаҡ. Аяҡ аҫтыма ентекләп ҡараһам — тағы бер башаҡ. Икәү булған ерҙә өсөнсөһө лә барҙыр, аҡрын ғына юл буйлап киттем. Ана дүрт-биш башаҡ бер урында уҡмашып уҡ ята. Тағы таптым, тағы... Ғәндәлип тә, эшләнеп бөтмәгән туп та, хатта һыйыр ҙа онотолдо. Баштараҡ эсемдән: «Тағы бер аҙ йыя алһам, өйрәлек

була!» — тип теләк теләгәндәй ҡабатлаһам, һуңғараҡ шымып ҡалдым, сөнки тун, салбар кеҫәләре генә түгел, бүркем дә донъяла бер нигә биргеһеҙ байлыҡ менән тулды.

Килһә килә бит көн! Иртәнсәк кенә аҙбарҙа һуңғы сәғәте еткән иң бәхетһеҙ кеше кеүек баҫып тора инем, бына әле өйгә нисек ҡайтып индем! Әсәй, күр, йәнәһе, уртансы улың аҡлай ҙа башланы инде ир-ат исемен, бына күпме ризыҡ алып ҡайтты ул! Яҙ башында — өс-дүрт өйрәлек бойҙай. Теләһәгеҙ, он итеп, ыумас ыуығыҙ, бер байрам булыр. Мин иртәгә йәнә барырмын, күберәк йыйып апҡайтырмын. Аҡ балсыҡ һыртына күтәрелһәң, бер күнәк, хатта икене сүпләргә мөмкиндер ул башаҡтарҙы... Кәмендә шуны аңғартҡандыр минең ҡиәфәт, Алаҡайҙы ҡыуалап өйгә ҡайтҡанда.

Әсәйем мине бик асыуланып ҡаршыланы.

— Ни ҡыланып йөрөүең, ә? Ниңә башын тиштең Ғәндәлиптең? Ошо йәшкә етеп, көслөнөкө донъя икәнен белмәйһеңме ни һаман? Ана, әсәһе килеп пыр туҙҙырып китте. Ярай әле Ишбирҙеләре иҫеректер, әллә ниҙәр эшләтер ине уныһы килһә!..

Ныҡ ҡына ҡысҡырһа ла, әйткәндәренең минән бигерәк башҡаларға тәғәйенләнгәнен тойомларға мөмкин ине. Һүҙҙәрҙең иң әсеһен таба белә ул, ысынлап асыуланһа, күҙҙән йәш бәреп сығарырлыҡтарын. Әле ни!.. Тәртешкәһе менән киҙәнгән була — быныһы ла ят күҙҙәр өсөн.

— Ә-ә, ауыртамы ни?! Ғәндәлиптең башы ауыртмаған тиһеңме?! Себен тейһә, сер итер! Ана шулай була ул!..

Үҙе һелтәнә, ҡысҡыра, үҙе ҡулымдағы малахайҙан күҙен ала алмай. Әллә күпме барыр ине был кәмит — әлдә теге яҡтан Исмәғил бабай тауыш бирҙе.

— Килен, туҡтаһаң да ярай. Теге еүеш балаҡ ҡайтып китте.

Мин шунда Ғәндәлиптең әсәһе, артабан ни булырын һағалап, күршеләрҙә ултырғанын төшөндөм. Йәнәһе, Хәжәр ҡушҡанды үтәрме, хулиган малайының арт һабағын уҡытырмы? Тапшырылған эштең үтәлешен тикшереү тип атала был беҙҙең заманда.

— Ҡыҙып китеп, ысынлап туҡмамағайың, тип торам. Күргән малайҙарҙан һораштым мин, берсиҙәтел бисәһе лә тыңлап торҙо. Бүтәндәрҙе һанға ла һуҡмаҫ ине, Ғәҙелбай иҫәренә ышанды. Беҙҙең уландың һис ғәйебе юҡ, Ғәндәлип башлаған...

— Танауға тейҙермәһен үҙе! — Яҡлашыусы табылғанлыҡтан күңелем йомшарып китте лә мышҡылдап та алдым шикелле.

— Был башаҡты ҡайҙан алдың? — тип һорай һалды әсәйем.

— Башаҡ, ти? Ниндәй башаҡ?! — Исмәғил бабай ситәнде күмгән көрткә менеп үк баҫты. Мин аңлатҡанды тыңлап та бөтмәй, үҙе һөйләп алып китте: — Эйе, эйе, һуғылмаған бойҙай эҫкерттәрен ҡыш ташығайнылар. Шунда ҡойолоп ҡалған инде. Һа-а-й, күҙгә зирәк икән беҙҙең улан! Иртәгә тағы барып сүплә!

— Апаларын да алып сығыр, — тине әсәйем һәм мине ашыҡтырып өйгә алып инеп китте.

Малахайҙағы, кеҫәләрҙәге башаҡты бушатҡас, табаҡ тула яҙҙы. Өй эсе ҡапыл яҡтырҙы ла китте. Шул кис, тамаҡты нык ҡына туйҙырып, ҡәнәғәт кикерешә-кикерешә йоҡларға ятҡас, әсәйебеҙҙән оҙаҡ ҡына әкиәт һөйләтеүебеҙ хәтерҙә. Мейес башында юлдан табылған башаҡтар кибә ине. Тыуыр көндә бәләкәй генә өмөт мөлдөрәһә лә, йәшәү зерә күңелле була ла китә шул.

1. Әҫәрҙә ниндәй осор һүрәтләнә?
2. Һыйырҙы ҡотҡарыу өсөн ғаилә нимәләр эшләй?
3. Колхоз председателе Ишбирҙе, ҡатыны, улдары Ғәндәлип, Ғәҙелбай тураһында һөйләгеҙ һәм уларҙың кешеләргә ҡарата мөнәсәбәтен баһалағыҙ.
4. *Көслөнөкө — донъя* тигәнде аңлатығыҙ.
5. Исмәғил бабай ғаиләлә ниндәй роль уйнай? Уға характеристика бирегеҙ.
6. Малай ғаиләне нисек туйындыра?

## II

**Иртәгеһен ҡояш сығыу менән, Алаҡайҙы, яңынан тау башына илтеп, үләнгә ҡуштыҡ. Бөгөн уны ҡарап ашатырға алты йәшлек ҡустым Риф тәғәйенләнгәйне, мин ике апайымды эйәртеп, донъялағы иң оло хазинаны һаҡлаусыға әйләнгән Аҡ балсыҡ юлына ашыҡтыҡ. Уҡырға барырға кәрәкмәй, мәктәп бикле, уҡытыусы ҡыҙ ауылына ҡайтып китте лә кире килмәне. Уртансы апайымдың ҡулында — бәләкәй генә тоҡсай. Башаҡтарҙы шунда һалырға тейешбеҙ.**

**Был юлы башаҡлы урынды байтаҡ эҙләп барырға тура килде. Кемдер беҙҙән алда һыпырып сыҡҡан, тип өмөтһеҙләнә лә башлағайныҡ инде, ҡапыл уртансы апай: «Бында килегеҙ!» — тип ҡысҡырып ебәрмәһенме. Йылт итеп барып еттек, һелкәүес һымаҡ иңкеү урында өйөлөшөп башаҡтар ята, береһенән-береһе көрөрәк. Күршеләрен эҙләгеҙ, тигән бойороҡҡа буйһоноп, икебеҙ ике яҡҡа сәселдек. Бар, бында ла башаҡтар бар! Ҡотҡара бит беҙҙе ас үлемдән Аҡ балсыҡ һырты! Тиҙҙән картуф кәлйемәләре эҙләргә ваҡыт етер, ә балтырған морон төрткәс, эш бөтөнләй көйләнәсәк.**

Үҙ-үҙебеҙҙе шулай йыуатып-дәртләндереп, юл буйлап өҫкә үрләнек. Яныбыҙға Һарыҕолағыбыҙ ҙа килеп еткәс, шатлығыбыҙҙың сиге булманы. Этебеҙ ҡартайған инде, уны һуғышта үлгән ағайыбыҙ бәләкәй сағында уҡ алып үҫтергән. Быйылғы ҡыш уны ла ныҡ йонсотто.

— Пшёл, буталма бында! Бар, ана үҙеңә йомран йә сысҡан тот! — тип өгөтләнек үҙен күмәкләп.

Китте бит Һарыҕолағыбыҙ һырт буйлап, ҡылған төптәрен еҫкәй-еҫкәй. Ҡапыл туҡтай ҙа ерҙе соҡорға тотона. Табышлы булдымы уның ошо һунары — ҡарап торорға тура килмәне, сөнки уртансы апайҙың яңы бойороғо бик тә ҡәтғи ине:

— Йә, юҡҡа аңшаймағыҙ! Кеше-ҡара күреп ҡалғансы, шәберәк сүпләйек. Хәҙер килеп тулырҙар.

Ун дүрте тулғайны инде уның, әсәйем әйтмешләй, аҡты ҡаранан айыра белә. Йыш ҡына, әсәй түшәктә саҡта, донъя көтөү тотош уның ҡулында. Үткән йәй ҡул урағы менән үлән урып бесән әҙерләүсе ул бит, беҙ шунда уға иптәш булып ҡына йөрөнөк. Ҡыш башында, барлы-юҡлы урманыбыҙҙы ҡырҡып, районға ташығанда, һуңғы ҡарағайҙарҙы ауыл халҡына утынға бүлеп бирәсәктәрен ишетеп ҡалған да тегеһенә лә, быныһына ла йүгерҙе. Ахыр сиктә, кесе апайым менән мине эйәртеп, бәләкәй сана һөйрәп, Ҡарағай уяһына китте. Эй яфаланыуыбыҙ, өлөшөбөҙгә тейгән түмәрҙе өйгә алып ҡайтҡанда! Кесе апайымдың аяғындағы иҫке быйма табаны бүҫелеп сыҡты. Тау түбәненә уны санаға ултыртыуыбыҙ, уның түмәр менән бергә мәтәлләп китеүе онотторлоҡмо! Шул түмәр әле лә аласыҡ алдында ята. Ярырға көсөбөҙ етмәне. Сыра телеп алабыҙ, уныһына ла шөкөр.

Бөгөн беҙҙең аяҡтар ҙа нығыраҡ. Апайҙарым өр-яңы сабата кейеп ебәргән, уларҙы Ергән баҙарынан әлеге Исмәғил бабай алып ҡайтып биргәйне. Миңә әсәйем итек кейҙерҙе — ағайҙан

ҡалған итек. Әллә ҡайҙарға китергә мөмкин, ҡар ҙа, батҡаҡ та ҡурҡыныс түгел.

Ана, ана, беҙҙең арттан Аҡ балсыҡ һыртына башҡалар ҙа күтәрелә башланы. Әлегә икәү генә: эйелеп-бөгөлөп яфаланмайҙар, туп-тура беҙҙең янға һыпырталар. Таяҡ тотоп алғандар. Керәләр бит өлөшкә!.. Эште ҡыҙыулаттыҡ. Тиҙерәк йыйырға, күберәк йыйып ҡалырға!

— Эй-й, Нәғимә лә инде. Ғилмеште эйәрткән, — тине уртансы апайым ҡапыл.

Ысынлап улар! Көн дә тиерлек эйәртенешеп беҙгә уйнарға килеүселәр. Беҙҙән Исмәғил бабайҙар аша бер ихатала ике өй. Беренсеһе — Нәғимәләрҙеке, уның атаһы — Ғилметдиндең олатаһы. Ул ҡарт инде. Улы ла һуғышҡа барманы, сөнки комбайнсы, тотош тирә-яҡ ауылдарҙың игенен һуға. Етеш йәшәйҙәр. Тик Нәғимә менән Ғилметдин, бүтән атайлы ҡыҙҙар һәм малайҙар һымаҡ, танау сөйә белмәйҙәр. Шуға күрәлер ҙә инде юлдағы башаҡ беҙгә лә, уларға ла етер һымаҡ тойолдо ла китте.

Ләкин тегеләрҙең үҙ ниәте, үҙ тәкдиме.

— Атайым Бүре ояһындағы эҫкерт төптәрен ҡарап ҡайтырға ҡушты.

— Бүре ояһына?! Ҡурҡмайынса!..

— Өйгә ҡайтып әйтеп килмәһәк. Тоҡсайҙы күтәреп йөрөгәнсе!

— Ул тиклем оҙаҡ көтә алмайбыҙ, — тине Ғилметдин, танауын тартып. Нәҫелдәре шундай: һүҙ әйтерҙәр ҙә танау тартырҙар. — Тоҡсайығыҙҙы соҡорға йәшерегеҙ ҙә...

— Тегендә башаҡты нимәгә һалырбыҙ?

— Шәлдәрегеҙ бар, ҡустығыҙҙың күлдәге.

Шул саҡ мин дә һүҙ ҡыҫтырҙым.

— Бүре килеп сыҡһа, нишләрбеҙ?

— Һа! Бынау таяҡтарҙы беҙ бушҡа тотоп алғанмы ни?! — тип көлдө Ғилметдин. — Ул ғына етмәһә, бына тағы! — тип кеҫәһенән ағас һаплы салғы бәке сығарып күрһәтте.

Бала саҡта ундай ҡорал менән теләһә ниндәй көскә ҡаршы торорға мөмкин. Биш ризыҡсы алыҫ Бүре ояһына юл алды. Бер аҙҙан Һарығолаҡ та ҡыуып етте.

Бүре ояһы — ауылыбыҙ янындағы иң шомло урын, унан балалар ғына түгел, өлкәндәр ҙә шөрләй. Исеме үк әйтеп тороуынса, унда ағас шырлығында бүреләр оялай, һуңғы ваҡытта фронттан олаҡҡан ҡасҡындар ҙа йәшәй, имеш. Беҙ

бараһы ер былай ситтәрәк, тик барыбер әлеге шырлыҡ эргәһенән үтергә. Шик-шөбһәне үҙебеҙгә яҡын юлатмаҫ өсөндәр инде, ҡысҡырып һөйләшеп-көлөшөп, йырлашып барырға тырыштыҡ. Атлауы ла еңел ине, иртәнге туң ирер өлгөрмәгәйне әле. Муллабай баҡсаһы артта ҡалды. Бүре ояһын да уҙып киттек. Ана, Табор ҡойоһо янында ҡарайып ята беҙ юллап барған эҫкерт төптәре. Атаһы Ғилметдинде ныҡ өйрәтеп ебәргән икән, кәрәкле урынға туп-тура алып барҙы. Килеп туҡтаныҡ та шаҡ ҡаттыҡ. Бындағы байлыҡ!..

**Баҫыу уртаһында ҡалҡып торған бейек кенә ҡар өйөмөн күҙ алдына килтерегеҙ, уртаһында тәрән соҡор, шунда беҙ юллап килгән бойҙай. Эҫкертте ҡутарып алыусылар төпкә үк төшөп етмәгән. Моғайын, буран сығып, беҙҙең өлөштө ҡар аҫтына йәшергәндер, ә яҙ ҡояшы асып ҡуйған. Соҡорҙоң һөҙәгерәк ярынан төштөк тә ҡомһоҙлашып эшкә тотондоҡ. Башаҡтарҙы усмалап, таралмаһын өсөн һалам менән бәйләп, бер ситкә һалабыҙ ҙа яңыһын йыябыҙ. Соҡорҙа ел юҡ, өҫтән ҡояш ҡыҙҙыра, эҫе булып китте. Тун ишараттарын, куфайкаларҙы сисеп ырғыттыҡ. Яҡында ғына Һарығолаҡ алғы тәпәйҙәре менән тып та тып сысҡан тота.**

Беҙ өсәү булғас, йыйған усмаларыбыҙ тиҙ арала өйөлөп китте. Уртансы апайым Ғилметдиндең бәкеһен һорап алды һәм башаҡтарҙы һабағынан ҡырҡа башланы. Теп-теүәл бер шәл булды. Оҙаҡламай кесе апайҙың шәлен дә тултырып, төйнәп ҡуйҙыҡ. Ул арала Нәғимә менән Ғилметдин дә ыратҡан. Бәке бушағас, усмаларының һабаҡтарын ҡырҡып, башаҡтарын тоҡтарына һалдылар. Ял итергә ултырҙыҡ.

Ҡапыл Һарығолаҡ атылып арабыҙға килеп инде лә Ғилметдингә һыйынды. Китте көлөшөү.

— Ҡара, әллә һине нығыраҡ ярата инде!

— Һин ул эҙләгән сысҡандың өҫтөнә ултырғанһыңдыр, моғайын!

Эт дерелдәй, шыңшый. Был хәлгә аптырашып ултырырға тура килмәне, ҡайҙандыр килгән сәйер тауыш иғтибарҙы ситкә тартты. Уны нимәгә лә оҡшатырға белмәнек — алыҫта һыйыр баҡырыуынамы, кеше йырлауынамы, ҡаҙ ҡаңғылдауынамы? Ултырҙыҡ-ултырҙыҡ та, торналар ҡайталыр, тип ҡарар иттек. Ә улар, билдәле булыуынса, бәпестәргә тәпәй алып ҡайта. Ғилметдиндең атламай ултырыусы ике йәшлек ҡустыһы бар. Тотондоҡ ҡысҡырырға:

— Торна, торна, Римгә тәпәй бир!..

Һарығолаҡ ҡына беҙҙең яҡшылыҡҡа ышанысты уртаҡлашырға теләмәй, һаман шыңшый, аяҡ араһына шыуып инергә әҙер. Беҙ торна ҡысҡырыуына оҡшатҡан тауыштар хәҙер бөтөнләй яҡында ишетелде. Бер һүҙҙән йөрәгем ҡот осмалы упҡынға мәтәлләне.

— Бүреләр!

Һуңынан, тынычлана төшкәс, шул һүҙҙе кем ҡысҡырғанын да, соҡорҙан нисек атылып сыҡҡаныбыҙҙы ла берабеҙҙең-бер иҫләмәүе асыҡланды. Әммә башаҡлы тоҡтарҙы, төйөнсөктәрҙе алырға онотмағайныҡ. Мин үҙем, мәҫәлән, эҫкерт төбөнән илле-алтмыш метр киткәс кенә, бүреләр ҡамаған Һарығолаҡтың ҡыҙғаныс саңҡылдауынан иҫкә килдем. Этте нисек теткеләүҙәре, һауаға ҡан сәсрәүе, йөн борҡоуы ғүмер буйы күҙ алдымдан китмәҫ. Уны йәлләп ҡысҡырып ебәреүем ойоҡсан һыпыртыуымды абайлауым менән тап килде шикелле. Итегемде ҡайҙалыр батҡаҡ убып алып ҡалған, иртәнге туң ҡуйы буҡкаға әйләнгән мәл ине шул. Киргә боролоу уйы башҡа ла килмәгәндер, сөнки мин аслытуҡлы, яланғас булһа ла йәшәргә тейеш инем.

Бүреләр, Һарығолаҡты өҙгөләп,мауҡыларын ҡандырғас, ысынлап та, беҙгә ташланманылар. Башта эҫкерт янына түңәрәкләнеп ултырып кәңәш ҡороп алдылар ҙа, һә тигәнсе беҙҙе ҡыуып етеп, ике яҡлап беҙ йүгергән ыңғайға талғын ғына саба башланылар. Әле береһе, әле икенсеһе, ҡапыл яҡынлап, тештәрен шаҡылдатып, тиҙ генә кире ялтанмаһа, был йәнлектәр беҙҙе оҙатып ҡуйырға ҡарар иткән, тип тот та уйла инде. Әммә ошондай йәнәшәлектән ниҙәр кисергәнебеҙҙе һөйләп кенә аңлатыу мөмкин түгелдер.

Юлды ҡапыл ҡотороп ағыусы ҡулҡа бүлде. Беҙ үткәндә, иғтибарға ла алмаҫлыҡ соҡор ине, хәҙер, ана, ҡояш уятҡан гөрләүектәрҙе йыйып, ысын даръяға әүерелгән. Бүреләрҙән дә ҡурҡынысыраҡ күренгәндер ул, сөнки беҙ уның алдында туҡтап ҡалдыҡ. Тегеләргә нимә, еңел генә һикерешеп сыҡтылар ҙа, ғәжәпләнгәндәй, шулай уҡ туҡтанылар. Йәшерәк ике бүре, кире ырғый һалып, томшоҡтары менән төрткөләп, беҙҙе һыуға ҡыҫырыҡланы. Юҡ ҡына нәмә арҡаһында уйынды боҙмайыҡсы, тиеүҙәре булғандыр ҙа бит, беҙгә тарыраҡ урын кәрәк, тип аңлатып ҡара инде! Һалҡын һыуға инеп киттек, ә ул тәнде ут шикелле өтөп алды, үңәскә килеп етте, саҡ-саҡ ағыҙып алып китмәне. Ҡаршы ярға үрмәләп тигәндәй күтәрелгәс, бүреләр менән уҙыш яңынан башланды. Кейеме-

беҙ һыу сәсрәтә, лаштыр-лоштор килә, шуғалыр ҙа тегеләр хәҙер, ана йәбешәм, бына йәбешәм, тип ҡурҡытып маташманы. Хәйер, Муллабай баҡсаһына уҡ килеп еткәйнек шул, ауылға яҡынлашҡандан-яҡынлашабыҙ. Ҡаршы тауҙа бер һыбайлының да күренеүе күңелдәргә бөтөнләй йән өрҙө. Ул беҙҙең хәлде шунда уҡ аңлап алды шикелле: мылтыҡтан атып ебәрҙе, торараҡ тағы атты. Беҙҙең оҙатыусылар, теләр-теләмәҫ кенә, артта тороп ҡалды. Беҙ ҡыҙыулыҡ менән тағы бер аҙ йүгерҙек тә, тегеләргә боролоп:

— Тотоғоҙ хәҙер беҙҙең ҡойроҡто! — тип һөрәнләнек. Шул мәлдә бүреләр беҙгә һис тә ҡурҡыныс түгел кеүек ине, бер аҙҙан хатта минең итек артынан кире бармауым, үңәс тиңенән һыу кисеүебеҙ — барыһы ла бушҡа эшләнгән эш булып тойолдо. Этебеҙгә теймәһәләр, мин бүреләрҙе һөйкөмлө йән эйәләре тип тә иҫәпләр инем, буғай. Меҫкен Һарығолаҡ! Унһыҙ нисек йәшәрбеҙ? Бер туғаныбыҙ һымаҡ ине бит ул, бөтәһен дә аңлай торғайны. Көҙ әсәйем мине ныҡ ҡына сәпәкләгәйне. Ҡулынан ысҡынып ҡастым да, ҡуйы дегәнәклеккә боҫоп, йөҙ түбән ятып иланым. Ҡыштырлаған тауышҡа башты күтәрһәм — этебеҙ шыуышып килә. Ҡайҙалығыңды ла белдермәм, яңғыҙ ҙа ҡалдырмам, ти ине уның ҡиәфәте. Килеп етте лә, мине йыуатып, ҡулымды яларға тотондо. Эшкә барғанда йә ҡайтҡанда, һәнәкте йә тырманы һабынан тешләп һөйрәүе онотторлоҡмо ни!..

Шуларҙы барлап килә торғас, өшөй башлағанымды ла тоймағанмын. Уянып киткәндәй итһәм, теш тешкә теймәй. Ойоҡсан ҡар, һыу кисеү бына хәҙер үҙен һиҙҙерә. Башҡаларҙың аяғында булғас, артыҡ бирешмәгәндәр. Һәр хәлдә, кеше хәлен аңлау һәләте ҡалған әле үҙҙәрендә. Сурылдашырға, кәңәшләшергә тотондолар.

— Аяғына берәй нәмә урайыҡмы әллә?

— Өҫ-башын һығып кейҙерәйек!

— Юҡ! — тинем мин, нығыраҡ өшөүҙән ҡот осоп.

— Ниңә — юҡ?!

— Ауырып ятһаң әле!..

Оҙаҡламай барыһы ла онотолдо — бүреләр ҙә, Һарығолаҡ та, өшөү ҙә. Ҡаршыбыҙға сабып килеп еткән һыбайлы, колхоз аттарын һәм баҫыуын ҡараусы Абдулла, нимә йомошлап йөрөгәнебеҙҙе белгәс, туҙҙы ла китте.

— Фронтҡа икмәк кәрәк, ә һеҙ!.. Белһәм, ҡотҡармаҫ инем. Ну-ка, бирегеҙ әле барыһын да миңә!..

Ғилметдиндең тоғон тартып алды ла ҡалғандарыбыҙҙың башағын шунда бушаттырҙы. Ҡарғап, илашып ҡалдыҡ артынан.

— Ҡылсығы тамағына торһон Апуштың, балалары ҡан ҡоҫһон!

— Ҡарасы, сабыйҙар хаҡы тип тә тормаған. Колхоздыҡы, имеш!

— Уның балалары ғына бала!

— Әйтәм бит, тамағына торһон ҡылсығы!

Мин иҫке ағас карауатта түр яҡтағы һөйләшеүҙе ишетеп ятам: быныһы әсәйемдең тауышы, быныһы — Ғилметдиндең әсәһенеке, быныһы... Толоп ябынып та йылына алмайым, тәнемә, киреһенсә, ҡул тейҙерерлек түгел. Кисә Исмәғил бабайҙың, үпкәһенә төшмәгәйе, тип һөйләнеп ултырғанын төш аралаш ҡына һымаҡ хәтерләйем. Ауырыуыма өсөнсө көн китте инде, ә ҡатын-ҡыҙ, түр яҡҡа йыйылышып, һаман Абдулланы әрләп туя алмай. Ана бөгөн дә йыйылғандар. Айырыуса әсәйем айбарлана.

— Барып яғаһынан алам әле Апуштың, битенә төкөрәм. Пагипший балаларын ҡыйырһытҡаны өсөн!..

Кисә лә шулай тигәйне, бөгөн дә. Ҡыҫҡаһы, Абдуллаларға барырға оҙаҡ йыйынды ул, тәки өлгөрә алманы. Көндәрҙән бер көндә ауылға хәбәр таралды: Абдулланы тотош өй эсе менән районға больницаға алып киткәндәр. Тамаҡтары шешкән.

— Күп шашһаң, шулай була ул! — тине әсәйем.

Иртәгеһенә тағы дүрт-биш кешенең шул уҡ ауырыу менән больницаға эләккәне ишетелде. Бер көндән уларға яңы ауырыуҙар өҫтәлде. Көтөлмәгән яңылыҡтан ауыл шып-шым булды: Абдулла, ҡатыны, ике балаһы үлгән дә, райондан килеп алырға ҡушалар икән. Ысын булып сыҡты барыһы ла, мәйеттәрен алып ҡайтып ерләнеләр. Өйҙән өйгә имеш-мимеш йөрөй башланы.

— Герман ағыу ебәргән, ти.

— Юҡтыр, йыраҡ бит. Сигенеп, үҙ иленә етә яҙған бит инде.

— Ярапланға ул ара нимә ул!

— Самолётты зениткалар үткәрмәҫ. Ағыуҙы ер аҫтынан ебәрмәһәләр...

Шулай фекер алышыуҙа фронттан яраланып ҡайтыусылар ҙа ҡатнашҡанын төшөнгәнһегеҙҙер инде. Һуңғараҡ улар ауылдағы хәлде фронттағына оҡшата башланы. Хаҡлыҡ

булғандыр һүҙҙәрендә: көн һайын таң менән бер-ике арба ауырыуҙар тейәп районға сығып китә, ҡояш байыуға, мәйеттәр тейәп ҡайтып инә.

1. Ни өсөн башаҡ йыйыусы балалар Нәғимә менән Ғилметдинде хөрмәт итәләр?
2. Балаларҙың башаҡ йыйған саҡтағы мәрәкәләре тураһында һөйләгеҙ.
3. Бүреләр ҡыуып, оҙатып барғанда балалар нимәләр кисерә?
4. Һарығолаҡ ниндәй эт? Уға характеристика бирегеҙ.
5. Бәләнән кем ҡотҡара һәм ни өсөн башаҡтарҙы тартып ала?

**86-сы күнегеү.** II бүлектәге ҡалын хәрефтәр менән билдәләнгән тәүге өлөшөндә хәлдәрҙе күрһәтегеҙ. Ҡалын хәрефтәр менән күрһәтелгән икенсе өлөштә тултырыусыларҙы табығыҙ.

## III

Ғөмүмән, беҙгә генә түгел, күрше ауылдарға ла ҡапыл ябырылған ҡырғынға үс иткәндәй, ул яҙ көлкө-мәҙәккә лә ярайһы ғына бай булды. Бигерәк тә Исмәғил бабай көн һайын тиерлек нимәлер уйлап табыр ине. Кемдеңдер үлеүен ишетһә, элеккесә «ҡуйсәле!» тип бот сапмаç, аҙ ғына уйланып торор ҙа: «Ғүмер буйы балыҡ тоторға шәп селәү таба алмауына зарланды, ана хәҙер ҡайҙан эҙләргә булған!» — тип ҡуйһынмы, йә: «Тамағын кешелә туйҙырып ҡайтырға яратты шул, тегендә ҡаҙ бутҡаһы бешергәндәр икән, тип берәйһе шаяртманымы икән?» — тип берәйһенә һорау бирһенме. Ҡурышҡан бите хәрәкәтһеҙ, хатта уйсан булыр, тик ҡыçыҡ күҙҙәренән генә, салланған ҡалын ҡаштарын күтәрә биреп, йылмайыуға тартым нимәлер мөлдөрәп алыр ине. Башҡа ваҡытта мәрхүмдең туған-тыумасаһын үпкәләтерлек шул һүҙҙәре әлеге мәлдә үлемдән ҡурҡмаçҡа, бәлтерәп төшмәçкә саҡырыу булған бит.

Бер саҡ асыҡ тәҙрә аша мин бабайҙың Ғәҙелбай менән һөйләшкәнен тыңлап яттым.

— Йә, улым, теге сыйырсыҡтарың ни хәлдә әле?

— Уларға ни булһын! Көн-төн эсемдә сырҡылдашалар.

— Һин уларға эш ҡуш. Сыҡһындар, йөрөһөндәр, сүпләнһендәр…

— Ни нәмә сүпләһендәр?

Исмәғил бабай өсөн дә көтөлмәгәнерәк һорау булды шикелле быныһы, сөнки ул байтаҡ ҡына яуап таба алмай торҙо.

— Яманлыҡты сүпләтергә кәрәк ине лә бит һинең ул сыйырсыҡтарыңдан! Ай-һай ҙа шәп арта шул яманлыҡ, шуға күрә иман ҡаса. Яманлыҡ тигәнем — ауылды баҫҡан ҡайғы-хәсрәт инде, яуыздар ҡылған ҡырын эштәр. Яманлыҡты нисек танырға, тиһеңме? Ул төрлө төҫ-ҡиәфәттә була белә, ә яратҡан эше бер — кешеләрҙе илатыу, һарыға һабыштырыу...

— Кешеләрҙең илағанын күргәнем бар! — тип маҡтанды Ғәҙелбай.

— Үәт, үәт!..

Ошо һөйләшеүҙең ябай түгеллеген аңларға ҡайҙан баш етһен инде ул саҡта. Һауығыу шатлығы ла ҡамасаулағандыр. Иртәгеһенә булды шикелле, мин тәү башлап ишек алдына сыҡҡайным. Шуны ғына көткәндәй, сағыр-соғор килеп ат һабандары һәм сәскестәре әлеге Аҡ балсыҡ юлынан баҫыуға үрләне. Бөтә халыҡ — ауырымаусылар, әлбиттә, сәсеүселәрҙе урамға сығып оҙатып ҡалды. Бер-ике көн үтеүгә, МТС-тан тәгәрмәсле тракторҙарында ҡыҙҙар бригадаһы килеп төшкәс, ҡайғы-хәсрәттең фашистар артынан сигенеренә ышаныс тағы артты. Ә инде уның беҙ көткәнсә тиҙ аҡланмауын мин, үҙемсә, йәнә бер иҫтәлекле ваҡиғаға бәйләп аңлаттым. Нисәмә йыл үтеп, уй-тойғоларымда күптән аҡыл өҫтөнлөк итһә лә, мин тәүге фекеремдән баш тарта алмайым.

Ауылға врачтар килеп, мәктәп бинаһында һәм Абдулланың буш торған йортонда госпиталь асылыуын күҙҙә тотам мин. Был учреждение, бәлки, икенсе төрлө аталғандыр, әммә ауыл халҡы уны госпиталь тип алды ла китте. Врачтар килеү менән, өй беренсә йөрөп, ауырығандарҙы иҫәпкә алдылар. Күптәр мәктәпкә һәм Абдулланың йортона күсерелде. Һәр ҡапҡаға, һәр ҡапҡа бағанаһына листовкалар йәбештереп сыҡтылар. Баҫма хәрефтәр менән сыбарланған һоро ҡағыҙ, беҙгә серле ауырыуҙың сығанағы яҙғы башаҡта икәнен аңлатып, бүтән һәм сифатлыраҡ аҙыҡ менән туҡланырға саҡыра ине. Халыҡтың иҫе китте.

— Ҡарале, нисек көләләр!

— Аслыҡтан сәпсим ҡырылып бөтһөндәр, тиеүҙәрелер.

— Башаҡ ни... икмәк инде ул. Икмәктең ҡасан кемде үлтергәне бар?! Күберәк булһын ине әле ул!

Әсәйем әйткән һүҙҙәр беҙҙе тамам ғәжәпләндерҙе.

— Яҙғандары ысын булһа, Абдулла мәрхүм һеҙҙе ҡотҡарған инде! Бына бит, һеҙгә тигән үлемде үҙ балаларына апҡайтҡан. Ашамайыҡ әле шул башаҡты, ана һөт бар, ҡаҡы, ҡуҙғалаҡ бар...

Шулай тигәйне лә бит, үҙе бер-ике көндән тағы аяҡтан йығылды. Был юлы, башҡалар һымаҡ уҡ, әлеге тамаҡ шеше менән. Ауылда ҡырғын иң ҡоторған мәлдә генә оло апайыбыҙ ФЗО-нан ҡасып ҡайтты. Асығыуҙың сигенә еткәндер инде, йәлләп түгелмәгән бойҙай ҡурмасын күреп ҡалған да сат йәбешкән. Әсәйем уның ҡулынан ҡурмаслы сеүәтәне тартып алырға ла тырышҡан — илап, бирмәгән.

— Ҡатыҡҡа ҡушһаң, бер ни булмай икән. Эйе, эйе, врачтар шулай ти, үҙем ишетеп ҡайттым, — тип тынысландырған ул әсәйҙе.

Әсәй ҙә ашашҡан шул ҡурмасты. Үҙенең әйтеүенсә, шикле ризыҡтың ҡыҙына әҙерәк өләгеүен ниәт иткән. Шул төндә үк тамаҡтары шеште. Врач ҡатын килеп ҡараны ла госпиталгә ятырға ҡушты.

Уларҙы мәктәпкәсә күмәкләп оҙата барҙыҡ, мендәрҙәрен, ябыныр нәмәләрен күтәргәйнек — мәктәптә иҙәнгә түшәлгән һаламдан башҡа бер ни юҡлығын, ғөмүмән, госпиталь тигәндәренең күңел тартырлыҡ урын түгеллеген белә инек инде. Әммә күргәндәребеҙ ҡотто осорҙо.

Беҙгә мәктәп булған элекке мәсет күтәрмәһе алдында яланғас өс мәйет ята — ике ҡыҙ, бер малай. Шунда уҡ оҙон йыуан бүрәнәне соҡоп эшләнгән ялғаш тора — ат аҙбарындағы утлыҡсаны килтергәндәр, таныным. Ике ҡатын ялғашҡа ҡойонан һыу ташый — мәйет йыуырға әҙерләнеүҙәре. Беҙҙе күреп ҡалдылар ҙа, эштәрен ташлап, күҙҙәрен аҡайттылар: ниңә бында үҙ аяғығыҙ менән килер булдығыҙ, аҡылығыҙҙы бесәй ашанымы әллә, йәнәһе. Береһе, Шәмсинур исемлеһе, таҡмаҡлай-таҡмаҡлай, беҙгә ҡаршы атланы.

Ал да булырбыҙ әле,
Гөл дә булырбыҙ әле…

Үҙ таҡмағына үҙе бейеп, эргәбеҙгә килеп етте лә тетрәткес тантана менән ҡысҡырып ебәрҙе:

— Ҡарале, еңгә, тәки ҡотолдом бит теге имгәктәрҙән! Ана яталар! Һин дә быларыңды әпкилеп ҡалай йәтеш иткәнһең! Әйҙә минекеләр урынына индер ҙә ятҡыр. Иртәгә йыуышырмын үҙҙәрен…

Әсәйебеҙ ауыҙын асты, ләкин бер ни әйтә алманы. Бәлки, тамағы ауыртҡандыр, бәлки, кәрәкле һүҙ тапмағандыр. Шәмсинур, һаман таҡмаҡлап, сәсен туҙҙырып, ялан аяҡ тыпырлауын белде.

— Ҡайтайыҡ, балалар, был беҙҙең урын түгел, — тине әсәйебеҙ, саҡ-саҡ ишетелерлек итеп. Шатланышып, кире боролдоҡ. Шәмсинур артыбыҙҙан ҡысҡырып ҡалды:

— Ҡасмағыҙ, был донъянан бер юлы ҡотолоғоҙ ҙа ҡуйығыҙ!

— Бахыр, аҡылдан яҙған! Өс балаңды ла шулай һуҙып һалып ҡуй әле! — тип һөйләнде әсәйебеҙ.

Кешеләрҙең ауырыуын һәм күпләп үлеү сәбәптәрен аңлатығыҙ.

## IV

Ул яҙ хәҙер — алыҫта, йылдан-йыл йыраҡая бара, шуның һайын бүреләр менән уҙыш күҙ алдымда йышыраҡ, асығыраҡ йәнләнә. Ваҡыт онотторған ҡайһы бер деталдәр ҡайтанан иҫкә төшөп кенә ҡалмай, булмағандары ла килеп өҫтәлә. Мәҫәлән, бүреләр эргәмдән саба-саба ла көтмәгәндә кешеләргә әүерелә. Хәтәр бит — дүрт аяҡлап һине баҫтырыусы кешеләр, етмәһә, үҙеңдең ауылдаштарың!

Улар менән осрашҡан һайын, бер аҙ аңҡы-тиңке килеп йөрөйөм дә юлға йыйына башлайым. Ауылды ҡайтып күрмәйенсә, хәтирәләрҙән ҡотолоу юҡ миңә. Уның берҙән-бер урамын остан осҡа йөрөп сығам, бер өйҙән икенсеһенә күсеп хәл белешәм. Түбән остан төшөп китәм — бер-берeһенә ҡарашып ултырған алтышар мөйөшлө күңелсәк йорттарҙан. Бында күптәнге таныштарым — һуғыш ваҡытындағы тракторсы ҡыҙҙар менән ихлас осрашыу көтә мине.

Ҡайтып китә алманы улар район үҙәгенә. Еңеү йылына саҡлы эш ебәрмәне, шунан күкрәктәрендә орден-миҙалдар сыңлатып, егеттәр ҡайта башланы, ә фронтовиктарҙың күҙе үткер. Ҡыҫҡаһы, ауыл килендәре булдылар ҙа киттеләр, һауабыҙ ҙа, һыуыбыҙ ҙа килеште үҙҙәренә: әллә күпме бала үҫтереп, әллә күпме сабыйға өләсәй булырға өлгөргәндәр хәҙер, әммә әүәлгесә етеҙҙәр. Хәл-әхүәл һорашып, стенаға элеүле фотоларҙы — комсомол значоктары таҡҡан тәүәккәл йөҙлө ҡыҙҙарҙың портреттарын ҡарарға өлгөрмәйһең тиерлек, самауыр өҫтәлгә тып итеп килеп тә ултырыр. Баллы, ҡаҡлы сәй, инде хәтирәләрҙе яңыртып, әңгәмәне тағы ла йәнләндереп ебәрә.

Беҙҙең һүҙ — әлеге лә баяғы һуғыш йылдары, теге яҙҙағы ҡырылыш тураһында. Башаҡ ауырыуының септик ангина тип аталғанын да, беҙҙең ауылдан ғына йөҙләп кешене яҡты донъянан алып киткәнен дә, һуғышта үлгәндәр һаны бер аҙ

ҡайтыш икәнен дә, бүтән бик күп нәмәләрҙе лә беләбеҙ, әммә һөйләшеү тота ла шул яҙға юллана. Ғәҙелбайҙы ла иҫкә алабыҙ: ул һуғыштан һуң ауылдан сығып китте лә ҡайтманы. Һауыҡҡанмы, сыйырсыҡтары менән һаташа-һаташа донъя ҡуйғанмы — берәү ҙә белмәй. Башҡа йорттарҙа ла шул уҡ һөйләшеү ҡабатлана. Бер өйгә генә бөтөнләй ингәнем юҡ ауылыбыҙҙа. Ләкин уның хужаһы, йылдар кәкрәйткән, пеләш башлы ҡарт мине күрмәй ҡалмаç, ҡаршыма йәлпәнләп сыға һала.

— Панимаешь, пенсияны аҙ бирәләр. Юлла әле, арттырһындар... һанға һуғыусы юҡ. Мәктәпкә лә саҡырмайҙар. Бүтән ҡарттар һөйләгәнде мин булдыра алмаç инемме ни?.. Яҙ әле минең хаҡта. Эвсу-тәки мин бит әле!.. — Шундай мәлдә ҡылый күҙенең ағы ғына тороп ҡала.

Тыуған ауылында автор кемдәр менән осрашырға ярата? Кемде ул хөрмәт итмәй? Ни өсөн?

**87-се күнегеү.** Һөйләмдәрҙе киçәктәре буйынса тикшерегеҙ.

Тәүҙә мин, йомшаҡ үләнгә ятып, ҡояшта ҡыҙыныу менән ҡәнәғәтләндем. Оҙаҡламай башыма әллә ниндәй буш уйҙар килә башланы. Уларҙан ҡотолоу өсөн, һикереп тороп, һыйыр эргәһенә барҙым һәм арҡаһын һыпырып ятатырға тотондом. Ҡулыма мул ғына эләгеп сыҡҡан йөндө күреп, оло малайҙарҙың нисек итеп туп эшләгәндәрен иçемә төшөрҙөм. Бер усма йөндө еүешләп, әүәләп кейеҙ хәленә индерәләр. Уртаһына таш һалып йомарлайҙар ҙа әйҙә артабан әүәләйҙәр. Шундай түңәрәк ҡаты туп килеп сыға. Үҙем эшләгәнем юҡ. Ә ниңә һынап ҡарамаçҡа?

**88-се күнегеү.** Тултырыусы менән хәл икеһе лә ҡылымға эйәрә. Шул ике эйәрсән киçәктең үҙ-ара айырмаларын күрһәткән «һөйләшеүен» ойоштороғоҙ.

**89-сы күнегеү.** Түбәндә бирелгән мәҡәл һәм әйтемдәрҙә төшөп ҡалған һүҙҙәрҙе ҡуйып күсереп яҙығыҙ. Был һүҙҙәр ниндәй һөйләм киçәге булып килеүҙәрен асыҡлағыҙ.

1. Байлыҡ ... миндә, иртәгә — һиндә. 2. Иртәгәге эшеңде ... уйлап ҡуй. 3. ... баш булмаһа, эт башҡа менә. 4. Ит ашаһаң — дарыу, ... ашаһаң — ағыу. 5. Күп белеп, ... һөйләү егетлектең билдәһе. 6. Былтыр ҡыçҡанға ... ҡыçҡырмайҙар. 7. Бер

алдар — ... алдар. 8. Ер күрке — ..., ир күрке — ғилем. 9. Ат яҡшыһы тауҙа, ир яҡшыһы ... беленер. 10. Эшле кеше — көслө ... . 11. Көслө алдында эйелмә, ҡыйынлыҡ алдында ... . 12. Белем алыу — энә менән ... ҡаҙыу. 13. Балһыҙ гөлгә ҡорт ҡунмаҫ, ... йортҡа ҡот ҡунмаҫ. 14. Ҡош – ҡанат менән, кеше ... менән көслө. 15. Аҡылы ҡыҫҡаның ... оҙон. 16. Мәҡәл әйткән — юл өйрәткән, ... әйткән — күңел йыуатҡан. 17. Балалы кеше — ... кеше. 18. Ир-егет илдә тыуыр, ... үлер. 19. Йоҡоһо оҙондоң бәхете ... . 20. Ата һүҙен тотмаған, әсә һүҙе йоҡмаған — ... сабыр ир булмаҫ. 21. Тыуған телен ... халыҡ ҡәҙерле булыр.

Ҡулланыу өсөн һүҙҙәр: *күп, ҡыҫҡа, бөгөн, бай, бөгөлмә, гел, теле, ҡоҙоҡ, кеше, балаһыҙ, быйыл, иген, дуҫлыҡ, ҡәҙерле, аҙ, яуға, яуҙа, илдә, әйтем, ҡәҙерләгән.*

*Иршат* ТЕЛӘҮЕМБӘТОВ

## МАРАЛЫМ ТАҢЫ

### I

Текә ҡая эргәһендәге ҡарағайҙар һырып алған тауҙан маралдар килеп төштө лә аҡлан ситенән ағып ятҡан шишмәгә ҡарай йүнәлде.

Йыш-йыш тын алып, йотлоға-йотлоға һыуһынын ҡандырҙы улар, шунан аҡлан уртаһына төшөп, бер-бер артлы теҙелешеп, сәфәрҙәрен дауам иттеләр. Иң бәләкәстәре — Кинйәкәйҙәре — ныҡ сарсағайны, ахыры, артта тороп ҡалды. Шуға аслыҡтан үтә бирешеп киткән бала маралға көтөүҙе ҡыуып етеүе, ай-бай, ауыр булды. Ул тамам ҡара тиргә батты, аяҡтары ла, башҡаса атлай алмауын иҫкәрткәндәй, дер-дер ҡалтыранды.

Быйыл Кинйәкәйҙең ҡар ятҡан, оҙаҡҡа һуҙылған михнәтле айҙарҙы тәүге тапҡыр үткәреүе. Аҙыҡ эҙләп, әле лә улар көндәгесә алыҫ сәфәргә сыҡҡан. Ҡорһаҡҡа тиклем көрткә батып, урман-тауҙар ҡыҙырыу уны тамам йөҙәтте инде. Теге көнө хатта, ҡар аҫтынан ҡаулан сапсып ашайым тип, тояғын ҡанатып бөтөрҙө.

— У-у-у!

Кинәт яҡында хәүефле олоу ишетелде. Маралдар һиҫкәнеп ҡолаҡтарын ҡайсыланы, шунан, юҡ хәлдәрен бар итеп, тырым-тырағай һибелде...

...Утарҙан саҡ ҡына ҙурыраҡ, «Кордон» тип йөрөтөлгән сайырсылар йәшәгән ауылдан, кискә ҡарайыраҡ, саңғы кейгән бер кеше сығып китте. Ул, ҡаршылағы тауҙы артылып еткәс, әйләнеп дүрт-биш кенә өй ултырған яҡҡа баҡты ла, өтәләнеп, урман эсенә инеп тә юғалды.

Был арҡаһына рюкзак артмаҡлаған ун ике-ун өс йәштәр самаһындағы бер ҡарасман малай ине.

Ҡар-бурандарын йәлләмәгән, сатнама һыуыҡтар хөкөм һөргән ҡыш уртаһы... Наҡыҫ аҙыҡлы ҡышты тояҡлы йәнлектәр **ҡырҡ михнәттәр менән** үткәрә, уларҙың әле тамам хәлһеҙләнгән сағы. Ошо яҡта төйәкләгән һәм **күпләп** үрсегән маралдар, **быйыл** ҡар мул яуғас, көрт аҫтындағы ҡауланды сапсып ашай алмай.

Илфат ошолар хаҡында **йыш ҡына** уйлана. Шуға ла үҙҙәренә **күстәнәс илтергә** юлланған. Рюкзагына бер нисә миндек, эре киҫәкле тоҙ, аҙмы-күпме бесән тыңҡыслап тултырған. Ул өйҙәгеләргә **өндәшмәй генә** тайырға булды. Әйтһә ни, билдәле — әсәһе, улының аҙашыуынан бигерәк, **бүреләргә юлығыуынан** хафаланып ҡаршы төшөр ине.

Малай, йыртҡыстар хаҡында уйлап, ҡорошоп-ҡалтыранып ҡуйҙы. Юҡ, юҡ! Бәлки, ул маралдарҙы яҡын-тирәлә генә осратыр, унан ҡайтыу яғына боролор, өйөнә лә имен-аман етер.

Ошондай **уйҙарҙан** Илфаттың күңеле күтәрелде, һәм ул аҙымдарын да ҡыҙыулата төштө...

...Аҡлан буйлап, бер-бер артлы теҙелешеп, маралдар атлай. Кинйәкәй иң арттан һөйрәлә, бөтөнләй көс-хәле ҡалмаған. Уларға **бая** бүреләр һөжүм иткәйне, саҡ ҡасып ҡотолдолар.

**Тиҙҙән** епшек ҡар яуырға тотондо. Ул көсәйгәндән-көсәйҙе, бөтә тәбиғәтте аҡҡа төрөп ташланы. Кинйәкәйҙең мыҫҡыл иткәндәй сәбәләнеп-борғаланып яуған ҡар бөртөктәренә йәне көйҙө. Эргә-тирәлә бер нәмә лә күрерлек түгел. Ә малдарға **үтә һаҡ** булырға кәрәк: киренән бүреләргә юлығыуҙары ихтимал.

Бала марал, ҡапыл нимәгәләр эләгеп, һөрлөгөп барып төштө. Бәй, аяҡтары тотмай ҙа баһа! Шуға **хәҙер** ул **ошонда** ятып ҡына хәл йыясаҡ — башҡаса түҙер әмәле ҡалманы.

Ярамай, ни булһа ла, көтөү артынан эйәрергә! Юҡһа, теге көндәге кеүек, бер ятһаң, тиҙ генә тора алырмын тимә. Айырылып ҡалһа, уны һәләкәт көтә!

Кинйәкәй, үҙ-үҙен еңеп, көсәнә-көсәнә аяғына баҫты, быныбына ҡоларға торһа ла, юлын дауам итте.

Асыҡтырған! Алдында ғына һис юғы бер услам ҡаулан ятһа икән? Юҡ, шулай ҙа хәҙер ул ҡар аҫтын сапсып ҡараясаҡ. Ашап алһа, үҙенә хәл дә инеп китер. Тик быҙауҙың күҙенә йәш эркелде — тояҡҡайы ауырта бит, бер көн ҡанатҡандан һуң, яраһы ла уңалып бөтмәгән.

Бәхетенә ҡаршы, шул саҡ уның күҙенә алда бер кәбән салынды. Бала марал, аҡтыҡ көсөн йыйып, шунда ҡайырылды.

Маралдар төйәкләнгән биләмәләрҙе — Үркәс буйындағы ҡарағай урманынан алып Ҡаратауға тиклем араны — урап сыҡҡансы, апаруҡ ваҡыт үтте. Илфат кәйефһеҙ генә ҡайтыу яғына боролдо.

Уның тоҫмаллауы буйынса, маралдарҙың төйәге әүәләүәлдән ошонда ине бит! Моғайын, аҙыҡ эҙләп, баштары һуҡҡан яҡҡа олаҡҡандарҙыр.

Илфат атлай торғас, хәлдән тайып, шыбыр тиргә батты. Арҡаһына артмаҡлаған рюкзагы ауырайғандан-ауырайҙы.

Йәнде үртәп, ҡарышҡан һымаҡ епшек ҡары ла туҡтамай бит әле!

Малай, ҡарағай урманын үтеп, текә ҡая эргәһенә килеп сыҡты һәм боҙ ҡаплаған йылға аша туранан — яландағы һуҡмаҡтан ҡайтырға булды.

Кинәт алда ғына боҙ сатнап ярылды, һәм Илфат, күҙ асып йомған арала, шаптырлап, тубығына тиклем һыуға төшөп китте. Уның тәненән һыуыҡ, ҡорт саҡҡандағы кеүек, йүгереп уҙҙы. Малай, боҙға таянып, тиҙерәк сығыу әмәлен ҡараны. Әллә ауыр рюкзагы ҡамасауланы — боҙо йәнә ватылып китте. Саңғыһы ла аяғын тартып алырға форсат бирмәй бит, исмаһам!

Юҡ, боҙҙо вата-вата сығырға ла китергә, барыбер һыуланды! Илфат йәнтәслимгә алға ынтылды, һыу тәрәнәйгәндән-тәрәнәйҙе, хатта биленә барып етте. Башҡаса әмәле ҡалмаған малай, ураү булһа ла хәүефһеҙ юлды һайламағанына үкенә-үкенә, кире боролдо.

1. Кинйәкәйҙең ҡыш көнө күргән ауырлыҡтары тураһында һөйләгеҙ.
2. Илфат ниндәй маҡсат менән урманға барырға була? Ул ниндәй һәләкәткә осрай?

**90-сы күнегеү.** I бүлектәге ҡалын хәрефтәр менән билдәләнгән хәлдәрҙең һорауҙарын һәм хәл мәғәнәләрен табығыҙ.

## II

...Кәбәнгә тиклем араны тәрән көрт йырып үтте Кинйәкәй. Инәләре лә шунда ҡайырылғандыр, тип уйланы. Улар унда күренмәгәс, саҡырып тауыш бирҙе.

Кәбән... кәртәләнгәйне. Асыҡҡан марал, бер һайғауға баҫып, бесәнгә үрелде. Буйы етмәгәс, өҫкәрәк ынтылды, тик ҡапыл аяғы тайып ҡолап киткәйне... башҡаса тора алманы ла ҡуйҙы.

Их, көслө мышылар һымаҡ булһаң икән? Ағас кимереп, йәш ботаҡтар менән дә туҡланып булыр ине...

Шул саҡ бала марал үҙенә ҡарай килгән ниндәйҙер әҙәм затын аңғарып ҡалды. Тимер көпшә аҫмағанмы тип, һиҫкәнеп китте, ҡолаҡтарын ҡайсыланы. Фаразы раҫ икән, ай, эштәр харап! Теге көндө лә уларға бер зат осрап, шул әйберҙе тоҫҡағайны. Көтөүҙәренән бер ағаһы, бер апаһы ятып ҡалды.

Быҙауҙың, күпме тырышһа ла, ҡасырға хәле юҡ ине.

Бына теге зат килеп етеп уға ҡағылды. Бәй, был ни Кинйәкәйҙе иркәләп, муйынынан һыйпай. Ул йәшәйәсәгенә өмөтләнеп, күҙҙәрен асты. Ҡараһа, алдында бәләкәйерәк кенә әҙәм заты бөтөрөлә. Үҙенең иһә туңыуҙан ҡулдары, бите ҡып-ҡыҙыл булған, шулай ҙа Кинйәкәйгә ҡарап йылмайырға тырыша.

Бына малай дерелдәй-дерелдәй рюкзагын систе. Бәй, уның асыҡҡанын белгән һымаҡ, алдына миндек, бесән килтереп һалды.

— Һыйлан, маралым, һыйлан. Ҡурҡма, тартынма.

Кинйәкәй изге күңелле малайҙың һыйына үрелде. Эх, тәмле-е! Бындай ризыҡты күптән ауыҙ иткәне юҡ бит уның. Хатта бер аҙҙан үҙенә хәл керә башланы. Ә малай уның көйшәүенә оҙаҡ итеп йылмайып ҡарап торҙо ла, ҡороша-ҡалтырана, үҙ юлында булды.

...Ғәлләм ағай эштән ҡайтып инер-инмәҫтән, Гөльямал апай, уның ҡосағына ташланып, ҡысҡырып илап ебәрҙе.

— Ни ҡылабыҙ, атаһы? Иртәнән бирле... малай юҡ... Әсәй ниндәй эш бар, быны былайтайыммы, тегене тегеләйтәйемме, тип, тәүҙә ишек алдында йөрөнө... Һиҙендем: нимәгәлер

борсолған һымаҡ, шып-шым баҫып йөрөй ине. Шунан әллә ҡайҙа сығып шылған.

—Тыныслан, әсәһе, өҙгөләнмә. — Ғәлләм ағай уны йыуатырға кереште. Шунан бер ауыҡ торғас, өҫтәне:

— Ула-ай... Тимәк, бында ниндәйҙер сер булырға тейеш.

Һүҙ башҡаса ялғанманы. Ата менән әсә, ҡапыл ни ҡылырға белмәй, һәр береһе үҙ уйҙарына бирелеп, өнһөҙ ҡалды.

Шул саҡ көтмәгәндә ишек асылып китте һәм, артынан һыуыҡ быу эйәртеп, Илфат үҙе күренде. Гөльямал апай, өтәләнеп, улы эргәһенә ашыҡты, күҙ йәштәренә төйөлөп, уны күкрәгенә ҡыҫты.

— Әсәй... Атай... Көй-көймәгеҙ... Мин ма-маралдарға аҙыҡ илт-илттем...

Әсә теше тешкә теймәгән улын, сисендереп, мейес башына мендерҙе.

— Йә Хоҙай! Үҙең аҙашып китһәң?! Йәки туңып ятһаң?! Бүреләргә юлыҡһаң?! — тип һамаҡлай-һамаҡлай өҫтөнә түшәк-юрғандар өйҙө. — Ни ҡылырға?! Был өс-дүрт өйлөк ауылда фельдшер ҙа юҡ бит, исмаһам?!

Ғәлләм ағай, өтәләнә-өтәләнә, кейенергә кереште:

— Мин күрше ауылға! Фельдшерға! Әллә ни **алыҫ** ара түгел бит. Беҙҙең леспромхоздың ағас ташыған машиналары йөрөп тора. Оҙаҡламам! — тине лә, тун төймәләрен ҡаптыра-ҡаптыра, ишекте шарт ябып, сығып та йүгерҙе.

**Ҡуйы** ҡараңғылыҡ шаршауын йыртып, ҡышҡы таң һыҙыла. Уйға сумған тәбиғәт, ундағы **йән эйәләре** әкренләп йоҡоһонан уяна. Бер аҙҙан көн ап-аруҡ яҡтырҙы, кисәге ҡарҙан аҡҡа төрөнгән моңһоу тәбиғәтте хәҙер ярайһы **ғына** төҫмөрләргә **мөмкин.**

**Илфат** тәҙрәгә **баҡҡан** да ниндәйҙер уйға сумған. «Күстәнәстәрҙе ауыҙ иткәс, бала маралға хәл инеп, тороп китә алдымы икән? Көтөүен таптымы? Бер-бер бүреләрҙең йәиһә браконьерҙарҙың ҡорбаны булманымы?» — Ошондай уйҙар телгеләй ине уның йөрәген. Башҡа нәмә **тураһында уйлай** башлаһа ла, йәнә маралы иҫенә килеп төштө, шомло, **ҡурҡыныс** уйҙар ураған һайын уны хафаға һалды.

Илфат ауырып **өс-дүрт** көн ләж ятты. **Тәне** уттай янды. Температураһы бер төшөп, бер күтәрелде. Өҙлөкһөҙ **йүткерҙе.** Башы сатнап ауыртты. Эйтерһең дә, **ауыр** һандал менән килтереп һуғалар — йүткергән **һайын** күҙ алдында **зәңгәр** осҡондар бейеште.

Бына **бөгөн** ул ипкә килгәндәй булды. Фельдшер апайҙың уколдары, дарыуҙары килешә, **ахыры**. Тик әлегә хәле генә **юҡ. Ярай, барыһы** ла әкренләп үтер әле.

**Шул саҡ** тышта — тәҙрә эргәһендә — ҡар шығырлағаны ишетелде, шунан ниҙер **лерк-лерк** атлап үтеп китте. Илфат, моғайын, һыйырҙыр, тип уйланы. **Тик,** улай тиһәң, Ала-ҡашҡалары **бик** ауыр баҫып йөрөй.

Малай тәҙрәгә баҡты **һәм**... бер маралды күреп ҡалды. Туҡта, теге быҙау **түгелме** һуң **был**?

Ул тороп ултырҙы, башы сатнауҙан күҙенә зәңгәр осҡондар күренде. Шулай ҙа быға иғтибар итмәне — яурынына атаһының куфайкаһын һалды ла ашығып ишеккә йүнәлде.

Ә тышта... шундай саф һауа! Хатта бер аҙға Илфаттың башы әйләнеп киткәндәй булды.

Ә теге быҙау **ҡайҙа** ғәйеп булды һуң? Бер-бер, Илфаттың бында йәшәгәнен белмәйенсә, урман эсенә инеп олаҡманымы? Юҡ, **ана** йөрөй! Буйы етһә-етмәһә **лә**, һарай башына үрелеп бесән ялмарға тырыша.

1. Илфаттың Кинйәкәйҙе аслыҡтан ҡотҡарыуы тураһында һөйләгеҙ.
2. Илфаттың, әсәһенән һорамай, урманға сығып китеүен баһалағыҙ. Фекер алышығыҙ, һығымта яһағыҙ.
3. Кинйәкәйҙең кешеләргә килеүен аңлатығыҙ.
4. Бөгөнгө көндә Башҡортостан ҡурсаулыҡтарында хайуандарға ҡышлау өсөн шарттар булдырылғанмы? Ҡышлаусы хайуандар тураһында документаль фильмдар ҡарағыҙ һәм фекер алышығыҙ.
5. Энциклопедиянан, Интернет селтәренән маралдар тураһында өҫтәлмә материалдар табып уҡығыҙ һәм һүрәттәрен ҡарағыҙ. Презентация эшләгеҙ.

**91-се күнегеү.** II бүлектәге ҡалын хәрефтәр менән бирелгән һүҙҙәрҙең ниндәй һүҙ төркөмөнә ҡарауын билдәләгеҙ. Түбәндә бирелгән һөйләмдәрҙе тултырып яҙығыҙ.

Малай, ҡарағай урманын үтеп, текә ҡая эргәһенә килеп сыҡты һәм боҙ ҡаплаған йылға аша туранан — яландағы һуҡмаҡтан ҡайтырға ... .

Кинәт алда ғына боҙ сатнап ярылды һәм Илфат, күҙ асып йомған арала, ... . Уның, ҡорт саҡҡандағы кеүек, тәненән һыуыҡ йүгереп уҙҙы, боҙға таянып тиҙерәк ... . Әллә ауыр рюкзагы ҡамасауланы — уныһы йәнә ... . Саңғыһы ла аяғын тартып алырға ... , исмаһам!

Юҡ, боҙҙо вата-вата сығырға ла ... , барыбер һыуланды! Илфат йәнтәслимгә алға ынтылды, һыу тәрәнәйгәндән-тәрәнәйҙе, хатта ... . Башҡаса әмәле ҡалмаған малай, урау булһа ла хәүефһеҙ юлды һайламағанына үкенә-үкенә, кире ... .

*Ольга ПЕРОВСКАЯ*

*рус яҙыусыһы*

## МИШКА

### I

Урман кордонындағы өйҙә бөтәһе лә йоҡоға талған. Аҫта, ауыр таштарҙы тәгәрәтеп, тау йылғаһы гөрөлдәй. Ҡапыл гөрөлдәү аралаш аттарҙы ҡыуған тауыштар ишетелде. Атайым Фёдор Иванович менән урманға ике көнлөк сәфәренән беҙгә бүләк алып ҡайтты.

Атайым «бүләк»те һаламға яткырҙы, япмаға ураны һәм һарай ишеген тыштан таш менән терәтеп ҡуйҙы.

Майлик исемле йорт эте аяҡ аҫтында буталды. Ул ғүмер буйы шулай: атайымдың күҙенә кереп бара. Тау аҫтында тауыштар ишетелеү менән, ҡаршыларға сығып сапҡайны, әле бына үҙенә урын таба алмай. Берсә атайҙың итеген ялай, берсә, башын юғары сөйөп, ихата тирәләй өйөрөлә — күрешеү шатлығынан тилереп бара. Ә атайым һарай ишеген таш менән терәткәс, Майлик, уны тәпәйҙәре менән ҡосаҡлап, кире ауҙарырға аҙапланды.

Эште бөтөрөп, бөтәһе лә өйгә керҙе.

Болдорҙа самауыр шаулай. Әсәйем ашарға әҙерләгән арала, атайым урманда «бүләк»те нисек табыуҙарын һөйләне:

— Кешеләрҙең хөсөтлөгөн әйт һин. Яҙ йәнлектәрҙең бала килтереүен, уларҙы атырға ярамағанлығын беләләр бит, белә тороп аталар. Бер яуызы бының инәһен үлтереп киткән, ә был, бисара, тегенең үле кәүҙәһенә төртөлөп тик йөрөй. Донъяға яңы килгән сабый ҡайҙа барһын инде. Ташлап китһәң, һәләк буласаҡ. Фёдор Иванович менән уйлаштыҡ та, йәлләп, алып ҡайтырға булдыҡ. Балалар менән бергә үҫер әле.

Әсәйем дә быны хуп күрҙе. Был бәләкәс «бүләк»те ул күреү менән оҡшатты һәм яҡлаусыһы булып китте.

Уның аяҡтары оҙон, тояҡтары осло, муйыны нәҙек, башы йомро. Дегәнәк япрағылай ҙур ҡолаҡтары бер өҙлөкһөҙ

ҡыбырлап тора. Күҙҙәре бешкән сливаны хәтерләтә. Маңлайы киң, ә мороно бәләкәй, танау тишеге бер киңәйеп, бер тарайып тора. Буйы менән ул яңы тыуған ҡолонҡай ҡәҙәре. Уның мамыҡтай йомшаҡ йөнөн һыйпағы ғына килеп тора, һыртының ике яғында ла аҡ бөрсөктәр күренә. Ҡойроғо юҡ тиерлек, уның урынына сонтоҡ ҡына йыуан ҡырҡынды, ә тирәләй ҙур аҡ тап: гүйә, салфетка элеп ҡуйғандар.

— Исеме бармы уның, әсәй?

— Бар. Мишка. Сөнки уны Михайловка ауылы эргәһенән табып алғандар.

Мишка әсәйем биргән һөттө төпһәреп ҡуйҙы, күнәкте янтайтып, һуңғы тамсыларын һемерҙе лә башы менән төртөп алып китте. Төртә торғас, күнәк ауҙы, һарайҙан тәгәрәп сыҡты. Мишка, күнәк артынса сығып, тағы уға башын тыҡты һәм шул көйөнсә ишек алдында урала башланы.

Самауыр ҡайнап сығып, беҙ өйгә ыңғайлағас, Мишка, беҙҙең арттан эйәреп, болдорға менде. Беҙ сәй эскәндә, ул, тояҡтары менән шаҡ-шоҡ баҫып, бүлмә буйлап йөрөнө, юлында осраған бар нәмәне оҙаҡлап еҫкәне. Тәҙрәгә лә үрелә, карауат аҫтына ла һонолдо, эскәмйәлә торған көршәктәргә лә моронон тыҡты. Унан ул икенсе бүлмәгә сығып еҫкәнде һәм, үҙенсә уңайлы урын табып (тупһа янында, тап юл өҫтөндә!), һуҙылып ятты.

Уның эргәһендә генә иҙәндә ҡағыҙ киҫәге ята ине. Мишка уны ирене менән эләктереп алды ла ҡыштыр-ҡыштыр мөнйөргә кереште.

Дүрт йәшлек Наташа уның ҡағыҙ сәйнәгәнен ҡарап торҙо ла, ныҡлы ҡарарға килеп, ултырғысынан төштө. Өҫтәлдән икмәк ҡыйырсығы алып, уның йомшағын айырҙы.

— Һин нимә эшләйһең ул? — тине әсәйем.

— Быҙауҡай асыҡҡан, — тип яуапланы Наташа. — Ана, ҡағыҙ ашай.

— Юҡсы, ул былай ғына. Беҙ бит уны ашаттыҡ. Тамағы туҡ.

— Юҡ, әсәй, туҡ түгел! Ҡағыҙ ашай бит!

Ҡыҙыҡай Мишка эргәһенә ултырҙы ла уға икмәк ҡатыһы һондо. Теге ашыҡ-бошоҡ ҡағыҙын сәйнәп йотто ла ҡыйырсыҡты тәмләп кетерләтергә кереште. Әйтерһең дә, өс көн ас торған.

Наташаның йөҙө балҡыны.

— Күрҙеңме, нисек ашай! Ә һин туҡ тигән булаһың.

Тәүге мәлдә Мишка әсәйем артынан бер тотам да ҡалмай йөрөнө. Ашауға, йоҡоға шәп булды. Беҙ ҡайһылай ғына уның күңелен табырға тырышһаҡ та, ул беҙгә, балаларға, әйләнеп тә ҡараманы.

Шулай ике айлап ваҡыт уҙҙы. Тора-бара Мишка беҙгә лә, тирә-йүнгә лә эйәләште. Ул инде эттәрҙән дә бик ҡурҡып бармай һәм өйҙән ситкә китеп йөрөргә лә тартынмай ине.

Мишканың һыртындағы аҡ бөрсөктәр юҡҡа сыҡты, ябағаһы ҡойола башланы. (Боландарҙың һәм ҡыр кәзәләренең балаларында аҡ таптар улар бәләкәй саҡта ғына була һәм аҙаҡ бөтөнләйгә юғала.) Уның маңлайында ике оро ҡалҡты — мөгөҙ үҫә башланы.

Мишканың күҙенә эләккән бер әйберҙе сәйнәүе уның иң алама ҡылығы булғандыр. Беҙгә шаҡтай ҡиммәткә төшә ине уның был ғәҙәте. Тәҙрә ҡорғандарында, ашъяулыҡтарҙа Мишка һалған тамғалар байтаҡ була торғайны.

Бер саҡ шулай атайыма шкаф асҡысы кәрәк булған. Ул билгеле бер урында — сөйҙә элеүле тора. Эҙләргә керештек. Өйҙә, ихатала эҙләмәгән ер ҡалманы — юҡ асҡысыбыҙ.

Йоҙаҡты ватырға ҡул бармай: бигерәк шәп инглиз йоҙағы.

— Кем алды асҡысты? Ниндәй тәртипһеҙлек был? — тип асыулана атайым.

Асҡысты табыуға инде өмөттө өҙгәс, әсәйем Мишканың ауыҙ ситенән ниндәйҙер сепрәк сығып тороуын шәйләп ҡалды. Сепрәкте тартып сығарһа... Ниндәй сепрәк, тип уйлайһығыҙ? Элеге асҡыс ҡайышы! Уның яртыһын Мишка сәйнәп йотҡан, асҡысы ла тегенең ҡарынына киткән.

— Бына имгәк!.. Ниндәй тәм тапҡандыр асҡыста! — тип туҙына атайым.

Тимер һынлы тимерҙән Мишка сирләп китер тип уйлағайныҡ, ә ул ыжламаны ла. Күрәһең, асҡыс уға оҡшап ҡалған — уның бындай шуҡлыҡтары әле тағы бихисап булды.

Бер саҡ атайым лапаҫта арба майлаған арала, теге арҡалыҡты сәлдергән.

Атайым уның оҙон аҡ таҫма сәйнәгәнен күреп ҡалған да ауыҙынан тартып алған. Баҡһаң, ҡайыштың бер метрға яҡыны уртаһындағы тимер дүңгәләктәре-ние менән Мишканың ауыҙына инеп ғәйеп булған. Оҙаҡ сәйнәүҙән ҡатҡыл ҡара ҡайыш, ебеп, сепрәктәй йомшарған, буҙарып бөткән.

1. Өҙөктән аңлашылмаған һүҙҙәрҙе табығыҙ һәм мәғәнәләрен аңлатығыҙ.

2. Марал менән булған ваҡиғаны баһалағыҙ. Тәбиғәткә, йәнлектәргә ҡарата яуызлыҡ уйлаған кешеләрҙең мөнәсәбәтен үҙгәртеп буламы? Уның өсөн нимә эшләргә кәрәк?
3. Марал балаһының балаларға ҡарағанда әсәй кешегә ныҡлы эйәләшеүе тураһында фекерегеҙҙе әйтегеҙ.
4. Интернет селтәренән, энциклопедиянан марал тураһында мәғлүмәттәр табып алып, ҙур булмаған сығыш әҙерләгеҙ.

## II

Йәй, көҙ, ҡыш үтеп, Мишканың икенсе яҙы килеп етте. **Уға инде тулыҙ ай тулып уҙҙы.** Ҡарап тороуға ул ҡышлаған тананан ҙурыраҡ. Көслө нәҙек аяҡлы, һомғол. Ағаслыҡта йәш ботаҡтарҙы мөнтәп йөрөй, үләнгә эйелмәй ҙә. Уның башын һәр саҡ юғары тотоуы ла ошонан киләлер, моғайын.

**Әкренләп уға мөгөҙ ҙә тиртеп сыҡты.** Башта ул йомшаҡ, шешенке һәм ныҡ өлгөргән персикка оҡшаған ине. Мамыҡтай төк менән ҡапланғайны.

Мишка ҡояшҡа ҡаршы басһа, уның мөгөҙө эсендә ҡыҙыл ҡан ялтырай. Был ҡан алтынға бәрәбәр. Уны дарыуға файҙаланалар. Маралдарҙы махсус хужалыҡтарҙа үрсетәләр һәм мөгөҙҙәре ошондай осор кисергәндә уларҙы киҫеп алалар. Бынан һуң хайуандар бик оҙаҡ сырхаулап йөрөй, хатта үләләр ҙә.

Билдәле, Мишканың мөгөҙөн киҫергә уйлаған кеше юҡ. **Беҙ бөтәбеҙ ҙә уға ныҡ эйәләштек.** Шундай мәхлүкте рәнйетергә кемдең ҡулы барһын?!

Мөгөҙө ҡатыланғансы, Мишка үҙе лә бик йыуаш, яғымлы булды. Бер кемдән дә тартынмайынса килеп ышҡына, үҙенсә мөгөҙөн ҡашырға ҡуша. Ә мөгөҙө ҡап-ҡайнар, үтә һиҙгер. Бармағың менән ҡатыраҡ ҡағылһаң, хайуан тертләп китә һәм тибешә башлай.

**Ошо ваҡыт эсендә беҙ Мишка менән тамам дуҫлаштыҡ.** Көндәр буйы бергә уйнайбыҙ. **Урманға йә тауға сыҡҡанда ла беҙҙән ҡалмай ул.**

Күҙ алдығыҙға килтерегеҙ: беҙ — дүрт ҡыҙыҡай; беҙгә яҡындағы ҡаҙаҡ ауылынан килгән дуҫтарыбыҙ һәм биш-алты эт эйәргән, ә уртала — Мишка. Ул элек тә яңғыҙ ҡалырға яратмай ине, ә хәҙер бигерәк тә кешеләргә һырығып бара.

**Бер саҡ беҙ уны һөҙөшөргә өйрәттек.** Был уйын Мишканың мөгөҙҙәре ҡатыланғансы дауам итте. Шунан инде уны ҡыуышырға өйрәтеүебеҙ өсөн бик ныҡ үкенергә тура килде беҙгә.

Мөгөҙҙәр нығып еткәс, уны ҡаплап торған мамыҡ йөн, тумарланып, тиреһе-ние менән ҡубып төшә башланы. Был йөнлө ҡыртыштан тиҙерәк арыныу өсөн, Мишка мөгөҙө менән ағасҡа ышҡына. Ниһайәт, ул тамам ҡойолоп бөттө. Мишканың был тәүге мөгөҙҙәре әле ҙур ҙа, тармаҡлы ла түгел ине.

Икенсе йылында, Мишка тәүге мөгөҙөн ташлап, яңыһы сыҡҡас, уларҙа инде ике тармаҡ барлыҡҡа килде. Маралдарҙың бөтәһе лә шундай: тармаҡтарҙың һаны йылдан-йыл арта бара. Болан етлеккәнсе дауам итә был.

Тармаҡтарға ҡарап, һунарсылар боланға нисә йәш булыуын яҡынса әйтеп бирә алалар.

Йылтырап торған осло мөгөҙгә тейенеп алғас, Мишка, бөтөнләй ҡупырайып, һомғол кәүҙәһен ғорур йөрөтөр булды.

Бер көндө ул ҡарбуз ҡабығы өсөн Наташаны һөҙгәс, атайым уны һарайға бикләп ҡуйҙы. Икенсе көндө, бесән һалғанда, кәртә башындағы тишектән атлыҡсаға осоп төшкәс, мине лә һөҙҙө. Ошонан һуң беҙ Мишка менән дуҫлыҡты өҙҙөк. Бер-ике көндән ирекккә сығарылған Мишка иһә тамсы ла төҙәлмәне, киреһенсә, тағы ла холоҡһоҙлана төштө.

Кордондан алыҫ түгел Һалбыртау тип йөрөтөлгән урында бер ҡарт йәшәй ине. Уның кескәй суҡалаҡтай ғына өйө, бер нисә умартаһы бар. Бал ҡорттары табыш эҙләп алыҫ осмаһын өсөн, ул умарталыҡ эргәһендәге аҡланда гөл баҡсаһы булдырған — унда ялан сәскәләре дарья булып ултыра.

Тауҙа йөрөгәндә, был аҡлан Мишканың күңелен арбаған, күрәһең, ул бында тағы килеп сыҡҡан.

Мишка ҡабаланмай ғына бөтә хужалыҡты ҡыҙырып сыҡты, аҙаҡ ерҙән бер ни тиклем ҡалҡып торған тупраҡ өйөмөнә — мөгәрәп түбәһенә менеп ятты. Йоҡлар өсөн ул шулай иң ҡулайһыҙ урындарҙы һайлай торғайны.

Көндөҙ Мишка урманға сығып ғәйеп булып торҙо, ә кис тағы яңы әшнәһе эргәһенә ҡайтты. Ун көн самаһы шулай йәшәнеләр улар. Мишка был мәлдә кордонда күренеп кенә киткеләне.

Умартасы ҡарт Мишканы улай-былай ҡыйырһытманы, шулай ҙа күңеленән ул «урман бәрейе»нең умарталыҡтан алыҫ йөрөүен артығыраҡ күрә ине. Сөнки ул байтаҡ әйберҙәрен сәйнәп өлгөрҙө, сәскәләрен тапаны, умарталарҙы һөҙөп, ауҙарып бөтөрҙө.

Ҡарт был «ҡәһәр һуҡҡан януар»ға ҡат-ҡат ләғнәт уҡыны, аҙаҡ күҙенә салынған һайын, боланды ҡыуып ебәрҙе.

Тиҙҙән тәүге ҡар төштө. Шатланып ҡаршыланы Мишка был ваҡиғаны. Ҡарҙа ул әллә ниндәй бейеүҙәр башҡарҙы, һыу ҡойонғандай, бата-сума ауноны; ҡар болоттары ҡуптарып, ағастарҙың ботаҡтарын эйҙе, ҡарҙы аяҡтары менән туҙҙырҙы, шунан, эҫергәнеп, ҡар ашарға кереште.

Ҡышҡа ҡарай уның ниндәй ҡупшы тунға төрөнөүен әле генә абайланыҡ. Муйынында, елкә төбөндә йөнө бигерәк тә оҙон һәм ҡуйы — әйтерһең дә, Мишкабыҙ матур яға кейеп алған. Ҡорһаҡ аҫтындағы йөнө лә ҡуйырып, суҡлы-сасаҡлы булып киткән. Ә аяҡтары, йәй көнөндәгесә, һаман да нәҙек, шыма.

Көндәр йылыға тартып, ҡарҙар ирей башлағас, Мишка, йорттан екһенеп, күберәген урманда йөрөй башланы. Февраль башында тағы баҡтаһы ҡойолдо. Уның һоро көрән туны киҫәк-киҫәк булып һыҙырылды, мөгөҙө төштө. Мишкабыҙ үҙе лә йыуашайып, бойоғоп ҡалды, тынысһыҙланды, ябыҡты, тумһайҙы. Йәй башында уның тағы мөгөҙө шешенде. Ҡанһыраған мөгөҙөнә ҡара болот булып ябырылған себен, күгәүендән яфа сиккән Мишка, башын ҡайҙа ҡуйырға белмәй, көндәр буйы һарайҙың ҡараңғы мөйөшөндә тора, кискә ҡарай ғына боҫҡан урынынан сығып, ағастарҙың йәш япраҡтары һәм ботаҡтары менән тамаҡ туйҙырырға урманға юл тота.

Әсәйем Мишканы бигерәк ҡыҙғана. Себендәр ултырмаһын өсөн, бахырҙың мөгөҙөн ниндәйҙер дарыу менән дә майлап ҡарағайны, әммә был зәһәрле нәмәкәй, Мишканың пантын (боландың йәш мөгөҙө шулай тип атала) яндырып, уның ғазабын ғына арттырҙы.

Хайуанҡайҙың күңелен табыу өсөн, әсәйем уны төрлө тәмле нәмәләр менән һыйлай. Теге рәхмәт йөҙөнән, күрәһең, әсәйҙе бөтәбеҙҙән дә нығыраҡ ярата: уны һис ҡаршылашмайынса тыңлай, артынан эйәреп йөрөй, әгәр ҙә әсәйем, күтәрмәгә сығып, бәйләм бәйләргә йәки тегеү-сигеү эшенә тотонһа, уның эргәһенә һуҙылып ята.

Йыш ҡына хайуанҡай үҙенең моңһоу томшоғон әсәйемдең яурынына һала ла, үҙен наҙлап һыйпауға кинәнеп, күҙҙәрен йомоп тора. Әгәр ҙә инде Мишка берәй яҙыҡ эш ҡылһа, уны әсәйемдән дә ихласыраҡ яҡлаған кеше юҡ.

Һуңғы ваҡытта ул Мишка өсөн борсола башланы: уны ҡырағай болан тип уйлап, ошо тирәлә йөрөгән һунарсылар атып ҡуймағайы. Шундай хәл булмаһын өсөн, ул Мишкаға ҡайыш муйынсаҡ яһаны һәм уға ике ҙур бант бәйләне: береһе

бурҙат, береһе зәңгәр туҡыманан. Әммә, сағыу банттар алыҫтан күренеп торһа ла, улар Мишканы ҡазанан һаҡлай алманы.

Беҙҙең яҡҡа ҡайҙандыр бер һунарсы-натуралист килеп сыҡҡан. Тау яғында, беҙҙән бер-ике саҡрым алыҫлыҡта, палатка ҡороп йәшәй икән был. Фотоаппаратын аҫып ала ла көндәр буйы тауҙарҙа йөрөй, юл ыңғай төрлө таштар, үләндәр йыя — имеш, тәбиғәтте өйрәнә. Кисен, палаткаһына ҡайтып, тамағын хәстәрләй, көндөҙгө табыштарын барлай һәм төрлө тартмаларға тултыра.

Шулай бер көндө Мишка, һарайҙан сығыу менән, палатҡаға юл тота. Килһә, палатка ауыҙы асып ҡуйылған. Мишка, ҡыҙыҡһына төшөп, уны-быны уйламайынса, палаткаға томшоғон тыға.

Уның бәхетһеҙлегенә ҡаршы, натуралист өйҙә булып сыға.

Йә Хоҙай! Аусы йораты ҡурҡышынан Мишканың муйынындағы бантын абайламай, мылтығын ала ла, терәп тигәндәй, быға атып ебәрә.

Мишка һушһыҙ ергә тәгәрәй.

Ошо тирәнән үтеп барған урман ҡарауылсыһы, был хәлде күреп, атайыма йүгереп килде.

— Тиҙерәк булығыҙ! Эш харап! Мишкағыҙҙы үлтерҙеләр! — тип оран һалды ул, ихатаға атылып кереп.

Атайым бағанаға бәйләп ҡуйылған Турыҡайҙың теҙгенен тартып ҡына өҙҙө лә, мылтығын эләктерә һалып, әйткән ергә елдерҙе.

Атайым ҡыҙыулыҡ менән берәй хилаф эш ҡылмағайы тип, әсәй уның артынан төштө.

Әсәй барып етһә, атайым теге натуралисты ахмаҡлыҡта ғәйепләп ҡыҙҙыра, ә теге, оятынан ҡыҙарып-бешеп, ғәфү үтенә икән.

— Башы бармы икән был ҡала халҡының? Ҡырағай болан кешегә шулай яҡын киләме ни? Их һеҙ, тәбиғәт белгестәре!..

Атайым Мишканың мөгөҙөнөң бер өлөшөн киҫеп ташлай, натуралист йүгереп йөрөп ярҙам итә.

Ер тырнап аҡыра бахыр хайуан. Мөгөҙҙән ҡан шул тиклем ныҡ һиптерә — дүрт аҙымдағы ағасҡа тиклем сәсрәй. Мишка, хәлдән тайып, беше киндерҙән ҡоролған әүеҫлек аҫтында төнө буйы ыңғырашып сыға.

Иртәгеһен Мишка, аяғына баҫып, атайым ярҙамында өйгә ҡайтып инде.

Ул йылда уның мөгөҙҙәре икеһе ике төрлө булды: береһе ҡәҙимгесә, икенсеһе ҡыҫҡа, үтәләй тишкеләнгән. Улар гел шулай булып ҡалыр тип уйлағайныҡ та, яңылыштыҡ. Киләһе яҙҙа Мишка уларҙы һалып ташланы, ә июль башына яңы мөгөҙҙәре үҫте. Улар тағы ла матурыраҡ, һәлмәгерәк, тармаҡлыраҡ ине.

Мишкаға бишенсе йәш китте.

Был йәйҙә Мишка бигерәк тә шуҡланды. Дачаларҙағы баҡсаларҙа емештәр өлгөргәс, аҙналар буйы өйгә ҡайтманы беҙҙең тәмле тамаҡ. Ҡалаға бара торған юл буйлап түбән төшөп китә лә, күңеленә хуш килгән берәй урында туҡтап, ҡойма аша ырғый һәм, ирене менән эләктереп, ботаҡты һелкетә башлай. Алма шыбырлап ергә ҡойола.

Маралдың беҙҙеке икәнен белгәс, улар зарланышып атайыма килә башланылар.

Атайым әйтмешләй, «һуғыш яланы»нан беҙ минут һайын күңелһеҙ хәбәрҙәр көтөп йәшәй башланыҡ.

Алты йәше тулғас, ул ике ай буйы өйҙә күренмәне. Берәйһе Мишканы атып үлтергәндер тип уйлап, әсәйем ҡайғыға ҡалды.

Тап ошо мәлдә, атайым урманда бер нисә ҡырағай марал күреп ҡайтҡан икән. Был турала ул әсәйемә әйтте һәм өҫтәп ҡуйҙы:

— Уларға ҡушылып китһә, Мишкаңдан бөтөнләй ҡолаҡ ҡағырһың әле.

Юҡ, әсәйем быға ышанманы, йөрөр-йөрөр ҙә кире ҡайтыр, тип уйланы. Әммә атайымдың юрауы дөрөҫкә сыҡты: башҡаса беҙҙең тирәлә күренмәне Мишкабыҙ. Тәбиғәт үҙенекен итә шул. Йәше еткәс, болан үҙенә иш эҙләй, һәм был саҡта ул бөтә донъя менән һуғышырға әҙер. Мишка ҡәҙер күргән, ҡеүәт йыйған марал ине, шулай булғас, ул үҙенең көндәштәрен һис шикһеҙ еңеп сығыр, тип йыуанырға ғына ҡалды. Моғайын, ул бөтә маралдарға баш булыр.

Хуш, Мишка, иҫән-һау йәшә!

1. Әҫәрҙе мәғәнәүи өлөштәргә бүлегеҙ, план төҙөгөҙ һәм уның буйынса йөкмәткене һөйләгеҙ.
2. Әҫәрҙең аҙағында Мишканың ҡайҙа китеүе билдәһеҙ. Был турала фекер алышығыҙ һәм уның артабанғы яҙмышы тураһында үҙегеҙ уйлап инша яҙығыҙ.
3. Медицинала маралдың мөгөҙөнән эшләнгән дарыуҙар тураһында Интернет селтәренән белешмәләр табып уҡығыҙ һәм презентация әҙерләгеҙ.

**4.** Алтайҙағы «Пантопроект» компанияһының продукцияһы тураһында Интернет селтәренән мәғлүмәттәр табып уҡығыҙ.

**92-се күнегеү.** II бүлектәге ҡалын хәрефтәр менән бирелгән һөйләмдәрҙе һөйләм киҫәктәре буйынса тикшерегеҙ.

## «ҺӨЙЛӘМДЕҢ БАШ КИҪӘКТӘРЕ» ҺӘМ «ҺӨЙЛӘМДЕҢ ЭЙӘРСӘН КИҪӘКТӘРЕ» ТЕМАЛАРЫ БУЙЫНСА ҮТЕЛГӘНДӘРҘЕ ҠАБАТЛАУ

**1.** Һөйләм киҫәктәре тураһында һорауҙар төҙөгөҙ.
**2.** *Ауыр* һүҙе менән биш һөйләм төҙөгөҙ. Һәр һөйләмдә ул төрлө һөйләм киҫәге булып килһен.

## ХӘТЕР ҺАНДЫҒЫНА...

Ғинуарҙың көнө ҡыҫҡа, февралдең айы ҡыҫҡа.

* * *

Йәйҙең бер көнө ҡыштың бер аҙнаһына тора.

* * *

Йәйен айранһыҙ булма, ҡышын юрғанһыҙ булма.

* * *

Ҡара һыуыҡ ҡарҙан яман.

* * *

Ҡыш бауыры оҙон.

* * *

Ҡыш ҡайғыһын яҙ ҡайғырт.

# ДАНЛЫ ЙЫЛДАР, ШАНЛЫ ЙЫЛДАР

*Мостай КӘРИМ*

## ҮЛМӘҪБАЙ

### 1. Тәүге һунар

Минең яҙғанды уҡығас,
«Әкиәт», — тимә, ҡоҙа,
Бына ул усаҡ янында
Сылғау киптереп тора.

Тирәләп халыҡ ултырған,
Уртала усаҡ яна,
Ситтәрәк ҡулы бәйләнгән
Офицер тулап ята.

Үлмәҫбай һирәк мыйығын
Ҡапыл тырпайтып ала,
Ҡыҫыҡ күҙен ҡыҫа төшөп,
Хәйләкәр ҡараш һала.

Ул офицерҙы йыуата:
«Һин тыпырсынма, ҡуян,
Хәҙер ошо сылғау менән
Ағасҡа аҫып ҡуям...»

Гөж килә ағай-энеләр:
— Хитрый ҙа һин,
Үлмәҫбай.
Был йәнлекте ҡайҙа тоттоң,
Һөйләп ташласы, давай.

Ялындырырға яратмай,
Тел асҡысы — теләге,
Үлмәҫбай тыңлаусыларға
Ошо хәлде һөйләне:

— Һунарсы — минең ырыуым,
Һунарсы — ата-бабам,
Һунарсы ҡаны үҙемдә,
Һунарсы булыр балам.

Ғәҙәт — ҡылыҡтың энеһе,
Бик ғәжәп бит ул ғәҙәт,
Һунар сыға һалыуыма
Шул ғәҙәт булды сәбәп.

Хазина ине уҙған төн:
Йондоҙло, айлы ине,
Немецҡа тоҙаҡ һалырға
Бигерәк яйлы ине.

Күркәләнеп сығып киттем,
Ергә лә теймәй табан, —
Әйтерһең, тыуған Уралға
Ҡунаҡҡа ҡайтып барам.

Тегеләр яғына еткәс,
Ҡулды күтәргән булам,
Йәнәһе, рәтен килтерәм,
(Хәйлә кәрәк бит, туған).

Һалдаттар килеп кеҫәне,
Ҡуйынды һәрмәп ҡарай,
Ә еңгә күҙ төшөрөргә
Баштары етмәй, малай.

Бер заман, себен шикелле,
Алдылар мине ҡамап:
— Үҙең теләп нәрәтәгә
Килеп индеңме, сабаҡ?!

— Офицерға илтегеҙ! —
тим, —
Гәп һатырға ваҡыт тар,
Берәй ғәмәлгә ярарлыҡ
Һүҙ әйтеп һалыуым бар.

Штабҡа илтәләр. Күрәм
Дейеүгә хас бәндәне,
Ошо, күрәһең, быларҙың
Офицер тигәндәре.

Доклад яһайым үҙенә:
— Үлмәҫбай атлы булам,
Тау башҡорто тоҡомонан
Салауат затлы булам.

Икәүҙән-икәү ҡалабыҙ,
Беребеҙ — күҙ, беребеҙ —
ҡаш,
— Башҡорт... башҡорт... —
ул мығырлай, —
Ниндәй януарға оҡшаш?

Яуапты тапҡыр ҡайтарам:
— Ғәфү итегеҙ мине,
Немец башын ҡырт-ҡырт
ҡырҡа —
Ана шул башҡорт инде.

Ә илем Рәсәй була,
Дауылы, еле лә бар,
Һинең бабаң батып үлгән
Чуд тигән күле лә бар.

Офицер әй боларынып,
Ҡыҙып китә шул саҡта,
Шым ғына ҡулға төшөрәм
Мин дә ике «туҡмаҡты».

— Тауышты яратмайым, —
тим, —
Ҡиммәт бит һиңә ғүмер.
Бына, күрәһеңме быны:
Икебеҙ ҙә — көл-күмер.

— Һин шаянға оҡшайһың, —
ти.
Мин әйтәм:
— Улаймы ни,
Эш бар саҡта, шаярырға
Ыштанһыҙ малаймы ни?

Бына һеҙҙе тар-мар иткәс,
Илдә байрам-туй булыр,
Туй мәлендә шаярырға,
Уйнарға ла уй булыр.

Ә хәҙергә наганыңды
Өҫтәлгә сығарып ҡуй,
Күңелеңә төшөүе бар
Бер-бер төрлө ҡара уй.

— Атырмын! — ти.
Ә мин әйтәм:
— Ҡиммәт бит һиңә ғүмер,

Бына күрәһеңме быны:
Икебеҙ ҙә — көл-күмер.

Мирный ваҡыт булһа,
бәлки,
Кәңәш тә ҡорор инек.
Бер-беребеҙҙе баллап-
майлап
Өгөтләп торор инек.

Үҙең беләһең, господин,
Хәҙер һуғыш заманы,
Һәр эштә йылдамлыҡ кәрәк,
Ваҡыт яғы самалы.

Аяғын тибеп екерҙе,
Ҡалтырап китте иҙән,
Наганын ырғытып бәрҙе:
— Ни кәрәк һиңә минән?!

— Сәпсенмә, — тим, — йә
ҡағылыр
Йәһәннәмдең елдәре,
Аңлау кәрәк, тәртә тулап
Аттың бармы еңгәне?

Вот шулай. Хәҙер үҙеңде
Ҡунаҡҡа алып китәм,
Аҙаҡтан маҡтап йөрөрһөң:
«Башҡорт ҡунаҡсыл
икән...»

Йәнәшә сығып китәбеҙ,
Бик эре сирттерәбеҙ:
Йәнәһе, начальник менән
Постарҙы тикшерәбеҙ.

Беҙ үтәбеҙ, ә һалдаттар
Сәләмләй тура ҡатып,
Тик ай ғына шул сағында
Ҡайҙалыр ҡалды батып...

Һөйләгәндең тамсыһы ла
Экиәт түгел, туған,
Ана, ул ята. Ә үҙем
Сылғау киптереп торам.

1. *Сылғау, гәҙәт, гәжәп, табан, туҡмаҡ, тоҙаҡ* кеүек һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен аңлатығыҙ һәм рус теленә тәржемә итегеҙ.
2. *Тел асҡысы — теләге, гәҙәт — ҡылыҡтың әнеһе* кеүек һөйләмдәрҙең мәғәнәләрен аңлатығыҙ.
3. Туғанлыҡ терминдарын дауам итегеҙ: *ҡоҙа, ...*
4. Өҙөктәге русса һүҙҙәрҙе башҡорт һүҙҙәре менән алмаштырып уҡығыҙ һәм һөйләмдәрҙең мәғәнәһенең үҙгәреүе йәки үҙгәрмәүен күҙәтегеҙ.

## 2. Үлмәҫбай туйға бара

Тауыҡтар төнәгән мәлдә,
«Һунарҙан» ҡайтып киләм.
Теребайҙың Саптарынан
Арттараҡ ҡалды Ерән.

Буш теҙгенде һиҙеп, буғай,
Башҡайын сайҡай атым,
Уҡып барам Гөлбикәнең
Уралдан яҙған хатын:

«...Һин егеттәрҙең-егете,
Минең Үлмәҫбайғынам,
Бер һинең өсөн шатланам,
Берсә тағы ҡайғырам.

Иç киткес батырлығына
Һоҡлана Урал иле.
Тик бына шул хаттарыңды
Йышыраҡ яҙһаң ине...

Осоп барып күрер инем,
Ҡанатым булһа икән,
Ошо сәләм хатын яҙҙы
Һин һөйгән ҡыҙ —
Гөлбикәң...»

Ҡапыл юлға бер ҡарт баçты:
— Һаумы, Үлмәçбай таныш!
Үҙе биш ҡарыш самаһы,
Һаҡалы етмеш ҡарыш.

— Башҡорттоң егетенә, —
ти, —
Партизанский сәләм!
Үҙе мине маҡтап китте:
Фәлән-фәсмәтән, төгән...

— Сер итеп кенә әйтәм, —
ти, —
Ҡолағыңа һала ҡуй,
Фәлән төндә, төгән ерҙә
Фашистар типтерә туй.

Мир башы ҡыҙы немецҡа
Ул көн кейәүгә сыға.
Һаҡалым менән инәләм,
Һүҙемде йыҡма, ҡоҙа!

Кемгә тейә былай хөрмәт?
Әлеге лә баяғы,
Хәстәрен күр. Беҙҙә тиһәң,
Наҡыçыраҡ һый яғы.

Әйткән һүҙ — атҡан уҡ
булһын,
Мин үҙем — ныҡыш бәндә;
Ошо ерҙә көтәм һине,
Тауыҡтар төнәр мәлдә.

Ауыҙ асып яба алманым,
Һыу булып һеңде ҡартым,
Туй көтә беҙҙе, туй көтә,
Елдәй ел, Ерән атым!

Тар һуҡмаҡ киңәйгән ерҙә,
Үткәс урман аҡланын,
Һә тигәнсе ҡыуып еттем
Теребайҙың Саптарын.

Ҡыуаныстан һөрән һалам,
Ҡаушап китте Теребай:
— Юлда бәхет аунап ята,
Эштәр әкәмәт, малай!

Башта төшөнмәй маташа:
«Башым, — ти, — тубал
бөгөн!»
Һөйләп бирҙем Теребайға
Мәсьәләнең елеген.

Саҡ-саҡ болотҡа теймәне
Теребайҙың кәпәсе.
Теребай бит беҙҙең яҡта —
Беренсе туй әтәсе!

Ул кейәү егете икән,
Моғайын, ғауға була.
— Туйҙа, — ти, — көршәк
түпәçләү —
Борондан ҡалған йола.

Ил йолаһын, — ти
Теребай, —
Тыу итеп күтәрәйек.
Башҡорттарҙың туй ғәҙәтен
Немецҡа күрһәтәйек!

Уларса барып сыҡмаһа,
Ғәйеп итмәçтәр әле.
Ашыҡ-бошоҡ эш ҡылынһа,
Ничево, һуғыш мәле!

Егеттәр теле әйткән һүҙ —
Ҡырҡылып ауған имән.
Таш яуһа ла, юлда булһын
Саптар ат менән Ерән!

Төйөп-төйөп тултырманыҡ
Туй малын һандыҡ-һандыҡ,
Йөҙгә ҡыҙыллыҡ
килмәҫлек
Үҙебеҙсә яһандыҡ.

Туй кисе боларып килде,
Елләнеп, дауылланып,
Пыр туҙа күктә болоттар,
Йәшенләп, яуынланып.

Теребайға әйткән булам:
— Көн шәптән түгел алай…
Әллә биргән вәғәҙәне, тим,
Ҡыйшайтабыҙмы, малай?

— Алйот, — тип һүгә
Теребай, —
Түмәрҙер һинең башың!
Туй өсөн ошондай кисте
Эҙләп тә таба алмаҫһың.

Егеттәр теле әйткән һүҙ —
Ҡырҡылып ауған имән.
Туй юлына сығып китте
Саптар ат менән Ерән.

Әлеге ҡарт ҡаршы ала:
— Һаумы, Үлмәҫбай
таныш?
Үҙе биш ҡарыштай булыр,
Һаҡалы етмеш ҡарыш.

Ҡарт серле таяғы менән
Ҡартлас имәнгә һуға.
Ҡапыл, гүйә, ер аҫтынан
Өс батыр ҡалҡып сыға.

Ҡарт әйтә: «Бына өс улым,
Хаҡ юлдаштар булығыҙ.
Таяныс һеҙгә ҡара төн,
Аҡтыр һеҙҙең юлығыҙ.

Алдығыҙҙа ошо һуҡмаҡ,
Эйәрҙән һикерегеҙ,
Туй бүләген ҡуйындарҙа
Һыуытмай еткерегеҙ».

Ҡарт ҡалды. Тайғаҡ
һуҡмаҡтан
Барабыҙ башты эйеп,
Әй барабыҙ, көн барабыҙ,
Ай, йыл барабыҙ кеүек.

Тау аҫтында кескәй ауыл,
Эт тә юҡ урамында,
Ҡарттың бер улы күрһәтә:
— Туй була бына бында…

Эйелеп яҡын киләбеҙ,
Өйҙәре бейек кенә,
Бишебеҙ, биш себен булып,
Биш тәҙрәгә менә.

Эштәр әкәмәт: немецтар
Ну эре сирттерәләр!
Сүл бүреһе туйымы ни,
Олошоп типтерәләр.

Эскә инеп, шат табынды
Ҡуҙғатырға «ҡыйманыҡ».
Туй бүләге менән өйҙөң
Дүрт мөйөшөн һыйланыҡ.

Кәйеф боҙоп, ишек ҡаҡһаҡ,
Ғәйеп итерҙәр һымаҡ(!)
Беҙҙең һыйҙар кейәүҙәрҙе
Мәйет итерҙәр һымаҡ.

Бер мәлде дүрт епте
тарттыҡ —
Көл булып осто табын.
Ошонан да мәрәкәрәк
Туй буламы һуң тағы?

Теребайға әйтә һалам:
«Ҡыҙып ташламаныҡмы?
Әрһеҙләнеп, туй йолаһын
Боҙоп ташламаныҡмы?»

«Алйот, — ти Теребай, —
туйҙа
Мылтыҡтан атыу була,
Һауыт-һаба шалтыратыу—
Борондан ҡалған йола.

Табындарын күтәргәнгә,
Маҡтап һөйләрҙәр әле:
«Ай-һай-һай, бик ирмәк
икән
Башҡортта туй әмәле!»

1. *Үҙе биш ҡарыш самаһы,*
*Һаҡалы етмеш ҡарыш,* тип партизан ҡарт ниндәй әкиәт геройы менән сағыштырыла?
2. *Саптар, ерән...* Аттың тағы ниндәй төҫтәре була? Дауам итегеҙ.
3. Үлмәҫбай менән Теребай образдарындағы уртаҡ йәки айырмалы яҡтарҙы атап үтегеҙ.

**93-сө күнегеү.** Поэманың уҡылған ике бүлегенән рус телендәге һүҙҙәрҙе табып, күсереп алығыҙ. Ошо уҡ өлөштә ҡулланылған туғанлыҡ-кәрҙәшлек һүҙҙәрен табығыҙ.

## 3. Алмалар бешкән ине

Алмалары алһыуланып,
Балланып бешкән ине,
Баҫыуҙарҙа тулҡынланып
Бойҙай етешкән ине.

Беҙ ял итеп ятҡан утар,
Йоҡо шикелле, тыныс,
Ләкин аттар һоло ашай,
Ҡайрала тора ҡылыс.

Борола-һырыла ағып ятҡан
Тар ғына йылға ине,
Йылғаның ике яғында
Тик ике донъя ине.

Беҙҙең яҡтың яры һөҙәк,
**Әҙәм үтмәҫлек** ҡамыш,
Теге яҡта ҡасып ята
Беҙҙең күптәнге таныш.

Мыйыҡтарҙы еткерәбеҙ
Һыйпаштырғылап, тарап,
Һағынабыҙ ер-һыуҙарҙы,
Осҡан ҡоштарға ҡарап.

Бәй, һүҙгә мауығып, яҡташ,
Һүҙҙең осон сыбалттым.
Ирмәк булды бер көнөндә
Йәйге матур сыуаҡтың.

Ҡул буйынан, ат йөҙҙөрөп,
Иренеп ҡайтып киләм,
Һалмаҡ ҡына башын
сайҡап,
Күгәүен ҡыуа Ерән.

Ҡарайым, ситән артында
Ҡыҙ мине шәйләп тора.
(Бындағы ғәҙәт буйынса,
Көнбағыш сәйнәп тора.)

Башта үтергә уйланым,
**Иҫем дә китмәй,** имеш!
(Һөйгән йәре бар егеттәр
Шулай булырға тейеш.)

Тик, яҡташ, үҙең беләһең,
Бик саҡ ҡына булһа ла
Ҡыҙҙар менән һүҙ
ҡушышһаң,
**Күңел бушанып ҡала.**

Туҡтаным шул, егеттәр, тим,
Һиҙеп ҡалмаҫтар әле,
Һиҙһәләр ҙә, Гөлбикәгә
**Хәбәр һалмаҫтар әле.**

Туҡталдым да сәләм бирҙем:
— Һаумы, Кәтүшә туташ!
Үҙең, — тим, — нәк муйыл
күҙле
Перәник ҡошсоҡҡа оҡшаш.

— Тик ҡошсоҡ һеҙҙең
баҡсаға
Ҡунып һайрамаҫ кеүек, —
Ҡыҙ йылмая. —
Мыйығыңды
Юҡҡа тырпайтма, егет.

— Емдәр һибеүсеһе булһа,
Ҡунмаҡсы күренәһең,
Беҙҙә ағас бейек үҫә,
Тик юҡҡа үреләһең.

— Мыйыҡ бар, тип
йөрөйһөңмө,
Йүнлерәк үҫмәгәс тә,
Ҡарлуғас ҡанаттарылай
Ҡыйылып төшмәгәс тә?

Мыйыҡмы ни, ғибрәт бит
был… —
Ҡыҙыҡай һөйләп китте,
**Теште ҡыҫып ҡына торам,**
«Мыйыҡтан һөйрәп китте».

Шул заман ҡапыл үҙемде,
Әйтерһең, йәшен һуҡты:
Ҡыҙ торған ситән артынан
Теребай килеп сыҡты.

Матур ҡыҙҙың ҡулбашына
Үҙе таянып тора.
Мыйыҡ тиһәң —
бөтөрөлгән,
**Күҙҙәре янып тора.**

— Аңламаҫһың Үлмәҫбайҙы:
Әллә атын һыу кертә,
Әллә, — ти, — зифа буйҙарға
Туҡтап ҡаш та һикертә.

Ҡыҙ-ҡыҙҡын менән
серләшеп,
**Күңел асаһың** икән,
Был эшеңде һиҙеп ҡалһа,
Нимә әйтер Гөлбикәң?

Утыҙға аяҡ баҫҡанда,
Янып, ҡыҙарып киттем.
Теге һылыу ҡыҙ янынан
Тиҙ-тиҙ ҡуҙғалып киттем.

Артҡа әйләнеп ҡараһам,
Теребай килә, яуыҙ.
— Үлмәҫбай дуҫ, бик кәрәкле
Һүҙем бар, — ти, — бер ауыҙ.

Әле теге ҡыҙ янында
Үҙеңде көтөп торҙом,
Бер хәйләле эш хаҡында
Әкәмәт план ҡорҙом.

Йылғаның теге яғында
Бары өс һаҡсы ғына,
Күрһәң, үҙеңә лә оҡшар —
«Телдәре» яҡшы ғына.

Мин инде өс көн буйына
Йылғаға килә-китәм.
Һайраясаҡ турғайҙарҙың
Хәлдәрен белә китәм.

Заманы түгел, Үлмәҫбай,
**Телдәрҙе ҡайрашырға,**
Тубыҡты бөкләп ултырып,
Туйғансы һайрашырға.

Барып өлгөрөргә кәрәк,
Әле көн ҡыҙыу саҡта.
**Һә тигәнсе** эйәрләнде
Ерәнсәй менән Саптар.

Командир ҙа ҡулды ҡыҫты:
«Хәйерле юл — шул теләк.
Барып сыҡһа, бик шәп
булыр,
Егеттәр, һеҙҙең бүләк».

Сығып киттек. Соҡор буйлап
Барабыҙ елеп кенә.
Уйлап киләм: Теребай, тим,
Һай, аҫыл егет кенә.

Байтаҡ барғас, аттан төшөп,
Йәйәүгә күстек, малай;
Ҡояш түбәне ҡыҙҙыра.
**Йән тиргә төштөк,** малай.

Унан һуң кендектән һаҙлыҡ,
Әҙәм үтмәҫлек ҡамыш,
«Алыҫ түгел, — ти
Теребай, —
Минең боронғо таныш».

Алдыбыҙҙа ҡусҡылланып
Йәшәреп тора таллыҡ,
Япраҡ аша ялтырап аҡҡан
Йылғаны күреп алдыҡ.

Һыу ситенә барып еттек,
Эйелеп, боҫоп ҡына,
Йүткереп ебәрмәҫ өсөн
Тештәрҙе ҡыҫып ҡына.

Теребай бышылдай миңә:
«Был урын арыу, тибеш,
Беҙ ошонда табышыбыҙҙы
Көтөп торорға тейеш».

Алдан һөйләшеү буйынса,
Өҫтө һалдыҡ үҙебеҙ;
Йырҙа әйтелгән шикелле,
Теге яҡта күҙебеҙ.

Һыуға ҡарайым, ярайһы,
Йылғаһы тоноҡ ҡына,
Тик ситендә ойоп тора
Һары томбойоҡ ҡына.

Күҙәтәбеҙ. Теге яҡта
Япраҡ та ҡыштырламай,
Эшебеҙҙең пустой булып
Сығыуы бар бит, малай.

Көтәбеҙ. Бына бер заман
Һайыҫҡан шыҡырланы,
Күп тә үтмәй килеп сыҡты
«Әкиәт батырҙары».

Өсәүҙәр. Автоматтарын
Ағасҡа һөйәнеләр,
Һыуға ҡарап, мығыр-мығыр
Нимәлер һөйләнеләр.

Ә унан һуң шыр яланғас
Сисенеп ташланылар,
...Күлдәктәрен әйләндереп,
Сүпләй ҙә башланылар.

Тфү, йә, был башкиҫәрҙәр
Күпме көттөрөр тағы?..
Йөрәктең, тартҡан йәйәләй,
Тулышып торған сағы.

Бына бер бүкән кеүеге
Йылғаға тәгәрәне,

Үҙе йөнтәҫ, үҙе ҡара,
Гүйә, һарыҡ бәрәне.

Унан һуң икеһе сумды,
Ҡиәфәт — өрәкме ни,
Ҡолаҡтары — һелкеүестәй,
Ҡулдары — көрәкме ни!

Быстырлашып яталар бит
Ярҙың ситендә һаман.
Бер саҡ күрәм, фетнәләрең
Йөҙәләр беҙгә табан.

Бергә сумдыҡ
ҡамышлыҡҡа,
Һыу аҫты сәфәренә,
Ата-баба ишетмәгән
Кәсептең хәтәренә.

Һыу төбөндә күргәндәрҙе
Таҡылдап тораһым юҡ,
Эшкә ҡағылмаған яҡҡа
Һүҙемде бораһым юҡ.

Бер заман, башты күтәрһәк,
Алдыбыҙҙа яр булды,
Һыу эсендәге алты күҙ
Ғәжәп алты шар булды.

Шөрләп ҡул күтәргәйнеләр,
Бер-бер артлы баттылар,
Ярай, бәхетебеҙ бар икән,
Кире килеп ҡалҡтылар.

Мин автоматтарын алам,
Теребай ҡарап тора,
Тегеләр шауламаһын тип,
Бармағын янап тора.

Теге ялғаш ҡолаҡлыһы
Ярға сыҡмаҡсы итә,
Ғәйрәтләнеп Теребайға
Килеп һуҡмаҡсы итә.

Йоҙроҡ тиһәң, Теребайҙа
Суҡмарҙан яманыраҡ,
Анау тынғыһыҙ нәмәнең
Ҡундырҙы яңағына.

Тәкмәс атып, ҡолап төштө,
Эһ тә тип әйтә алманы.
Эштең ҡайҙа барғанлығын
Бүтәндәр ҙә аңланы.

Шулай ғына төшөндөрҙөк
Баш ҡоҙалар килгәнен!
Һөҙәк ярға алып сыҡтыҡ
Гитлерҙың өс имгәген.

«Ҡунаҡтарҙы» көттөрөү, әй,
Борсоу булһа ла инде,
Ярға еткәс, тиҙ-тиҙ генә
Кейеп алдыҡ кейемде.

Юлға сыҡҡас ҡына, ҡәһәр,
Иҫемә килеп төштө:
«Оятыраҡ булмаҫмы, тим,
Алып ҡайтыу был төҫлө?»

Урманды үткәс, үҙебеҙ
Арғымаҡтарға мендек,
Пилотканы ҡырын һалып,
Ауылға килеп индек.

Малайҙар шаулай урамда:
«Ен йөрөй көпә-көндөҙ,
Бейетегеҙ, ағай, — тиҙәр, —
Йә кәмит күрһәтегеҙ!..»

Шунан һуң был тирәләрҙә
Әллә ысын, әллә юрый,
Башҡорттар ен тотҡан,
тигән
Имеш-мимештәр йөрөй.

1. Теребай менән Үлмәҫбай үҙҙәренең пландарын тормошҡа нисек ашыралар? Һөйләгеҙ.
2. Үлмәҫбай менән Теребайҙың исемдәре характерҙарына тап киләме? Иҫбатлағыҙ.
3. Әкиәт алымдарын, мәҡәлдәрҙе, әйтемдәрҙе, йәнле һөйләү телмәренән алынған һүҙ һәм һүҙбәйләнештәрҙе поэманан яҙып алығыҙ һәм мәғәнәләрен аңлатығыҙ.
4. М. Кәримдең «Үлмәҫбай» һәм А. Твардовскийҙың «Василий Тёркин» поэмаларын сағыштырығыҙ һәм оҡшаш яҡтарын билдәләгеҙ.
5. Үҙегеҙгә оҡшаған урындан алты строфаны рәттән ятлағыҙ.

**94-се күнегеү.** Поэмала ҡалын хәрефтәр менән бирелгән фразеологизмдарҙың мәғәнәләрен аңлатығыҙ. Уларҙың рус телендәге эквиваленттарын табығыҙ. Был фразеологик берәмектәрҙе ҡулланып, һөйләмдәр төҙөгөҙ.

## Лиро-эпик поэмаларҙың үҙенсәлектәре

Поэзияла лирик, эпик, лиро-эпик поэмалар йыш осрай. Шулар араһында иң киң таралғаны — лиро-эпик поэмалар.

Поэмаларҙың был формаһы, лирик һәм эпик элементтарҙың күләменә, үҙ-ара бәйләнеш рәүешенә ҡарап, төрлөсә була. Мәҫәлән, М. Кәримдең «Үлмәҫбай» поэмаһында Үлмәҫбай менән Теребайҙың дошман тылына разведкаға барыуы, «тел» алып ҡайтыуы хаҡында һөйләгән ваҡиғалар — эпик элементтар — ҙур урын ала. Тәбиғәтте тасуирлаған, шағирҙың теге йәки был ваҡиғаға ҡарата үҙ ҡарашын әйткән урындар, йәғни лирик элементтар, был поэмала ул тиклем ҙур урын тотмай.

Рәшит Ниғмәтиҙең «Йәмле Ағиҙел буйҙары» поэмаһында, киреһенсә, лирик элементтар өҫтөнлөк итә. Тәбиғәт күренештәре, йырҙар — бөтәһе лә лиризм менән һуғарылған. Эпик элементтар тарихты һөйләгән ҡайһы бер эпизодтарҙа, Чапаев тураһындағы легенда өлөштәрендә генә сағылып ҡала. Был поэмала лиризмдың пейзаж күренештәрендә, йыр формаһында ҙур ғына урын алыуы, эпиклыҡтың тарихи ваҡиғаларҙы һөйләгән урындарҙа күренеп ҡалыуы ундағы лиро-эпик элементтарҙың үҙенсәлеген билдәләй.

*Нур ҒӘЛИМОВ*

## ЯУҘАН ҠАЙТҠАН ҠУРАЙ

### I

Бөйөк Ватан һуғышы башланған заман. Ирҙәрҙе, егеттәрҙе фронтҡа оҙаталар. 1941 йылдың ҡышында өс йөҙгә яҡын Баймаҡ егете менән 26 йәшлек Ғәйфулла Сарбаев та Башҡорт атлы дивизияһы составында һуғышҡа китте. Тәбәнәгерәк буйлы, мыҡты кәүҙәле был егет ул саҡта Баймаҡ колхоз-совхоз театрының артисы ине. Егет башҡорт атлылары араһында үҙенең алсаҡ күңелле булыуы, шат характеры менән тиҙ танылып китте. Уны һуғышсылар ҡурайсы булараҡ та бик ярата торғайнылар. Кешеләр бер-береһе менән юлда уҡ таныштылар. Ғәйфулла Сарбаев үҙенең көндәлегендә былай тип хәтерләй: «...11 декабрҙә кис Өфөгә килдек. Унан беҙҙе яҡындағы станцияға оҙаттылар. Ҡараңғы төшкәс, вагондарҙан аттарҙы бушаттыҡ. Уларҙы ат һарайҙарына урынлаштырҙыҡ. Унан беҙҙе ҙур клубҡа килтерҙеләр. Бында төрлө райондарҙан килгәйнеләр. Мине шул ғәжәпкә ҡалдырҙы, атлылар араһында беҙҙең Баймаҡ егеттәре, нисектер, айырылып торалар ине. Күңелдәре күтәренке, шаяралар, көләләр, һуғыш тип артыҡ иҫтәре китмәгән кеүек. Бына шунда мин үҙебеҙҙең Ирәндек итәгендә үҫкән ҡурайымды алып уйнап ебәрҙем. Бөрйән, Хәйбулла егеттәре ҡушылып китте. Йыр, бейеү башланды. Кешеләрҙең күңеле күтәрелеп киткәндәй булды, улар һуғышты һәм ҡайғыны онотҡандай йылмайыштылар...»

Бойоғоуҙы белмәй торған был башҡорт егете һуғышсылар араһына бына шулай килеп инә. Инде бына фронт. Йәй мәле. Гитлерсы илбаҫарҙар илебеҙгә ҡара яу булып ябырылған ваҡыт. Тыуған илебеҙ өсөн иң ауыр заман. Башҡорт атлылары командованиеның заданиеһын уңышлы үтәйҙәр. Һуғыш тынған араларҙа егеттәр тыуған яҡтарҙы, һөйгән ҡыҙҙарҙы, йәмле Ағиҙел буйҙарын, күк Ирәндек һәм Урал тауҙарын иҫкә төшөрәләр... Ә Ғәйфулланың Уралдан алып килгән ҡурайы күптән инде ҡайҙалыр юғалған.

Көндәрҙең береһендә беҙҙең зенитсылар башҡорт атлылары өҫтөндә өйөрөлгән немец самолёттарына ата башланылар. Шул саҡта бер «мессершмитт» яна башланы һәм, яраланған ҡоҙғон төҫлө, ергә ҡолап төштө. Быны ҡарап торған егеттәр ҡысҡырыштылар, шатланыштылар, сөнки улар фронтта

бындай хәлде беренсе тапҡыр күрәләр ине. Улар араһында Ғәйфулла ла бар. Фашист самолёты, утлы өйөрмә булып, мороно менән ергә ҡаҙалды, тирә-яҡта ут саҡҡылары, шартлаған бомба ярсыҡтары һыҙғырып осто. Егеттәр самолёт янына йүгереп килделәр. Лётчиктарҙың икеһе лә һәләк булғайны. Шул саҡта Ғәйфулла фашист самолётының селпәрәмә килгән моторын күрҙе. Уның аяҡ аҫтында артыҡ йыуан булмаған еҙ көпшә ята. Эйелеп шуны ҡулына алды, үҙе лә һиҙмәҫтән ҡысҡырып уҡ ебәрҙе: бына ҡурай булды ла баһа!

1. Әҫәрҙә ниндәй осор һүрәтләнә? Характеристика бирегеҙ.
2. Ғәйфулла яугирҙарҙың кәйефен нисек күтәрә? Текстан табып уҡығыҙ һәм яугирҙарҙың психологик торошон аңлатығыҙ.
3. Еҙ ҡурай нисек барлыҡҡа килә?

## II

...Крупп заводтарында ҡойолған еҙ көпшәнән башҡорт егеттәре ҡурай эшләп алдылар. Буш минуттарында ошо ҡурайҙан башҡорт көйҙәрен уйнай торған булдылар. Ғәйфулла яһаған еҙ ҡурай егеттәргә бик оҙаҡ хеҙмәт итте. Һуңынан улар, күк йөҙөндә немец самолётын күреп ҡалһалар: «Ана, ҡурай килә!» — тип көлөшә торғайнылар. Аҙаҡ та әле ергә ҡолап төшкән бик күп «мессершмитт», «фокке-вольфтарҙың» еҙ көпшәләренән ҡурай яһай торғайнылар. Ғәйфулла үҙенең ошо ҡурайы менән Польша һәм Германия ҡалаларында Ирәндектән алып килгән башҡорт көйҙәрен уйнай торғайны. Таныш булмаған сит ил кешеләре был көйҙәрҙе ғәжәпләнеп тыңлайҙар, уны уйнаусы башҡорт егетенә таң ҡалып ҡул сабалар ине.

Башҡорт атлылары фронтта булған шундай бер ваҡиғаны хәтерләйҙәр: 1944 йылдың июль айы. Башҡорттар күрше дивизиялар менән бергә Польшаның Холом исемле ҡалаһына килеп инделәр. Ҡала халҡы совет хәрбиҙәрен ҙур шатлыҡ менән ҡаршы алды. Ҡала уртаһында кирбестән һалынған биш ҡатлы бер өй кешеләрҙең иғтибарын үҙенә тарта ине. Бында немецтарҙың гестапоһы урынлашҡан булған. Ошо өйгә ҡаршы майҙанға халыҡ йыйылған һәм шунда уҡ башҡорт атлыларының бейеү ансамбле концерт ҡуя башланы. Майҙанға бик күп ҡала халҡы йыйылды. Оркестр уйнап ебәрҙе, поляктар уға ҡушылып йыр башланылар. Бына бер ваҡыт

оркестр тынды. Әлеге өйҙөң балконына ҡулына еҙ ҡурайын тотҡан Ғәйфулла Сарбаев сығып баҫты. Уның эргәһендә Матрай районы егете майор Күҙәшев тора ине. Ғәйфулла, күкрәген киреп, башҡорт халыҡ көйө «Әрме»не уйнап ебәрҙе. Майор, уға ҡушылып, йыр башланы. Холом ҡалаһы кешеләре башҡорт йырҙарын иҫ киткес тулҡынланыу һәм һоҡланыу менән тыңланылар, ә аҙаҡтан инде бөтә майҙанды яңғыратып ҡул саптылар, сәләмләп ҡысҡырҙылар. Был еҙ ҡурай һуғыш яландары буйлап бик ауыр һәм оҙон юл үтте. Бына хәҙер был ҡурай Өфөләге Тыуған яҡты өйрәнеү музейында тора.

Нисек килгән был ғәжәп ҡурай Башҡортостанға? РСФСР-ҙың халыҡ артисткаһы Бәҙәр Йосопова былай тип хәтерләй ине:

— Башҡортостандан бүләктәр тейәп, беҙ фронтҡа киттек. Кавалерия егеттәре менән осраштыҡ. Шунда мин Ғәйфулла менән осраштым. Ул миңә бүләк итеп ошо ҡурайҙы бирҙе…

Ғәйфулла, фронттан ҡайтҡас та әле, оҙаҡ йылдар буйы тамашасыларҙы ҡурай уйнап һоҡландырҙы, дәртле аккордеонсы һәм талантлы артист булды…

Ә бына теге яуҙан ҡайтҡан легендар ҡурай әле лә музейҙа тора. Ул һуғышсының, кешенең, артистың яҡты иҫтәлеген һаҡлай, кешеләргә яуҙан ҡайтҡан ғәжәп бер тарихты хәтерләтә.

**1.** Немец самолёттарына мәрәкәләп ниндәй исем бирәләр?
**2.** Польшаның Холом ҡалаһында булған ваҡиғаны һөйләгеҙ һәм баһалағыҙ.
**3.** Текстан сығып, ҡурайҙың яугирҙар рухын күтәреүсе символ икәнлеген иҫбатлағыҙ.
**4.** Н. Ғәлимовтың «Яуҙан ҡайтҡан ҡурай» әҫәрендәге еҙ ҡурайҙы яугир ҡурай тип әйтеп буламы?
**5.** Башҡорт ҡурайы тураһында һүрәттәр, альбомдар ҡарағыҙ, ҡурай моңон тыңлағыҙ һәм тәьҫораттарығыҙ менән бүлешегеҙ.

**95-се күнегеү.** Әҫәрҙә ҡулланылған яңғыҙлыҡ исемдәрҙе төркөмдәргә бүлеп яҙығыҙ.

1. Кеше исемдәре: …
2. Фамилиялар: …
3. Ҡала исемдәре: …
4. Ер-һыу атамалары: …
5. Ил-дәүләт атамалары: …

*Рамазан ӨМӨТБАЕВ*

# БАШҠОРТТАР КИТТЕ ҺУҒЫШҠА

*(«Генерал Күсимов» әҫәренән өҙөк)*

## I

Башҡортостан еренә лә яҙ килде.

Март ҡояшы зәңгәр күктә оҙағыраҡ торған кеүек тойолдо.

1942 йылдың 9 апреле. «Эшелондарға тейәлергә!» — тигән бойороҡ алына.

Күсимов полкын эшелондарға тейәү 11 апрелдә сәғәт 12-лә башланып, бер тәүлек тә 6 сәғәт үтеүгә эш тамамлана. 12 апрелдә киске сәғәт 6-ла беренсе эшелонға ҡуҙғалырға ҡушыла. Күсимов беренсе эшелонда, ә комиссар ошо полктың дүртенсе эшелонында фронтҡа юл ала. Оҙаҡламай Шайморатов һәм уның штабы тейәлгән эшелонға ла тимер юл семафоры йәшел ут яндыра. Хуш, тыуған Башҡортостан! Хуш, сал Уралтау! Үҙ егеттәреңдең еңеү менән әйләнеп ҡайтыуын көт! Хушығыҙ, туған-ҡәрҙәштәр!

Башҡортостандан китеүгә ун ике көн үтеүгә, дивизия тейәлгән эшелондар утлы һуғыш уҙған территорияға килеп инә. Емерелгән заводтар, яндырылған йорттар, һерәйеп тороп ҡалған мейес, фабрика мөрйәләре, әле кисә генә станцияларҙа уйнап-көлөп, шул тәьҫораттарҙан айный алмай килгән һуғышсыларҙың күңеленә ҡара һөрөм булып ятты. Уларҙың һәр береһе үҙ-үҙенә бикләнде.

Июнь аҙағында дивизия Олым йылғаһының һул яҡ ярына килеп туҡтаны.

2 июль көнө Күсимов полкы алдында дошман һөжүменә сыҙай алмай сигенгән һуғышсылар, яраланған, йонсоған һалдаттар күренә башлай. Ер ярырҙай булып ҡысҡырған атлы һәм йәйәүле һуғышсыларҙың «ура» тауышы алыҫтарға китеп яңғырай. Уларҙың һөжүмен артдивизион уты оҙатып бара.

Ләкин туҡмалыуға күнекмәгән дошман һалдаттарына был һабаҡ булмай. Башҡорт атлы дивизияһын Олым йылғаһы ярынан алып ташлау һәм фронт һыҙығын өҙөү өсөн, дошман икенсе көндө яңы һөжүм башлай. Ләкин мәргән атылған мылтыҡ уты, орудие һәм миномёт йәҙрәләре фашистарҙы тағы сигенергә мәжбүр итә.

Дивизия командиры полковник Шайморатов: «294-се Нафиҡов полкы, артдивизион ярҙамында төп йүнәлештә һөжүм башлап, Лобановка һәм Никольск ауылдарын алырға; 275-се полк Озёрки һәм Голосовка ауылдарын дошмандан азат итергә тейеш», — тигән бойороҡ бирә. 313-сө Макаев полкы дивизияның икенсе эшелонында ҡалдырыла.

Ҙур булмаған атлылар төркөмөнөң Лобановка ауылында бикләнгәнен һиҙеп ҡалған немецтар миномёттар менән көсәйтелгән ике батальон ғәскәрҙе Лобановкаға ташлай. Ошо ҡамауҙы өҙгән саҡта, батыр йөрәкле яугирҙар етәксеһе, ҡайнар патриот Гәрәй Дәүләтович Нафиҡовтың ғүмере өҙөлә.

Башҡорт атлы дивизияһы 1942 йылдың 15 октябренә тиклем Курск өлкәһе Тербуна ауылы майҙанында оборонала ҡала. Фашист ғәскәре, ҡайһылай ғына ҡотороп, Воронежды баҫып алырға тырышмаһын, Башҡорт атлы дивизияһы үҙ урынында ныҡ тора һәм бер аҙым да сигенмәй. Тик 15 октябрҙә генә, алғы һыҙыҡты икенсе частарға тапшырып, тағы ла көсөргәнешлерәк, ҡатмарлыраҡ фронтҡа — Сталинградҡа юл ала.

Октябрь баштарында 265-се полк һуғышсылары өсөн бер күңелле генә ваҡиға булып ала — уларҙың командиры Таһир Күсимовҡа подполковник исеме бирелә. 313-сө полк командиры Ғариф Макаев, дивизияның артиллерия начальнигы Мөнир Вәлиев тә шул званиеға лайыҡ була.

Күҙгә төртһәң күренгеһеҙ көҙгө еүеш төндәрҙә, таңғы һалҡындарҙа таҡырайып туңған йылғаларҙы кисеп, башҡорт атлылары туҡтауһыҙ алға бара. Ҡайһы саҡтарҙа атҡа ашатырға ҡамғаҡ, унда-бында өлтәйеп ҡыуарып ултырған ҡарағуранан башҡа аҙыҡ булмай, һуғышсылар үҙҙәренән алда аттарын туйындырыу хәстәрен күрә, ҡайҙан етте шунан ҡосаҡлап аҙау бесән, серегән һалам ташыйҙар. Аттар ғына түгел, уларға атланған һуғышсылар ҙа, үҙҙәренә әллә ниндәй талаптар ҡуйып, командалыҡты йөҙәтеп бармай. Икешәрөсәр көн тәғәм ризыҡ ҡапмаған саҡтарҙа ла асыҡтан-асыҡ һүҙ күтәргән кеше булмай.

«Барына риза булыу, фронт тормошоноң бөтә ауырлыҡтарын һәм ҡыйынлығын кисерә алыу, үҙен ҡорбан итергә әҙерлек — бына башҡорт һуғышсыларының уртаҡ сифаты», — тип яҙҙы, Шайморатов һәләк булғандан һуң, Башҡорт атлы дивизияһы менән етәкселек иткән генерал Г. А. Белов.

Сталинград һөжүме башланыр алдынан, генерал Шайморатов полк командирҙарын, уларҙың сәйәси эш буйынса

урынбаҫарҙарын (был ваҡытҡа Хәрби комиссарҙар институты бөтөрөлгән була), штаб офицерҙарын үҙенә саҡыра. Фашист ғәскәрҙәренә ҡаршы өс фронттың берләшкән ҡеүәтле һөжүме тураһында иғлан итә ул.

275-се атлы полкты 8-се атлы корпустың авангарды итеп билдәләй комдив. Тимәк, Күсимов полкы һөжүмгә ташланыусыларҙың иң ауыр участкаһында булырға тейеш. Шуның өсөн командир менән комиссар был яуаплы бурысты һәр һуғышсының аңына еткерергә тырыша.

Таң атыуға, Күсимов атлылары, һөжүмде көсәйтә барып, Синютин утарына яҡынлаша. Ләкин улар бында ут менән ҡаршы алырға әҙерләнеп торған румын танкыларына юлыға. Танкылар һәм ауыр туптар ярҙамынан башҡа һөжүм итеп килгән атлыларға ҡорос броня ҡаршы сыға. Уның артынан бер аҙым да ҡалмайынса килгән йәйәүле ғәскәр, Күсимов эскадронын ҡыйратып, полктың артына сығырға тейеш. Авангард полк өсөн ҡурҡыныс хәл тыуа. Ләкин Күсимов һуғышсылары ла ҡаушап ҡалмай. Полк батареяһы өлкән лейтенант Ш. С. Рәхмәтуллиндың аныҡ бойороғо буйынса танкыларҙы тишкес снарядтар, йәйәүле дошманды шрапнель ҡойоно менән ҡаршы ала. Дошмандың ун танкыһы, ут сәсә-сәсә, Күсимов полкының флангыһынан үтеп инә башлай. Өлкән лейтенант Рәхмәтуллин, орудиеларҙы 90 градусҡа бороп, танкыларҙың ҡабырғаһына залп бирергә бойора. Ләкин батареяға туп-тура килеүсе бүтән танкылар артиллеристар өҫтөнә ут яуҙырырға тотона. Тупсылар бер-бер артлы сафтан сыға. Орудие янында япа-яңғыҙы тороп ҡалған комсомолец Ғ. Ғ. Сынбулатов ике танкыны ҡыйрата. Ә икенсе орудиела шулай уҡ бер үҙе ҡалған Ғафуров та дошмандың ике танкыһын яндыра. Шулай ҙа Б. М. Мәмбәтҡолов эскадроны дошман ҡулсаһы эсендә тороп ҡала. Ҡаты яраланыуына ҡарамаҫтан, ул һуғышсыларына дәрт биреп, өс сәғәткә һуҙылған дошман һөжүменә ҡаршы тора.

Ләкин атлыларҙың да юғалтыуҙары күп кенә була. 275-се полк командиры подполковник Т. Күсимов ҡаты яралана. Сәғит Рәхмәтович Әлибаев йәрәхәтле командир янына шыуышып килеп, уның менән хушлаша ла, 4-се эскадрондың санинструкторы Ҡәипов ҡулына тапшыра. Күсимовты полкташтары һуғыш ҡырынан күтәреп алып сыға. Беренсе ярҙам пунктына килтергәндә, күп ҡан юғалтыуҙан уның хәле ауыр була.

Ҡылыс һуғышы башҡорт дивизияһының яугирҙарын шул тиклем рухландыра, улар теләһә ниндәй осраҡта ла дошман өҫтөнә ташланырға уңай көтөп кенә тора. Ҡурҡыу белмәй, теләһә ниндәй ҡаршылыҡтарҙы ла еңеп, дошманын юҡ итә торған «Ҡырағай дивизия» тураһында легендалар әллә ҡайҙарға тарала.

Был хәлдәрҙе машина кабинаһында ҡағылып-һуғылып, ауа-түнә килгән Күсимов ҡына белмәй.

Ырымбурға килеп еткәс: «Яралылар эшелоны Ташкент яғына бороласаҡ», — тип иғлан итәләр. Быны ишеткәс, Күсимовтың ысынлап та елкә тамыры ҡороша. «Юҡ, мин Ырымбурҙан ары китмәйем, ошонда ҡалам, сөнки бында минең ҡәрҙәштәрем йәшәй», — тип һылтаулай. Ҡалмыҡтарға тартым, фронт елдәрендә ҡарайып сыныҡҡан подполковниктың етди, көсөргәнеш һыҙаттары ятҡан киң яңаҡлы битендә врач был кешенең тайпылышһыҙ ҡарарын уҡығандай булды. Ләкин һүҙ менән генә:

— Минең һеҙҙе ҡалдырырға хаҡым юҡ, — тине.

— Бының өсөн ни кәрәк? — тип һораны Күсимов.

— Урындағы хәрби комиссариаттың йәки Хәрби округ санитар идаралығының рөхсәте.

— Мине вокзалдағы хәрби комендантҡа алып сығығыҙ, хәҙер һөйләшәм. — Күсимов урынынан тора башланы.

«Бының менән мәшәҡәтләнеп ғүмер үткәргәнсе, әйҙә ҡалһын», — тигән ҡарарға килде хәрби врач.

Ырымбурҙа төшөп ҡалғандың бишенсе көнөндә, Халыҡ Комиссарҙары Советы Председателе Сабир Әхмәтйәнович Ваһапов ебәргән У-2 самолётына ултырып, яралы подполковник Таһир Күсимов Өфөгә килеп төшә.

Сталинград эпопеяһы Совет Ҡоралды көстәренең данлы еңеүе менән тамамлана. Фашист ғәскәрҙәренең фельдмаршал фон Паулюс командалыҡ иткән 300 меңлек 6-сы армияһы ҡамалған ҡоршау эсендә тар-мар ителә, армия командующийы үҙе 90 мең һалдат-офицеры менән әсирлеккә төшә. Был еңеү Совет — Герман фронтының яҙмышында ҡырҡа һыныллыш яһай. Ләкин бөтә донъя хәрби тарихына ингән был ҙур еңеү Совет Армияһына еңел генә бирелмәй.

Ҡоршауҙа ҡалған фашистарҙың 6-сы армияһын ҡотҡарыу өсөн, Гитлер командалығы бөтә көсөн һала. Сталинград ҡамауының тышында хәрәкәт иткән совет ғәскәренә Паулюс

армияһына ҡушылырға ынтылған генерал Манштейндың үтә нык ҡоралланған атакаларын кире ҡағырға тура килә.

Морозовск ҡалаһы өсөн барған бәрелештәрҙең береһендә 313-сө атлы полктың комиссары майор Байғужа Сәйетғәлин үлеп ҡала.

31 декабрҙә Чернышковск станцияһы яғынан һөжүм иткән немецтарҙың атакаһын туҡтатыу өсөн, расчётһыҙ тороп ҡалған станоклы пулемёт артына дивизия командиры генерал Шаймуратов үҙе ятырға мәжбүр була.

Дивизияға кире әйләнеп ҡайтҡан Күсимов үҙенең һөйөклө командиры Шаймуратовтың үлеп ҡалыуы өсөн бигерәк тә нык ҡайғыра. Аҙ һүҙле, ҡаты ихтыярлы, энергияһы, күсғәйрәте, шәхси батырлығы менән дивизияның һәр һуғышсыһына дәрт, рух өргән командир образы һәр саҡ уның күҙ алдынан китмәй, Ҡыҙыл Армия командиры эталоны булып мәңгегә күңеле түрендә ҡала. Дивизия рейдтан ҡайтҡас, уға маҡтаулы гвардия исеме бирәләр, һаны ла үҙгәрә — уны 16-сы атлы гвардия дивизияһы тип атайҙар.

Хәҙер инде подполковник Күсимовҡа полковник Белов менән бергә эшләргә тура килә. Шаймуратов заманында бер аҙ уның урынбаҫары булып, һуңынан 8-се корпус командирының тыл буйынса ярҙамсыһы итеп күсерелгәйне полковник Белов. Күсимов килеүгә, Башҡорт атлы дивизияһына, хәҙер инде 16-сы гвардия дивизияһына, командир итеп шул полковник Белов тәғәйенләнгән булып сыға.

Күсимовтың дивизияға килеп күренеүенә уның яңы командиры тыштан шатланған булһа ла, эстән көнләшеү тойғоһо менән йәшәне. Ә былай уларҙың үҙ-ара мөнәсәбәте асыҡтан-асыҡ дошманлашыуға барып етмәне. Ҡаты һуғыш осоронда был мөмкин дә түгел ине. Ләкин уларҙың бер-береһенә, Шаймуратов менән булған һымаҡ, асыҡ ҡараштың юҡлығы, араларынан ҡара бесәй үткәне икеһенең дә яҡындарына сер түгел ине.

21 сентябрҙә 61-се армияның башҡа һуғышсылары менән бергә 16-сы гвардия атлы дивизияһы Чернигов ҡалаһынан дошманды бәреп сығара.

Черниговты азат иткән берләшмәләр һәм частар хөрмәтенә Мәскәү 124 туптан 30 залп бирә. Был 16-сы атлы гвардия дивизияһына арналған Мәскәүҙең беренсе салюты була. Мөһим стратегик үҙәкте азат итеүҙә ҡатнашыусы хәрби берләшмәләргә, Баш командалыҡтың бойороғо буйынса, Чернигов исеме бирелә. 16-сы атлы гвардия дивизияһы ла ошо маҡтаулы исемдә йөрөтә башлай.

(П) **1.** Башҡорт атлы дивизияһы үткән һуғыш юлы буйынса хронологик таблица төҙөгөҙ.
**2.** Күренекле рус яҙыусылары башҡорт яугирҙары тураһында ниндәй очерктар яҙалар?
**3.** Күсимовтың яраланыуы тураһында һөйләгеҙ.
**4.** 16-сы атлы гвардия дивизияһын Мәскәү нисек ҡотлай?

**96-сы күнегеү.** Текстағы фактик хаталарҙы телдән төҙәтегеҙ.

Сталинград эпопеяһы Рәсәй Ҡораллы көстәренең данлы еңеүе менән башлана. Фашист ғәскәрҙәренең фельдмаршал фон Паулюс командалыҡ иткән 6 меңлек 300-сө армияһы ҡамалған ҡоршау эсендә тар-мар ителә, армия командующийы үҙе 900 мең һалдат-офицеры менән әсирлеккә төшә. Был еңеү Совет — Герман фронтының яҙмышында ул хәтле һынылыш яһамай. Ләкин бөтә донъя хәрби тарихына ингән был ҙур еңеү Рәсәй Армияһына еңел генә бирелмәй.

Ҡоршауҙа ҡалған фашистарҙың 16-сы армияһын ҡотҡарыу өсөн, Паулюс командалығы бөтә көсөн һала. Петроград ҡалаһының тышында хәрәкәт иткән башҡорт ғәскәренә Гитлер армияһына ҡушылырға ынтылған генерал Манштейндың үтә нык ҡоралланған атакаларын кире ҡағырға тура килә.

Днепровск ҡалаһы өсөн барған бәрелештәрҙең береһендә 313-сө атлы полктың комиссары майор Байғужа Сәйетғәлин үлеп ҡала.

31 февралдә Мичуринск станцияһы яғына һөжүм иткән фашистарҙың атакаһын туҡтатыу өсөн, расчетһыҙ тороп ҡалған станоклы пулемёт артына дивизия командиры генерал Шайморатов үҙе ятырға мәжбүр була.

## II

Башҡорт атлыларының, атап әйткәндә Күсимов полкташтарының, күңелендә Бөйөк Ватан һуғышының иң сағыу мәлдәренең береһе — уларҙың украин халҡының моңона ғүмерлек аһәң булып ингән киң һәм ҡөҙрәтле Днепр менән осрашыу ваҡиғаһы.

1943 йылдың 25 сентябрендә хәҙер инде 16-сы гвардия Чернигов дивизияһы атлылары Днепрҙың көнсығыш ярына килеп етә. Үҙ ғәйрәтен Урал егеттәренә күрһәтергә теләгәндәй, тулҡындарын ярҙарына бәрә-бәрә, көмөштәй саф һыуын Ҡара диңгеҙгә ҡойған Днепрға ҡарап, башҡорт атлылары баш эйә.

— Сәләм һиңә, Днепр, беҙҙең Ағиҙелдән! Беҙ һине Гитлер баҫҡынсыларынан азат итергә килдек.

«Рәхмәт, рәхмәт, башҡорт атлылары» тигәндәй, сал Днепр ауазы көнбайыш текә ярҙарына бәрелеп, шаңдау булып яңынан ишетелде.

Башҡорт атлыларының Днепр менән һуңғы тапҡыр осрашып, аттарына уның саф һыуын эсереү ваҡиғаһына 23 йыл ваҡыт үткәйне, 1920 йылдың йәйендә беҙгә ҡаршы һуғыш асҡан Польша пандарын Украинанан ҡыуған саҡта, бөгөнгө һуғышсыларҙың аталары — Айырым башҡорт атлы бригадаһы яугирҙары — ҡаһарман комбриг Муса Мортазин командалығында үҙ толпарҙары менән ошо уҡ Днепр йылғаһын кисеп үткәйне. Арғымағына атланып, яр буйында атлы һәйкәл шикелле хәрәкәтһеҙ торған, ҡуңыр күҙҙәренең үткер ҡарашын Днепрҙың көнбайыш ярына текәгән подполковник Күсимов тәрән уйға сумған. Бәлки, уның болоҡһоу күңелен, был тиклем ашҡынып аҡҡан киң йылғаны 1920 йылда башҡорт атлылары дошман уты аҫтында нисек йөҙөп сыға алды икән, тигән һорау борсойҙор?

Теге яр буйында дошмандың әллә нисә ҡат окоптарҙан, траншеяларҙан торған нығытмалар эшләүе, доттар, дзоттар төҙөүе, фашистарҙың көнбайыш ярҙы «яҡын килә алмаҫлыҡ ҡәлғә», «көнсығыш вал» тип иғлан итеүҙәре лә Күсимовҡа күптән билдәле ине.

Күп тә үтмәй, 58-се полк командирын 7-се гвардия корпусы командиры генерал-майор А. Ф. Малеев саҡыра. Уның эргәһендә дивизия командиры Белов та була. Полктың хәләхүәлен, атлыларҙың кәйефен ҡыҫҡаса ғына һорашҡандан һуң, корпус командиры бик етди генә:

— Подполковник иптәш, иртәгә иртән мин һеҙҙең полктың Днепрҙы аша сығыуы тураһында докладты теге ярҙан көтәм, — тип һүҙен тамамлай.

«Иң тәүге эште теге яҡ ярҙы разведкалауҙан башларға кәрәк», — тигән уй Күсимовтың башына килеп инә.

Сентябрь айының күҙгә төртһәң күренгеһеҙ ҡараңғы төнөндә Күсимов үҙ разведчиктарын теге ярға үтә лә хәтәр заданиеға оҙата.

Көн кискә ауышыуға, йөҙөү өсөн кәрәк-яраҡтың барыһы ла әҙерләнеп бөткән була. Офоҡта шәфәҡ ҡыҙыллығы тоноҡлана башлағас, Күсимов десант эскадронын сафҡа теҙә. Нык тулҡынланып, полк командиры һәр һуғышсының әҙер-

леген тикшереп сыға. Тиҙҙән эскадрон, һалдарға тейәлеп, оло йылғаға сығыу өсөн, тауыш-тынһыҙ төн ҡараңғылығына инеп юғала. Был яҡта тороп ҡалған кешеләрҙең күңелен шомло тынлыҡ солғап ала. Минуттар мәңгелектәй һуҙыла. Билдәһеҙлек тойғоһо йөрәктәрҙе телгеләй. Ә төн тыныслығы ашҡынып көтөүселәрҙә ниндәйҙер өмөт саҡҡыһы уята. «Тимәк, уларҙың йылғаны аша сығыуын әлегә дошман һиҙмәй», тигән уй, яҡшыға юрау һуңғы минуттарға тиклем ышанысты нығытҡандай итә. Теге яҡҡа тиҫтәләгән метр ара ҡалғас, немецтар, ярға яҡынлаған десантсыларҙы һиҙеп, бөтә төр ҡоралдарҙан үлемесле ут аса. Рудой төркөмө һалдарҙан йылғаға һикерә. Ата-ата улар төн ҡараңғылығында бейек ҡойма кеүек өҫкә ауырҙай булып торған ярға ташлана. Ҡоро ергә аяҡ баҫҡан һуғышсылар ус аяһындай ерҙә дошман һөжүменә ҡаршы түңәрәк оборона ойоштора.

Һыҙылып таң атып килгән саҡта, кәмәләргә штабы менән полк командиры үҙе ултыра. Днепр ҡултығы уларҙың кәмәләрен оло һыу ағымына төшөрә. Ярты араны үткәнсе бер ни һиҙелмәй, ләкин йылғаның икенсе яртыһына сығыу менән, дошмандың тиҫтәләгән самолёты бомбаға тотоп ҡаршы ала, ләкин бик бейектән ташланған бомбалар һуғышсыларға артыҡ зыян килтерә алмай, уларҙан байтаҡ ситтә шартлай. Ярға етерҙән алда, дошмандың бер пуляһы ишкәксенең ҡулын яралай, ә икенсеһе Күсимов ултырған кәмәне тишеп сыға. Һыу тула башлай. Уларҙың барыһына ла кәмәнән һикерергә тура килә. Күсимовтың был яҡ ярға килеп сығыуы һуғышсылар араһында үҙҙәрен командалыҡтан ситтә, төп көстәрҙән алыҫта итеп тойған атлыларҙа ғәйәт ҙур рух тыуҙыра, һәр кемдең йөрәгендә батырлыҡҡа дәрт уяна.

27 сентябрҙең көн һарҡыуына 16-сы гвардия атлы дивизияһының ике полкы Днепрҙың көнбайыш ярына тулыһынса сыға. Ә иртәгеһенә инде үҙҙәренең танкыларға атыусы пушкалар һәм миномёт батареялары менән өс атлы полк был яҡта була.

Днепрҙы аша сығыу сәғәтенән алып өсөнсө көндөң иртәһенә тиклем 16-сы гвардия атлы дивизияһы яулап алған плацдармды фронт буйлап — 14, ә киңлеккә 8 километрға тиклем еткерә. Шулай итеп, күп ҡорбандар аша, был легендар дивизия ҡыҙыл ғәскәрҙең бүтән соединениеларына Днепрҙың көнбайыш ярына сығыу өсөн юл һала.

1944 йылдың 15 ғинуарында 16-сы гвардия атлы дивизияһының 61 һалдат һәм офицерына Днепрҙы аша сығыуҙа

күрһәткән батырлығы өсөн Советтар Союзы Геройы исеме биреү тураһында Указ сыға, шул иҫәптән 58-се гвардия атлы полкының 18 һуғышсыһы был юғары исемгә лайыҡ була.

Бөгөнгөләй хәтерендә: көнбайыш яр өсөн ҡаты һуғыш барған саҡта, уны бик ашығыс бәйләнеш аппаратына саҡырҙылар. Ниндәйҙер бер таныш булмаған кеше тоноғораҡ тауыш менән: «Унда эштәр нисек, Күсимов иптәш?» — тип һораны. Хәлде ҡыҫҡаса ғына аңлатып биргәс, шул уҡ тауыш: «Һине Советтар Союзы Геройы исеменә тәҡдим ителеүең менән ҡотлайым», — тине лә өҙөлөп ҡалды. Бер аҙҙан һуң аппараттан таныш тауыш — дивизия командиры Беловтың тауышы ишетелде. Комдив:

— Белдеңме, һинең менән кем һөйләште? — тип һораны.

— Юҡ, таный алманым, — тип яуап бирҙе Күсимов.

— Һине ҡотлаған иптәш беҙҙең армия командующийы булды, — тип аңлатты Күсимовҡа комдив.

Был шатлыҡлы хәбәрҙе ишеткәс, Күсимов бер аҙ ҡаушап ҡалды. Ҡара янған битенә эҫе йүгерҙе, йөрәге киң күкрәгенә һыймай туланы. «Да... Герой... Герой...» — тип ул бер нисә тапҡыр ауыҙ эсенән ҡабатлап алды.

1943 йылдың ямғырлы, йонсоу көҙөндә немец илбаҫарҙары тарафынан һуғыштың тәүге айҙарында уҡ баҫып алынған Белоруссия ере өсөн Ҡыҙыл Армияның азатлыҡ көрәше башланды.

1944 йылдың март урталарында дивизия атлылары Ҡыҙыл Армияның атлы ғәскәрҙәр командующийы маршал С. М. Будённыйҙы ҡаршы алды. Ул бөтә полктарҙа, эскадрондарҙа булды. Личный состав һәм аттар, комплектлау менән ҡыҙыҡһынды, хәрби һәм сәйәси эштең торошон тикшерҙе. Кавалерияла оҙаҡ йылдар хеҙмәт итеү осорондағы ҡайһы бер эпизодтарҙы иҫенә төшөрә-төшөрә, командирҙар менән ҡыҙыҡлы әңгәмә үткәрҙе. Иң һуңынан дивизия командиры Беловҡа корпус командованиеһына соединениела әле һуғышып йөрөгән Советтар Союзы Геройҙары менән осрашыу теләген белдерҙе. Ул ваҡытта атлы дивизияла 23 Герой иҫән була. Уны ҡаршы алыу өсөн, махсус палатка һәм, фронт шарттарында ҡулдан килгәнсә, аш-һыу әҙерләтелә. Корпус һәм дивизия командованиеһы вәкилдәре менән осрашыуға килгән маршал палатка ситенә теҙелгән Геройҙар менән күрешеп сыға. Ыласын күҙҙәренең йылы ҡарашы һәр батырҙы күҙ алдынан үткәреп, һәр береһенә аталарса изге теләк теләп, рух һәм дәрт күтәрерлек һүҙҙәр таба.

Уларҙың уң флангыһында торған Күсимов менән күрешеп, мөләйем ҡараштарын алмай, оҙаҡ ҡына теклəп тора. Иҫ киткес күп серҙәрҙе йөрөткән мейеһе ниндəйҙер ваҡиғаны хәтеренә төшөрөргә теләй.

— Һеҙҙең турала, полковник иптәш, күп ишеткәнем бар, — ти ул, мыйыҡтарын тағы ла өҫкәрәк күтәреп. Уны оҙатыусы командирҙар, ярҙамға ашыҡҡандай:

— Ул — беҙҙең данлыҡлы полк командиры. Үҙ полкы менән беренсе булып Днепрҙы аша сыҡты, — тиҙәр. Ләкин һаман үҙ хәтерен эшкә ҡушып, башынан үткән әллә ниндәй ваҡиғаларҙы аҡтара.

— Юҡ, был полковникты мин ҡайҙалыр күрҙем шикелле, яңылышмаһам. Дөрөҫмө, Күсимов иптәш?

Күсимов шпорлы аяҡтарын шаҡып, мөһабәт кәүҙәһен атлылар һөңгөһө кеүек турайтты ла:

— Так точно, маршал иптәш. 1934 йыл Мәскәү ипподромында һеҙ миңә рубка өсөн пистолет бүләк иткәйнегеҙ, — тип яуап бирҙе.

Маршалды оҙата килгән хәрби начальниктар өсөн был яңы ҙур асыш ине.

Күсимовҡа ул тағы ла бер ҡараш атты ла: «Мортазиндың был ҡустыһы, пожалуй, уға ҡарағанда ла шәберәк булып сығыуы мөмкин. Үҙ намыҫы өсөн был батыр теләһә кемдең икмәк шүрлегенә менеп төшөргә лә әллә ни һорап тормаҫ, — тип уйлап алды. Уның көрәк яҫылығы усында юғалып ҡалған көрөшкәне күреп: — Был бәһлеүән быныһын да булдыралыр», — тип йылмайҙы.

— Әгәр һине Хәрби Академияға уҡырға ебәрһәк, нисек уйлайһың? — тип мәкерле йылмая Будённый.

— Ҙур теләк менән, — тип яуап бирә Күсимов.

Шулай итеп, үҙенең дивизияға һуңғы килеүендә маршал Будённый Таһир Таиповичтың артабанғы яҙмышын ошолай хәл итеп китә.

* * *

Мәскәүгә килеп еткәс, ул туп-тура Атлы ғәскәрҙәр командующийы маршал Будённыйға йүнәлә.

1944 йылдың 15 майында: «Полковник Т. Т. Күсимовты М. В. Фрунзе исемендәге Академияның төп факультетына тыңлаусы итеп алырға», — тигән бойороҡҡа ҡул ҡуйыла.

Шул уҡ документта уның Академия байрағын йөрөтөүсе итеп тәғәйенләнеүе хаҡында ла әйтелә.

Бер нисә көндән Күсимов тыуған яҡтарға юллана. Уның Академияға уҡырға инеү хәбәре үҙенән алда республика органдарына мәғлүм була.

Бер аҙҙан уны тыуған Башҡортостаны ҡаршы ала. Һәр осрашҡан урында ҙур ихласлыҡ, ҡунаҡсыллыҡ менән бергә, полковник ҡала-ауылдарҙағы ярлылыҡты, халыҡ бөлгөнлөгө ярылып ятыуын да күрә. Күп ауылдарҙы, һуғыш ҡайғыһы өҫтөнә, аслыҡ-яланғаслыҡ ялмап алған. Элекке тракторҙар урынына күп баҫыуҙарға үгеҙ, хатта янбаштары сусайып сыҡҡанябыҡ һыйырҙарын егеп, аслыҡтан яңаҡтары ослайып, сырайҙары һүнгән ҡатындарҙың ер һөрөп, ер тырматып йөрөүҙәре күтәренке хистәр менән килгән полковник күңелен бермә-бер төшөрә, ә инде ҡайһы бер урындарҙа ирҙәре дивизияға алынған ҡатындар менән осрашыу уның өсөн оло ғазапҡа әйләнә.

Көндәлек матбуғат ҡарап барған ҡайһы бер уҡығанyраҡ кешеләр:

— Нишләп һуң әле хәҙер атлы дивизиянан «Башҡорт» тигән исем төшөп ҡалды, хәҙер ул дивизия бөтөнләй икенсегә әйләндеме ни? — тип аптыраны. Ҡыҫҡаһы, Академияға һынауһыҙ ҡабул ителгән Күсимовҡа үҙ иләндә, үҙ яҡташтары алдында Башҡорт атлы дивизияһы командалығы өсөн имтихан тоторға тура килде.

— Таһир ҡорҙаш, һине башта идараға алып барайыммы, әллә Фатима ҡарындашыңамы? Килеү хәбәреңде ишетеп, унда ла көтәүелләп торалар ине шикелле, — тине колхоз председателе.

Фатима үҙенең ике туған ағаһын ҡапҡа тышында ихлас ҡаршы алды. Оҙонса ҡуңыр битле, ҡаҡсараҡ Фатима мыҡты кәүҙәле ағаһы янында бәләкәй генә ҡыҙ булып күренде. Таһирға, председателгә эйәреп, үҙҙәрен колхоз активы һанап йөрөгән бер нисә кеше өйгә инде. Ҡасандыр малай саҡта мәрмәр һарай дәүмәллеге булған йорт Күсимовҡа тар ғына, тәпәш кенә күренде. Түшәменә түбәһе тейеп торған бер генә бүлмәле өйҙә тыны ҡыҫылғандай тойолдо.

— Бына бик шәп итеп ҡунаҡ итергә лә ниәт юҡ түгел ине, колхоз тәкәләре һимерә алмай ята бит әле, — тине председатель, ләкин ул, үҙ темаһынан яҙлығып, тағы колхоз фәҡирлегенә төшөп китте. Сөнки колхозсыларҙың асығыуы, келәттә

сыҫҡан, ҡомаҡ ашарлыҡ та аҙыҡтың булмауы уның үңәсендә ауыр таш булып аҫылынып тора ине.

— Бына, ҡорҙаш, ошо өҫтәлгә ҡуйылған һый — беҙҙең иң оло байрам ашыбыҙ инде. Башҡа форсат юҡ, — тип зарланды.

Колхоз хужаһының бындай күңелһеҙ ҡиссаһынан һуң ҡунаҡтың тамағына аш барманы. Ул бер аҙ, күҙен йомоп, уйланып ултырҙы ла урынынан тора башланы.

Ул, аяҡ үрә баҫып, сөйҙә элеүле портупеяһын, ҡылысын таға башланы. Кейенгәнен ҡарап торған ағай-энегә, «барыһы ла әҙер, ҡуҙғалырға мөмкин», тигәнде аңлатып, ялтырап торған ҡылысын яртылаш һурып сығарҙы ла шаҡылдатып ҡынына яңынан тығып ҡуйҙы. Уның артынса тороп, кепкаһын кейеп сығырға әҙерләнгән председателгә, үҙен уратып алған кешеләргә Таһир Күсимов күҙ йүгертеп сыҡты ла:

— Беҙ хәҙер йәһәт кенә председатель менән Магнитҡа барып киләбеҙ. Йомошобоҙ бар, — тип үҙ артынан колхоз хужаһын эйәртеп сығып та китте.

Ул тик тышта, моторы эшләп ултырған «Виллис» машинаһына ултырғас ҡына, председателгә әйләнеп:

— Магнитогорск комбинаты директоры Носовҡа барып киләйек әле. Ярҙам һорайыҡ. Былайтып халыҡты күрәләтә астан үлтереп булмай бит, — тине.

Комбинат директоры Григорий Иванович Носовты Күсимов күптән ишетеп белә. Бына хәҙер олоғайып, ҡалыная башлаған атаҡлы директор уны урынынан тороп ҡаршы ала.

— Мин, — тине Күсимов, — һеҙҙең элекке эшсегеҙ. Күсем руднигында комбинат өсөн заманында таш сығарҙым, шулай итеп, үҙемдең элекке хужам алдында ултырам.

Уның был хәбәре даны бөтә донъяға таралған комбинат директорының күңелен ирәбеләтеп ебәрҙе. Тиҫтәләрсә мең эшселәр коллективынан сыҡҡан ошондай ҙур хәрби начальниктың, етмәһә, Советтар Союзы Геройының, алдында ултырыуы унда эске кинәнес тыуҙырҙы, һорашып ултырған полковниктың Күсем ауылыныҡы икәнен белгәс, ул бөтөнләй асылып китте.

— Әгәр беҙҙән 25 километр ерҙә Күсем руднигы асылып, марганец рудаһы табыуҙы юлға һалмаһаҡ, Магнитогорск комбинаты танкыларға кәрәкле броня ҡоросон етештерә алмаған булыр ине. Күсемдәр был проблеманы хәл итергә ярҙам итте, — тине. — Әйткәндәй, уның эргәһендә генә беҙҙең комбинат эшселәренең ял итеү урыны — Яҡтыкүл ял йорто бар, — тип өҫтәне. Уны диҡҡәт менән тыңлап ултырған Күсимов:

— Эйе, бына ошо ерҙәр, атаҡлы Ҡырҡтының көнсығыш битләүе — минең тыуып үҫкән ерҙәр инде. Әле бына үҙ ауылыма Академиянан отпуск алып ҡайтып төштөм, — тине. Директор көтмәгәндә:

— Йә, полковник иптәш, ауылдаштар нисек ҡаршы алды һуң үҙеңде? — тип йылмайҙы.

— Ауылдаштарҙың кәйеф-сафа ҡороу хистәре юҡ. Улар астан интегә. Бына мин ошонда һеҙҙең ярҙамығыҙ менән уларға бер аҙ аҙыҡ табып ҡайта алмаһам, ауылда астан үлеү башланасаҡ, — тине Күсимов, ҡаты көрһөнөп. Уның сырайы тағы ла ҡараңғылана төштө. «Ысынлап та, эш бик етди икән шул, ә мин әле был полковникты саҡырып, ҡунаҡ итеп ҡайтарырға ниәтләнеп ултыра инем», — тип уйлап алды Григорий Иванович.

— Ярай, полковник иптәш, бик бошонмағыҙ, хәҙер берәй сараһын күрербеҙ, — тине лә урынбаҫарын саҡыртты. Алдында хәрбиҙәрсә баҫып торған, кәкре танауы аҫтына бармаҡ башындай мыйыҡ ебәргән кешегә етди итеп:

— Хәҙер үк «Большевик» колхозының бригадаһы Күсем ауылына биш-алты центнер он оҙатһын. Полковник барып еткәнсе, йонсоған халыҡҡа он таратылған булһын, — тип бойорҙо.

Тыуған ауылында Күсимов берҙе ҡунды ла Өфөгә юлға сыҡты. Был сәфәрендә уны БАССР Юғары Советы Президиумы Председателе Рәхим Кирәй улы Ибраһимов оҙатып йөрөнө.

Мәскәүгә ҡайтып, күптән ҡулына китап тотмаған Күсимов өсөн занятиеларға ылығып китеү бик тә ҡыйынға төштө.

Академияның төп факультетын — дөйөм ғәскәри бүлеген Күсимов 1947 йылдың 7 ноябрендә ҡыҙыл диплом һәм алтын миҙал менән тамамлап сыға. Алтын рам эсендәге уның фотоһын, башҡа бик күп начальниктарҙыҡы менән ҡуша, күпте күргән Академияның мәрмәр стенаһына мәңгегә беркетеп ҡуялар.

Шулай итеп, ун биш йәшкә сыҡҡанда, башланғыс мәктәптең тупһаһына беренсе аҙым атлаған, Ҡырҡты тауына һыйынып ултырған Күсем ауылының элекке ярлыһы Таип малайы, хәҙер гвардия полковнигы, Советтар Союзы Геройы Таһир Күсимов мәшһүр Академияны алтын миҙал менән тамамлауға ирешә.

1961 йылдың июль айында дивизия менән биш йыл командалыҡ иткән генерал Күсимовты ла юғарыраҡ хәрби вазифаға — корпус командирының урынбаҫары итеп күсерәләр. Ләкин ошо вазифала ла Күсимов республика етәкселәренең иғтибарынан бер ҙә ситкә китмәй. Элекке кеүек үк, союздаш республикалар мәркәздәрендә, шул иҫәптән Ашхабадта ла, революцион байрамдарҙа үткәрелә торған хәрби парадтарҙы ҡабул итеүен дауам итә. Был почётлы бурыстың тик Күсимов тарафынан ғына башҡарылыуына республика етәкселеге күнегеп тә бөтә.

1963 йылдың июль баштарында генерал Күсимовты Ташкентҡа хәрби округ штабына саҡыралар. Уны командующий — армия генералы Федюнинский ҡабул итә. Күсимовты үҙе ҡырына йомшаҡ креслоға ултырта ла бик алыҫтан уратып һүҙ башлай:

— Бына нәмә, генерал иптәш, — тип ул рәсми тонға күсә. — Мин һине икенсе, юғарыраҡ вазифаға тәҡдим итергә торам бит әле. Бөтөнләй Урта Европаға күсерәсәкмен, эш һинең ризалыҡта тора.

— Ҡайҙа һәм кем итеп?

— Венгрияға, Будапештҡа. Совет ғәскәрҙәренең Көньяҡ төркөмө командующийына хәрби әҙерлек буйынса урынбаҫар итеп, билдәле, киләсәктә генерал-лейтенант званиеһы биреп.

Күсимов ризалығын бирергә бик ашығып бармай, бер аҙ ваҡыт һорай. Командующий уның менән килешә, уйлап килергә ҡуша.

Генерал Күсимов үҙенең эсендә йөрөткән киләсәккә хыялын командующийына асып һалырға мәжбүр була.

— Ҡәҙерле Таһир Таипович! Үҙ тыуған республикама ҡайтам, тиһең инде. Был, әлбиттә, донъя күреп олоғайған кешеләр өсөн изге теләк. Ләкин был теләктең яҡты өмөт булыуы йәһәтенән тыш, күҙгә күренмәгән башҡа яҡтары ла бар. Йондоҙ алыҫта, бик юғары күк көмбәҙендә торған саҡта ғына сағыу яҡтылыҡ бирә ала. Әгәр уны ергә төшөрһәң, уның матур биҙәктәре һүнә, тоноҡлана, уның сағыу ҡырҙары төҫһөҙләнә. Республикаңа ҡайтып төшөү менән, һине ҡул осонда ғына йөрөтөрҙәр тип уйлама. Беҙ һинең менән тик яҡташтарыбыҙҙан алыҫ торған өсөн генә ҡәҙерле.

— Беләһегеҙме, армия генералы иптәш, беҙҙә, башҡортта, «алтын сыҡҡан урынында ҡәҙерле» тигән мәҡәл бар, — тине лә Күсимов, һүҙенең әңгәмә ҡалыбына турыраҡ килмәгәненә

уңайһыҙланғандай, — һеҙ мине дөрөҫ аңлағыҙ, — тип аҡланғандай итте.

**— Аңлайым, бик яҡшы аңлайым. Ләкин беҙ һүҙ алып барған алтын сыҡҡан ерендә генә тороп ҡалмаған шул. Уны сығарғандар ҙа хәрби комиссариатҡа тапшырғандар. Бына 35 йыл буйына алтын үҙенең сыҡҡан урынын күрмәгән, ил буйлап тәгәрәп йөрөгән. Ул алтындың баһаһы хәҙер үҙ баҙарығыҙҙа бик юғары булмауы бар. Уны күктәге йондоҙ миҫалында мин һиңә әйттем инде. Бына шул, генерал иптәш. Тәҡдим — минеке, ә хәл ҡылыу — һинеке, — тип Федюнинский һүҙен түңәрәкләргә самаланы. Ниндәйҙер эске кисерешен тынысландырырлыҡ яуап эҙләгәндәй, Күсимов яңынан һүҙ башланы:**

**— Беҙҙә, армия генералы иптәш, сит ерҙә солтан булғансы, үҙ илеңдә олтан бул, тип тә әйтеп ебәрәләр, — тигән булды.**

**Командующий Күсимов менән атайҙарса бик йылы хушлаша.**

**Ҙур эске тойғо менән хәрби округ штабын мәңгегә ҡалдырып киткән Таһир Таипович үҙ республикаһына ҡайтып эшкә тотонғас, командующийының уға әйткән һуңғы һүҙендә күпме дөрөҫлөк барына нисә мәртәбә инана, нисә тапҡыр уның хаҡлы булыуын үҙ тормош тәжрибәһендә татый, һынап ҡарай. «Йондоҙ тик бейектә, күктә торорға тейеш, ә ергә төшкән йондоҙ үҙ яҡтылығының сағыуын юғалта...» тигән хаҡ һүҙҙәр бәғерһеҙ ысынбарлыҡтың асылы күп осраҡта шунан ғибәрәт икәнен әллә нисә тапҡырҙар иҫбатлай.**

1. Башҡорт атлы дивизияһының Украиналағы һуғыштары тураһында һөйләгеҙ.
2. Өҙөктә әйтелгән тарихи шәхестәр тураһында белешмә төҙөгөҙ.
3. Генерал Күсимовҡа характеристика бирегеҙ.
4. Интернет селтәренән генерал Күсимовтың музейы тураһында мәғлүмәттәр табып, өйрәнегеҙ һәм фекер алышығыҙ.
5. Башҡорт атлы дивизияһының яу юлын картанан ҡарап билдәләгеҙ һәм дәфтәрегеҙгә төшөрөгөҙ.

**97-се күнегеү.** Алдағы әҫәрҙәге ҡалын хәреф менән бирелгән һөйләмдәрҙә исемдәрҙең ниндәй килештә тороуын билдәләгеҙ. Шул уҡ өлөштә фразеологизмдарҙы, мәҡәл һәм әйтемдәрҙе күрһәтегеҙ, уларҙың мәғәнәләрен аңлатығыҙ.

*Василий ШУКШИН*
*рус яҙыусыһы*

## ҠАЙҒЫ

### I

Йәй көнө шундай бер мәл була: көслө әрем еҫе иҫеңһушыңды ала. Ни өсөндөр, айырыуса төндәрен шулай. Ай яҡтырта, тирә-яҡ тынлыҡҡа сумған... Ләкин күңел ниңәлер тынысһыҙлана, һағышлана. Бына ошондай икһеҙ-сикһеҙ, яҡты, зәһәр төндәрҙә тыйнаҡһыҙ, ҡыйыу, татлы уйҙар килә башҡа. Хатта уйланып ҡына ҡалмайһың, ә ниҙер булыр һымаҡ. Баҡса артындағы дегәнәктәр араһына боҫаһың — аңлатып булмаған серле бер тойғонан йөрәк туҡтап ҡалғандай тойола. Тик шуныһы йәл: тормошта бындай төндәр бик һирәк була.

Ошондай бер төн ғүмергә минең хәтерҙә ҡалды.

Миңә ун ике йәштәр тирәһе булғандыр. Тубыҡтарымды ҡосоп, баҡса артында ултырам, оҙаҡ итеп, күҙемә йәш килгәнсе, айҙы күҙәтәм. Ҡапыл кемдеңдер яҡында шым ғына илағанын ишетәм. Боролоп ҡараһам — беҙҙең күрше Нечай бабай. Ябыҡ ҡына бәләкәй кәүҙәһенә оҙон киндер күлдәк кейгән, үҙе илай, үҙе аңлайышһыҙ итеп ниҙер мығырлап китеп бара.

Өс көн элек кенә Нечай бабайҙың ҡатыны үлде: йыуаш ҡына, баҫалҡы ҡарсыҡ. Улар икәү генә йәшәй ине, балалары күптән таралышып бөткән. Нечай бабайҙың әбейе, йәғни Нечаиха ҡарсыҡ, артыҡ һиҙҙермәй генә йәшәне, һиҙҙермәй генә үлеп тә китте. Иртән генә белделәр: «Нечаиха ҡарсыҡ, бахыр ғына, вафат икән дәһә...» — тиеште кешеләр. Ҡәбер ҡаҙып, әбейҙе шунда төшөрөп ерләнеләр ҙә... оноттолар. Мин әле лә уның төҫ-ҡиәфәтен иҫемә төшөрә алмайым. Ихатаһы буйлап йөрөй торғайны, себеш-тауыҡтарын саҡырып: «Сип-сип-сип». Бер кем менән дә әрләшмәне, ауыл буйлап даулашып йөрөмәне. Әле генә бар ине — хәҙер юҡ инде, китте.

...Шул яҡты, матур төндө мин яңғыҙ кешегә нисек ауыр булғанын аңланым. Тирә-яҡ шундай гүзәл, йылы, тыуған ерҙә йәшәү ни тиклем рәхәт булһа ла...

Мин боҫоп ҡына ултырам...

Ҡарттың тубығынан аҫҡа төшөп торған оҙон күлдәге ай яҡтыһында ап-аҡ булып күренә. Ул, киң еңе менән күҙҙәрен һөрткөләп, әкрен генә килә. Мин уны бик яҡшы күрәм. Эргәнән генә уҙып бара.

— Хәҙер... хәҙер саҡ ҡына хәл йыяйым... шунан һөйләшеп алырбыҙ, — тип шым ғына мығырлай ҡарт, үҙе һаман күҙ йәштәрен тыя алмай. — Өс көн инде яфаланам, үҙемде ҡайҙа ҡуйырға ла белмәйем. Бер нәмәгә лә ҡул бармай, ни эшләргә һуң?..

Яйлап ул тынысланды.

— Ныҡ ҡыйын миңә, Парасковья: ниңә һин, ахырҙа булһа ла, бер нәмә тип тә әйтмәнең? Миңә берәй үпкәң бар инеме? Берәй һүҙ әйтһәң, еңелерәк булыр ине, исмаһам. Хәҙер уйланып тик йөрөлә... Охо-хо... — Бер аҙ өндәшмәй торҙо. — Һине яҡшы итеп йыуҙылар, матур кейемдәреңде кейҙерҙеләр, башҡаларҙан бер ҙә кәм түгел. Сергей ҡоҙа табут әтмәләп бирҙе. Илаштылар. Халыҡ күп булманы булыуын. Баллы бутҡаһын да бешерҙеләр, һине Дадовна эргәһенә, ситтән ҡуйҙыҡ. Урының яҡшы, ҡоро. Мин үҙемә лә шунда урын ҡарап ҡуйҙым. Бына хәҙер яңғыҙыма ни эшләргә? Әллә, йортто бикләп, Петька янына китергәме? Ҡурҡынысыраҡ шул: үҙе нисауа ла ул, ә бына бисәһе... үҙең беләһең: өндәшеүен өндәшмәһә лә, тамағыңа аш бармаясаҡ. Бына бит бәлә ҡайҙа! Нимә кәңәш итерһең?

Тынлыҡ.

Мин ҡурҡа башланым. Нечаиха әбей үҙенең яғымлы, түҙем тауышы менән һөйләшә башлар, тип көттөм.

— Самалап ҡарайым да, — тип дауам итте Нечай бабай, — кемгә барып баш төртөргә икән? Муйынға элмәк элһәм, еңелерәк булыр кеүек хатта. Ә кисә төнөн саҡ ҡына серем итә башлағайным, күрәм: ихата буйлап һин киләһең, йомортҡалар тулы иләк тотҡанһың. Ныҡлабыраҡ ҡараһам, йомортҡа түгел, себештәр булып сыҡты улар, тереләр, бәләкәй генәләр үҙҙәре. Ә һин шуларҙы берәмләп ашайһың, етмәһә, маҡтап-маҡтап алаһың... Хоҙай һаҡлаһын! Уянып киттем... Һине уятайым тиһәм, һин юҡ, оноҡтанмын һинең киткәнеңде... Парасковьяҡай... сәнселеп китһен донъяһы!.. — Нечай ҡарт тағы ла илай башланы. Ҡысҡырып илай. Мин ҡурҡышымдан ҡалтыранып киттем — һуҙып-һуҙып, олоуға оҡшаш тауыштар сығара: — Э-э-э... у-у... Киттең? Ә мине уйланыңмы һуң: ҡайҙа барам мин хәҙер? Исмаһам, өндәшмәнең дә: ҡаланан доктор килтертер инем... Кешеләр бит һауығып сыға. Әтеү бит бер һүҙ ҙә, ярты һүҙ ҙә әйтеү юҡ — һуҙылдың да яттың! Улай мин дә булдыра алам... — Нечай танауын һемгерҙе, күҙ йәштәрен һөрттө, ауыр итеп көрһөндө. —

Ҡыйынмы унда, Парасковьяҡай? Бында ҡайтҡың киләлер, ә? Төшкә инәһең бит... Йышыраҡ ин төштәремә... тик һәйбәт итеп. Этеү әллә ниндәй себештәр... шайтан белһен уны. Ә бына бит... — Нечай ҡарт шыбырлауға күсте, әйткәненең яртыһын ишетмәй ҡалдым. — Гонаһ шомлоғо, мин дә уйлап ҡуйғайным да... Ә нимә? Шулайтып та күмгәндәре булған, ишеткән бар. Ана Краюшкинола бер әбейҙе ерләгәндәр, ә ул... ыңғырашып ятҡан. Кире ҡаҙып алғандар... Ошо ике төндә тыңлап йөрөнөм: былай тауыш-фәлән юҡ һымаҡ. Этеү мин дә уйлап ҡуйғайным... Кешене ниндәйҙер ҡурҡыныс бер йоҡо баҫа, ти, шунан бөтәһе лә уны үлгән тип уйлай, ә ул — тик йоҡлап киткән...

Ошо урында мин бөтөнләй ҡурҡыуға төштөм. Яйлап ҡына шыуышып, шым ғына баҡсанан сығып һыҙҙым.

Олатайыма килеп, бөтәһен дә һөйләп бирҙем.

Ул кейенә һалды ла икәүләп баҡса артына киттек.

— Ул үҙ-үҙе менән һөйләшәме әллә уның менәнме? — тип һораша олатайым.

— Уның менән һөйләшә. Артабан нимә эшләргә, тип кәңәш һорай...

— Аҡылына хилафлыҡ килеп ҡуйыр әле ҡарт ишәктең. Ысын, барыр ҙа ҡаҙып сығарыр. Ә, бәлки, ул иҫерек булғандыр?

— Юҡ, ул эсһә йырлай йәки Алла хаҡында һөйләй. — Мин быны беләинем.

1. Әҫәр кем исеменән алып барыла?
2. Нечай бабайға, Нечаиха әбейгә портрет-характеристика бирегеҙ.
3. Нечай бабай әбейенең үлемен нисек кисерә? Ҡайғыһына сыҙай алмай, ул ниндәй ҡарарҙар ҡабул итеп ҡарай?
4. *Әллә, йортто бикләп, Петька янына китергәме? Ҡурҡыныҫыраҡ шул: үҙе нисауа ла ул, ә бына бисәһе... үҙең беләһең: өндәшеүен өндәшмәһә лә, тамағыңа аш бармаясаҡ. Бына бит бәлә ҡайҙа! Нимә кәңәш итерһең?* Өҙөктөң мәғәнәһен аңлатығыҙ.
5. Олоғайған ата-әсәләрен ҡайһы бер балалар бөгөн дә ҡарауһыҙ ҡалдыралар. Шул турала фекер алышығыҙ.

## II

Нечай бабай, беҙҙең тауыштарҙы ишетеп, тынып ҡалды.

— Кем бында? — тип ҡаты ғына өндәште олатайым.

Нечай ҡарт оҙаҡ өндәшмәй торҙо.

— Кем бында, тип һорайым?

— Ә һиңә нимә кәрәк?

— Нечай, һинме?

— Мин булһам, шунан?

Беҙ яҡын килдек. Нечай бабай аяҡтарын өҫтө-өҫтөнә һалып ултыра, аҫтан өҫкә беҙгә ҡарай — ҡарашы асыулы.

— Тағы кем бар ине бында?

— Ҡайҙа?

— Бына ошонда... Һин кем менәндер һөйләшә инең, мин ишеттем бит.

— Миндә эшең булмаһын.

— Оло кешеһең инде, ә аҡылыңдан яҙып ултыраһың... Оят түгелме һиңә?

— Мин уның менән һөйләшәм, берәүгә лә ҡамасаулыҡ итмәйем дәһә.

— Кем менән һөйләшәһең? Уның менән һөйләшергә ул юҡ бит инде! Кеше үлгән — ер ҡуйынында ята хәҙер.

— Ул минең менән һөйләшә, мин уны ишетәм, — тип ҡаршылаша Нечай. — Миңә ҡамасаулап йөрөмәгеҙ. Йөрөйҙәр бында кеше тыңлап...

— Әйҙә әле, киттек. — Олатайым Нечайҙы ерҙән еңел генә күтәреп торғоҙҙо.

Нечай бабай ҡаршылашманы.

— Ауыр миңә, ҡорҙаш, ныҡ ауыр. — Ул алдан бара, һөрлөгөп-һөрлөгөп китә, үҙе бер туҡтауһыҙ еңе менән йәшен һөртә. Мин был бәләкәй кәүҙәле ҡайғы баҫҡан кеше артынан киләм, үҙем дә, олатайым ишетеп ҡалмаһын тип, шым ғына илайым, әтеү елкәгә берҙе ҡундырыуы ла бар. Нечай бабай ныҡ йәл ине миңә.

— Ә кемгә еңел? — тип тынысландыра уны олатайым. — Кемгә ғәзиз кешеһен ер аҫтына тығыуы еңел һуң? Әгәр бөтәһе лә үлгән артынан бергә ергә ята башлаһа, нимә килеп сығыр ине, ә? Миңә хәҙер, беләһеңме, нисә тапҡыр бергә ятырға тура килер ине? Түҙ, тешеңде ҡыҫ та түҙ.

— Бигерәк йәл шул.

— Әлбиттә, йәл... нимә эшләйһең. Ләкин хәҙер һин бер нисек тә уға ярҙам итә алмайһың. Үҙеңде генә бөтөрәһең бит. Үҙең аяҡ һуҙып ҡуйыуың да бар. Түҙергә кәрәк.

— Мин аңлайым да ул, тик... бына ошо еремә генә килеп уҡмашты — бер нисек тә ысҡынмай. Эсеп тә ҡараным — юҡ, ебәрмәй.

— Ебәрер. Петька нишләп ҡайтманы һуң? Тегеләре ярай, алыҫта инде, ә быныһына ни булған?

— Командировкаға ебәргәндәр. Уф, ауыр миңә, ҡорҙаш!.. Ғүмерҙә лә шулай булыр тип уйламаным.

— Беҙ һәр саҡ шулай: кеше йәшәй эргәлә — күрмәйбеҙ ҙә, ә үлһә — йәлләйбеҙ. Ләкин ҡайғынан аҡылдан яҙыу — шулай уҡ ахмаҡлыҡ.

Минең өсөн был ваҡытта яҡты, матур тыныс төн дә, аңлашылмаған ниндәйҙер шатлыҡ та үлгән һымаҡ тойолдо. Бәләкәй ҡарттың оло ҡайғыһы был яҡты донъяны ҡаплап алды. Бары хәтерҙә ҡалғаны: тирә-яҡта шул уҡ әсе, зәһәр әрем еҫе.

Олатайым Нечай ҡартты беҙҙә ҡалдырҙы. Улар, толоп ябынып, икеһе лә иҙәнгә ятты.

— Мин һиңә бер тарих һөйләйем, — тип олатайым әкрен генә һүҙ башланы. — Һин һуғышта ҡатнашманың — шуға күрә унда ниндәй хәлдәр булғанын белмәйһең... Унда, туған, хәтәрерәк хәлдәр ҙә булғыланы. Бына шундай бер тарих: мин санитар булып хеҙмәт иттем, яралыларҙы тылға ташыныҡ. Бер ваҡыт шулай китеп барабыҙ. «Студебеккер» ыбыҙ шыплап тултырылған. Ыңғырашалар, яйыраҡ барыуҙы үтенәләр... Беҙҙең шофёр, Миколай Игринёв, минең йәштәш ине, былай ҙа яйыраҡ, тигеҙерәк барырға тырыша, ләкин бик яй барып та булмай: сигенәбеҙ. Бер юл сатына килеп еттек, алда еңел машина бара. Унан бер офицер ҡул болғай, туҡтат, ти. Ә беҙгә бик ҡаты приказ бирелгән: хатта шайтандың үҙе осраһа ла, туҡтамаҫҡа! Был дөрөҫ тә, сөнки тағы күпме кеше ятып ҡалды көтөп, һөжүм итһәк, бер хәл, ләкин сигенәбеҙ бит, етмәһә. Шулай итеп, ары киттек, туҡтаманыҡ. Шул саҡ еңел машина беҙҙе үтеп китте лә, офицер, наганын һелтәп, юлға арҡыры торҙо. Бер ни ҙә эшләп булмай — туҡтаныҡ. Баҡтиһәң, уларҙың машинаһында ауыр яра алған офицер бар, ә быларға икенсе яҡҡа китергә кәрәк. Теге наган һелтәгән офицер менән икәүләп яралы офицерҙы көскә-көскә кузовҡа урынлаштырҙыҡ. Миколай кабинала ултыра: уның янында ла яралы капитан ята тиерлек; Миколай уны бер ҡулы менән тотоп килә, икенсеһе менән рулде борғолай. Көс-хәл менән ултырыштыҡ. Ә теге яңы ултыртҡан яралының башы тотош ҡан, уҡмашып ҡатып бөткән. Шунда уҡ уйлағайным: алып барып еткереп булмаҫ, ахыры, лейтенант егет йәш кенә, саҡ ҡырына башлағандыр әле. Уның башын әҙ булһа ла тотоп барырмын тип, тубыҡтарым өҫтөнә һалдым — ҡайҙа инде! Госпиталгә

барып еттек, яралыларҙы ала башланыҡ. — Олатайым тамағын ҡырҙы, туҡтап ҡалды. — Лейтенантты тапшырҙым уға... «Бөттө, мин әйтәм, үлде бахырҡай». Ә Миколай лейтенанттың йөҙөнә ҡараны ла... Кхәх... — Тағы ла тынып ҡалды олатайым. Оҙаҡ өндәшмәй ятты.

— Әллә улы булып сыҡтымы? — тип шым ғына һорай Нечай ҡарт.

— Улы.

— Йә Хоҙай!

— Кхм... — Олатайым шырылдатып танауын тарта, бер биш тапҡыр ғына эшләгәндер быны.

— Ә һуңынан нисек булды һуң?

— Ерләнеләр. Командир Миколайға, өйөнә ҡайтып килергә тип, бер аҙна ял бирҙе. Ҡайтып килде. Ҡатынына улын ерләүе хаҡында әйтмәгән. Документтарын, ордендарын йәшергән дә, бер аҙна тороп, кире һуғышҡа киткән.

— Нишләп әйтмәгән һуң?

— Әйтмәгән шул... Былай бит бәләкәй булһа ла өмөт була, ә әйтте ниһәң... бөтөнләйгә өмөтһөҙ. Әйтә алмаған. Нисә тапҡыр әйтергә итеп ҡараным, булдыра алманым, ти.

— Йә Хоҙай. — Нечай ҡарт ҡабат-ҡабат көрһөндө. — Үҙе иҫән ҡалдымы һуң?

— Микола? Белмәйем, аҙаҡ беҙҙе төрлө урындарға күсерҙеләр... Бына шундай тарих. Улы! Әйтеүе генә анһат. Үҙе шундай йәш кенә ине...

Ҡарттар шымып ҡалды.

Тәҙрәгә айҙың тантаналы йәнһеҙ яҡтылығы аҡты ла аҡты. Нур һибелә! Ҡайғымы, шатлыҡмы ерҙә — ул балҡыуын белә!

1. Малай һәм уның олатаһы тураһында фекерегеҙҙе әйтегеҙ.
2. Олатайҙың Нечай бабайға һәм ейәненә һуғышта булған хәлде һөйләүенең маҡсатын аңлатығыҙ.
3. Һөйләнгән тарих Нечай бабайға нисек тәьҫир итә?
4. *Ҡорҙаш, «студебеккер», толоп* кеүек һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен аңлатығыҙ.

## ҺӨЙЛӘМДЕҢ ТИҢ КИҪӘКТӘРЕ

Һөйләмдәрҙә бер үк һорауға яуап булып килеүсе бер нисә киҫәк булыуы мөмкин. Бындай һөйләм киҫәктәрен **һөйләмдең тиң киҫәктәре (однородные члены предложения)** тип атайҙар.

Һөйләмдең бөтә киҫәктәре лә тиң була ала:

1. *Тракторсы ҡыҙҙарыбыҙға һауабыҙ ҙа, һыуыбыҙ ҙа килеште* (тиң эйәләр).

2. *Ауылдың урамын остан осҡа йөрөп сығам, өйҙәргә инеп хәл белешәм* (тиң хәбәрҙәр).

Эйәрсән киҫәктәр тиң булһын өсөн, уларҙың бер үк һүҙгә эйәреүе, бер үк һорауға яуап биреүе шарт. Аныҡлаусылар, шуларға өҫтәп, предметты бер яҡлап аныҡларға тейеш.

Ҡарағыҙ: 1. *Баллы, ҡаҡлы сәй хәтирәләрҙе яңыртып ебәрә* (тиң аныҡлаусылар).

2. *Һуғыштан, күкрәктәрендә ордендарын, миҙалдарын сыңлатып, егеттәр ҡайта башланы* (тиң тултырыусылар).

3. *Бүреләр менән уҙышты йылдан-йыл йышыраҡ, асығыраҡ иҫкә төшөрәм* (тиң хәлдәр).

**98-се күнегеү.** Һөйләмдәрҙе уҡығыҙ, тиң киҫәктәр янындағы тыныш билдәләрен күҙәтегеҙ һәм ҡағиҙәләр сығарығыҙ.

1. Әсәйем дә, мин дә бер һүҙ өндәшмәнек. 2. Аҙым һайын сумам да үрмәләп сығам. 3. Әсәйем ҙур салбар менән күлдәкте тегеләй ҙә, былай ҙа әйләндергеләне. 4. Эт дерелдәй, шыңшый. 5. Алыҫта ниндәйҙер сәйер тауыш: баҡырыумы, йырлаумы, ҡаңғылдаумы ишетелде. 6. Оҙаҡламай бүреләр ҙә, Һарыҡолаҡ та, өшөү ҙә — барыһы ла онотолдо. 7. Һалҡын һыу тәнде ут шикелле өтөп алды, үңәскә килеп етте, саҡ-саҡ ағыҙып алып китмәне. 8. Әсәйебеҙ ауыҙын асты, ләкин бер ни әйтә алманы. *(Булат Рафиҡовтан)*

**99-сы күнегеү.** Һөйләмдәрҙе дауам итеп яҙығыҙ.

Өлгө: *Кем? нимә?* һорауҙарына яуап биргән, һөйләмдәге эште башҡарыусыны белдергән һөйләм киҫәге **эйә** тип атала.

1. *Ниндәй? кемдең? күпме?* һорауҙарына яуап биргән...

2. Һөйләмдә ҡылымға бәйләнеп килгән, килеш (эйәлек килештән башҡа) һорауҙарына яуап биргән...

3. Һөйләмдәге эштең эшләнеү хәлен (рәүешен, урынын, ваҡытын, сәбәбен) белдергән...

## «ҺӨЙЛӘМДЕҢ ТИҢ КИҪӘКТӘРЕ» ТЕМАҺЫ БУЙЫНСА ҮТЕЛГӘНДӘРҘЕ ҠАБАТЛАУ

**1.** Һөйләм киҫәктәре ҡайһы осраҡта тиң булып килә?
**2.** Һөйләмдең ниндәй киҫәктәре тиң була ала?
**3.** Тиң киҫәктәр араһында тыныш билдәләре ҡуйыламы?

## ХӘТЕР ҺАНДЫҒЫНА...

Батыр үҙе үлһә лә, даны үлмәй.

* * *

Дуҫ ҡәҙерен һуғышта белерһең.

* * *

Ил һаҡлау — ҙурлыҡ, ил баҫыу — хурлыҡ.

* * *

Ил — һуғышһыҙ, һуғыш — батырһыҙ, батыр яраһыҙ булмаҫ.

* * *

Ир-егеттең ике юлдашы бар: береһе — батырлыҡ, икенсеһе — тәүәккәллек.

* * *

Һуғышта алтындан тимер ҡиммәт.

* * *

Батырҙан үлем дә ҡурҡа.

# ӘСӘЙЕМ — КҮҢЕЛ ҠОЯШЫМ



## Шәриф БИКҠОЛ

**(1924 — 1996)**

Шәриф Сәғәҙәтулла улы Бикҡолов 1924 йылдың 28 майында Башҡортостандың Ҡырмыҫҡалы районы Ҡарлыман ауылында тыуа.

«Ынтылыу» тигән тәүге шиғырҙар йыйынтығы 1947 йылда баҫылып сыға. «Замандашым» тигән икенсе китабы уға шағир буларак ҙур танылыу килтерә.

Шәриф Бикҡолдоң балалар әҙәбиәтен үҫтереүҙәге хеҙмәте ҙур. Ул бер актлы пьесалар яҙыу менән дә шөғөлләнде.

1965 йылда Шәриф Бикҡол композитор Шамил Ҡолбарисов менән бергәләп «Бер ҡабынһа ғишыҡ уты» тигән музыкаль комедия яҙҙы.

Етмешенсе йылдарҙа «Беҙ әле йәшәйбеҙ икән» тигән романы донъя күрҙе.

1969 йылда Шәриф Бикҡол республиканың Ғ. Сәләм исемендәге премияһына лайыҡ булды.

### ӘСӘЙЕМДЕҢ КӘҢӘШТӘРЕ

Әсәйемдең вафатына күпме заман…
Әммә әйткән кәңәштәре ынйы тамам:
күңелемдә балҡып тора әле һаман!..
Таратырға ине һеҙгә шуны самам…

«Юҡҡа бәхәс ҡororға тип ярһып торма,
юл ауыр тип, аҙымыңды кире борма;
аяҡтарың тартмай икән — юлға сыҡма,
тәгәрәгән тәгәрмәскә таяҡ тыҡма.

Үҙ йөгөңдө үҙең илт — сит иңгә һалма,
кемдер һинән кәңәш көтһә, телһеҙ ҡалма;
бушҡа килгән хәрәм һыйҙы тамсы йотма,
Бер юҡҡа ҡулдарыңа ҡамсы тотма.

Дуҫтарыңдың дуҫтарына иҫәп ҡорма,
дошманыңдың бошҡанына ауыҙ йырма;
ярҙам ҡулы һуҙ бәндәгә — ярҙан этмә,
кемдәрҙеңдер көмөшөнән өлөш көтмә.

Һөмһөҙләнеп, һәр саҡырған ергә барма,
асығауыҙ алдында ла борсаҡ ярма;
һинән өлкән бар тәҡдирҙә түргә уҙма,
буйың етмәҫ нәфис йәргә нәфсе һуҙма.

Тонсоп ятҡан үле күлдә балыҡ һөҙмә,
көткәндәрҙең өмөттәрен берүк өҙмә;
кәрәктәрең бар сағында, ситкә китмә —
төйәгеңде таяныстан мәхрүм итмә.

Бурыс — иман: ваҡытында түлә, тотма,
асыуыңды сығара тор — эскә йотма;
күңелеңде изгелектән мәңге һүрмә:
ата-баба аманатын боҙа күрмә!»

...Әсәйемдең киткәненә күпме заман,
ә ынйылар әүәлгесә балҡый һаман...
Һулышымдың аҡтыҡҡыһын алғанғаса
һәр кәңәшкә тоғро ҡалыу — минең самам!

**1.** Ни өсөн шағир әсәһенең кәңәштәре менән уртаҡлаша?
**2.** Кеше тормошонда әсәй кәңәштәренең бик кәрәкле булыуын иҫбатлағыҙ.
**3.** Әйтелгән кәңәштәрҙең мәғәнәһен, әһәмиәтен миҫалдар ярҙамында аңлатығыҙ.
**4.** Өсөнсө строфалағы юлдарҙың мәғәнәһен аңлатығыҙ.
**5.** Шиғырҙағы әсә кәңәштәрен уҡығыҙ һәм, һеҙгә әсәйегеҙ биргән кәңәштәрҙе иҫкә төшөрөп, теҙеп яҙығыҙ, аңлатығыҙ.
Ⓨ **6.** Үҙегеҙ һайлап дүрт строфаны ятлағыҙ.

**100-сө күнегеү.** Шиғырҙан күсмә мәғәнәлә ҡулланылған һүҙҙәрҙе табығыҙ. Уларҙы асыҡлаған һүҙҙәре менән бергә күсереп алығыҙ. Был һүҙҙәрҙе тура мәғәнәлә ҡулланып, һөйләмдәр төҙөгөҙ.

## ИКЕ ҺӘМ БЕР СОСТАВЛЫ ҺӨЙЛӘМДӘР

Һөйләм киҫәктәренең булыуына, булмауына ҡарап, ябай һөйләмдең бер нисә төрөн айыралар.

1. Һөйләмдең эйәһе лә, хәбәре лә булһа, ул **ике составлы һөйләм (двусоставное предложение)** була.

2. Һөйләмдә йә эйә составы, йә хәбәр составы ғына булһа, быңдай һөйләмдәр **бер составлы һөйләм (односоставное предложение)** тип атала.

3. Һөйләм эйә менән хәбәрҙән генә торһа, ул **йыйнаҡ һөйләм (нераспространённое предложение)** тип атала. Әйтергә кәрәк, текстарҙа быңдай һөйләмдәр бик һирәк осрай.

4. Һөйләмдә эйә менән хәбәрҙән тыш эйәрсән киҫәктәр ҙә булһа, быңдай һөйләм **таралыу һөйләм (распространённое предложение)** була.

5. Өҫтәмә һорауҙарһыҙ мәғәнәһе тулыһынса аңлашылған һөйләм **тулы һөйләм (полное предложение)** тип атала.

6. Ҡайһы бер һөйләм киҫәктәре төшөп ҡалған, ләкин контексҡа ярашлы мәғәнәһе аңлашылып торған һөйләмдәр **кәм һөйләм (неполное предложение)** тип атала. Аңлар өсөн, уға өҫтәмә һорауҙар бирге килә. Ләкин текст эсендә ул информацияны тулыһынса еткерә. Кәм һөйләмдәр бигерәк тә һөйләшеүҙәрҙә күберәк ҡулланыла.

**101-се күнегеү.** Һөйләмдәрҙе уҡығыҙ, төрҙәренә иғтибар итегеҙ.

1. Бөйөк Ватан һуғышы башланған заман. Ирҙәрҙе, егеттәрҙе фронтҡа оҙаталар. 11 декабрҙә кис Өфөгә килдек. Беҙҙе яҡындағы станцияға оҙаттылар. Унда беҙҙе ҙур клубҡа килтерҙеләр. *(Бер составлы һөйләмдәр)*

2. Йыр, бейеү башланды. Ҡурай булды ла баһа! *(Йыйнаҡ һөйләмдәр)*

3. — Так точно, маршал иптәш!

— Ҙур теләк менән.

— Ҡайҙа һәм кем итеп? *(Кәм һөйләмдәр)*

**102-се күнегеү.** Текстан ике составлы һөйләмдәрҙе билдәләп, күсереп алығыҙ.

Һуңғы йылдарҙа халыҡтың данлы тарихы менән генә йәшәргә ярамай, тигән фекерҙе йыш ишетәм. Был ҙур хата. Тарих — ул статистика түгел, ул көс бирә торған. Беҙ бөгөн матур йәшәһен өсөн, ата-бабалар ҡан түккән. Был турала онотоу — оло енәйәт. Тарихыңды, йолаңды белмәйһең икән, һин буш кеше, һабын ҡыуығы. Кеше, ошо ерҙә тороп, ошо тарихтарҙы белгәндә генә бар һәм буласаҡ. Шуға ла, тарихыбыҙҙы башҡалар белһен өсөн дә, күп нәмә эшләргә кәрәк бөгөн.

**103-сө күнегеү.** Һөйләмдәрҙе тамамлағыҙ, уларҙың нисә составлы икәнен асыҡлағыҙ.

1. Бер аҙҙан уны тыуған Башҡортостаны ... . Һәр осрашҡан урында ҙур ихласлыҡ, ҡунаҡсыллыҡ менән бергә, полковник ҡала-ауылдарҙағы ярлылыҡты, халыҡ бөлгөнлөгө ярылып ятыуын да ... . Күп ауылдарҙы, һуғыш ҡайғыһы өҫтөнә, аслыҡ-яланғаслыҡ ... . 2. Июнь аҙағында дивизия Олым йылғаһының һул яҡ ярына килеп ... . 3. 1963 йылдың июль баштарында генерал Күсимовты Ташкентҡа, хәрби округ штабына ... . 4. Колхоз хужаһының былдай күңелһеҙ ҡиссаһынан һуң ҡунаҡтың тамағына аш ... . 5. Тыуған ауылында Күсимов берҙе ҡунды ла Өфөгә юлға ... . 6. Уның Академияға уҡырға инеү хәбәре үҙенән алда республика органдарына ... .

## БЕР СОСТАВЛЫ ҺӨЙЛӘМДӘР

**Бер составлы һөйләмдәрҙә (односоставные предложения)** йә эйә составы ғына, йә хәбәр составы ғына була. Бер составлы һөйләмдәрҙең түбәндәге төрҙәрен айыралар:

1. Билдәле эйәле һөйләм (определённо-личное предложение).
2. Дөйөм эйәле һөйләм (обобщённо-личное предложение).
3. Билдәһеҙ эйәле һөйләм (неопределённо-личное предложение).
4. Эйәһеҙ һөйләм (безличное предложение).
5. Атама һөйләм (назывное предложение).

Был һөйләмдәрҙең исемдәре үк уларҙың ниндәй һөйләм икәнен асыҡ күрһәтеп тора.

## Билдәле эйәле һөйләм

Билдәле эйәле һөйләмдең эйәһе, хәбәр формаһына ҡарап, беленеп тора. Былдай һөйләмдәрҙең эйәһе — *мин, һин, беҙ, һеҙ*. Йәғни билдәле эйәле һөйләмдең хәбәре I—II заттағы ҡылымдар ғына була. Миҫалдарҙы ҡарағыҙ:

Шәймөхәммәт. *Бер атыңды биреп тор.*

Сибәғәт. *Бирермен. Үҙемдекен һөрөп бөтәйем дә.*

Шәймөхәммәт. *Юҡ, хәҙер үк тугарып бир.*

Сибәғәт. *Күрәһегеҙ бит. Әҙ генә ҡалган. Шуны һөрөп бөтә һалайым. Унан алып торорһогоҙ.*

Шәймөхәммәт. *Бирмәйһең инде?* (М. Ямалетдиновтан)

**104-се күнегеү.** Ике составлы һөйләмдәрҙе билдәле эйәле һөйләмдәргә әйләндерегеҙ.

1. Һин үҫкәс осоусы булырһың әле.
2. Әйҙә, икәүләп, беҙ бер аҙ йөрөп киләйек.
3. Быға мин ҡаршы киләмме һуң!
4. Урманға еткәнсе, беҙ һөйләшмәй генә килдек.
5. Бына беҙ урманға ла килеп еттек.
6. Һеҙ ҡайҙа китеп юғалдығыҙ?

## Дөйөм эйәле һөйләм

Дөйөм эйәле һөйләмдең хәбәре II заттағы ҡылымдарҙан килә. Формаһы менән был һөйләм билдәле эйәле һөйләмгә бер аҙ оҡшай. Тик билдәле эйәле һөйләмдең эйәһе — һин, һөйләүсе белеп йә күреп торған зат. Дөйөм эйәле һөйләмдең конкрет, тәғәйен эйәһе юҡ. Был һөйләмдәге эшхәл бөтә заттарға ла ҡарай, бер составлы һөйләмдең был төрө бөтә заттар ҙа башҡарырға тейеш булған эш-хәрәкәтте белдерә.

Сағыштырығыҙ:

1. *Ҡасып китһәң дә, сәсеп кит.*
2. *Ҡарама беләккә, ҡара йөрәккә.*

Миҫалдарҙан күренеүенсә, дөйөм эйәле һөйләмдәр мәҡәлдәрҙә һәм әйтемдәрҙә күберәк осрай.

**105-се күнегеү.** Һөйләмдәрҙе дөйөм эйәле һөйләмдәргә әйләндерегеҙ.

Өлгө: *Башлаған эшең тамамланһын.* — *Башлаған эшеңде тамамла.*

1. Бөгөнгө эшең иртәгәгә ҡалмаһын.
2. Ялҡау яланда күренмәҫ.
3. Арыш сәселһә, икмәк ашалыр.
4. Бойҙай сәселһә, башағы йыйыла; шалҡан сәселһә, тамыры йыйыла.
5. Тауға ҡарап таш атылмаһын.
6. Дошмандан ил һаҡланһын; ярамһаҡтан сер һаҡланһын.
7. Яуға барғанда, ҡоралың йәшерелмәһен.

Бер мәҡәлдең йөкмәткеһенә ярашлы инша яҙығыҙ.

## Билдәһеҙ эйәле һөйләм

Билдәһеҙ эйәле һөйләмдең хәбәре III зат күплек һанда була. Эште башҡарыусы билдәле түгел, уны асыҡлауҙың кәрәге лә юҡ. Мәҫәлән, *Быйыл Ағиҙел аша яңы күпер <u>һалдылар</u>.*

Билдәһеҙ эйәле һөйләмдәрҙе кәм һөйләмдәр менән бутарға мөмкин. Билдәһеҙ эйәле һөйләмдең мәғәнәһе тулыһынса аңлашыла, ә кәм һөйләмгә өҫтәмә һорау бирге килә. Сағыштырығыҙ:

1. *Быйыл яҙғы баҫыу эштәрен иртә тамамланылар.* — Билдәһеҙ эйәле һөйләм. Эйәнең кем булыуын асыҡлау бөтөнләй кәрәкмәй.

2. *Эштән бушаған арала, уның эргәһенә ҡымыҙ эсергә киләләр.* — Кәм һөйләм. *Кемдәр килә?* тип эйәне асыҡлағы килә.

**106-сы күнегеү.** Тексты уҡығыҙ. Ниндәй һөйләмдәр ҡулланылған?

## ҠАҘЫНЫ НИСЕК ЭШЛӘЙҘӘР?

Һимеҙ йылҡы итен 8—10 сантиметр оҙонлоғондағы һәм 2 сантиметр ҡалынлығындағы киҫәктәргә турайҙар. Бының өсөн эс, ҡабырға тирәһендәге итте алалар. Шунан туралған итте тоҙ менән ышҡып, уға борос һибәләр һәм бер тәүлеккә һалҡын урынға ҡуялар.

Һыйыр йәки йылҡы эсәктәрен тоҙ һәм һеркә ҡушылған һыу менән, уны алыштыра-алыштыра, бер нисә тапҡыр йыуалар. Эсәктәрҙең эсен тышҡа әйләндереп, тағы бер йыуалар ҙа, бер осон бәйләп, әҙерләнгән ит киҫәктәрен уға тултыралар. Эсәк тулғас, икенсе осон да бәйләйҙәр, бер нисә көнгә ҡояш төшә торған елле урынға эләләр. Һуңынан ҡараңғы һәм һалҡын урынға 1,5—2 айға ҡалдыралар. Ҡаҙыны талғын утта бешерәләр. *(И. Арыҫлановanan)*

Үҙегеҙ ҙә берәй рецепт яҙығыҙ. Һеҙ ниндәй һөйләмдәр ҡулланырһығыҙ?

## Эйәһеҙ һөйләм

Эйәһе булмаған, уны билдәләүе мөмкин дә булмаған һөйләмдәр **эйәһеҙ һөйләм** тип атала. Бындай һөйләмдәрҙә бер ниндәй һүҙҙе лә эйә урынына ҡуйып булмай. Рус телендә был төр һөйләмдәрҙе **безличные предложения** тип йөрөтәләр. Сағыштырығыҙ:

| Башҡорт телендә | Рус телендә |
|---|---|
| 1. *Йоҡлағы килмәй.* | 1. *Спать не хочется.* |
| 2. *Һуңларға ярамай.* | 2. *Нельзя опаздывать.* |
| 3. *Өшөтә.* | 3. *Знобит.* |

**107-се күнегеү.** Бер составлы һөйләмдәрҙе ике составлы һөйләмдәргә әйләндереп яҙығыҙ.

Өлгө: *Бөгөн тышта йылы. — Бөгөн тыш йылынған.*

1. Был төндә бик ҡаты йоҡланылған.
2. Китапты өс көн уҡылды.
4. Урамда оҙағыраҡ йөрөһәң, өшөттөрә.
5. Шәмбе көнө миңә мәктәпкә иртәрәк барырға тура килә.
6. Йәйге каникулда тәбиғәт ҡосағында йыш булынды.
7. Үткән ваҡиғаларҙы һаман иҫтән сығарып булмай.

**108-се күнегеү.** Эйәһеҙ һөйләмдәрҙе рус теленә тәржемә итегеҙ.

1. Француздарҙы ҡыйратырҙай көстө ҡайҙан табырға. 2. Үҙем яһаған уҡты нисек белмәҫкә! *(Я. Хамматов)* 3. Казактарҙы башҡорт ауылына һис кенә лә индерергә ярамай. 4. Мортазиндың был ҡаһарманды яҡындан күргеһе килә ине.

*(Р. Солтангәрәев)* 5. Был хаҡта лейтенант Атаевҡа хәбәр итергә кәрәк. *(Я. Хамматов)* 6. Иптәштәрҙе, туҡтап ҡалған иптәштәрҙе ҡотҡарырға кәрәк. *(Ә. Бикчәнтәев)* 7. Йүгереп барып етеп, амбразураны ҡаплап була лаһа. *(Ә. Бикчәнтәев)* 8. Ниһайәт, бер генә ынтылаһы ҡалды. *(Ә. Бикчәнтәев)* 9. Инде нисек кеше күҙенә күренергә. *(З. Биишева)* 10. Эх, йөрәкте усҡа һалаһы ла ҡайыҙлайһы ине ныҡ ҡына. Юҡһа, уны һаман тыйып булмай. *(Р. Назаров)*

## Атама һөйләм

**Атама һөйләмдәрҙә** тик эйә һәм уға эйәргән эйәрсән киҫәктәр генә була, шунлыҡтан улар предметтарҙы, заттарҙы, күренештәрҙе атап ҡына йөрөйҙәр. Атама һөйләмдәр текст менән мәғәнә яғынан бәйләнгән булалар: *Бына тимер тауы. Бына тау сите. Тауҙың ҡаты елеген һурыусы ташсылар. Әфтәхтең яҡын дуҫы Ғәфүр.* (Ғ. Хәйри) Рус телендә бындай һөйләмдәрҙе билдәләү өсөн **назывные предложения** тигән термин ҡабул ителгән: 1. *Школьный двор.* 2. *Тихий зимний лес.*

Атама һөйләмдәр, ғәҙәттә, текста артабан хәбәр ителә торған ваҡиғаларҙың урынын, ваҡытын һ. б. күрһәтәләр.

**109-сы күнегеү.** Рәшит Назаровтың шиғырҙарынан алынған атама һөйләмдәрҙең мәғәнәләренә иғтибар итегеҙ.

1. Кис. Тирә-яҡ шау-гөр килеп тора.
2. Яҙ. Ал ҡояш нур һибә.
3. Бына баҫыу. Аш тулы табаҡ һымаҡ, ерҙең боҫо күтәрелә борҡорап.
4. Ҡыш. Серем итә һылыу ҡарағайҙар.
5. Илем сиге. Һалдат посҡа баҫҡан.
6. Тып-тыныс төн. Ер йоҡола.
7. Тынлыҡ, тынлыҡ... Күҙем йомоҡ.
8. Бөркөү һауа, татһыҙ дауа. Сатнай башым — ауыр түҙергә.
9. Таң алды. Ҡояшты көтөп, ысыҡтар көлә.
10. Урман... Болон... Соҡор... Ярҙар... Ә ат һаман саба!
11. Ҡараңғы, ҡараңғы көҙ төнө... Тетрәй ер, һәр шауҙан һиҫкәнә.

12. Ауылдар, көләс ҡалалар. Нур ҙа нур... Беҙгә ҡаршы ҡосағын йәйеп, йылмайып, йүгереп килә бары.

Ошо һөйләмдәрҙең береһен эпиграф итеп алып, инша яҙығыҙ.

## ЯРЫҠ ЯЛҒАШ

Борон-борон заманда бик һаран кеше булған, ти. Ул шул тиклем һаран булған, хатта әсәһенән бер телем икмәген дә ҡыҙғанған. Уға ауылдаштары Һаранбай тигән ҡушамат биргәндәр. Бер ваҡыт ул шундай уйға килгән: «Был әрәмтамаҡ ҡарсыҡты Шайтан упҡынына илтеп ташларға кәрәк». Шунан әсәһен кәрәкмәгән ярыҡ ялғашҡа ултыртҡан да теге соҡорға алып киткән. Йөк тартырға ярҙамлашыр тип, үҙенең кесе малайын да алған.

Киткәндәр, ти, аталы-уллы ярыҡ ялғашты һөйрәп. Шайтан упҡынына төнләтеп кенә килеп еткәндәр. Һаранбай ялғашты түбәнгә этеп төшөрә генә башлаған икән, шул саҡ малайы:

— Атай, ялғашты ла төшөрөп ебәрмә, өйгә алып ҡайтайыҡ, — тип ҡысҡырып ебәргән.

— Нимәгә ул һиңә ярыҡ ялғаш?

— Бәй, үҙең ҡартайғас, мин һине был упҡынға нимә менән килтереп ташлармын һуң?

Һаранбайҙың сәстәре үрә торған. «Ысынлап та шулай була ҡалһа, эш харап бит!» — тип уйлаған да әсәһен кире алып ҡайтып киткән. Алып ҡайтҡас, ҡәҙер-хөрмәт итә башлаған. *(Әкиәттән)*

**1.** Ни өсөн Һаранбай әсәһен кире алып ҡайтҡан?
**2.** *Һин элек тыуғанһың, мин белеп тыуғанмын* әйтеменең мәғәнәһен аңлатығыҙ. Ул әкиәттә һүрәтләнгән ваҡиғаға тап киләме?

**110-сы күнегеү.** Әкиәт тексында ҡулланылған бер составлы һөйләмдәрҙе табығыҙ, уларҙың төрөн күрһәтегеҙ.

*Талха ҒИНИӘТУЛЛИН*

## ӘСӘ ҺӘМ БАЛА

### I

Тыуған ауылыма ҡайтҡан һайын, мин ҡасандыр йәшләй генә белгән, эшләп йөрөгәндәренә үҙем шаһит булған ҡарттарҙың бер-бер артлы донъянан китә барғанын күрәм.

Быйыл япа-яңғыҙ, бөтәһе, шул иҫәптән берҙән-бер улы тарафынан да онотолған Сафия апай үлде. Ә уйлап ҡараһаң, йәштән үк ирҙәр эшенә егелгән, һуғышты, аслыҡты, һыуыҡты башынан үткәргән һәм, әйтергә яраһа, үҙҙәренең һалдат ирҙәре менән кешелек донъяһының ҡан дошманын еңгән Рәсәй һалдаттарының береһенең үлеме ине был.

Иҫтә, ошо Сафия апай, йәки «Ир Сафия» — уны ауылда шулай тип йөрөтәләр ине — миңә, ул саҡтағы маңҡа ғына малайға, шул йылдарҙа уҡ оло кеше булып күренә ине. Бына ул иртә яҙҙа һалҡын бураҙна буйлап һабан тотоп бара, ялан аяҡ бара (ҡай саҡ һабан һөргәндә ҡырпаҡ ҡар яуған йылдар ҙа була бит әле), үҙе берсә һүгенә, берсә илай-илай, инәләялбара күтәртер хәлгә еткән колхоз аттарын ҡыуа; бригада ерҙәренә барыр өсөн, Ййыҡ аша сығырға кәрәк, Сафия апай, боҙло һыуға төшөп батҡан арбаны этә; орлоҡ игене тултырылған ауыр тоҡтарҙы ташығанын да, тишек-тошоҡ сарыҡтар кейеп бәләкәй сана менән йылға аръяғынан сей ерек ташығанын да күп күрҙем. Эйе, барыһы ла кисә генә булған кеүек, барыһы ла хәтерҙә.

Һуғыш ауырлығын ирҙәрҙән кәм күрмәгән ошо һалдаткалар, Рәсәйҙең тарихи ҡатындары, наград, льготалар алып өйрәнмәгән, юбилей йылдарында ла уларға ирҙәргә эләккән бүләк тәтемәй, улар иҫтәлегенә обелискылар ҡуйылмай. Улар үҙҙәренең йәшәйешенең ысын бөйөклөгөн аңламай, был хаҡта уйлана ла белмәйҙәр, көнкүрештәре лә бүтәндәрҙән әллә ни айырылмай, хөртөрәк булмаһа әле: колхоздың бәләкәй генә пенсияһына, һирәкләп бушҡа килтерелгән утынға ҡәнәғәт булып көн итә.

Быға тиклем ҡайтҡандарымда мин Сафия апайҙың гел генә үҙенең бәләкәй өйөнөң тәҙрәһенән ҡарап ултырғанын күрә торғайным. Быяла аша уның тәрән йыйырсыҡтар менән телгеләнгән һары йөҙө лә, күҙҙәренә үк төшөрөп ябынған бигүк таҙа булмаған аҡ яулығы күренер ине. Урам буйлап кем үтһә лә, кипкән ҡулын ҡаштары өҫтөнә ҡуя ла, тәҙрә быялаһына терәлеп тигәндәй, һуҡырая башлаған күҙҙәре менән секрәйеп ҡарап оҙатып ҡала. Ул улын, берҙән-бер улын көтә.

Юҡ, улы һуғышта үлмәгән, һуғыштан һуң тыуған кеше; төрмәлә лә ултырмай, сит илгә лә сығып китмәгән. Ул күптән инде армияла хеҙмәт иткән, армиянан һуң вербовка менән әллә төньяҡҡа, әллә Себергә олаҡҡан да кеше диңгеҙе эсенә сумған. Дөрөҫ, һирәкләп, биш-алты йылға бер ауылда күренә

торғайны, ул саҡта инде  Сафия апай үҙенең берҙән-бер байрам күлдәген кейә, сыбар кешмир яулығын ябына ла, дермантин сумкаһын тотоп, магазинға йөрөй.

Эсеп алғас, киң күкрәгендә «Үләм, әммә газды кәметеү юҡ!» тип яҙылған татуировкаһы күренһен өсөн нейлон күлдәген кендегенә тиклем ысҡындырған улы ауыл ҡыҙыра, тиҫтерҙәре менән осраша, уларҙы фильтрлы сигареттар менән һыйлай, һәм, нимәлер эҙләгән кеше булып, бер кеҫәһенән икенсе кеҫәһенә аҡсалар төргәген күсереп һала, йәнәһе, күрегеҙ, бына минең аҡса ниндәй күп. Тиҫтерҙәрен, күрше ирҙәрҙе үҙҙәренә саҡырып эсерә, бөтһә, әсәһен яңынан араҡыға йүгертә. Иҫергәс, оҙон аҡсалары менән маҡтанырға тотона, аҡса нимә ул, тфү, минең өсөн ул сүп, мең һумды, күҙҙе лә йоммай, кәрткә һалып уйнай алам, тип күкрәк һуға. Шунан ҡапыл, иҫерек йөҙөн етдиләндереп, әсәһенең өйө бик тә иҫкергәнлеге, яңыны һалырға кәрәклеге хаҡында һөйләй башлай, иртәгә үк ағас белешергә сыға, транспорт, оҫталар таба. Унан, иң яҡшыһы — әҙер йорт алыу, юҡһа оҙаҡҡа китә, белмәйһегеҙме, ауылда берәйһе өй һатмаймы икән, тип белешергә тотона. Көн артынан көн үтә, аҙна үтә, үҙе айнымай эсә, яңы өй йүнәтеү хаҡында бөтөнләй онота, ә аҡса төргәге йоҡарғандан-йоҡара. Ниһайәт, бер көн кеҫәһендә бер тин дә ҡалмағас, юлға әсәһенең пенсияһын ала ла йәнә юғала. **Оҙаҡҡа юғала.**

Ә бер ваҡыт ул ғаиләһе менән ҡайтты. **Умарта кеүек йомро, ҡыҫҡа аяҡлы ҡатыны, ике малайы. Улдарының береһенә өс йәш, икенсеһенә — биш.** Көньяҡҡа ял итергә китеп барыуҙары икән, үтеп барышлай ғына туҡталғандар. Килен кеше күреү менән ҡәйнәһен ҡабул итмәне, ә малайҙар оҙон күлдәкле сәйер ҡарсыҡтың үҙҙәренең өләсәләре икәнлегенә һис ышана алманы. Балалар ҙа, уларҙың ата-әсәләре лә үҙ-ара русса ғына һөйләште. Әсәләре татар, аталары башҡорт булһа ла, балалар башҡортса бөтөнләй аңламайҙар ине. Өләсәләре русса бер һүҙ белмәй, ҡысҡырыбыраҡ өндәшһә, ейәндәре аңларҙар һымаҡ ине уға. Шуға ла ул яратыу, иркәләү һүҙҙәрен тауышын күтәреберәк әйтте, ә ейәндәре уға бүре һымаҡ ҡараны һәм бер көн биш йәшлек ейәне тотто ла өләсәһенең йөҙөнә уйынсыҡ пистолеттан атты ла ебәрҙе — пластмасса пуля уның күҙенә саҡ теймәне. «Ниңә аттың?» — тигән һорауға, малай: «Ә ниңә ул миңә ҡысҡыра?» — тип яуапланы.

Һуңғы тапҡыр улы бынан биш йыл элек ҡайтҡайны. **Бер үҙе генә ине ул саҡ.** Ҡартайғайны, башындағы сәсе лә ҡойолоп

бөтөп бара ине. Сафия апай хәҙер һыйыр ҙа аҫрамай, тауыҡҡаҙ ҙа тотмай ине инде. Утынды колхоз килтереп бирә, уны күршеһе Шәйхислам ҡатыны менән бысып, ярып ҡуя. Өйө шиңде, бер яҡҡа ҡыйшайып сүкте. Улы, әсәйҙең ғүмеренә ошо йорт та етер, яңыһы менән булашып тормам инде, тип уйланы, ахыры, ул турала бүтән һүҙ ҡуҙғатманы. Тағы аҙна буйы эсте лә, китер алдынан күршеһе Шәйхисламға йөҙ һум тоттторҙо: «Әсәй үлеп-маҙар китһә, ерләрһең». Шәйхислам уның адресын һораны, теге-был булһа, телеграмма һуғырмын, тине. Тегеһе бер ҡағыҙ киҫәгенә адресын сыймаҡланы, әммә ҡайтырын-ҡайтмаҫын ныҡлы ғына әйтмәне.

Сафия апай шым ғына үлде. Күршеләре ҡәбер ҡаҙҙы, кипкән, еңеләйеп ҡалған кәүҙәһен йыуҙы, аҡ кәфенгә төрҙө, Шәйхислам ҡалдырған адрес буйынса улына телеграмма бирҙе. **Уны көттөләр.** Ике көн ҡарсыҡтың мәйете үҙ өйөндә ятты, көтөп ятты, әммә улы ҡайтманы...

1. Ни өсөн Сафия апайҙың үлеме һалдат үлеменә тиң? Миҫалдар килтереп иҫбатлағыҙ.
2. Сафия апайҙың йәшлеге ниндәй йылдарға тура килә? Һөйләгеҙ. Уның күргән ауырлыҡтарын һанап сығығыҙ һәм баһалағыҙ.

**111-се күнегеү.** Алдағы бүлектәге ҡалын хәрефтәр менән бирелгән һөйләмдәрҙең төрөн билдәләгеҙ.

## II

...Ә бит уның улы булмауы ла ихтимал ине, бик ихтимал ине. Юҡ, ул тыуҙы, законлы иренән тыуҙы, шулай ҙа малайҙың юғалыуы бар ине; эйе, икенсе кеше булыр, икенсе тарафтарҙа көн итер, икенсе атай, икенсе әсәй менән йәшәр, бәлки, алыҫ башҡорт ауылында үҙенең ысын әсәһе йәшәүен башына ла килтермәҫ ине.

...Сафия апайҙың ире Ғәзиз ағай ҡырҡ бишенсе йылда, икенсегә яраланып, өс ай госпиталдә ятҡандан һуң, ауылға ҡайтып төштө. Аяҡ-ҡулы иҫән, ә бына үпкәһенә немец снарядының ярсығы инеп ултырғайны. Ауыл ас, һуғыштан тамам интеккән, аслыҡтан киҫелгән һалдаттың ҡанын туберкулёз бациллалары тиҙ еңде. Оҙаҡламай ул йүткерә башланы. Ғәзиз ағай менән Сафия апай һуғышҡа тиклем үк өйләнешкәйнеләр, әммә балалары булманы, дөрөҫөрәге, тыуып торҙо, сабый көйө үлеп торҙо. Ғөмүмән, балалар үлеме ул йылдарҙа ауылда

ғәҙәти хәл ине. Һәм бына дүрт йыл айырым йәшәгәндән һуң, яңынан өйләнешкән йәштәр кеүек, улар йәнә бер балаға ғүмер бирҙе. Аслыҡ булыуға, үлмәҫлек кенә туҡланып йәшәүҙәренә ҡарамаҫтан, йәштәрҙең бәпесе таҙа тыуҙы. Бала биш айлыҡ булғас, Ғәзиз ағайҙы сереп бөтөп барған үпкәләре менән ҡалаға дауаханаға һалдылар. Ул Сафия апай менән улына йылы, өмөтлө хаттар яҙҙы. Ҡатын-ҡыҙ йөрәге иренә ауыр икәнен аңланы, һәм Сафия апай ире янына барып ҡайтырға йыйынды.

Район үҙәгенә тиклем эше буйынса сыҡҡан колхоз рәйесе Фазыл ағай ултыртып алып барҙы. Артабан йәйәү китте, сөнки ул йылдарҙа Миәскә автобустар йөрөмәй ине әле. Килә торғас, уны бер ылау ҡыуып етте — оло ғына йәштәрҙәге кеше район үҙәгенән совхозына ҡайтып бара икән, Поляковкаға ҡәҙәр алып килде, унан йәнә йәйәү. Юл ситенә ултырып, балаһын имеҙә лә арҡаһындағы тоғонан ҡоро йүргәк алып, уны биләй. Саҡ ҡына ял иткәс, ары ҡуҙғала. Йәй аҙағы, көҙ башы — ваҡыт-ваҡыт ямғырҙар ҙа яуып китә, әсе генә еле лә иҫә. Ҡараңғы төшөүгә, бер башҡорт ауылына барып етте, юлда яландан ҡайтып килеүсе бер бисәне тап итте лә ҡундырып сығарыуын һораны. Иртән иртүк йәнә юлға. Көнө буйы барҙы, төн еткереп, бер ауылға килеп керҙе. Һыуланып бөткән, аяғында саҡ баҫып торған көйө иң ситтәге өйҙөң ишеген шаҡыны. Рус ауылы икән. Хужабикә, оло ғына йәштәрҙәге мәрйә, ҡайҙа китеп бараһың, тип һорағас, ҡулын һелтәп: «Уфа, — тип яуапланы, үҙе белгән бер нисә рус һүҙе араһынан бер һүҙ табып өҫтәп ҡуйҙы. — Мужик, мужик». Хужабикә төшөндө шикелле, аңлаған кешеләй башын сайҡаны, тағы әллә нәмәләр һораны, һөйләнде, әммә Сафия уның борсолоп: «Батюшки, батюшки», — тигәненән башҡаһын аңғарманы. Таң һарыһы беленеү менән, ул торҙо ла йәнә юлға сыҡты. Төш ауғанда, Миәстә ине. Ҡаланы үтеп, урманлы тау битләүендә ултырған станцияға ыңғайланы.

Поезд ҡуҙғалғас, башы әйләнде, күңеле болғанды. Буш урынға барып ултырҙы ла күҙҙәрен йомдо. Байтаҡ ваҡыт шулай барҙы. **Күҙҙәрен асҡас, алыҫта артҡа йүгергән өйҙәрҙе, баҫыуҙарҙы, тауҙарҙы күҙәтте.**

Килә торғас, бәпесен биләүенән ысҡындырып, вагон һикеһенә һалды, уныһы ни аяҡ-ҡулы ысҡынғас тибенде, тирәяғына ялт-йолт ҡарап йылмайҙы, тауыш бирҙе.

Вагон буйлап ниндәйҙер бер ҡатын китеп бара ине, ул Сафия янында туҡтаны ла сәйер генә ҡарашы менән балаға

ҡарап тора башланы. Ул Сафиянан өлкәнерәк, ҡаласа һәйбәт кейемдә. Ярар, ҡараһын, бәләкәстәрҙе бөтәһе лә ярата инде ул, берәй һүҙ әйтер йәки ҡағылыр ҙа китер, тип уйлай Сафия. Шунан үҙе, күҙ тейҙереп кенә ҡуя инде, тип хафалана. Ә ҡатын китергә ашыҡманы, һис ашыҡманы, тора торғас, татарса һүҙ ҡушты, һөйләшә башланы (тышҡы ҡиәфәтенә, ҡаласа кейенгәненә ҡарап, Сафия уны мәрйәлер тип уйлағайны).

— Ой, ниндәй матур бала, ой, ниндәй һөйкөмлө малай! — тине ул, һоҡланыуын йәшермәй, үҙе һикенең бер мөйөшөнә ултырҙы. — Тотоп ҡарарға яраймы? Мин бәләкәйҙәрҙе шул тиклем яратам, бындай ҙа һөйкөмлө баланы күргәнем юҡ ине әле.

**Ҡатын баланы ҡулына алды, яратты, һикертте, уйнатты, үпте, нисә айлыҡ, исеме нисек, тип тә ҡыҙыҡһынды.**

Сафия үҙенең сабыйы өсөн ғорурлыҡ тойғоһо кисереп ҡатындың бөтә һорауҙарына ла ихлас яуап бирҙе.

— Ҡана мин уны иремә күрһәтеп киләйем, ә? Мөмкинме? Ул да бәләкәйҙәрҙе бик ярата, ҡыуандырайым, — тине ҡатын бер аҙҙан. — Беҙ бына күрше вагонда ғына…

Байтаҡ ваҡыт үтте, ярты, бәлки, бер сәғәт тә булғандыр, Сафия бер ниндәй насарлыҡ уйламай, сабыр ғына улын килтереүҙәрен көттө. Әммә уның күршеһе, өлкән генә йәштәрҙәге ҡатын, тынысһыҙлана башланы һәм Сафияға:

— Ҡыҙым, балаң артынан бармайһыңмы? Нишләптер оҙаҡланы лаһа, — тине.

— Килтерер әле. Кеше балаһын нишләтһен ул?

— Кем белә… Төрлө кеше бар.

Шулай ҙа бер аҙҙан ул күрше вагонға китте. **Унда ла туптулы кешеләр — ултыралар, яталар, һөйләшәләр, кәрт һуғалар, тәҙрәнән ҡарап баралар**. Сафия бөтә вагонды күҙҙән үткәрҙе, әммә теге ҡатын күренмәне. Башҡорт ҡатыны икәнен кейеменән сырамытып, йәш балалы ҡатын ҡайһы яҡҡа китте икән, күрмәнеңме, тип белеште.

Әллә биш, әллә алты вагон үткәс кенә, теге ҡатынды тапты Сафия. Ул погонһыҙ китель кейгән ир янында уның улын тотоп ултыра ине. Иң ғәжәбе һәм аңлашылмағаны шул: малайы рәхәтләнеп әлеге ҡатындың имсәген имеп ята! Бына һиңә кәрәк булһа, тип аптыраны әсә кеше, был ниткән эш? Сафия былар янына килде лә:

— Баламды бир! — тине.

Ҡатын Сафияға боролдо, күҙҙәре ялтырап китте, ҡарашы уны беренсе тапҡыр күргәндәге һымаҡ ҡурҡыу ҡатыш апты-

раулы ине. Ирҙең ирендәренә мыҫҡыллы йылмайыу яғылды, әммә ҡарашы ҡаты һәм һынсыл ине. Ҡатын, иренә боролоп, русса ниҙер әйтте, шунан Сафия яғына әйләнде лә үкереп ебәрҙе:

— Һиңә нимә кәрәк?

— Бәй, баламды бир! Алып киттең дә…

— Нимә? Нисек инде һинең бала? Аҡылыңдан яҙҙыңмы әллә?

Ҡатын, йылмайған төҫ сығарып, күршеләренә ҡараны, йәнәһе, бындай ҙа оятһыҙлыҡты күргәнегеҙ бармы, көпә-көндөҙ бынау бисә баламды алырға маташа. Әммә күршеләре өндәшмәне, бер Сафияға, бер әлеге ҡатынға баҡты һәм ҡыҙыҡһынып артабан ни булырын көттө.

— Нишләп? Был бит минең бала. Иремә күрһәтәм дә килтерәм, тип алып киттең бит, — иҫ киткес алдаҡты күреп, Сафия юғалып ҡалды, тулҡынлана башланы. — Беҙ күрше генә вагонда тинең…

— Нимә һөйләйһең һин? Мин һине беренсе тапҡыр күрәм, — ул шулай тине лә иренә әйләнде, уға русса нимәлер әйтте, үҙенең йөҙө боҙолдо, ағарҙы-буҙарҙы. — Мин бит уны имеҙеп ултырам, күрмәйһеңме ни? Һинеке булһа, нисек мине имһен?

— Бир баланы! Ул минеке…

Сафия бәпесен битһеҙ ҡатындың ҡулынан тартып алырға ниәтләнеп эйелгәйне, ҡатын баланы күкрәгенә ҡыҫты, ә ире ҡаты итеп этеп ебәрҙе. Әсә артына саҡ йығылып китмәне, кешеләргә төртөлдө. Тауышҡа пассажирҙар йыйылды, юлды ҡапланылар, арттағылар, эй, унда ниндәй тауыш, тип һөрәнләнеләр.

— Баламды бир! — тип йәнә ҡабатланы Сафия. Ул хәлдең етдилеген хәҙер аңлай-төшөнә ине инде. — Баламды бир! — тип ҡабатланы ул йәнә, үҙенең бәләкәсенән күҙен алмай, шым ғына әйтте, сөнки ҡурҡышынан уның ҡысҡырырға, иларға көсө ҡалмағайны инде. Ағарған йөҙлө, үҙенең балаһына текәлгән Сафия, ысынлап та, аҡылын юғалтҡан кешегә оҡшап тора ине.

Поезд ҙур станцияға яҡынлашты.

Поезд туҡтау менән, ҡатын йәһәт кенә төштө лә ҡалаға ашыҡты — улар ире менән ҡайҙа осрашырға алдан уҡ һөйләшеп ҡуйғандарҙыр, ахыры. Һәм шунда Сафия, әгәр ҙә хәҙер вагондан сыға алмаһа, үҙенең балаһын мәңгегә юғалтасағын аңланы. **Үҙендә ярһыу әсә көсөн тойоп, ул йәштән үк һәнәк,**

**көрәк, балта тотҡан, ер һөргән (уны юҡҡа ғына Ир Сафия тип атамағандар шул), ирҙәрсә көслө, ғәйрәтле Сафия, үҙенең алдында барған ирҙе еңел генә ситкә һирпте лә вагондан һикерҙе, йүгерә-атлай китеп барған ҡатынды ҡыуып етте, тегенең ҡулдарынан ҡыпһыуыр ише эләктереп алды ла ҡысҡырып ебәрҙе:**

— Баламды бирәһеңме, юҡмы?!

— Ебәр, юҡһа хәҙер милиция саҡырам! — тине ҡатын сәрелдәп.

Был һүҙ Сафияны айнытып ебәргәндәй булды. Ысынлап та, бында милиция, закон һаҡсылары, тәртип һаҡсылары, көсһөҙҙәр яҡлаусыһы булырға тейештәр ҙәһә!

— Милиция! — тип ҡысҡырҙы Сафия ла. — Милиция!

Әммә яһил ҡатын милиция менән бик ҡурҡышҡыһы килмәне, ахыры, тартылды, ул һүҙҙе бүтән әйтмәне лә, шул арала килеп еткән ире, Сафияның ҡулдарынан тотоп, ҡатынынан ысҡындырырға теләп йолҡа башланы. Сафия балаһының йүргәгенә шундай ныҡ итеп йәбешкәйне, уны ҡатындан тик бала менән бергә генә ысҡындырырға мөмкин ине.

— Бир баламды! Милиция!

Тауышҡа кешеләр йыйыла башланы, һәм бер нәмә лә аңламай, ҡысҡырышҡан ике ҡатынға, уларҙы айырырға маташҡан иргә текәлделәр.

Ниһайәт, милиционер пәйҙә булды, йыбанып ҡына ҡулын козырёк тәңгәленә тейҙерҙе лә, йөҙөнә уҫаллыҡ сығарып, һораны:

— Бында ниндәй тауыш?

— Беҙ әле генә поездан төштөк. Бынау иҫәр бисә бәйләнде лә беҙҙең баланы алырға итә, оятһыҙ. Һис ҡотолорлоҡ түгел. Беҙҙе шунан ҡотҡарһағыҙ ине, — тип аңлатты ҡатын ҡабалана-ҡабалана.

— Һеҙгә китергә мөмкин, — тинеләр, ә Сафияға: — Ә һиңә бер аҙ тотҡарланырға тура килер. Ҡайҙа китеп барыуыңды, документ-билеттарың бармы-юҡмы икәнен асыҡлайыҡ.

Сафия бер мәлгә генә ҡатып ҡалды, күҙ алдары ҡараңғыланды, әммә шундуҡ тигәндәй әсәлек хисе, әсәлек тойғоһо, үҙенең сабыйын һаҡлап, йыртҡысҡа ташланған турғай шикелле ул да, ғәйрәт табып, алдындағы милиционерҙы ситкә этте лә, теге икәүҙең артынан йүгерҙе. Әммә ир, бының килгәнен күреп, уға боролдо, тотто, ҡосағына алды. Сафия, унан ысҡынырға тырышып, быны этте, тешләште, ә шул

мәлдә поезд ҡуҙғалды. Ҡатын бала менән ишектән инеп өлгөрҙө. Ир Сафияны артҡа этте лә бөтә көсөнә поезға йүгерҙе. Сафия уның артынан. Ир ишеккә һикерҙе, ә Сафия ишеккә еткәйне генә, проводница ишекте шарт япты ла бикләп тә ҡуйҙы. Сафия тотоноп менә торған тимерҙе эләктерергә генә өлгөрҙө һәм поезд уны шул килеш алып китте — тәүҙә ул йүгерҙе, поезд тиҙлеген арттырғас, аҫылынып барҙы, әммә ҡулдары, көслө крәҫтиән ҡулдары тимерҙе ысҡындырманы. Бер ҡулы менән генә эләгеп аҫылынған көйө ул байтаҡ юл үтте, унан көс-хәл менән аяҡтарын баҫҡысҡа күтәрҙе. Былай бер ни тиклем еңелерәк ине. Ҡаршы ел уны кескәй генә баҫҡыстан йолҡоп төшөрөргә тырышты, үтә һуҡты, өҙгөләне, йолҡто. Килә-килә ямғыр яуырға кереште, ҡурғаш кеүек ауыр тамсылар уның ҡулдарына, йөҙөнә бәрҙе, бер ҡат ҡына күлдәген лысма һыу итте, һалҡын һөйәктәренә тиклем үтте.

Оҙаҡ, бик оҙаҡ сәғәттәр барҙы Сафия шул килеш, аяғы аҫтынан ғына платформа ситендәге ҡырсын таштар, ағастар, ҡыуаҡлыҡтар, саҡ ҡына арыраҡ күбәләр, кәбәндәр менән сыбарланған яландар, ауылдар ялпылдап үтте, поезд йылғалар аша һалынған күперҙәрҙән сыҡты, бәләкәй генә һары флаг тотҡан ҡатындар артта ҡалды.

Ҡараңғы төштө. Бер боролошта Сафия вагондарҙа ут тоҡанғанын күрҙе, өйҙәге ише унда ла йылы, уңайлы. Йылыла һәм яҡтыла уны ғазаплаусылар китеп бара, вагондың һәр туҡылдауы уларҙы перронда тороп ҡалған Сафиянан алыҫлаштырғандан-алыҫлаштыра, унда ике кешенең хаслығы арҡаһында үҙенең яҙмышы икенсе юҫыҡҡа төшөп барғанын аңламай, сабыйы китеп бара.

Ниһайәт, алыҫта, яуған ямғыр ҡараңғылығы аша, ҡаланың уттары күренде, оҙаҡламай поезд тиҙлеген кәметте һәм күпмелер ваҡыттан һуң станцияға килеп туҡтаны. Вагондың ишеге асылыу менән, Сафия проводницаны ситкә этте лә вагон эсенә йомолдо һәм уның балаһын күтәреп сығып килгән теге икәүҙең алдына баҫты. Башынан аяғына ҡәҙәре һыу, өшөгән, ағарған, эскә батҡан, әммә мөхәббәт, нәфрәт менән тулы асыулы күҙҙәре менән баҡты. Теге **икәү быны көтмәгәйне, шаҡ ҡатты, ауыҙҙарын асып ҡаранылар ҙа ҡаттылар.** Ҡатындың күҙҙәренә йәш тығылды, ирҙең йөҙөнә ҡараңғылыҡ ятты, уртын уйнатып күҙҙәрен ситкә алды.

— Баламды бир! — Ҡалтыранған ҡалын тауыш менән өндәште Сафия.

— Бир! — тип бойорҙо ир, уға ҡарамай ғына, ҡатынына.

Баланы күкрәгенә ҡыҫҡан килеш, ҡатын ҡапыл түгелеп илап ебәрҙе лә быуыла-быуыла һөйләй башланы:

— Тыңла мине, тыңла, пожалуйста! Ниңә шулай ҡыланғанымды, бәлки, аңларһың. Балам үле тыуҙы. Бүтән бер ҡасан да балаң булмаясаҡ, тине врач. Беҙ Өфөгә барҙыҡ. Унда детдомдан бала алып була, тигәйнеләр. Беҙ үҙебеҙ Силәбенән. Мин һинең сабыйыңды күрҙем дә оҡшаттым, яраттым, имсәгемде ҡапҡас, эҫендем дә киттем. Бир һин уны миңә. Һин әле йәш, тағы ла табырһың. Аҡса бирербеҙ. Һағынһаң, беҙгә килеп йөрөрһөң, туғанлашырбыҙ. Үтенеп һорайым, инәләм, теләйһеңме, тубыҡланам. Бала таба алмаһам, ирем минең менән йәшәмәйәсәк, китәсәк. Ә мин уның китеүен теләмәйем. Бир сабыйыңды...

— Юҡ! — Аҡылынан шашыр сиккә еткән Сафия бәпесенә һонолдо. Әммә ир өлгөрөрәк булып сыҡты, ул ҡатынының ҡулынан баланы тартып тигәндәй алды ла Сафияның ҡосағына тыҡты. Сафия балаһын алды, йә тағы тартып алырҙар, тигән һымаҡ ҡабаланып, вагондан сыҡты, ҡатын уның артынан эйәрҙе, үҙе һаман һөйләнеүен белде:

— Кисер, ғәфү ит инде, зинһар!..

Ә Сафия уны ишетмәне лә, тыңламаны ла, атлауын белде. Һуңынан, тол ҡалғас (Ғәзиз ағай больницала үлде), Сафия улын яңғыҙы үҫтерҙе, тағы урлап ҡуймаһындар, берәй төрлө бәхетһеҙлек килеп сыға күрмәһен, тип улы өсөн мәңге ҡурҡып йәшәне. Матур, бөтөн киҫәк уға, үҙе тишек-тошоҡта йөрөнө, малайы өҫтөндәге кейем таҙа, ямауһыҙ булды, аяғында ла гел рәтле кейем ине. Балаһын юғалта яҙған ваҡиға әленән-әле иҫенә төшөп торҙо, үҙенең вагон тышында барған сәғәттәрен хәтерләп, тәндәре зымбырлап ҡуйғыланы. Эйе, саҡ ҡына йомшаҡлыҡ күрһәтһә, бармаҡтарын аҫһа, сабыйынан мәңгегә ҡолаҡ ҡағыр ине, үҙе лә йығылып имгәнер ине. Имгәнеп кенә ҡалһа әле... Уйлай-уйлай төрлө хыялдарға ла бирелә: бына теге икәү уның малайын алып китә, Сафия япа-яңғыҙы тороп ҡала, бала ла юҡ, ир ҙә. Донъяла яратырҙай бер кем юҡ, ә улы, йөрәк майы, үҙенең әсәһе тураһында бер нәмә белмәй, сит-ят кешеләрҙә үҫә, әсәй, тип бөтөнләй икенсе кешегә өндәшә — бындай саҡтарҙа Сафияға ифрат ҡыйын, ауыр була, әйтерһең, тормошта ысынлап та тап шулай килеп сыҡҡан. Йыш ҡына, поезға ултыра алманым, поездан йығылып төштөм, имеш, тип төштәр күрҙе, ә поезд китте, уны һис ҡыуып етерлек түгел,

шулай ҙа ул поезд артынан йүгерә, ҡысҡыра, илай, инәлә, ял-бара, унан ҡото алынып уяна ла, улының янында икәнен күреп, хәҙер инде бәхетенән иларға керешә...

Ғүмере буйы улы тураһында татлы хыялдар менән йәшәне. **Бына улы үҫә, егет була, армияла хеҙмәт итеп ҡайта, яңы йорт һала, өйләнә. Килене шул ҡәҙәре һәйбәт, егәрле, күп итеп балалар таба.** Сафия, тыныс, етеш тормошҡа ҡәнәғәт булып, ҡартайғансы ейәндәрен ҡарай... Ул берҙән-бер улын ярата, һаман ярата, өмөтөн аҡламаһа ла ярата ине, үҙен ташлаһа ла, хаттар яҙмаһа ла, һирәк кенә ҡайтҡандарында иҫерек көйө ауыл урамы буйлап йөрөгәнендә һәм пенсия аҡсаһын эсеп бөтөрөп яңынан олаҡҡан ваҡыттарында ла ярата ине. **Ул үҙенең һуңғы һулышына тиклем улын яратты, тәҙрәнән күҙен алмай көттө лә көттө...**

1. Ире янына дауаханаға барырға Сафияға кемдәр һәм нисек ярҙам итә?
2. Сафия апайҙың балаһына булған мөхәббәте тураһында һөйләгеҙ. Улы был ҙур мөхәббәткә торошломо?
3. Бөгөнгө көндә ата-әсәйҙәргә ҡарата ошондай мөнәсәбәттәр ос-раймы?
4. Әҫәрҙең йөкмәткеһенә тап килгән мәҡәл-әйтемдәр табығыҙ.
5. Сафия бәхетле әсәме? Фекерегеҙҙе әйтегеҙ.
6. Сафия апай һәм баланы тартып алған ҡатындың тышҡы ҡиәфәте һүрәтләнгән урынды табып уҡығыҙ һәм ҡатындарҙы сағыштырығыҙ. Фекерегеҙҙе әйтегеҙ.
7. «Мәрхәмәтле әсәләр һәм рәхмәтһеҙ балалар» тигән темаға диспут үткәрегеҙ.

**112-се күнегеү.** II бүлектәге аҫтына һыҙылған һөйләмдәрҙең составы буйынса төрөн билдәләгеҙ. Ҡалын хәрефтәр менән бирелгән һөйләмдәрҙә ниндәй һөйләм киҫәктәренең тиң булып килеүен күрһәтегеҙ.

## ТУЛЫ ҺӘМ КӘМ ҺӨЙЛӘМДӘР

Һөйләм, ғәҙәттә, бер нисә һүҙҙән тора һәм унда тамамланған фекер була. Шулай ҙа, ҡайһы бер һөйләмдәрҙең мәғәнәһен аңлап булмай, ниҙер етмәй. Аңлау өсөн, икенсе һөйләмдәргә иғтибар итергә кәрәк була. Миҫалдарҙы ҡарағыҙ:

*— Һаташа...*
*— Яна...*
*— Һыу һорай...*

*— Бәлә!*

*— О, тимәк ҡурҡҡан! (Р. Назаров)*

Бындай һөйләмдәр текстарҙа йыш осрай. Уларҙың бөтә киҫәктәре лә: эйәһе лә, хәбәре лә, эйәрсән киҫәктәре лә төшөп ҡалырға мөмкин. Ләкин һөйләм мәғәнәһе контекста бик еңел аңлашыла. Уларҙы **кәм һөйләмдәр (неполные предложения)** тип йөрөтәләр.

**113-сө күнегеү.** Текстарҙы иғтибар менән уҡығыҙ. Ниндәй һөйләм киҫәктәренең булыуын күрһәтегеҙ.

1. — Ҡайһы ауылдан һин, ағай?
— Ҡайпандан.
— Ҡайҙа бараһың?
— Ҡайтам.
— Исемең кем?
— Шайтан.

2. — Һиңә кем өйрәтте?
— Хәйлә, хәйлә.
— Һиңә кем ярҙам итте?
— Хәйлә, хәйлә.

3. — Дуҫтар, ҡайҙа бараһығыҙ?
— Ҡара урманға.
— Ҡара урманда ни эшләйһегеҙ?
— Еләк йыябыҙ. *(«Балалар фольклоры»нан)*

**114-се күнегеү.** Ниндәй һөйләм киҫәктәре төшөп ҡалған? Билдәләгеҙ.

1. — Ул һүҙ раҫ: кисә яусылар килде. Атам мине уға биргән. Тик туй көнөн генә айырып билдәләмәгәндәр.
— Һин шуға ризамы?
— Юҡ.
— Әсәң?
— Риза түгел.
— Инде нимә эшләйбеҙ?
— Икәүләп ҡасабыҙ.
— Бир ҡулыңды...
2. — Улайһа, ҡайҙа беҙҙең беребеҙ?
— Нисәү инегеҙ һуң?

— Алтау.

— Әле нисәүбеҙ тип тораһығыҙ?

— Бишәү.

— Теҙелеп тороғоҙ әле. Үҙем һанап бирәйем: берәү, икәү, өсәү, дүртәү ...

Ҡарт шулай һанап бара, әйткән береһенең һырт буйына ҡамсы менән һыҙыра, ти. Шунан егеттәр:

— Булды, ағай, булды! Теүәлбеҙ икән, — тинеләр, ти. *(Башҡорт халыҡ ижадынан)*

**115-се күнегеү.** Ике телдә бирелгән фразеологик берәмектәрҙе тап килтереп яҙығыҙ. Һәр береһенең мәғәнәһен аңлатығыҙ. Уларҙы ниндәй хәлдәрҙә (ситуацияларҙа) ҡулланалар? Бер фразеологик берәмеккә ярашлы бәләкәй генә хикәйә төҙөгөҙ.

| *Башҡорт телендә* | *Рус телендә* |
|---|---|
| 1. Аҡ эт бәләһе ҡара эткә. | 1. На коне сидит, а коня ищет. |
| 2. Силәгенә күрә ҡапҡасы. | 2. Язык мой — враг мой. |
| 3. Йыуаштан йыуан сыға. | 3. Либо пан, либо пропал. |
| 4. Аҫтындағын алты ай эҙләгән. | 4. Не всё коту масленица, бывает и великий пост. |
| 5. Тартай теленән табыр. | 5. По Сеньке и шашка, по времени и кафтан. |
| 6. Ат аунаған ерҙә төк ҡала. | 6. В тихом озере черти водятся. |
| 7. Йә уңам, йә туңам. | 7. Валить с больной головы на здоровую. |
| 8. Ҡапҡан һайын ҡалъя булмай. | 8. Где рубят дрова, тап и щепа валится. |

## «ИКЕ ҺӘМ БЕР СОСТАВЛЫ ҺӨЙЛӘМДӘР» ТЕМАҺЫ БУЙЫНСА ҮТЕЛГӘНДӘРҘЕ ҠАБАТЛАУ

1. Ниндәй билдәләренә ҡарап, һөйләмдәрҙе ике составлы йәки бер составлы тигән төрҙәргә бүлеп йөрөтәләр?
2. Бер составлы һөйләмдәр ниндәй төрҙәргә бүленә?
3. Йыйнаҡ һөйләм таркау һөйләмдән ниндәй билдәһе менән айырыла?
4. Кәм һөйләмдәр ниндәй телмәрҙә күберәк ҡулланыла?

## ХӘТЕР ҺАНДЫҒЫНА...

Бала шатлығы — әсә шатлығы.

* * *

Ата булмай, атайың ҡәҙерен белмәҫһең, әсә булмай, әсәйең ҡәҙерен белмәҫһең.

* * *

Ҡояш янында — йылылыҡ, әсә янында — изгелек.

* * *

Баланың бармағы ауыртһа, әсәнең йөрәге ауыртыр.

* * *

Бала ҡәҙерен әсә белер, ир ҡәҙерен ил белер.

* * *

Бала өсөн әсәнең йөрәге, атаның беләге һыҙлар.

* * *

Әсә күңеле балала, бала күңеле далала.

* * *

Әсә янында бала йәтим булмай.

# ӘҘӘП БАРҘА — ИМАН БАР



## Хәсән НАЗАР

**(1942)**

Хәсән Мөҙәрис улы Назаров 1942 йылдың 15 ғинуарында Башҡортостандың Ейәнсура районы Таулыҡай ауылында тыуған.

Хәсән Назарҙың «Бөркөттәр төйәге» тигән беренсе йыйынтығы 1971 йылда донъя күрә. «Шоңҡар сөйәм», «Заман заңы» исемле китаптары билдәле.

Хәсән Назар «Асманға ашыу» тигән шиғырҙар һәм поэмалар йыйынтығы өсөн Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһына лайыҡ булды.

### ӨС ҺҮҘ

Өс нәмә тоталыр беҙҙе:
Ер, тел, иман.
Ереӊ барҙа — дәүләтеӊ бар,
Шуға инан.

Телеӊ барҙа — милләтеӊ бар,
Мәртәбә ул;
Телен һатҡан — илен һатыр
Иртәгә ул.

Иман барҙа, ҡояш — ҡояш,
Әҙәм — әҙәм.
Иман — рух ул, ә түгелдер
Бары әҙәп.

Өс кенә һүҙ. Ҡанға һеңгән.
Гүйә, бетеү.
Күҙ ҡараҡдай һаҡла уны,
Юҡһа — бөтөү.

1. Ер, тел, имандың Тыуған ил нигеҙен тәшкил итеүен иҫбатлағыҙ.
2. Шағир кешеләрҙе нисек йәшәргә саҡыра? Һеҙ уның менән ризамы?
3. *Ер, тел, иман* һүҙҙәрен ҡулланып, үҙегеҙ шиғыр яҙығыҙ.
4. «Әҙәп барҙа — иман бар» тигән темаға әңгәмә ойоштороғоҙ.

## ҺӨЙЛӘМДӘ ЭЙӘРСӘН КИҪӘКТӘРҘЕҢ АЙЫРЫМЛАНЫУЫ

Ҡайһы бер осраҡтарҙа айырым һөйләм киҫәктәре үҙенсәлекле интонация менән әйтелә һәм уларҙан һуң пауза яһала. Бындай һөйләм киҫәктәрен **айырымланған эйәрсән киҫәктәр (обособленные второстепенные члены предложения)** тип атайҙар. Һөйләм киҫәктәренең айырымланыуы уҡыусының йәки тыңлаусының теге йәки был һөйләм киҫәгенә иғтибарын йүнәлтеү, уларҙың мәғәнәһен көсәйтеү менән бәйле барлыҡҡа килә. Яҙыуҙа айырымланған эйәрсән киҫәктәр өтөр менән айырыла.

Миҫалдарҙы ҡарағыҙ: *Ул, **бахыр,** ҡасып-боҫоп һирәк кенә килгәндә лә илауҙан туҡтамай.* (Н. Мусин) *Уға, **оҙон буйлы кешегә,** алда ултырыу яйһыҙ.* (Н. Мусин) *Элек, **революцияға тиклем,** ауылда Зариф тигән бер ҡарт йәшәне.* (Б. Бикбай)



## Мәүлит ЯМАЛЕТДИНОВ

## (1947)

Мәүлит Байгилде улы Ямалетдинов 1947 йылдың 5 февралендә Башҡортостандың Учалы районы Аслай ауылында тыуған.

«Ирәмәл» тигән тәүге китабы 1978 йылда сыға. Унан һуң бер-бер артлы «Ай ҡыҙы», «Таң йондоҙо», «Һомай ҡош», «Һаумы, Зәңгәр һауа», «Ыҙан» һәм башҡа бик күп шиғыр йыйынтыҡтары донъя күрә.

Мәүлит Ямалетдинов проза өлкәһендә лә уңышлы эшләй. Уның «Тал бәпкәләре», «Бүләк» тигән повесть һәм хикәйәләр йыйынтыҡтары билдәле. Легендар комбриг Муса Мортазин яҙмышын сағылдырған «Ҡотолоу юлҡайҙары тапманым» повесы өсөн уға Муса Мортазин исемендәге премия бирелә.

Мәүлит Ямалетдинов Ҡөрьән Кәрим китабына мөрәжәғәт итеп, «Ҡөрьән. Шиғри тәржемәләр», «Һыйыр сүрәһе» шиғри йыйынтыҡтары сығара.

## ИМАН

### I

Сибәғәт бөгөн дә йүнләп **йоҡлай алманы.** Тәүҙә көнө буйы канау ҡаҙып, эт шикелле арыуына ҡарамаҫтан, айырылып китергә мәжбүр булған тыуған ауылын, һөйөклө ҡатынын, улын һағыныуҙан йөрәге туланы, йәне иңрәне. Сибәғәттең һағыш менән ғазаптарҙан яраланып бөткән йөрәге бер аҙ тынысланды, алҡымынан эләктергән күрәләтә нахаҡ һәм хаҡһыҙлыҡҡа ҡарата рәнйеүҙәре инде баҫылыңҡыраны, тигәндә, уның булмышын уяулы-йоҡоло һаташыу **баҫты.**

Өн тиһәң дә, төш тиһәң дә дөрөҫләккә тап килер был һаташыуҙың уны әҙәрлекләүе бер бөгөн түгел — тормошон селпәрәмә килтергән ваҡиға зиһененә ныҡ уйылған, ахыры. Ысынлап та, өн тиер инең — быйылғы йылдың иртә яҙында булып үткән хәлгә әҙәм **ышанмаҫ.** Ә төш тип әйтер инең — бигерәк ҡот осҡос Сибәғәттең хәле.

...Илде тетрәтеп үткән граждандар һуғышының шаңдауы баçылып, ағас башына ҡор ҡунып та өлгөрмәне, тирә-яҡта колхоздарға ойошоу **башланып китте.** Был ялҡынлы хәрәкәттең ипкене Сибәғәттең тыуған ауылы Һағынбайға ла килеп бәрелде. Киске уйындарҙа ауылды яңғыратып:

— Һыу буйында һары сәсәк,
Күҙ етһә, һибеләсәк.
Иçке тормоштар **бөтәсәк,**
Коммунизм **киләсәк**, —

тип йырлаған комсомолдар уны, оторо дөрләтеп, күтәрмәләп алғас, егерме өйҙән торған Һағынбайҙың ун алтыһы «Малтапҡан» тигән колхозға ойошто. Сибәғәт һәм уның кеүек үҙ хәлдәренә ышанған, күкрәк көстәре менән тапҡан хәләл мал-тыуары ишле генә булған өс урта хәлле кеше әлегә яңғыҙаҡ булыуҙы өçтөн күрҙе.

Сибәғәт ул көндө Сейәле үҙәктәге баçыуын **һөрөп йөрөй ине.** Бар донъя ҡояштың сағыу нурында ҡойона, яҙ сыуағы тирәяҡтағы тауҙар өçтөндә һағым булып **уйнай**. Сырҙауыҡтар бик бейектә, дерелдәп торған нурҙар зәңгәр күккә олғашҡан тәңгәлдә һайрай — тимәк, иген, бесән уңасаҡ, Алла бирһә.

Тап шул мәлдә Сибәғәттең йоҡлар йоҡоларына инеп, баçлығырға мәжбүр итәсәк ике комсомол — Шәймөхәммәт менән Идрис килде уның эргәһенә. Шәймөхәммәтенә ярай инде — эсе тарыраҡ булһа ла, ҡулынан эш, теленән йүнле һүҙ килә. Ә бына Идрискә ул комсомолда ни бар инде? «Бер аяғын алға баçһа, икенсеһен эт ашар» тип уның кеүектәргә әйтәләрҙер, моғайын. Бер саҡ шулай Һағынбайҙа һүҙ сыҡҡайны: имеш, Идрис янып ятҡан мейесенә утын өçтәй ҙә, йылынырға тип уның башына менеп ята. Ятҡас йоҡламаһа, уның исеме лә Идрис булмаç ине. Ысынмы, бушмы, ҡыҙған кирбес арҡаһын яндырғанын да һиҙмәй йоҡлай ул. Ана шул кеше, эс бошороп, комсомолдарға эйәреп йөрөгән була. Идрис һымаҡтар ҡушылһа, комсомолдың эше, ай-һай, алға барырмы икән? Кем нисектер, ләкин Сибәғәт уны иçәпкә бар, һанға юҡ, тип уйлай һәм Һағынбай ауылында егерме түгел, ә ун туғыҙ өй, тип иçәпләй.

Шәймөхәммәт, менгәшеп килгән атынан һикереп төшөп, Сибәғәткә яҡынланы, Идрис ат өçтөндә ҡалды.

— Колхоз һуҡаһына ат етмәй, бер атыңды биреп тор, — тине Шәймөхәммәт, иçәнлек-һаулыҡ һорашҡандан һуң.

— **Бирермен**, — тине Сибәғәт, — бына, үҙемдекен һөрөп бөтәйем дә.

— Юҡ, һин хәҙер үк туғарып бир! — тип ныҡышты комсомол башлығы.

— Улай булмай ҙа инде, ҡустылар. Күрәһегеҙ бит, саҡ ҡына ҡалған. Шуны һөрөп бөтә һалайым да, **алып торорһоғоҙ**.

— Бирмәйһең инде?

— Ундай һүҙ сыҡманы, шикелле.

— Ҡара уны, үкенергә тура килмәһен. Идрис, шаһит булырһың! — Шулай тине лә Шәймөхәммәт ҡылтым ғына боролоп китеп барҙы.

Үкенмәгән ҡайҙа ул, үкенде Сибәғәт. Тик һуң ине шул: был ваҡытта ағағыҙ күҙ күрмәгән, ҡолаҡ ишетмәгән аҡ даръяның ярҙарында үҙе кеүек үк колхозға ылыҡмаған меңәрләгән халыҡ менән бергә «Беломорканал» тигән төҙөлөштә ер соҡой ине. Элегерәк берәү: «Атайымдың үлерен белһәм, ярты икмәккә булһа ла һатып ашар инем», — тип үкенгән ти. Шуның шикелле Сибәғәт тә эш үткәс ҡағынды ла, һуғынды, әммә терһәк яп-яҡын, тик тешләп кенә булмай. Белгән булһа, һуҡаһы-ние менән ике атын берсә биреп ебәрер ине.

...Имеш, Сибәғәт үҙенең Сейәле үҙәктәге һөрөлөп бөтмәгән баҫыуы өҫтөндә салҡан ята. Бар донъя ҡояштың сағыу нурында ҡойона, яҙ сыуағы тирә-яҡтағы тауҙар өҫтөндә һағым булып уйнай. Дерелдәп торған зәңгәр күккә олғашҡан тәңгәлдә сырҙауыҡтар һайрай. Сибәғәт торорға уйлай, тик кәүҙәһен ҡыбырлата алмай — Идрис алаптай аяғы менән уның күкрәгенә баҫҡан. Үҙе тешен ыржайтып:

— Һағынбайҙа егерме өй бит! — тип көлә. Сибәғәт: «Ун туғыҙ!» — тип ҡысҡырырға теләй, тик түшен Идристең итек табаны ҡыҫа, шунлыҡтан әйтергә теләгән уйы алҡымына тығыла. Идрис:

— Егерме, егерме! — тип уның күкрәгенә торған һайын нығыраҡ баҫа. Сибәғәттең өндәгенән дә айныҡ аҡыл менән: «Барыбер ун туғыҙ, һин, Идрис, йорт хужаһы иҫәбенә ингән хәлдә лә, мине ауылдан ҡыҫырыҡлап сығарҙығыҙ», — тип саяланып уйлауҙан башҡа сараһы юҡ — кәүҙәһен түгел, хатта бармағын ҡыбырлата алмай...

Уны был ғазаптан аҙан тауышы ҡотҡарҙы. Сибәғәт эшелонда уҡ үҙенә тиңдәш булған Кәрим исемле үзбәк менән дуҫлашып алғайны — шул иртәнге намаҙға тороп та өлгөргән инде...

1. Хикәйәлә ниндәй осор һүрәтләнә?
2. Идристең ауылда ниндәй даны таралған?
3. Сибәғәтте ниндәй ғәйебе өсөн каторгаға ебәрәләр?
4. Уның төшө ниндәй мәғәнәгә эйә?

**116-сы күнегеү.** Беренсе бүлектәге ҡалын хәрефтәр менән бирелгән ҡылымдарҙың ниндәй заманда килеүен билдәләгеҙ.

## II

...Кәрим — бик тәҡүә, диндар кеше. Бынау аҡ төндәр миҙгелендә ғибәҙәт ваҡытын нисек самалайҙыр, әммә көн һайын биш намаҙҙан ҡалмай. Етмәһә, бөгөн өсөнсө көн ураҙа тотоп маташа. Шул сәбәптән өсөнсө көн ауыҙына тәғәм ризыҡ алғаны юҡ. Сәхәр ваҡытында ураҙаға ниәт ҡылып, иртәнге намаҙын уҡый, кис эштән ҡайтҡас, ауыҙ асырға ифтәр ҡыла ла, ахшам намаҙы менән көндө тамамлап ҡуя. Иртәнсәк сәхәр эсер ине — донъя яп-яҡты, кисен ауыҙ асыр ине — тағы яҡты. Был Кәрим тарафынан сараһыҙҙың көнөнән иғлан ителгән аслыҡ ине. Әйтерһең, ниндәйҙер ғәҙәттән тыш юғары зиһен ерҙәге ҡот осҡос ғәҙелһеҙлеккә ҡаршы Ислам тәғлимәтенә йәне-тәне менән бирелгән Кәрим сүрәтендә аяуһыҙ ҡаршылыҡ белдерә.

— Астан үләһең бит, Кәрим, — тине бер көн дуҫының яҙмышы өсөн йөрәге һыҙлаған Сибәғәт.

— Барыбыҙ ҙа үләбеҙ, — тип кенә ҡуйҙы үзбәк.

— Уныһы шулай. Тик бынауҙарға үс итеп йәшәргә кәрәк, Кәрим.

— Тәҡдирем шулдыр. Аллаһы Тәғәлә тиҙерәк ҡотолорға юл күрһәтә, тимәк.

— Ураҙаны ҡазаға ҡалдырып та була бит. Ғүмер буйы ошонда канау ҡаҙып йөрөмәбеҙ, моғайын, — тип ҡараны Сибәғәт аптырағас.

— И-и, Сибәғәт, был йәһәннәм төбәгенән бик һирәктәр ҡотолоп ҡайтыр. Залимға ҡол булып йөрөүҙән тиҙерәк үлеүҙе артығыраҡ күрәм. Хоҙай ҙа шуға ишаралай.

— Беткә үсегеп тунды утҡа яғыу түгелме был? Барыбыҙ ҙа астан ҡырылып бөтһәк, ер йөҙөндә кем ҡалыр?

— Эттәр ҡалыр. Иманлыларҙы һәләк итеп бөткәндән һуң, аҙаҡ улар бер-береһенең боғаҙын сәйнәр, — тине Кәрим.

Үзбәктең хәле бер аҙнаға етте — ураҙаһының һигеҙенсе көнөндә аяҡтан яҙҙы ул. Әгәр иртәнән ҡара кискәсә һуҙылған ауыр эш булмаһа, ул оҙағыраҡҡа ла түҙер ине, бәлки. Шулай

ҙа Кәрим һуңғы сиккә тиклем намыҫына көс килтермәне: ул көндө лә иртәнсәк эшкә китеүселәр менән бергә сафҡа баҫты. Ләкин ҡотһоҙ, тынсыу бараҡтың тупһаһынан аша атлап сығыуға, аяҡтары хужаһына буйһоноуҙан туҡтаны.

Лагерь түрәләре, был ғәҙәттән тыш хәлгә сик ҡуйыр өсөн, тәүҙә ныҡыш үзбәкте өгөтләп ҡарамаҡ булдылар. Тик Кәрим үҙ һүҙендә ныҡ торҙо: «Ураҙа!» Өгөт тәьҫир итмәгәс, тегеләр ҡурҡытыу һәм янауға күстеләр. Ләкин ғорур үзбәктең ауыҙынан йәнә шул уҡ ҡыҫҡа, дәһшәтле дәлил ишетелде: «Ураҙа!» Тотҡондоң рухын һындыра алмауҙан ғәрләнгән лагерь һаҡсылары, аптырағас, Кәримдең ауыҙына көсләп ризыҡ ҡойоп ҡаранылар. Әммә уларҙың был маташыуынан да бер ни сыҡманы — үзбәк аҙыҡты кире бөрктө: «Ураҙа!»

Кәримдең ныҡлығы, иманға тоғролоғо Сибәғәттең күңелендә сикһеҙ һоҡланыу, ғорурланыу тойғолары уятты. Шуның менән бергә ул яңы дуҫын йәлләй, уның һаулығы өсөн ихлас ҡайғыра ине. Шуға күрә, эш олоға китмәҫ борон тип, Кәрим менән йәнә бер һөйләшеп ҡарарға булды.

— Әллә ураҙаңды бүлән дә ҡуяңмы? — тине ул дуҫының төпкә батҡан күҙҙәренә ҡарап.

— Ҡуй, Сибәғәт, юҡҡа өгөтләмә, — тине Кәрим.

— Һине йәлләйем — яфаланаһың бит.

— Һин үҙеңде йәллә, Сибәғәтжон. Мин тиҙҙән ҡотолормон, ә һиңә әле бик оҙаҡ ғазапланырға.

— Тыңла әле, Кәрим, — тип иң һуңғы дәлиленә күсте Сибәғәт, — элегерәк уҡымышлы ҡарттар: «Бар донъя Ислам диненә күсер», — ти торғайны. Ярай, күстеләр, ти. Ә һуң ошо төньяҡ халыҡтары, ураҙа йәй айҙарына тура килгән саҡта, нишләр?

— Минең күңелдә шик яралтмаҡсы булаһың инде? — тине үзбәк, бер нөктәгә текләп байтаҡ ятҡандан һуң. — Бәндә фараз итә, Алла ҡарар итә. Әгәр һин әйткән һүҙ Хоҙай ирке икән, барыһы ла ул теләгәнсә булыр. Әйҙә, был турала ҡабат һөйләшмәйек — ваҡыт әрәм була. Һиңә әйтер һүҙем икенсе, Сибәғәт: мине үҙ ҡулың менән тәрбиәләрһең инде. Үҙебеҙсә, мосолманса дәфенләрһең, тигән ышаныста китәм...

Сибәғәт ни тип яуапларға ла белмәйенсә ҡарашын ситкә күсерҙе. «Ярай» тип әйтер ине, алдында мөлдөрәп ятҡан тере йәндең үлеменә ризалыҡ биргән төҫлө күренә, «ҡуй, юҡты һөйләмәсе» кеүегерәк йыуатыу һүҙҙәре ҡушыр ине — күрәләтә ике йөҙләләнеү була.

Кәрим уның кисерештәрен бик яҡшы аңлап, ғәфү үтенгән төҫ менән:

— Шулай инде, донъя бит! — тип ҡуйған булды.

Донъя шул — уның ҡанундары аяуһыҙ, талаптары ҡаты.

**Тирә-яҡты солғап алған ғәжәйеп аҡ төндәрҙең береһендә Кәрим тып-тын ғына фанилыҡтан үтте. Кәүҙәһе уның ер йөҙөндә үҙенә татырға яҙған рәхәтлектәре менән ғазаптарының билдәһе булып бында ҡалды, ә йәне ҡайҙа булды икән? Ул, моғайын, өҙлөкһөҙ күгелйем нур бөркөлөп торған күктең икһеҙ-сикһеҙ киңлектәренә олғашҡандыр. Мөғжизәле аҡ төндәрҙең илаһи балҡышында яҡтылыҡтың бермә-бер артҡандай тойолоуы ла шуға бер ишара.**

**Кәрим вафатының етеһенә ҡарай төндә Сибәғәт тәүгә тыныс төш күрҙе. Имеш, Һағынбай ауылы өҫтөндә ғәжәйеп нур уйнай. Уның балҡышынан күҙе ҡамашҡан Идрис ике ҡулы менән йөҙөн ҡаплап, урам уртаһында баҫып тора. Үҙе ялан аяҡ, ялан баш. Ул бер туҡтауһыҙ: «Ун туғыҙ!.. Инде күрәм — ун туғыҙ өй!» — тип ҡысҡыра. Тылсымлы нур тауҙар өҫтөндә һағым булып уйнай-уйнай һаман көсәйә һәм бары тик Идристе генә дөм ҡараңғыла ҡалдырып, әкренләп бөтөн ерҙе солғап ала...**

1. Ураҙа тотоу тәртиптәре тураһында нимәләр беләһегеҙ?
2. Үзбәк егете Кәримдең ураҙа тотоп хәлдән тайып йығылыуын нисек баһалайһығыҙ? Был аҡылһыҙлыҡмы әллә үҙенә күрә көрәшме?
3. Кәримде рухлы, иманлы тип әйтеп буламы?
4. Лагерь хужалары Кәримгә ҡарата ниндәй саралар күрәләр?
5. Сибәғәт менән Кәримдең аҙаҡҡы һөйләшеүенән сығып, ниндәй һығымта яһап була?
6. Ислам дине буйынса кешене һуңғы юлға оҙатыу йолаһы тураһында нимәләр беләһегеҙ? Һөйләгеҙ.
7. Сибәғәттең аҙаҡҡы күргән төшө нимәгә ишара итә?
8. Текста булған мәҡәл һәм әйтемдәрҙе табып уҡығыҙ һәм мәғәнәләрен миҫалдар ярҙамында аңлатығыҙ.

**117-се күнегеү.** II бүлектәге ҡалын хәрефтәр менән бирелгән өлөшөнән яһалма һәм ҡушма һүҙҙәрҙе табып, күсереп яҙығыҙ.

*Зиннәт ҒӘЛИМОВ*

## ЯЛАН СӘСКӘЛӘРЕ

Әгәр ҙә мин әсәйем килештермәгән берәй эш ҡылып ташлаһам, ул ныҡ ҡына асыулана ла шунан һуң былай тип әйтеп ҡуя:

— Ниңә һин шундайҙыр инде? Һис тә аңламайым мин һине, улым!

Мине генә лә аңламағас инде! Ә уларҙың үҙҙәрен — оло кешеләрҙе кем аңлай икән, улайһа? Улар бигерәк тә ғәжәп халыҡ бит. Ысын!

Бына минең атайҙы ғына алайыҡ. Ҡарап тороуға былай үҙе бик ябай. Әсәйем уның тураһында йыш ҡына: «Беҙҙең Байбулаттың, уның, эсендәге тышында», — тип һөйләй. Башҡа кешегә ҡарағанда, мин үҙемдең атайымды нығыраҡ аңлайым кеүек. Беҙ уның менән дуҫтар. Бына ул минең менән нисек итеп һөйләшә:

— Улым, — ти, иңбашымдан ҡосоп ала ла, — һин үҫкәс осоусы булырһың әле, — ти.

— Юҡ, атай, — тим тегегә. — Космонавт булырға ине иҫәп.

Атай көлмәй. Уйға ҡала. Шунан һуң ғына:

— Уныһы ла бик мөһим, — тип әйтеп ҡуя. — Тырышып ҡына уҡыһаң, спорт менән шөғөлләнһәң...

Насармы әллә?

Шофёр ул үҙе. Колхоз машинаһын йөрөтә. Көслө шундай! Мине бик ярата.

Ләкин бына шундай кешене лә ҡайһы бер саҡта аңламайым да ҡуям. Минең атайым да әкәмәт кенә эш эшләй ҙә ташлай.

Бер көндө ул ниңәлер эштән иртәрәк ҡайтты. Бүтән саҡта бик һуңға ҡала торғайны. Әсәйем быға ҡыуанды шикелле: атайым йыуынған арала ул көлә-көлә уға ниндәйҙер хәбәр һөйләп ташланы. Атайым да рәхәтләнеп көлдө. Мин автоматымды алып верандаға сығып киттем. Ҡайышы ысҡынғайны. Шуны нығытайым, тинем.

Күп тә үтмәне, өй ишеге ҡапыл асылып китте. Костюмын кейә-кейә атайым килеп сыҡты. Йөҙө ниңәлер бик асыулы ине. Артҡа боролоп ул:

— Юҡҡа бәйләнмәһәң, һинең күңелең булмайҙыр инде! — тип ҡысҡырҙы.

Әсәйҙең дә асыулы тауышы ишетелеп ҡалды.

Ишек бик ҡаты итеп ябылды.

Бына аңла инде уларҙы: әле генә көлөшәләр ине, хәҙер инде ана ниңәлер әрләшәләр.

Атайым минең янға килде лә, ҡулын һуҙҙы.

— Әйҙә әле, улым, икәүләп бер аҙ йөрөп киләйек.

Быға мин ҡаршы киләмме һуң!

Беҙҙең өй ауылдың иң осонда. Эргәлә генә ҡарабойҙай баҫыуы алһыуланып ята, ә уның теге яғында ҡуйы, йәшел урман башланып китә. Атайым мине етәкләп баҫыу аша һалынған юл менән ана шул урманға табан алып китте. Йәйге кис йылы ине, ел дә иҫмәй, тауыш-маҙар ҙа юҡ. Ҡарабойҙай сәскәләре өҫтөндә осоп йөрөгән бал ҡорттарының безелдәгәне генә ишетелә. Атайымдың ҙур итектәре йәнәшәһендә баҫып атлап барыуы миңә бик рәхәт. Яратам да инде бына шулай етәкләшеп йөрөргә!

Урманға еткәнсе, һөйләшмәй килдек. Дөрөҫөрәге, нимә тураһындалыр уйланып, атайым ғына һөйләшмәй барҙы, ә мин бөгөн көнө буйы башымдан үткәндәрҙең бөтәһен дә һөйләп бирергә өлгөрҙөм. Тик ул был юлы мине ныҡлап тыңламаны шикелле. Ниңәлер иғтибарһыҙ ине.

Бына урманға ла килеп еттек. Эй һәйбәт тә, эй матур ҙа инде бында! Атайымдың да йөҙө асыла төштө хатта. Йылмайып ҡуйҙы.

— Оҡшаймы, улым, һиңә бында? — тип миңә һүҙ ҡатты.

— Оҡшамаймы һуң! — тип ҡыуанысымды белдерҙем.

— Урманда рәхәт, — тип һөйләнде ул аҡрын ғына. — Бында, улым, бөтәһе лә тыныс, йәмле. Урман ул тыныслыҡты ярата. Кеше күңеле кеүек. — Нимә ул кеше күңеле, нимәне ярата ул? Быларҙы мин бөтөнләй аңламайым әле. Ә бына урманда рәхәт икәнен бик яҡшы тоям шулай ҙа.

Күрәм, атайым ныҡлап тынысланды. Йөҙөнән йылмайыу китмәй. Төп-төҙ булып үҫеп ултырған шыма тәнле ҡара ағастарҙы ҙур усы менән иркәләп һыйпай ҙа:

— Йүкә! Һин миңә бигерәк танышһың да инде! — ти. Әйтерһең, ошо йүкә тигән ағас менән иҫәнләшә инде. Эй был ололар — әкәмәт кешеләр ҙә һуң.

Атайым ҡапыл ғына:

— Беләһеңме, улым, ниндәй ағас был? — тигән һорау биреп ташланы миңә.

— Йүкә. Үҙең шулай тип әйттең бит.

— Дөрөҫ. Ә нимә яһайҙар унан?

Уныһын ҡайҙан беләйем ти мин?

— Утынға киҫәләрҙер.

Атай тағы ла йылмайҙы, ләкин уның күҙ ҡараштарында ниндәйҙер ҡайғы бар кеүек ине. Уйға талып, ул оҙаҡ ҡына өндәшмәй торҙо ла, мине етәкләп ағастар араһынан атлай-атлай, хикәйәт һөйләргә тотондо:

— Минең бик яҡшы бер дуҫым бар ине. Күрше малайҙар булып үҫтек. Уның атаһы юҡ ине. Әсәһе ауырыу. Беҙ ҙә ул саҡтарҙа ҡыйынлыҡ менән донъя көтә инек. Шул дуҫ менән икәүләп ошо урманға килеп, ҙур бысаҡ менән ошо нәҙек ағастарҙы ҡырҡа инек. Йүкәһен һыҙырып, бәйләм-бәйләм өйгә һөйрәп алып ҡайта инек.

— Ә ниңә кәрәк ине ул?

— Сабата үрергә. Беҙҙең заманда йүкәнән үрелгән шундай «ботинка» була торғайны. Сабата. Ун-ун биш пар яһай инек тә баҙарға сығарып һата инек. Ә баҙарлы ауыл беҙҙән туғыҙ саҡрым алыҫта. Йәйәүләп барабыҙ, йәйәүләп ҡайтабыҙ.

— Ул саҡта һеҙгә нисә йәш ине, атай?

— Икебеҙ ҙә бына һинең кеүек инек.

Мин ғәжәпкә ҡалдым.

— Ниңә кәрәк булды һуң һеҙгә шулай итеп йөрөү? Йүкә ҡырҡыу, сабата яһау, баҙарға барыу?

Атайым ҡысҡырып көлөп ебәрҙе. Ә күҙҙәре һаман, ниңәлер, ҡайғылы ине.

— Ваҡыты шундай ине, улым. Ауыр саҡтар ине. Сабатанан килгән аҡсаға әсәйҙәр киндер һатып алалар ине. Кешеләр үҙҙәре һуҡҡан бик ныҡ туҡыма була торғайны. Унан беҙгә ыштан, күлдәк тегәләр ине. Ҡайҙа, нисек аунаһаң да, бер йәйҙә генә һис туҙҙырып булмай ине.

Эй был атайҙы! Уйлап сығара ла һуң! Уның һүҙенә ышанһаң — бигерәк ҡыҙыҡ килеп сыға: имеш, ул минең кеүек саҡта уҡ үҙенә үҙе күлдәк-ыштанлыҡ эшләгән, унан һуң ат менән ер һөргән, әйтерһең, тракторҙар булмаған инде, ә тағы ла һуңыраҡ фашистарға ҡаршы һуғышҡан. Уның фронтта булғанына мин тулыһынса ышанам, сөнки ике ордены, биш миҙалы бар. Ә ундай нәмәләрҙе бер ҙә юҡҡа ғына бирмәйҙәр.

Беҙ урмандан сыҡҡанда, ҡояш ер өҫтөнә тейер-теймәҫ кенә булып күренә ине. Атайым хәҙер элеккесә бик йыуаш, асыҡ йөҙлө булып ҡалды.

Юл буйында ваҡ ҡына сәскәләр үҫеп ултыра. Зәңгәрҙәре лә, һарылары ла бар. Атайым туҡтаны ла эйелеп шуларҙы өҙә башланы. Ҡатын-ҡыҙ, әйтерһең. Сәскә йыя! Тапты эш!

— Улым, һин дә йый, — ти етмәһә. — Ҡара әле ниндәй матурҙар! Еҫкәп ҡара әле, улым, ниндәй хуш еҫ килә үҙҙәренән!

Быларҙың сәскәлеге! Бармаҡ осо кеүектәр генә. Ана беҙҙең әсәй баҡсала үҫтергән сәскәләрҙе — сәскә тиһәң дә ярай, исмаһам. Үҙҙәре шундай ҙур башлы, үҙҙәре шундай бейек булып ултыралар.

Ә атайым һаман үҙ һүҙен һөйләй:

— Бына был зәңгәрҙәре күк сәскә тип атала, ә ана теге тар ғына таж япраҡлыһы — аҡ сәскә. Бына күрәһеңме, ваҡ ҡына алһыу зәңгәрҙәрен? Улары инде ала миләүшә була. Ә оҙонға үҫкән һары сәскәләрҙең исеме тағы ла ҡыҙыҡ: арыҫлан ауыҙы.

Бына минең атайым, исмаһам! Үҙе уҡытыусы ла түгел, ябай бер шофёр ғына, ә бөтә сәскәләрҙең хатта исемен белә! Ҡасандыр әллә ниндәй сабата яһап үҫкән бит әле, етмәһә.

Беҙ ҡайтып еткәндә, күктә ҡояш ҡалмағайны инде. Әсәй болдор күтәрмәһендә шәл бәйләп ултыра икән. Беҙҙе көтә, күрәһең. Йөҙө борсоулы күренә.

— Ҡайҙа китеп юғалдығыҙ, минең ир-егеттәрем? Ашым һыуынып бөттө, һеҙҙе көтә-көтә, — тип ҡаршыланы ул беҙҙе күңелһеҙ генә.

Ә атайым, нимәгәлер ҡаушап ҡалған кеүек, уның ҡаршыһында бер аҙ һүҙһеҙ генә тапанып торҙо ла, ғәйепле кешеләй аҫҡа ҡарап:

— Беҙ улым менән яланға сыҡҡайныҡ, — тине. — Сәскәләр йыйҙыҡ. Ялан сәскәләре... Иҫеңдәме, ҡасандыр һин уларҙы бик ярата инең. Бына улар. Һиңә, тип йыйҙыҡ... Улым менән...

Әсәйемдең ирендәре ҡыбырлап ҡуйҙы. Ә күҙҙәрендә йәш күренде.

— Ғүмер эсендә тәү тапҡыр, — тип һөйләнә-һөйләнә, сәскәләр шәлкемен ике ҡуллап алды ла уны битенә килтереп терәне.

Бына аңла инде уларҙы шунан һуң! Күптән түгел генә ни өсөндөр әрләшәләр ине, әле инде сәскә бүләге, күҙ йәше... Бүләген дә әйтер инем инде, ялан сәскәләре, имеш. Баҡсаныҡы булһа йәки ҙур ғына шоколад бирһә — тағы бер хәл. Әсәйем шуның өсөн илайҙыр ҙа әле. Их, атай! Ҡыуандырҙың инде былай булғас!

Ғәжәп халыҡ та һуң ололар. Һис аңламаҫһың үҙҙәрен.

**1.** Ата менән ул араһындағы мөнәсәбәттәр ниндәй?
**2.** *Эсендәге — тышында* тигән әйтемде нисек аңлайһығыҙ?
**3.** Атаның бала сағы менән улдың бала сағын сағыштырығыҙ. Ниндәй оҡшашлыҡ бар?
**4.** Әсә ялан сәскәләрен нисек ҡабул итә?
**5.** Ни өсөн әҫәр «Ялан сәскәләре» тип атала?
**6.** Хикәйә кем исеменән алып барыла?
**7.** Һеҙ ниндәй ялан сәскәләрен беләһегеҙ? Һүрәттәрен табып, исемдәрен яҙығыҙ. Тәбиғәткә экскурсияға сығығыҙ.
**8.** «Сәскәләр — тәбиғәт беҙгә» тигән темаға инша яҙығыҙ.
**9.** «*...Ғүмер эсендә тәү тапҡыр*», — *тип һөйләнә-һөйләнә, сәскәләр шәлкемен ике ҡуллап алды ла уны битенә килтереп терәне,* тигән юлдарҙан башлап әҫәрҙең аҙағына тиклем рус теленә тәржемә итегеҙ.

**118-се күнегеү.** Әҫәрҙән түбәндәге төрҙәргә ҡараған берәр һөйләм яҙып алығыҙ.

1. Ике составлы һөйләмдәр ...
2. Бер составлы һөйләмдәр:
   а) билдәле эйәле һөйләм ...
   б) билдәһеҙ эйәле һөйләм ...
   в) эйәһеҙ һөйләм ...
   г) атама һөйләм ...
3. Йыйнаҡ һөйләмдәр ...
4. Кәм һөйләмдәр ...

## ХӘТЕР ҺАНДЫҒЫНА...

Аҡылдың ҡәҙере әҙәп менән.

* * *

Кеше холҡон күҙәт, үҙеңдекен төҙәт.

* * *

Күңеле тар — һөйөнмәҫ, күңеле таш — көйөнмәҫ.

* * *

Әҙәпкә ғәҙәтләнһәң — әҙәм булырһың, яманға ғәҙәтләнһәң — әрәм булырһың.

# ШАУЛАП-ГӨРЛӘП ЯҘ КИЛӘ

*Рәми ҒАРИПОВ*

## ЯҘҒЫ ЙЫР

Аҡ ҡайындар күңелләнеп шаулай,
Йырлай миңә яҙғы йырҙарын.
Йәп-йәш үлән түшәгендә ятам
Ябынып мин ҡояш нурҙарын.

Зәңгәр күктән дәртле моң ҡойола,
Гүйә, кемдер уйнай ҡурайын!
Юҡ, йомарт ер, көмөш шөңгәр итеп,
Күккә сөйгән һабан турғайын!

Тыңлай уны моңһоу умырзая,
Бәрхәт күлдәктәрен кейенеп.
Бал ҡорттары оса сәскә эҙләп,
Пар күбәләк йөрөй һөйөнөп...

Мәңге һөйөп йәшлек күркәмлеген,
Һайрап туймай һары һандуғас,
Мең-мең телдә сутылдаша ҡоштар,
Ер һылыуы — алсаҡ яҙ тыуғас.

Яратам, яҙ, күкрәп килеүеңде!
Һинән йәнләнмәҫ йән һирәктер!
Тик һин миңә бойоҡ булыр инең,
Яҙа үтһәң минең йөрәкте!..

1. Шиғырҙа һүрәтләнгән яҙғы күренеште күҙ алдына баҫтырығыҙ.
2. Ни өсөн шиғыр «Яҙғы йыр» тип атала?
3. Текстан эпитет, метафора, сағыштырыуҙарҙы яҙып алығыҙ һәм уларҙың ҡулланылыуын аңлатығыҙ.
4. *Көмөш шөңгөр... Шөңгөрҙөң* тағы ниндәй төрҙәре була? Дауам итеп яҙығыҙ. Алда үтелгән ниндәй шиғырҙа һеҙ был һүҙ менән танышҡан инегеҙ? Ҡулланылыу осраҡтарын һәм мәғәнәләрен аңлатығыҙ.
5. Шиғырҙа нисә төҫ телгә алына? Ни өсөн?
6. Башҡа милләт шағирҙарының яҙ тураһындағы шиғырҙарын табып уҡығыҙ һәм яҙ миҙгеленең һүрәтләнешен Р. Ғариповтың шиғыры менән сағыштырып фекерегеҙҙе әйтегеҙ.
7. Яҙ тураһында документаль фильмдар, һүрәттәр ҡарағыҙ һәм «Ер һылыуы — алсаҡ яҙ» темаһына кескәй инша яҙығыҙ.



## Зиннур УРАҠСИН

## (1935 — 2007)

Зиннур Ғәзиз улы Ураҡсин 1935 йылдың 5 ноябрендә Ырымбур өлкәһенең Төйләгән районы Мәксүт ауылында тыуа.

Өс йөҙ илленән ашыу ғилми хеҙмәте, шул иҫәптән егерменән ашыу китабы баҫылып сыҡҡан.

Зиннур Ураҡсин әҙәбиәт өлкәһендә лә әүҙем эшләне. Уның «Күтәрелә күк томан», «Күҙ нуры» повестары, «Карат» романы һәм бик күп миниатюр хикәйәләре билдәле.

## АЛМАҒАС

**Ҙур төҙөлөш бара. Таш, ҡом тейәгән машиналар үтеп тора, тракторҙар ерҙе аҡтара. Баҡса эсе оло юлға әйләнгән. Кемдеңдер мәрхәмәте менән шунда бер алмағас ултырып ҡалған. Барыһы ла уны урап үтә. Тирә-яҡтағы ерҙең ташҡа әйләнеүенә лә, болот-болот булып саң бөркөлөүенә лә иғтибар итмәгәндәй, был ағас шау сәскәгә төрөнөп ултыра бирә.**

**Йорт та төҙөлөп бөттө, унда кешеләр йәшәй башланы. Барыһы ла был яңғыҙ алмағастың тороп ҡалыуына ғәжәпләнде. Тик берәү ҙә уның әсе яҙмышын уртаҡлашманы.**

Ағастың ботаҡтарына кер бауҙары бәйләнеләр, ауыр-ауыр келәмдәр элеп ҡаҡтылар, шуҡ малайҙар осона тиклем үрмәләне. Кемдер уның төбөндәге ҡара тупраҡты ҡаҙып алып китте.

Был йәберҙе күтәрә алманы ағас, әкренләп ҡороно, һәләк булды.

Ә уны йәшәтергә күп тә кәрәкмәй ине бит.

1. Хикәйәлә алмағасты тере ҡалдырыусы һәм һәләк итеүсе кешеләр тураһында фекерегеҙҙе әйтегеҙ.
2. Уны йәшәтеү өсөн һеҙ нимә эшләр инегеҙ?
3. Алмағас тураһында Интернет селтәренән мәғлүмәттәр табып уҡығыҙ һәм белешмә төҙөгөҙ. Уның төрҙәре буйынса презентация эшләгеҙ.
4. Алмағасты һеҙ ниндәй кеше менән сағыштырыр инегеҙ? Был турала фекер алышығыҙ.

**119-сы күнегеү.** «Алмағас» әҫәрендәге ҡалын хәрефтәр менән бирелгән һөйләмдәрҙә ҡылымдарҙың ниндәй заман формаһында килеүен билдәләгеҙ, мәғәнәләрен аңлатығыҙ. Ниндәй заман формаһы был текста ҡулланылмаған? Ни өсөн?

## СӘСКӘ ҒҮМЕРЕ

Һуғыш барған ваҡыт, ауылда ир заты юҡ. **Эштең ауыры ла, еңеле лә ҡатын-ҡыҙ, ҡарт-ҡоро иңенә төшә.**

Бесән өмәһенә сыҡҡанбыҙ. **Апай-еңгәләр, үҫмерҙәр бер-бер артлы төшөп алғандар ҙа мәрәкәләшеп һелтәйҙәр генә.**

**Фазулла бабай бесәнселәрҙе салғы тоторға, ҡырҡып сабырға, әйләндерә һелтәргә өйрәтеп йөрөй.** Сабылған ерҙе ҡараған сағында, ул бер салғысының уйҙыҡ-уйҙыҡ үлән ҡалдырып китеүен күреп ҡала. Таҡыр ғына итеп сабылып килгән ерҙә бер услам үлән һерәйеп ултырыуы бик ғәжәпкә ҡалдыра уны. Кемдең эше икәненә төшөнә алмай аҙаплана. Был кешене табып әрләмәксе йә өйрәтмәксе була. Ҡарап йөрөй торғас, бының Сәрби еңгәнең эше икәнен һиҙеп ала. Тик ни ғәжәп һуң был: ул бит ҡатындар араһында иң оҫта саба торған кеше, хатта салғыһын да үҙе сүкей белә.

**Фазулла бабай Сәрби еңгә ҡалдырып киткән үлән өйкөмдәрен барып ҡарай һәм унда алһыу, ҡыҙыл, аҡһыл зәңгәр сәскәләрҙең баҙырлап ултырғанын күрә лә баяғы уйынан ҡайта.** Сәскә ғүмерен оҙайтырға тырышҡан Сәрби еңгәне әрләргә уның ҡыйыулығы етмәй.

1. Хикәйәлә ниндәй осор һүрәтләнә?
2. Фазулла бабайҙы нимә ғәжәпләндерә?
3. Сәрби еңгәнең күңел торошон аңлатығыҙ.
4. «Алмағас» әҫәрендәге кешеләрҙең һәм Сәрби еңгәнең тәбиғәткә ҡарата мөнәсәбәтенә үҙ фекерегеҙҙе әйтегеҙ һәм һығымта яһағыҙ.
5. «Тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш» темаһына инша яҙығыҙ.
6. Тәбиғәтте һаҡлау һәм ҡурсалау буйынса Интернет селтәренән мәғлүмәттәр табығыҙ һәм презентация эшләгеҙ.
7. «Алмағас» һәм «Сәскә ғүмере» әҫәрҙәрен сағыштырығыҙ һәм фекерегеҙҙе әйтегеҙ.
8. Бер нисә ялан сәскәһенә түбәндәгесә белешмә яҙығыҙ.

**Йондоҙ сәскә** (астра) — ҡатмарлы сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған еҫһеҙ эре сәскәле үҫемлек. Июль — сентябрь айҙарында сәскә ата. Бал ҡорто өсөн иң һуңғы өҫтәмә аҙыҡ биреүселәр рәтенә инә.

**120-се күнегеү.** «Сәскә ғүмере» әҫәрендә осраған алмаштарҙы табығыҙ, уларҙың төркөмсәләрен билдәләгеҙ.

**121-се күнегеү.** Тексттың ҡалын хәрефтәр менән бирелгән өлөшөндә һөйләмдең ниндәй киҫәктәренең тиң булып килеүен билдәләгеҙ.

**122-се күренеү.** Түбәндәге шиғыр ниндәй һөйләмдәрҙән тора?

## ЭТЮД

Тап-таҡыр ҡыр. Яңғыҙ сауҡа. Аҡ юлаҡ.
Ҡырсынташ юл. Яңғыҙ ҡайын. Буш ташлыҡ.
Даръя болот. Ялпылдаҡ ай. Ҡош юлы.
Сирҡансыҡ ел. Ҡара һыуыҡ. Ҡыш башы.

Саҡ-саҡ аҡлыҡ. Ауыл ситэ. Буш тыҡрыҡ.
Йоҡоло йорт. Бойоҡ ҡойо. Усаҡлыҡ.
Ҡаҡ өҫтәл. Шәм. Ҡағыҙ бите. Өс юллыҡ.
Ялпылдаҡ ай.
Яңғыҙ ҡайын.
Буш ташлыҡ.

*(Дамир Шәрәфетдинов)*

Шиғырҙы уҡығандан һуң, күҙ алдына ниндәй картина килә?

**123-сө күнегеү.** Шиғырҙа төҙөлөшө буйынса ниндәй һөйләмдәр ҡулланылған? Уларҙың төрөн билдәләгеҙ. Һөйләмдәр үҙ-ара ниндәй юлдар менән бәйләнгән?



## Рафаэль САФИН

## (1932 — 2002)

Рафаэль Әхмәтсафа улы Сафин 1932 йылдың 16 февралендә Башҡортостандың Ҡыйғы районы Йыланлы ауылында тыуа.

Рафаэль Сафиндың «Тормош ҡушыуы» тигән беренсе йыйынтығы 1956 йылда донъя күрә. Был китап әҙәби тәнҡит һәм поэзия һөйөүселәр тарафынан хуплап ҡаршы алына, айырыуса уның «Тормош ҡушыуы» исемле поэмаһы ыңғай баһа ала. «Мин белмәйем тыныс һөйөүҙе», «Ышаныс», рус телендә «Весна на Юрюзани» тигән шиғыр китаптары баҫыла.

Рафаэль Сафин драматургия өлкәһендә лә әүҙем эшләне. Уның «Йәнбикә», «Тилекәй», «Ғәзизәкәй балдыҙ», «Ҡыр ҡаҙҙары» тигән пьесалары билдәле.

### ТОЛ ҠАТЫНДАР
### ҺӘМ АЯҠҺЫҘҘАР БЕЙЕҮЕ

Күргәнем бар минең
тол ҡатындар
бейегәнен
45-тә — Еңеү көнөндә.
(О, ул бейеү! Ул дауыллы бейеү
күҙ алдымда минең бөгөн дә.)

Сәсрәп тора улар бейегәндә,
күктә түгел, залда ут-йәшен.
Бейей улар берсә көлә-көлә,
һыға-һыға берсә күҙ йәшен.

Ел-ямғырҙа талдар бөгөлә-һығыла
сайҡалыша йылға ярында.
Талдар кеүек бөгөлә-һығыла бейей
тол ҡатындар байрам залында.

Күңелдәре — ярты-йорто бәхет,
йәтим яҙмыш өсөн тулышҡан;

бейей улар, арып йығылғансы,
ләғнәт уҡып ҡанлы һуғышҡа.

Күргәнем бар минең
аяҡһыҙҙар
бейегәнен
45-тә — Еңеү көнөндә.
(О, ул бейеү! Ул ажарлы бейеү
күҙ алдымдан китмәй бөгөн дә.)

Матур баҫа белмәй улар, ләкин,
күр, уларҙа күпме ут яна!
Йөҙҙәрендә — шатлыҡ, күҙҙәрендә
әле булһа нәфрәт һаҡлана.

Ышанмайым: өҙөлөп ҡалған аяҡ
онотолалыр яйлап, тигәнгә.
Йөрәк тетрәй, туҡ-туҡ һуғылғанда
ағас аяҡ ағас иҙәнгә.

Туҡ-туҡ — гүйә, улар иҫкәртәләр
фажиғәһен үткән һуғыштың.
Туҡ-туҡ — гүйә, шулай раҫлай улар
еңә барыу көсөн тормоштоң.

Күргәнем бар... Сығып киткәнем бар,
ауыр һулап, байрам залынан.
Ах, күрмәһәм ине шул бейеүҙе,
Ах, күрмәһәм ине яңынан!

**1.** Тол ҡатындарҙың бейеүенә ниндәй мәғәнә һалынған? Ни өсөн уларҙың бәхете ярты-йорто?
**2.** Аяҡһыҙҙарҙың һәм тол ҡатындарҙың бейеүен күргәс, лирик герой күңелендә нимәләр кисерә?
**3.** *...бейей улар, арып йығылғансы,*
*ләғнәт уҡып ҡанлы һуғышҡа.*
*...туҡ-туҡ — гүйә, шулай раҫлай улар*
*еңә барыу көсөн тормоштоң,* тигән юлдарҙы уҡып сағыштырығыҙ һәм үҙ фекерегеҙҙе әйтегеҙ.
**4.** Еңеү көнө тол ҡатындарҙа һәм аяҡһыҙ һалдаттарҙа ниндәй тойғолар уята?
**5.** Һуғыш килтергән ҡайғы-хәсрәт менән еңеү шатлығын шағир ниндәй алым аша бәйләп һүрәтләүгә өлгәшкән?
**6.** Шиғыр буйынса сценарий яҙығыҙ һәм сәхнәләштерегеҙ.

**7.** Һуғыш заманының афәте хаҡында документаль фильмдар табып ҡарағыҙ һәм фекер алышығыҙ.
**8.** Тәүге дүрт строфаны ятлағыҙ.

*Риф МИФТАХОВ*

## ӨСКӨЛ ХАТТАР

Өскөл хаттар, өскөл хаттар
Һандыҡтарҙың төбөндә
Ята көтөп, ята көтөп
Хужаларын бөгөн дә.

Окоптарҙа, походтарҙа
Аяғөҫтө яҙылып,
Ҡайтҡайнылар көткәндәрҙең
Йөрәгенә яҙ булып.

Әсәләр ҙә, балалар ҙа
Шуларға өмөт бағып
Текәлә, һаман текәлә,
Нисәнсе ҡабат алып.

Өскөл хаттар, өскөл хаттар
Һандыҡтарҙа ишлеләр.
Алһын тик һөйөү хаттары
Киләсәктә кешеләр.

**1.** Шиғырҙа ниндәй кәйеф һиҙелә?
**2.** Һуғыш ваҡытындағы өскөл хаттар тураһында Интернет селтәренән мәғлүмәт табып уҡып, ололарҙан һорашып фекер алышығыҙ.
**3.** *Алһын тик һөйөү хаттары*
*Киләсәктә кешеләр,* тигән юлдарҙың мәғәнәһен аңлатығыҙ.

## ЯБАЙ ҺӨЙЛӘМ СИНТАКСИСЫ БУЙЫНСА ҮТЕЛГӘНДӘРҘЕ ҠАБАТЛАУ

**1.** Тел ғилеменең синтаксис бүлеге нимәне өйрәнә?
**2.** Нимә ул һүҙҙәр бәйләнеше? Һүҙҙәр үҙ-ара ниндәй юлдар менән бәйләнеп йөрөй?

**3.** Һөйләм ниндәй билдәләргә эйә? Һөйләмдәрҙе әйтелеү маҡсаты буйынса ниндәй төрҙәргә бүләләр?
**4.** Баш киҫәктәрҙән эйәрсән киҫәктәр ниндәй үҙенсәлектәре буйынса айырыла? Мәғәнәләре һәм төҙөлөшө буйынса улар ниндәй төрҙәргә бүленә?
**5.** Ҡайһы осраҡта һөйләм киҫәктәре тиң була?
**6.** Ике составлы һөйләмдәр бер составлы һөйләмдәрҙән ниндәй билдәләре буйынса айырыла?
**7.** Бер составлы һөйләмдәрҙең ниндәй төрҙәре бар?
**8.** Һөйләмдәрҙе ниндәй билдәләренә ҡарап, тулы йәки кәм тигән төрҙәргә бүләләр?

## ХӘТЕР ҺАНДЫҒЫНА...

Туҡлыҡ йыл яҙынан билдәле.

* * *

Яҙ көнө оҙондоҡ ҡыҫҡарған сағы, ҡыҫҡаның бөткән сағы.

* * *

Яҙ эшләһәң, ҡыш алырһың.

* * *

Яҙҙың бер көнө йылды туйҙыра.

* * *

Яҙҙың йәме сәскә менән, көҙҙөң йәме көлтә менән.

# АЙ УРАЛЫМ, УРАЛЫМ!



## Ҡәҙим АРАЛБАЙ

**(1941)**

Ҡәҙим Әбделғәлим улы Аралбаев 1941 йылдың 1 сентябрендә Башҡортостандың Хәйбулла районы Таңатар ауылында тыуған.

«Утлы кисеүҙәр», «Батыр яраһы», «Аҡ тирмә», «Һөйөүем йондоҙо», «Рух яҙыуы», «Мәслихәт», Мәскәүҙә рус телендә сыҡкан «Гонец» тигән китаптары билдәле.

1997 йылда «Рух яҙыуы» китабы өсөн Башҡортостан Республикаһының Салауат Юлаев исемендәге премияһы бирелде.

Ҡәҙим Аралбай — Башҡортостандың халыҡ шағиры.

### ЕР ТУРАҺЫНДА ЕТЕ ҺҮҘ

Эй, **ырыуҙашым,** һатма ереңде!
Һатһаң ереңде — алыпһатарҙар
тунар тиреңде!

Эй, **яҡташ,** белеш, һатма ереңде!
Һатһаң ереңде — яҡтың тигән һүҙ
яҡты көнөңдө!

Эй, **илдәшкәйем,** һатма ереңде!
Һатһаң ереңде — ҡара көс беҙҙе
Ҡорт урынына
һытты тигән һүҙ!..

Эй, **ҡан ҡәрҙәшем,** һатма ереңде!
Һатһаң ереңде — ата-бабаңды
һаттың тигән һүҙ!

Эй, **рухташым,** һатма ереңде!
Һатһаң ереңде — мәңге ҡоллоҡҡа
баттың тигән һүҙ!

Эй, **туғанҡайым,** һатма ереңде!
Һатһаң ереңде — бар тоҡомоңдо
үҙ ҡулың менән
быуҙың тигән һүҙ!

Эй, **милләттәшем,** һатма ереңде!
Һатһаң ереңде — ғәзиз халҡыңды
һаттың тигән һүҙ!

1. Шиғырҙы уҡыу барышында аңлашылмаған һүҙҙәрҙе күсереп алығыҙ, мәғәнәләренә төшөнөгөҙ.
2. Шиғырҙың идеяһын асыҡлағыҙ. Шағирҙың *ете* һүҙе менән шиғырҙың исеме араһындағы бәйләнеште аңлатығыҙ.
3. Мосолмандар өсөн ете һаны ниндәй мәғәнәгә эйә?
4. *Ҡан ҡәрҙәштәрем* тигән һүҙбәйләнештең мәғәнәһен аңлатығыҙ.
5. (П) «Ете һаны» тигән темаға презентация эшләгеҙ.

## Баязит БИКБАЙ

## (1909 — 1968)



Баязит Ғаяз улы Бикбаев 1909 йылдың 19 ғинуарында Башҡортостандың хәҙерге Көйөргәҙе районы Ҡалта ауылында тыуа.

Шағир, драматург һәм прозаик Баязит Бикбай ҡырҡ йыллыҡ ижад ғүмерендә матур-матур шиғырҙар, проза әҫәрҙәре һәм драмалар ижад итте. Уҡыусылар тарафынан уның «Аҡселән ташҡанда» романы, «Ҡарлуғас» һәм «Салауат Юлаев» драмалары, шиғри әҫәрҙәре яратып уҡыла.

Баязит Бикбай — Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаты.

## ЕР

*(Поэманан өҙөк)*

### 1

Башҡортостан тәне ҡара янған
Меңәрләгән ҡамсы эҙенән,
Беҙҙең ҡанды әгәр бергә йыйһаң,
Ҡыҙылайыр ине диңгеҙҙәр.
Батша итегенең ауырлығын
Икеләтә иңдә татыныҡ,
Рус байы теҙгә йөгөндөрһә,
Башҡорт байы ергә ятҡырҙы…
Үткәндәрҙең һәр бер көнөнән дә
Илау тауышы яңғырай, бик ауыр,
Әйтерһең дә, илай миллион ҡолдар,
Әйтерһең дә, һыҡтай мең ауыл.
Ил иланы,
Ҡара ер иланы…
Иламаған ярлы ҡалманы,
Улар зары, ҡурай моңо булып,
Яңғыратты Урал тауҙарын.
Ҡыҙҙар иланылар:
— Әйтсе!
Ниңә, әсәм, мине тыуҙырҙың,
Ниңә сәсем ярып тараның,
Ниңә инде мине тыуғас та
Ағын һыуға бәйләп һалманың?!
Илебеҙҙе яу талай,
Йөрәктәргә ҡан һауа,
Дошман уты тоҡанды,
Ил үртәлә, ил яна.
Ерҙе талап алдылар,
Ерҙе алдап алдылар.
Ерҙән яҙған ярлылар
Ҡаҡ сағылда ҡалдылар.
Батшаға баш эймәгеҙ, атаҡай!
Ҡоллоҡ бауы киймәгеҙ, әсәкәй!
Баярға ер бирмәгеҙ,
Атаҡай,

Әсәкәй,
Ау!..
Егет янды:
— Сеүсе, һылыу…
Ярабыҙ ҙур, бик ауыр.
Йәш түкмәсе үртәлеп,
Ҡайнар йәш булмаҫ дарыу.
Атҡан уғым ярһа таштарҙы,
Сапҡан ҡылысым өҙһә тимерҙе,
Ҡотҡарыр ҙа инем мин һине,
Ҡотҡарыр ҙа инем мин ерҙе!
Ер һыҡтаны:
— Ауыр миңә…
Һыуҙар ҡорой,
Тау ваталар, урман ҡырҡалар,
Ҡайҙа миндә тыуған батырҙар,
Ниңә сыҡмай, ниҙән ҡурҡалар?!
Батырша ла мине ҡотҡарманы,
Ҡараһаҡал яуҙы ҡырманы,
Эй, Салауат, батыр Салауат…
Егет булһаң, һаҡла ер данын.
Уралым бейек,
Иҙелем тәрән,
Урманым ҡалын…
Була тик әрәм!
Уралдай ҡалҡығыҙ,
Урмандай шаулағыҙ,
Үҙ өсөн тормошто
Үҙегеҙ даулағыҙ!
Һеҙҙең бығауҙы
Башҡалар сисмәҫ,
Күктән көтмәгеҙ,
Бәхет тик килмәҫ!

**2**

Атҡан уҡтай атылды Салауат,
Ҡарсығалай талпынды Салауат,
Баярҙарға ут һалды Салауат,
Түрәләрҙең ҡотон алды Салауат.

Батыр йөрәге
Үс менән янды,
Батыр теләге
Үрт менән ҡанды.
Батыр булһа ла —
Көсһөҙ ине ул,
Томанлы ине
Барып сығыр юл!

**3**

Ҡылыстары һынды Салауаттың,
Һанһыҙ ғәскәрҙәре ҡырылды,
Батыр башын эйҙе ҡайғынан
Һәм, уфтанып, былай йырланы:
— Атыр инем, уғым аҙ,
Сабыр инем, алдым һаҙ.
Күҙ ташлаһам тирәмә,
Унда инде халҡым аҙ...
Бола баҫылды,
Пугачёв аҫылды,
Ярлы ауылдар
Ҡанға мансылды,
Юлай Аҙналинға — 175,
Улы Салауатҡа — 150!..
Ҡандар атылып сыҡҡан арҡаларҙан,
Ай,
Ҡамсыларға нисек түҙҙегеҙ?!

**4**

Көн иланды,
Төн иланды,
Йәштәр аҡты күл булып,
Ил үртәлде,
Мең ауылдар
Күккә осто көл булып.
Имениелар һалды баярҙар,
Старшина, байҙар ер һатты.
Ә ярлылар,
Ерһеҙ, һыуһыҙ ҡалып,

Байға ҡоллоҡ итте буш-хаҡһыҙ.
Уралдары һаман бейек ҡалған,
Ҡоромаған һаман Иҙел дә,
Тик ярлылар
Һаман иҙелгән дә,
Иҙелгән дә иҙелгән…

**6**

Баяр имениеһы аймап ятҡан
Бай йылғаны, туғай, урманды…
Ярлы ауылдарҙың тирәһендә
Тау шикелле ҡалҡып торған ул.
Олатайҙар шунда бил бөксәйткән,
Тирен түккән, күкрәк емергән,
Байҙы туйындырған ҡарлыҡҡансы,
Тик үҙҙәре асҡа тилмергән…

**14**

Ҡараһаҡал ҡасҡан ҡаялар,
Батыршалар ятҡан урмандар,
Салауаттар кискән йылғалар,
Пугачёвтан ҡалған убалар —
Һаман да бар,
Һаман Урал бейек,
Урман ҡалын, һыуҙар кипмәгән…
— Илем!
Сәскәләргә тиңләр инем,
Сәскә ғүмерҙәре аҙыраҡ,
Йондоҙом һин, тиер инем,
Ул да һүнә, таң булғас.
Йөрәгем һин, тиер инем,
Йөрәк тибеүҙәре һанаулы.
Ҡояш менән тиңләр инем,
Төнөн килтермәһә ҡараңғы…
Һин — шатлығым минең,
Һин — бәхетем,
Һин — ҡояшым мәңге яныусы,

Кешелекте төпһөҙ һәләкәттән,
Түбәнлектән тартып алыусы!..

### 15

Кем йөҙөнә генә ҡараһам да,
Шатлыҡ балҡый, балҡый
йылмайыу,
Кешеләрҙә ҙур аң, намыҫ үҫә,
Кешеләрҙә арта туғанлыҡ.
Кешеләр берен-бере ололайҙар,
Кешеләр берен-бере иҙмәйҙәр,
Кешеләр бер-беренә өлкән дуҫлыҡ,
Хоҡуҡтарҙа тиңлек һиҙәләр...
Ҡандарыбыҙ һеңгән тыуған ерҙе
Йәнебеҙ кеүек яҡын күрәбеҙ,
Яратабыҙ уны,
ҡәҙерләйбеҙ
Һәм дошманға бер саҡ бирмәбеҙ!

1. «Мәктәп китапханаһы» серияһында сыҡҡан «Б. Бикбай. Тере шишмәләр» китабынан поэманы тулыһынса уҡып сығығыҙ.
2. Поэмалағы *миллион ҡолдар, минең ауыл, ҡыҙҙар, егет, Салауаттың һанһыҙ ғәскәрҙәре, ерһеҙ-һыуһыҙ ҡалған ярлылар, ҡыптыр тунлы мужиктар,* уларҙың эше, тормошо, көрәше хаҡында нимә әйтелә? Был һүҙҙәр аша шағир ниндәй образдарҙы дөйөмләштергән?
3. *Ҡараһаҡал, Батырша, Салауат* тураһында һеҙ нимә беләһегеҙ? Шул турала әңгәмә ойоштороғоҙ.
4. *Ҡандарыбыҙ һеңгән тыуған ерҙе*
*Йәнебеҙ кеүек яҡын күрәбеҙ,*
*Яратабыҙ уны, ҡәҙерләйбеҙ*
*Һәм дошманға бер саҡ бирмәбеҙ!* тигән юлдарҙы һеҙ нисек аңлайһығыҙ?

**124-се күнегеү.** Ҡ. Аралбайҙың «Ер тураһында ете һүҙ» шиғырында ҡылымдарҙың күп өлөшө ниндәй һөйкәлештә бирелгән? Ҡалын хәрефтәр менән бирелгән һүҙҙәр һөйләмдә ниндәй роль башҡара?

## ҺӨЙЛӘМ КИҪӘКТӘРЕ МЕНӘН ГРАММАТИК БӘЙЛӘНЕШЕ БУЛМАҒАН ҺҮҘҘӘР

### Өндәш һүҙҙәр

Ҡайһы бер һөйләмдәрҙә айырым бер кешегә йәки икенсе бер предметҡа төбәп әйтелгән һүҙҙәр ҡулланыла. Был һүҙҙәр кешенең иғтибарын йәлеп итеү йәки берәй эште башҡарырға ҡушыу өсөн ҡулланылалар. Уларҙы **өндәш һүҙҙәр (обращение)** тип атайҙар. Өндәш һүҙҙәр һөйләмдең башҡа киҫәктәре менән бәйләнештә тормай, йәғни, һөйләмдең эйәһенән, хәбәренән йәки башҡа һөйләм киҫәктәренән сығып, уларға һорау биреп булмай.

Өндәш һүҙҙәрҙе бөтә заттарға, предметтарға, күренештәргә ҡарата ҡулланырға мөмкин:

1. *Бабай торған да:*
*— **Боҙ**, һин бик көслөмө? — тигән.*
*— Юҡ, **бабай**, мин көслө түгел.*
*Бабай башын күтәреп, ҡояшҡа ҡараған да:*
*— **Ҡояш**, һин көслөмө? — тип һораған.*

2. *— Йә, **серәкәй**, әйт, һин зыянлыраҡмы, мин зыянлыраҡмы?* («Балалар фольклоры»нан)

3. *— **Пётр Иванович**, ниңә аҡырышалар?*
*— Йә, **ағай**, ҡунаҡтарға һөнәреңде күрһәт!* (Я. Хамматов)

Миҫалдарҙан күренеүенсә, һөйләмдә өндәш һүҙҙәр башҡа һөйләм киҫәктәренән өтөр менән айырыла.

**125-се күнегеү.** Һөйләмдәрҙәге өндәш һүҙҙәрҙе табып, улар йүнәлтелгән объекттарҙы асыҡлағыҙ. Өндәш һүҙҙәрҙең һөйләмдә килеү урынына иғтибар итегеҙ.

1. — Эй, егетем, йоҡлап ятма, әйҙә китәйек. 2. — Мин һине, айғырҡайым, былай ҙа кеше ҡулына бирмәйем. 3. — Миңә һин, батшам, алтын һарайыңдағы ҡара айғырыңды бир. 4. — Әсәй, энә алып килдем — тыйманың... 5. — Ағай-энеләр, яу баҫты, яу! 6. — Ой, истәктәр, бынау йомранды атығыҙ! 7. — Исемең кем һинең, ялҡау? 8. — Бар, ҡыҙым, тик юл ҡырыйлап ҡына төндә генә атла. 9. — Күҙ терәп торғанybыҙ һин илдә, Салауат! 10. — Йә, батыр, ниндәй төш күрҙең? 11. — Ҡарттар, мин һеҙгә бер мәслихәт әйтәйем әле. 12. — Был йыр, господин урядник — Салауат батыр йыры.

13. — Ҡайным, ауыҙыңа бынау алтын тәңкәне ҡап та, теге ҡатил бик ыҙалай башлаһа, усына төшөрөрһөң. 14. — Ай, оло батша! Ниңә шул хәтле ҡайғыраһың? 15. — Егерме йыл үҙе бер кеше ғүмере бит, балам. 16. — Ҡасан киләһең, баяр? *(Башҡорт халыҡ ижадынан)*

**126-сы күнегеү.** Өндәш һүҙҙәр ҡулланып, һөйләмдәр төҙөгөҙ.

*Жәлил* КЕЙЕКБАЕВ

## УРАЛ ТУРАҺЫНДА ҠОБАЙЫР

Һай, Уралы, Уралы!
Яланлы ла Уралы,
Сағыллы ла Уралы!
Урал илдә тыуыусы,
Ағиҙелдә һыулаусы,
Урал илде тапарға
Суҡмар һөйрәп апарған
Дошмандарҙың яуҙарын
Кире ҡағып ҡайтарған.
Һай, Уралы, Уралы!
Баҡырлы ла Уралы,
Тимерле лә Уралы,
Күмерле лә Уралы,
Ҡара алтынлы Уралы,
Һары алтынлы Уралы,
Игенле лә Уралы,
Сөгөнлө лә Уралы!
Ялбыр, һылыу сауылға,
Матур сәскә борҡоған,
Кәрешкәле сағылға,
Зифа буйлы шыршыға,
Ҡарағайлы урманға —
Мәңге йәшел юрғанға
Уранып ятыр Уралы!
Урал ярып, баш түбән
Ниндәй йылға аҡмайҙыр!
Битләсендә Уралдың,
Ҡосағында Уралдың,

Итәгендә Уралдың,
Ҡатлауында Уралдың,
Түмәләстәр аҫтында
Баҫырынып йәшенгән
Боҫоп ялағай-йәшендән,
Әлегә бирәү белмәгән,
Кеше-маҙар күрмәгән,
Иҫәбенә, һанына
Сығып етә алмаҫлыҡ
Ниндәй байлыҡ ятмайҙыр!
Һай, Уралы, Уралы,
Замандың ҡарт Уралы
Үҙ ғүмере буйына
Niҙәр генә күрмәгән!
Уралтауҙың буйында,
Ҡара урман ҡуйынында
Үлән кисеп муйындан
Кемдәр генә йөрөмәгән.
Сыңғыҙхандар, Батыйҙар,
Туҡтамыштар, Оғатайҙар,
Урал тауын аша атлап,
Ағиҙелде ашаҡлап,
Ялан тартып үткәндә,
Йәшереп ятҡан типһәндәр
Ҡорғаҡһыған, кипкәндәр.
Улар бер ил өҫтөнә
Ябырылған вабалай,
Суҡмарҙарын өҫтөрәп,
Күгәреп ятҡан Уралдың
Аҡландарын иҙҙереп,
Күпереп ятҡан Уралдың
Халыҡтарын биҙҙереп,
Мал-тыуар, ҡаралтыһын,
Йорт-ҡураһын туҙҙырып,
Көнкүрешен боҙҙороп,
Йөрәгенә уҡ кертеп,
Өйҙәренә ут төртөп,
Емереп, үртәп киткәндәр...
Быны күреп ятыусы,
Мәсхәрәле ғазапты
Күҙ йәше менән татыусы;

Меңйәшәр Уралдың
Таштан ҡойған йөрәге
Тәненә һыймай тарһыған.
Мең йәшәгән ҡарт Урал,
Йөрәгенә сыҙамай,
Мәсхәрәгә, хурлыҡҡа
Сыҙай алмай, түҙә алмай,
Ҡаршы килгән дошманды
Ҡурҡытып, йөрәген шаңҡытып,
Сал кергән башын ҡалҡытып,
Бер ажғырып ярһыған.
Урал саҡырып улдарын,
Һайлап биреп уларға
Йүгерек йылҡы малдарын,
Һөңгө һаплап, уҡ биреп,
Ҡылыс һәм сая туп биреп,
Дошмандарҙы ҡырырға
Изге бер яу яр иткән!
Шул яуҙарҙа ныҒыусы,
Дошмандарҙың эсенә
Осло һөңгө тығыусы,
Әсә-Урал, сал Урал
Батырҙарын бар иткән:
Батыршалар, Ҡаһымдар,
Ҡараһаҡал, Сәйеттәр,
Юлайҙар, Салауаттар,
Нуримандар, Шәһиттәр
Дошмандарҙың өҫтөнә
Үрәпсетеп аттарын,
Һаҡлап изге анттарын,
Ҡулына алып ҡоралын;
Һөйгән әсә-Уралын,
Дошман ала алмаҫлыҡ,
Баҙнат итә алмаҫлыҡ,
Яҡын да юлай алмаҫлыҡ
Ҡорос ҡая иткәндәр…

Улар ҡандар ағыҙып,
Иректе һөйөп, һағынып,
Йылдар аша, яу аша
Ҡояш һымаҡ балҡыған,

Бәхет сәскәһе аңҡыған,
Гөлдәр үҫкән баҡсаға,
Быуаттарҙы ашаҡлап,
Дошман башын башаҡлап,
Ирек байрағын күтәреп,
Йырлап барып еткәндәр.

1. Ҡобайырҙы шартлы рәүештә ике өлөшкә бүлегеҙ һәм һәр өлөшкә исем бирегеҙ.
2. Аңлашылмаған һүҙҙәрҙе табып, мәғәнәһенә төшөнөгөҙ. Уларҙы икенсе һүҙ менән алмаштырып, ҡобайырҙы уҡып ҡарағыҙ. Мәғәнәһе үҙгәрәме?
3. Ҡобайырҙа Уралдың тәбиғәте, байлыҡтары нисек тасуирлана?
4. Ниндәй тарихи шәхестәр иҫкә алына? Улар тураһында фекер алышығыҙ.
5. Тыуған ергә, илгә арналған презентация эшләгеҙ.
6. Ж. Кейекбаевтың «Урал тураһында ҡобайыр» менән «Уралып ятҡан Уралтау» ҡобайырҙарында Уралдың һүрәтләнешен сағыштырығыҙ.

## Инеш һүҙ һәм инеш һүҙбәйләнештәр

Билдәле булыуынса, һөйләүсе йәки яҙыусы һөйләмдәр ярҙамында төрлө күренештәр һәм ваҡиғалар тураһында хәбәр итә. Шулай уҡ ул хәбәр итеп кенә ҡалмай, ә әйтелгән күренештәргә һәм ваҡиғаларға ҡарата үҙенең уй-фекерен, ҡарашын һәм мөнәсәбәтен дә белдерә. Быларҙы белдереү өсөн һөйләмдә айырым тел саралары ҡулланыла. Уларҙы **инеш һүҙҙәр (вводные слова), инеш һүҙбәйләнештәр (вводные словосочетания)** һәм **инеш һөйләмдәр (вводные предложения)** тип атайҙар. Был тел саралары һөйләм киҫәктәре менән грамматик бәйләнештә тормайҙар, шуға күрә уларға һорау ҡуйып булмай.

Телдә күберәк инеш һүҙҙәр менән һүҙбәйләнештәр осрай.

Инеш һүҙ булып түбәндәге һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр ҡулланыла: *тимәк, бәхеткә ҡаршы, эйе, юҡ, могайын, шикелле, әлбиттә, мәҫәлән, бәлки, һис шикһеҙ, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, зинһар, шулай итеп, беренсенән, икенсе яҡтан, хәйер, минең уйымса, ахыры, ихтимал, киреһенсә, ти, тиҙәр, ысынлап та, әйтерһең дә* һ. б.

Инеш һүҙҙәр һәм инеш һүҙбәйләнештәр, өндәш һүҙҙәр кеүек үк, башҡа һөйләм киҫәктәренән өтөр менән айырыла.

Инеш һүҙ, һүҙбәйләнеш һәм инеш һөйләмдәр һөйләүсенең йәки яҙыусының түбәндәге тойғоларын белдерәләр:

а) **раҫлауҙы йәки кире ҡағыуҙы:** *Әлбиттә, Ҡол Ғәли поэмаһының төп нөсхәһе хаҡында һүҙ йөрөтөү мөмкин түгел.* (Ғ. Хөсәйенов)

б) **ысынбарлыҡҡа тура килеүҙе:** *Эйе, Салауаттың аты беренселекте бирмәне.* (Я. Хамматов)

в) **дөрөҫлөктө:** ***Дөрөҫ,*** *уларҙың күпселеге уның менән кисә үк күрешкәйнеләр.* (С. Агиш)

г) **икеләнеүҙе:** *Ә сыйырсыҡтар ояла, балаларын һаҡлап, һуңғы сиккә тиклем ултырғандыр,* ***моғайын*** (Б. Рафиҡов)

ғ) **һөҙөмтә сығарыуҙы:** ***Ғөмүмән,*** *доклад күңелле генә булды.* (С. Агиш)

д) **үкенеүҙе:** *Башҡорт йырауҙары һәм уларҙың ижады тураһында мәғлүмәттәр,* ***ҡыҙғанысҡа ҡаршы,*** *бөгөнгө көндәргә килеп етмәгән.* (Ғ. Хөсәйенов)

**127-се күнегеү.** Түбәндәге һөйләмдәрҙә инеш һүҙҙәрҙе һәм һүҙбәйләнештәрҙе билдәләгеҙ, уларҙың ниндәй мәғәнә аңлатыуҙарын асыҡлағыҙ.

1. Йәй көнө умарталыҡта эш күп саҡта, уның атаһына, ысынлап та, ярҙамсы кәрәк бит. 2. Ярайһы уҡ арығанмын да, ахырыһы, йоҡо баҫа башланы. 3. Әлбиттә, кергәс, уның күҙенә тәүге эләккән нәмә — һикелә туҙышып ятҡан һуҡыр сысҡан тиреләре булды. 4. Тимәк, хәҙер сысҡан тиреләрен атайымдыҡы тип тә әйтеп булмаясаҡ. 5. Ярар, онот уларҙы. 6. Юҡ инде, был һабаҡты бер ваҡытта ла онотмаясаҡмын. *(Н. Мусиндан)* 7. Шулай итеп, ун өс йәшкә сыҡҡан Әмир, ҡултыҡ таяғын да ташламайынса, колхоз бригадиры булып китте. 8. — Эйе, Әмир ҡустым, бар ышанысыбыҙ һиндә генә. *(Р. Өмөтбаевтан)* 9. «Башҡорттар, ысынлап та, ирек һөйөүсе халыҡ», — тип уйлап, академик тирә-яҡты байҡаны. 10. — Һеҙҙең атығыҙ, бәлки, ямғыр яуғанын яратмайҙыр? 11. Тимәк, бөтә сәбәп үҙегеҙҙә, Иван Иванович! 12. Ҡош балаһын тоторға ризалашып хаталандым, ахырыһы! *(Я. Хамматовтан)* 13. Ә сыйырсыҡтар ояла, балаларын һаҡлап, һуңғы сиккә тиклем ултырғандыр, моғайын. 14. Мин үҙем, мәҫәлән,

эҫкерт төбөнән илле-алтмыш метр киткәс кенә, бүреләр ҡамаған Һарығолаҡтың ҡыҙғаныс саңҡылдауынан иҫкә килдем. 15. Хәйер, Муллабай баҡсаһына уҡ килеп еткәйнек шул, ауылға яҡынлашҡандан-яҡынлашабыҙ. 16. Иртәгеһенә булды шикелле, мин тәү башлап ишек алдына сыҡҡайным. *(Б. Рафиҡовтан)*

*Ноғман МУСИН*

## ҺУҢҒЫ СОЛОҠ

### I

**Ҡояш кәртәләнһә, көн боҙола, ай кәртәләнһә, аяҙый, тигәндәре дөрөҫ, күрәһең. Төштән һуң дымлы, һалҡынса ел көсәйә төштө, көнбайышта офоҡто кәртәләп һуҙылған тау артынан ялбыр һоро болоттар күренде. Был яҡтарҙа көҙ үҙенең яҡынлауын август аҙаҡтарында уҡ һиҙҙерә башлай шул инде.**

**Тағы ла бер ни тиклем ваҡыт үтеүгә, ҡояш бөтөнләй юғалды, донъя нисектер бер юлы йәмһеҙләнеп, ҡотһоҙланып киткән төҫлө ине.**

**Табылды йылғаһы буйындағы ҡаяның ялanғас түбәһендә, яу яланындағы һалдаттары ҡырылып бөтөп, япа-яңғыҙы тороп ҡалған батыр шикелле, елгә күкрәгеп ҡуйып ултырған беҙгә таныш Солоҡ та, ҡояш юғалғандан аҙаҡ ҡараңғыланып, шымтайып ҡалған урманға — үҙенең берҙән-бер таянысына өмөтһөҙләнеп, шикләнеп ҡараған төҫлө.**

**Көн боҙолоуға әллә ни иҫе китмәй Солоҡтоң, ел-дауылдарын да, селлә эҫеләрен дә, сасҡау һыуыҡтарын да үҙ башынан күп кисергән. Ул үҙ бейеклегенән тирә-яғындағы һәләкәткә дусар ителгән урмандарға, ерҙә йәшәү тәмен юғалта башлаған кешеләргә ҡарай-ҡарай ҙа бар донъяға: «Туҡтағыҙ, әҙәм балалары! Ни эштәр ҡылыуығыҙға айыҡ баштан күҙ һалығыҙ! Харап булабыҙ бит!» — тип һөрән һалғыһы килә. Тик Солоҡ күгелйем күкрәгенә килеп бәрелгән һалҡынса елгә ыңғырашып ҡуйыуҙан ары китә алмай. Телкәйҙәре юҡ шул уның. Ә ер йөҙөндәге иң аҡыллы заттан иҫәпләнгән кешеләр үҙ ҡылыҡтарына үҙҙәре баһа бирер хәлдә түгел...**

* * *

Солтанғужа плащын ҡаушырып элде, кепкаһын батырыбыраҡ кейҙе. Леспромхоз үҙәге урынлашҡан ауылға тиклем автобуста килгәйне, унан был яғына юл ыңғай йөк машинаһына күсеп ултырҙы. Элек автобус Аяҙытауға тиклем йөрөй ине, хәҙер, урман участкаһы ябылғандан аҙаҡ, уныһын да туҡтаттылар. Йәнәһе, юл насар. Быныһы — ҡоро һылтау ғына. Эшләмәгән ауыл бер кемгә лә кәрәкмәй. Аяҙытауҙы, ите мөнйөп ырғытылған һөйәк һымаҡ, бөтөнләй ташландыҡҡа әйләндерергә тырышыуҙары шулмы икән?..

Бая район хакимиәтенә ингәндә, Солтанғужа ана шул хаҡта ла һүҙ ҡуҙғатмаҡсы ине. Бөгөн уның ҡабул итеү көнө түгел, тип хакимиәт башлығына үткәрмәнеләр. Уның урынбаҫарына инде. Әүәле партияның район комитетында бүлек мөдире булып эшләй ине был урта йәштәрҙәге ир. Уның ҡылыҡ-ғәҙәттәрен арыу уҡ яҡшы белә Солтанғужа. Килеүселәрҙе итәғәтле генә ҡабул итер, ғәжәп аҡыллы һәм баҫалҡы кеше ҡиәфәтендә, туптай күҙен сылт та йоммай, һөйләгәнеңде тыңлар, шунан тауышын күтәрмәй генә, ләкин бәхәскә кермәҫлек итеп үҙ һүҙен әйтер. Уны бик өнәп бөтмәй ҙә Солтанғужа, район үҙәгенә тағы ҡасан килә әле, юҡҡа бошоноп йөрөгәнсе, үҙ фекеремде әйтеп сығайым, тип ингәйне.

— Әйҙүк, Солтанғужа Биктимерович, үтеп китегеҙ, — тип күптәнге таныштарса ҡаршыланы уны урынбаҫар, урынынан тороп ҡул бирҙе.

Ултырып, ике ҡулын да, тыңсыл балалар шикелле, өҫтәлгә ҡуйып, туптай күҙҙәрен уға төбәне.

— Шунан, Солтанғужа Биктимерович, нисек кенә йәшәп ятаһығыҙ? Ни эштәр бөтөрөү?

— Эште бөтөрәбеҙ инде уны. Бына әле заготконторанан киләм. Бер меңдән артыҡ һуҡыр сысҡан тиреһе алып килеп тапшырғайным, аҡсалары булмай сыҡты.

— Һеҙ инде аптырап ҡала торған кеше түгел...

Солтанғужа уны бүлдерҙе:

— Һуҡыр сысҡан тотоу өсөн, институт дипломы кәрәкмәй ҙә... Ярар, мин бында үҙем тураһында һөйләргә инмәнем. Ауылдағы хәлдең көндән-көн насарайыуы эсте бошора. Һигеҙ йыллыҡ мәктәп ябылды, фельдшер пункты ярты йылдан артыҡ бикле тора. ОРС магазинында араҡынан башҡа нәмә юҡ, автобус йөрөтөүҙе туҡтаттылар. Һеҙ бында Аяҙытау халҡының яҙмышы тураһында берәй нәмә уйлап ҡарағанығыҙ бармы?

Солтанғужа бик иғтибарлы ҡиәфәт менән үҙен тыңлаған урынбаҫарға ҡарашын батырып ҡараны. Ҡалын тиреле әҙәм ҡылт та итмәй ултыра, әйтерһең, Солтанғужаның әсенеп әйткән һүҙҙәре уға бөтөнләй ҡағылмай. Ултырған креслоһы, эшләгән еренең исеме алмашынһа ла, үҙ-үҙен тотошо, һөйләшеүе хәс элекке кеүек. Партия бөтөрөлдө, диктат, бюрократизм кеүек яман күренештәр ҙә ҡороясаҡ, тип һөйләнеү менән генә тормоштар үҙгәреп китһә ине лә…

Солтанғужаның туҙғыбыраҡ торған ҡуйы сәстәренә сал төшкән, мәктәптә эшләүҙән туҡтағас, әллә үҙен тормоштан ситләтелгән һымағыраҡ тойғанғамы, түңәрәк һаҡал, ҡырма мыйыҡ ебәргәйне, уларында ла аҡ бөртөктәр күренә. Уның ҡыҫығыраҡ күҙҙәре уҡытыусыға хас эскерһеҙлек, ихласлыҡ менән урынбаҫарға төбәлгән.

— Тағы ла ниндәй һүҙҙәрегеҙ бар, Солтанғужа Биктимерович? — Урынбаҫар ҡымшанмай ҙа ултырған көйө һорай.

— Мин һорауымды бирҙем.

Урынбаҫарҙың үҙ һүҙле йоҡаҡ ирендәре ситендә йылмайыу күренеп ҡала.

— Бына һеҙ минең урында ошо һорауҙарға нисек яуап бирер инегеҙ?

Был әҙәм менән һөйләшеүҙән әллә ни фәтүә булмаҫын белә тороп инде бит инде Солтанғужа. Түңәрәк һаҡалын киҫкен хәрәкәт менән услап тартты ла киҫә генә әйтте:

— Кеше үҙе яуап таба алырҙай һорауҙарҙы бүтәндәргә бирмәй.

Урынбаҫар:

— У-ла-ай… — тип һуҙа, ситкәрәк ҡарап, нәҙек оҙон бармаҡтары менән ялтыр өҫтәлен туҡылдатып ала, шунан бөтөнләй икенсе төрлөгә әйләнгән ҡоро, ауыр ҡарашын ҡаҙай. — Башҡаса һорауығыҙ булмаһа, мин уларға бына былайыраҡ яуап бирер инем: мәктәп ябылыуҙың сәбәбен бик яҡшы беләһегеҙ — балалар һаны етмәй…

— Тик балаларҙың дүртенсе кластан башлап егерме саҡрымға йөрөп уҡыясаҡтары иҫәпкә алынманы.

— Пожалуйста, бүлдермәгеҙ. Мәсьәләнең ул яғы положениела ҡаралмаған. Үҙҙәре теләмәгәс, һеҙгә медработникты көслөк менән ебәрә алмайбыҙ. ОРС та, леспромхоз да туранантура «Башлес»ҡа буйһона, ә һеҙҙең ауылда уларҙың магазины, тимәк, унда нимә алып барыу, нимә һатыу тураһында улар уйларға тейеш. Автобус мәсьәләһенә килгәндә…

Солтанғужа тағы тыйыла алманы:

— Ни әйтерегеҙҙе беләм: юл насар, тиәсәкһегеҙ. Ә юлды кем төҙәтергә тейеш һуң?

— Леспромхоз!

— Ниңә бөтәһен дә леспромхозға ауҙараһығыҙ әле? Хәҙер Аяҙытау леспромхозға ҡарамай бит.

— Улар һеҙҙең ауыл аша ағас ташыуын дауам итә.

— Ысын мәғәнәһендә шайтан ҡуласаһы! Минең атай мәрхүм бындай хәл килеп тыуһа, ырыҡтыҡын мырыҡҡа ауҙарыу, ти торғайны. Төплөрәк уйлап, беҙҙә совхоздың мал һимертеү бүлексәһен ойошторһағыҙ, ағастан тормош кәрәк-яраҡтары эшләй торған оҫтахана асһағыҙ, кешеләргә кәсеп булыр ине.

— Ә беҙ бының өсөн ҡайҙан аҡса алырға тейеш?

— Был турала уйлау, аҡса табыу, ойоштороу, эшләтеү — һеҙҙең бурыс. Бында шуның өсөн ҡуйылғанһығыҙ.

— Ашараҡ һөйләй башланығыҙ, Биктимеров иптәш! Беҙ, һеҙҙеңсә, бында Аяҙытау тураһында ғына уйлап ултырырға тейеш инде? Әйтерһең, беҙҙең бүтән эш юҡ!

Солтанғужаның йәне көйә башланы. Ниңә шул тиклем туң, кирегә бөткән был етәкселәр?

Уның яҫы ҡаштары йәмрәйҙе, ҡабаҡтары шешмәкләнеберәк торған күҙҙәре нығыраҡ ҡыҫылды.

— Ниңә уйламаҫҡа, кәрәк саҡта районда Аяҙытау ауылы, уның тирәһендә матур-матур ерҙәр барлығын бер ҙә онотмайһығыҙ бит!

— Тел төбөгөҙҙө аңлап етмәнем.

— Бик яҡшы аңлайһығыҙ һеҙ! Ҡала коммерсанты Аҡташ аҡланына кем рөхсәте менән зиндан төҙөтөп ята?

Урынбаҫарҙың туң йөҙөнән мыҫҡыллы йылмайыу сағылып үтте.

— Бына ҡайҙа һуҡтыраһығыҙ икән! Тик бына ул аҡландың кемдеке булыуын белмәйенсә хәбәр һөйләйһегеҙ.

— Нисек белмәй ти инде? Ауылдың айырылмаҫ бер өлөшө ул аҡлан! Шуның һыуын эсеп ғүмер итәбеҙ.

— Телгә һәр саҡ шәп булдығыҙ, Солтанғужа Биктимерович... — Тешен ҡыҫып-ҡыҫып алыуынан урынбаҫарҙың ҡыҙып китеүҙән көскә тыйылып ултырыуын һиҙеү ҡыйын түгел уны. — Ә бит Аҡташ аҡланы тирәһе гослесфонд ере икәнен дә белмәйһегеҙ. Ул ергә Аяҙытау халҡы түгел, лесхоз хужа.

Солтанғужа ҡалҡына биреп ҡуя, ҡуйы яҫы ҡаштары аптырауҙан юғары сөйөлә.

— Бына тағы бер хәбәр! Хәҙер килеп, ауыл халҡы ғүмере баҡый йәшәгән еренә, эсер һыуына ла хужа түгелме ни?

Урынбаҫар тороп китте, тәҙрә эргәһенә барып, Солтанғужаға арты менән баҫты. Аҙыраҡ өндәшмәй торғас, боролоп ҡарамайынса ғына һораны:

— Бер әйткәнде яңынан ҡабатлау кәрәкмәйҙер бит, Биктимеров иптәш?

Ҡыйын ине был кеше менән һәүетемсә һөйләшеү. Солтанғужа ла урынынан торҙо.

— Әйтеү итеп әйтәм: ул коммерсантығыҙға Аяҙытау тирәһендә барыбер көн күрһәтмәйәсәкбеҙ! Лаптев баярҙы туҙҙырған олатайҙарыбыҙ тиклем генә булырбыҙ әле!

Кабинет ишеген япҡан ыңғайы ул урынбаҫарҙың теш араһынан:

— Ҡарап ҡарарбыҙ! — тип уҫал ыҫылдағанын ишетте.

Ата-бабаларының һөйәге ятҡан ауылы һәм ауылдаштарының яҙмышы тураһындағы уйҙар бер генә минутҡа ла тынғылыҡ бирмәй ине шул Солтанғужаға. Һүҙҙәре ташҡа бәргән борсаҡ һымаҡ юҡҡа осорон белһә лә, ошо уйҙары ҡыуалап индергәйне хакимиәткә. Башҡа ҡайҙа барһын? Өфөлә, урындағы властарға бөтә хоҡуҡтар бирелгән, уларға мөрәжәғәт итегеҙ, тип әйтәсәктәр. Бындағылар, ана, «Башлес»ҡа ла лесхозға ауҙара. Харап инде, бер уйлаһаң, республикабыҙ суверенитет яуланы, беҙ хәҙер үҙ алдыбыҙға йәшәйбеҙ, тип яр һалған булабыҙ, ә ил, ер, халыҡ менән идара итеүсе хужа юҡ. Аяҙытауҙың яҙмышын хәл итеү ҙә ҡулдарынан килмәгәс, ауыл, район хакимиәттәренә бирелгән хоҡуҡтарҙың бысағыма кәрәге бармы?! Ана, бер килмешәк коммерсант бөтәһен дә еңә, уның һүҙе — һүҙ, сөнки уның ҡулында аҡса бар, ә район етәксеһе, беҙ аҡсаны ҡайҙан алырға тейеш, тип мысыр хәйерсеһе шикелле ултыра. Шуға күрә ул, әлеге коммерсант мул ғына «тамыҙһа», илен-ерен һатырға ла әҙер.

Район хакимиәтенә инеү Солтанғужаны ныҒыраҡ ярһытты ғына. Йөрәге тулауын тыя алмайынса, ҡайҙа баҫҡанын белмәй, район үҙәгенең осона табан атланы. Ҡайтыу өсөн юл ыңғайы машинаны, шунда бармайынса, тотоп булмаясаҡ.

Тирә-яғына зәңгәр шыршылар теҙелеп үҫкән, юлдан эстәрәк ултырған ҙур ағас йорт тәңгәленә еткәс, Солтанғужа туҡтап ҡалды. Урман хужалығының контораһы ине был. «Инеп сыҡҡанда инде... Быныһы ниҙәр һөйләр икән? Фәтүә булыуға булмаҫ, шулай ҙа һуғылайым әле».

Солтанғужа контора соланының күтәрмәһенә менергә лә өлгөрмәне, өҫтөнә күн куртка кейгән, ҡыҙғылт битенән көс һәм йәшлек дәрте һирпелеп торған утыҙ йәштәр тирәһендәге ир ишекте хужаларса киң асып килеп сыҡты, һәм уның йылғыр ҡарашы Солтанғужаны эләктереп тә алды.

— О-о-о, аязытауский!

Күтәрмәлә шулай тип киң йылмайып баҫып торған кеше лесхоз директоры Белов ине. Ул, бында хужа вазифаһына килгәнгә тиклем, байтаҡ ваҡыт лесничий булып эшләне, шуға күрә Солтанғужаны яҡшы белә ине.

— Ниндәй елдәр ташланы? — тип ҡулын һондо ул.

Был алсаҡ, бер ҡатлыраҡ рус егетенә эске бер ихтирам менән ҡарай ине Солтанғужа. Урманға мөкиббән киткән, эшен яҡшы белә, кеше менән ихлас һөйләшә. Шуға күрәлерме, Солтанғужаның һүҙҙе алыҫтан уратып торғоһо килмәне.

— Ел түгел, нужа ҡыуалап йөрөтә, Белов туған.

— Эш ниҙә? Аяҙытауҙа һигеҙ йыллыҡ мәктәптең бөтөрөлөүен, һеҙҙең эшһеҙ ҡалыуҙы беләм дә белеүен…

— Эш мәктәптә түгел, ерҙә.

Белов уға һынамсыл ҡарап алды.

— Ҡыҙыҡ. Әллә кабинетҡа инеп һөйләшәбеҙме?

— Рәхмәт, бында ғына һөйләшһәк тә ярар. Миңә Аяҙытауға ҡайтып етәһе бар.

— Улайһа, һөйләгеҙ. — Белов, солан ҡашағаһына терһәкләнеп, уны тыңларға әҙерләнде.

— Беҙҙең ауыл эргәһендәге Аҡташ шишмәһе сығып ятҡан аҡланды beләһең бит инде һин?

— Беләм, әлбиттә. Шишмәнең урғылып сыҡҡан еренән һыу эскән дә бар. — Бик ихлас яуап ҡайтарһа ла, зирәк егеттең сырайында һағайыу билдәләре лә сағылып ҡалды.

— Ана шул аҡландың хужаһы кем?

Беловтың зәңгәр күҙҙәренең ҡарашы берсә етдиләнде.

— Мин һеҙҙең ни әйтергә теләгәнде аңланым шикелле. Ниңә ул ерҙе ҡала кешеһенә бирҙегеҙ, тип әйтмәксеһегеҙ. Шулаймы?

— Шулай.

— Быны аңлатыуы еңел дә, ҡыйын да… — Белов, ҡалын иренле ауыҙын бөрөп тотоп, аҙ ғына уйланып торҙо, шунан, турайып баҫып, ҡулын Солтанғужаның яурынына һалды. — Һеҙ мине дөрөҫ аңларға тырышығыҙ, яраймы?

— Ярай, ярай, әйтеп ебәр.

— Аҡташ аҡланын Аяҙытау халҡы электән үк үҙенеке һанаған һәм был дөрөҫ тә. Кеше үҙенә тормош биреүсе шишмә сыҡҡан ергә бүтән төрлө ҡарай аламы ни? Икенсе яҡтан... гослесфонд тигән бер төшөнсә бар. Күптәр уның мәғәнәһен аңлап еткермәй. — Һуңғы һүҙҙәрен әйткәс, Белов хәйләкәр йылмайып ҡуйҙы. — Бына һеҙ аңлайһығыҙмы уның мәғәнәһен?

— Аңлаған кеүекмен, — тине Солтанғужа икеләнеберәк, сөнки директорҙың һүҙҙе ҡайһы яҡҡа бороп ебәрергә самалауын аңғарып еткермәй ине. — Әүәл-әүәлдән дәүләт урманы булған, хәҙер ҙә бар.

— Мафия тигән һүҙҙе ишеткәнегеҙ бармы?

— Булһа... уның Аҡташ аҡланына ни ҡыҫылышы бар?

Белов лесхоз тәңгәленә килеп туҡтаған машинаға күҙ ташланы ла йылҡылдап торған йомшаҡ һары сәсен һыйпаштырҙы, йәнә көрһөндө, тамағын ҡырҙы.

— Әлеге бер балыҡ башы. Әйттем бит мин һеҙгә, дөрөҫ аңларға тырышығыҙ, тип. Һүҙҙе өр-яңынан башлау кәрәкмәйҙер бит?

Солтанғужа елкәһен тырнаны. Әлбиттә, аңлай ул бөтәһен дә, тик быны менән генә Аҡташ шишмәһен һәләкәттән ҡотҡарып булмай ҙа баһа.

— Әллә инде... Ул мафия тигәнең, әгәр ихтыяр ҡуйһаң, тора-бара кешенең һулар һауаһын да үҙ ҡулына алыуы бар бит әле.

1. Солтанғужа Биктимеровичтың хакимиәткә килеүенең сәбәбе нимәлә? Һөйләгеҙ.
2. *Мысыр хәйерсеһе, тамыҙыу* тигән һүҙҙәрҙең мәғәнәһен аңлатығыҙ.
3. Килеп тыуған мәсьәләгә Беловтың мөнәсәбәтен аңлатығыҙ.
4. Хәкимиәт урынбаҫарына характеристика бирегеҙ һәм үҙ фекерегеҙҙе әйтегеҙ.
5. Был өҙөктә барған хәл-ваҡиғалар тураһында фекер алышығыҙ.

**128-се күнегеү.** Әҫәрҙең I бүлегендәге ҡалын хәрефтәр менән билдәләнгән өлөшөндә ниндәй һынамыш бирелгән? Һеҙ тағы ниндәй һынамыштарҙы ишеткәнегеҙ бар? Ошо уҡ өлөштә фразеологик берәмектәрҙе табып, мәғәнәләрен аңлатығыҙ.

## II

Машинанан төшкән ят әҙәм йыраҡтан уҡ ҡулын күтәреп һүҙ ҡушты:

— Урман батшаһына сәләм!

— Сәләм, сәләм. Килдегеҙме? — Белов уға күрешер өсөн ҡулын һондо. — Мин һеҙҙе кисә үк көткәйнем.

— Һеҙ әйткән әйберҙе Нефтекамскиға барып алып ҡайтырға тура килде. Ҡайҙа ҡалдырып китәйек?

Директор:

— Хәҙер... бер генә минут, — тип һөйләнде лә контораһына инеп китте.

Солтанғужа, бында инеүем дә бушҡа булды, тип йөрәге әсенеп, күтәрмәнән төшә башлағайны, Белов кире килеп тә сыҡты.

— Бына һеҙ һораған яҙыу, — тип теге кешегә ҡағыҙ һондо ул. — Алып килгән әйберегеҙҙе машиналар ихатаһына индереп ҡалдырығыҙ. — Шунан Солтанғужаға өндәште: — Был машина Аяҙытауға бара, ултырып ҡайта алаһығыҙ.

— Ярай, рәхмәт. Беҙҙең яҡҡа юл төшһә, миңә һуғыл, һүҙҙең осона сыға алманыҡ бит.

— Барырмын, барырмын, һөйләшеп тә ултырырбыҙ, — тип йәнә ихласлыҡ күрһәткән булды директор.

Машина, лесхоздың гараждары, барлыҡ техникаһы урынлашҡан ихатаға боролоп инеп, тимер-томор тултырылған бик ауыр өс йәшникте бушатҡас, Солтанғужа кузовтағы йөк өҫтөнә менеп ултырҙы...

Бына әле, күңел болоҡһоуҙары һаман баҫылмайынса, машинаға бәрелгән елгә арҡаһын ҡуйып ҡайтып килеүе. Район үҙәгенә барыуынан бер файҙа ла булманы, ваҡыты әрәмгә үтте. Көнө лә боҙолоп тора бит әле, ҡайтып еткәнсе, ямғыр яумай торһа ярай ҙа.

«Килде бит заман, — тип уйлай Солтанғужа, — бер ҡайҙа ла дөрөҫлөк табырмын тимә. Коммунистарҙы яманлаһалар ҙа, ул саҡта райсовет башлыҡтары ла, лесхоз етәкселәре лә райкомдан шөрләй ине. Партия конференциялары, район советы сессиялары шаулап-гөрләп үтә, унда ҡайһы берәүҙәрҙе маҡтайҙар, икенселәрен тәнҡитләйҙәр, һәм ошонан аҙаҡ тормош сафланып, яңырып ҡалған кеүек була ине. Хәҙер бөтәһенә лә ирек ҡуйылған: теләһәң — эшлә, теләмәһәң — юҡ, алдап көн итәһеңме, урлап байыйһыңмы, бер кем күрмәй ҙә, белмәй ҙә. Һәр кем, урам уртаһында тороп, һис кемдән

ҡурҡмайынса, Мәскәүҙә ултырған иң ҙур түрәләрҙән алып иң түбәндәгеләренә тиклем донъялағы иң әшәке һүҙҙәр менән һүгергә мөмкин, тик бынан бер тинлек тә файҙа юҡ... Шулай ҙа ҡайһылай итеп теге коммерсантты Аҡташтан биҙҙереү юлын табырға? Бөтөн ауыл халҡын йыйып, сход үткәреп, кешеләрҙе уға ҡаршы күтәргәндә... Юҡты уйлап киләм шунда. Эскелектән башы-күҙе тонған, һеңгәҙәгән бәндәләр төкөрә һинең сходыңа ла, Аҡташыңа ла. Улар бер яртыға ата-инәһен һатып ебәрергә мөмкин... Их, тағы ла уҙған быуаттағы хәлгә тарырбыҙмы икән ни? Директор, йәнә өс кеше урын һорап йөрөй, тине бит. Уларына ла бер һүҙһеҙ бирәсәктәр урынды. Бирмәй һуң, күрҙем бит, былары лесхозға әйберҙәр килтереп ырғытты, Нефтекамскиҙан барып алдыҡ, тинеләр, директор уларға кәрәкле ҡағыҙҙы үҙе сығарып биреп тора. Ауыл һәм кешеләр яҙмышы — шул уҡ ил яҙмышы бит инде. Ниңә саҡ ҡына яйлап ҡарамайҙар икән?..»

Машинаның кабина башына ямғыр тамсылары тыпылдап бәрелергә кереште. Аяҙытауға етергә биш-алты саҡрым бар ине әле. Һыуландырып ҡуямы инде был? Заготконторанан сығыу менән хакимиәтенә, лесхозына инеп тормайынса юлға сыҡһа, көн ҡорола ҡайтып еткән булыр ине. Йөрөнө шунда, эш ҡырған кешеләй булып. Хәҙер бер эшһеҙ урамда тороп ҡалыусының һүҙенә ҡолаҡ һалдылар ти...

Ямғыр шәп үк яуа башланы. Солтанғужа плащ яғаһын торғоҙоп ҡарағайны ла, ул ғына ҡотҡарамы ни. Ауылға еткәндә, ул лысма һыу булғайны инде.

Аҡташ аҡланына бара торған юлға боролғас, машина туҡтаны ла шофёр кабина ишеген асып һораны:

— Төшәһеңме?

Шишмә башы бынан бер саҡрым самаһы ситтәрәк. Унда кемдеңдер төҙөлөш материалдары ташыуын ишеткәс, ҡыҙыҡһыныуын тыя алмайынса, бер тапҡыр барып киткәйне Солтанғужа, ҡабат һуғыла алғаны юҡ. Ишетеүенсә, унда хәҙер төҙөлөш эштәре башланған, һыуланғас һыуланылды, барып күргәндә инде...

— Әйҙә, унда төшөрмөн, — тип ҡул һелтәне ул.

Саҡ ҡына барғайнылар, ҡаршыға ялтлап торған ҡара «Джип» килгәне күренде. Йөк машинаһы юлдан ситкә сығыбыраҡ туҡтау менән, кабинаның уң яҡ ишеге асылып, унан баяғы күн курткалы кеше һикереп төштө лә шулай уҡ туҡтап ҡалған «Джип» эргәһенә ашыҡты.

«Джип» тәҙрәһенән оҙон сәсе шыма итеп артҡа таралған һаҡалтай баш тығылды. Ямғырҙың тыптырлап кабинаға бәрелеүе аша уның:

— Шунан, нисек? — тип һорағаны ишетелде.

Күн курткалының яуабы Солтанғужаның ҡолағына сала-сарпы ғына килеп етте:

— Бөтәһе лә табылды... бынамын тигәне... Беловҡа ҡалдырҙым... Уныһы ла бар... һөйләштем... әҙерләп ҡуясаҡтар...

Һаҡалтай башын тәҙрәнән алды ла машинаһын ҡуҙғатты. Тәңгәлдәренән уҙғанда, Солтанғужа «Джип»тың ямғыр тамсылары сыбарлаған тәҙрәһе аша һаҡалтай эргәһендә ултырған ҡыҙыҡайҙы күреп ҡалды. Таныш кеүек тойолдо ул. Бәй, Закуандың Рузалиәһе түгелме һуң? Ниңә был әҙәм эргәһенә ултырып йөрөй икән? Ә-ә-ә, Аҡташта йорт төҙөтөүсе әҙәм уларҙа фатирҙа тора, тип ишеткәйне бит... Бына, әй, Закуанға ла рәте табылып тора. Урман участкаһы ябылғандан һуң, начальниклығынан файҙаланып, йыйыштырып йыштырған бүрәнә, таҡталарын һатып бөтөүгә, был әҙәм килеп сыҡҡан.

Шулай уйланып барғансы, машина Аҡташ аҡланына килеп туҡтаны. Солтанғужа машина башынан төштө лә, ямғыр һаман һибәләүгә ҡарамаҫтан, тирә-яғына күҙ йүгертеп туҡтап ҡалды. Ғәжәпләнмәҫлек тә түгел ине шул. Бесәнен сабып алғандан аҙаҡ, йәм-йәшел ҡурпыға күмелгән шишмә башының, дәжжәл ҡупҡандағы шикелле, аҫты-өҫкә килгән. Әллә ни тиклем ер ҡаҙып, тупрағы тауҙай итеп өйөп ҡуйылған. Тегендә лә, бында ла тимер-бетон блоктар, кирбес, брус, бүрәнә, таҡталар өйөлгән. Бер яҡ ситтәрәк һарай кеүек нәмә күренә. Күтәргес кран оҙон муйынын юғары сөйөп туҡтап ҡалған. Тағы әллә ни хәтлем техника, ҡом, ҡырсынташ өйөмдәре күҙгә ташлана.

Солтанғужа өңрәйеп ятҡан соҡорҙарға яҡыныраҡ барып, эйелә биреп күҙ ташланы. Ике метр самаһы тәрәнлектә ҡаҙылған нигеҙ урынына эре-эре тимер-бетон блоктар һалынған. Артында таныш тауыш ишетелде:

— Солтанғужа ағай, һин түгелме һуң?

Боролоп ҡараһа, машина эргәһендә Закуан баҫып тора. Йәшел штурмовка кейгән, көпләмәһен башына ҡаплаған.

— Мин, мин... Ошо машинаға ултырып ҡайтҡайным да... — Солтанғужа, ҡабаланмай ғына атлап, уның эргәһенә килде. — Иртәнсәк ней арыу тора ине, көндө әйтәм, яуҙы ла ебәрҙе бит, лысма һыу булынды, — тип, яурындарын һикерткеләне.

— Районға барғайнықмы ни?

— Эйе... Йөрөйөм инде шунда, юкты бушка ауҙарып. Байтаҡ сысҡан тиреһе йыйылғайны, шуларҙы тапшырҙым.

— Хаҡы нисегерәк һуң уның хәҙер? Йөрөгән байы бирәләрме?

Солтанғужа ҡулын һелтәне.

— Һин һорама, мин әйтмәйем инде... Улар ҙа, аҡса юҡ, эш хаҡы ла ала алмайбыҙ, тип ултыралар.

Ямғыр тымып, күк йөҙө саҡ ҡына асыла төшкәндәй итте. Таҡтанан эшләнгән һарай аръяғында вагонға оҡшаған нәмә тора икән. Шунан бер-бер артлы кешеләр сыға башланы. Ҡайһы берҙәрен Солтанғужа танымай, ауылдыҡылар ҙа күренә.

Закуан да — ҡасандыр Биктимеровта уҡыған кеше, бик ҡылтым холоҡло булһа ла, тура килгәндә, уға иғтибарлы булырға, ихтирам күрһәтергә тырыша.

— Шуны әйтәм әле, Солтанғужа ағай, юҡ-бар артынан йөрөгәнсе, ошонда килеп эшкә тотонһаң, тим. Һинең ҡулыңдан любой эш килә бит инде. Хужа бик егет кеше, һәйбәт эшләүсегә ҡутараһынан түләй.

Уның һүҙен ишетмәгән кеүек, Солтанғужа уға бөтөнләй икенсе һорау бирҙе:

— Нигеҙен бик ныҡ эшләтә был кеше. Өйө нисә ҡатлы булмаҡсы?

— Хәтәр инде ул, ағай, заман байҙарыныҡынса — өс ҡатлы итеп һалдыра. Ике ҡаты кирбес, өҫтәгеһе бүрәнә була, ти.

— Һы... ул тиклем йортто ни эшләтергә уйлай икән? Бындайҙы ишеткән дә, күргән дә юҡ.

— Беҙ ҡайҙан күрәйек инде, ағай, ундайҙы. Аҫҡы ҡатта сауна, бассейн эшләү ҡаралған.

— Районда ишеттем әле, ошо тирәнән йәнә өс кешегә ер бирмәкселәр икән. Улары ла ошондайыраҡ йорт һалдырһа...

Улар эргәһенә килеп, тәмәке быҫҡытып торған Сәмиҡ, был һүҙҙе ишеткәс, ҡыуанысын йәшерә алманы:

— Былай булғас, йәшәйбеҙ икән әле!

— Ниңә улай тиһең? — Солтанғужа уға табан боролдо.

Сәмиҡ — бик оҫта егет, тәҙрә яҡтары, рамдар, ишектәр эшләү тиһеңме, өй гәрнисләп, фронтондарҙы кәпләү тиһеңме — бөтәһе лә ҡулынан килә. Тик бына, утыҙын үтһә лә, һаман яңғыҙаҡ йөрөй, тапҡан да таянғанын эсеп, кәйеф-сафа ҡороуға бөтөрә.

— Әйтәм шул. Эш була, эшләгәс, аҡсаһы ла килә.

— Аҡса булғас, эсергә лә табыла, тиһең инде.

— Знамы!.. Унһыҙ эш һанһыҙ, оҫта исемен дә йөрөт, эсмә лә! — Сәмиғ тегеләй-былай ҡалтайған һарғылт тештәрен ыржайтып шарҡылданы. — Солтанғужа ағай, ниңә һаман шул уҡытыусылығыңды ташламайһың? Мәктәптән дә киттең бит инде, кешегә гел аҡыл өйрәтеү ялҡытмаймы?

Уның «мәктәптән дә киттең» тигән һүҙҙәре Солтанғужаның ауыртҡан еренә тейә, шулай ҙа тауышын күтәрмәҫкә тырыша.

— Их, ҡустым, ҡустым, әле көләһең дә, Аҡташ шишмәһе ҡороп, эсер һыуың ҡалмаһа, нишләрһең икән?

— Кит юҡты, һыу бөтә тиме ни! Ныу әйтәһең дә хәбәрҙе, ағай!

Закуан да, һағайған һымаҡ ҡиәфәт алып, һүҙ ҡыҫтырҙы:

— Һыу бөтмәҫ тә инде ул бөтөүен, шишмәнең кәмеүе бар. Өйөнә торба буйлап һыу индереү ҡаралған шикелле.

— Бына шулай дүрт өйгә, уларҙағы бассейндарға һыу ҡыуҙыра башлаһалар, былай ҙа йылдан йылға көсһөҙләнгән Ҡарандан ни ҡалыр тиһең. Унан инде ялан яғында йәшәүселәр шикелле, ҡойо ҡаҙырға тотонорбоҙ.

— Табылдының һыуы кем менән уртаҡ?

— Минең атай мәрхүм, әүәле бер ярамһаҡ ярлы түрәгә бирҙән-бер атын биргән дә, үҙе ергә ултырып, осаһы менән шыуған, тип һөйләй торғайны. Шуның шикелле машиналар, мал кисеп йөрөгән, таҡта ярыу цехының бысрағы буталған һыуға көнөң ҡалһа, һүтәһең инде.

Улар эргәһенә тағы өс-дүрт эшсе килеп баҫҡайны.

— Мин белә-белгәндән бирле, урман бөтә, һыу бөтә, тип хәбәр һөйләйҙәр, — тип шуларҙың береһе һүҙгә ҡушылды. — Бөтһә тағы, ана, Сахарала ла йәшәй кешеләр. Ике ҡулыма эш булһа, һыуы табылыр ине әле!

**— Их, егеттәр, егеттәр, — Солтанғужа көрһөнөп, башын һелкеп ҡуйҙы, — бигерәк ҡыҫҡа уйлайһығыҙ шул. Әүәле атай-бабайҙарыбыҙ, ерен-һыуын сит кешеләргә бирмәҫ өсөн, юҡҡа ғына яуға күтәрелгән, ҡан түккәнме ни? Бына әле...**

**Сәмиғтың йәнә шарҡылдап көлөүе уның һүҙен бүлдерҙе:**

**— Солтанғужа ағай, һин беҙҙе бынау ҡаланан килгән һаҡалтайға ҡаршы баш күтәрергә саҡыраһыңмы әллә?**

**Икенсе берәүһе уның һүҙен элеп алды:**

**— Беҙҙең замандың Батыршаһы булырға теләй ағайым!..**

**Етек сәстәре елкәләрен ҡаплаған, өҫтәренә кейгән иҫке-моҫҡо кейемдәре бысранып бөткән, эсеүҙән, тартыуҙан ваҡытынан элек оло төҫө ингән ир-ат аһаһайлап көлөп ебәргәс, Солтанғужаның йөрәге ҡыҫылып ҡуйҙы. Улар бит күптән түгел генә уның уҡыусылары ине, һигеҙ йыл буйына һалған тырышлыҡтары юҡҡа ғына булдымы икән ни?.. Әллә тормошта барған мәғәнәһеҙ ығы-зығы зиһенен, зауҡын шулай бик тиҙ түбән кимәлгә төшөрәме? Район хакимиәте башлығы урынбаҫарына, ул коммерсантҡа көн күр-һәтмәйәсәкбеҙ, тип әйтте лә әйтеүен, ҡулында миллиондар уйнатҡан кешегә ҡаршы ҡуйырҙай көс ҡайҙа? Бынау меҫкен хәленә төшкән ир-ат менән ни ҡыла алаһың?**

**Башынан ҡайһы аралалыр шундай уйҙар үтте Солтан-ғужаның. Әле былар менән һүҙ оҙайтыу файҙаһыҙ ине.**

**— Беҙҙе шундай хәлгә килтереп еткергәндәр, артығыҙға ныҡлап килеп төртөлмәйенсә, һис ни аңламаясаҡһығыҙ. Тик ул саҡта һуң булып ҡуймаһын ине, — тип, бәхәсте шуның менән бөткәнгә һанап, Закуандан һораны: — Беҙгә әле бер ят машина осрағайны, өйҙө төҙәтеүсе шул һаҡалтай кешеме әллә?**

Уға яуап бирерҙән алда Закуан:

— Йәгеҙ әле, машиналағы йөктө тиҙ генә бушатығыҙ ҙа эшкә тотоноғоҙ, — тип бойорҙо, һаман таралышмай һөйләнеп торған эшселәргә. Улар, ялҡау ҡуҙғалып, машина яғына ыңғайлағас ҡына яуап бирҙе: — Эйе, шул кеше, Талипов Дамир тип йөрөтәләр. Үҙебеҙҙең башҡорт, тик, ҡалала үҫкәс, башҡортса һөйләшеүе самалыраҡ. Бая мин әйткән тәкдимгә нисегерәк ҡарайһың, ағай? Эш мәсьәләһендә әйтәм. Әгәр уйың булһа, хужа менән үҙем һөйләшәм.

Солтанғужаның тел осона: «Еремдең ҡанын эсергә килгән замана байына ялланып эшләп йөрөргә башыма тай типкәнме ни минең», — тигән һүҙҙәр килә, ләкин тыныс ҡына икенсе төрлө яуап бирә:

— Минең кешегә ялланып эшләп йөрөр сағым үткән инде, Закуан ҡустым. Пенсия ала башларға ла барлы-юҡлы бер йыл ваҡыт ҡалған.

— Уныһы үҙ ихтыярыңда инде, ағай. — Саҡ ҡына ике-ләнгән һымаҡ торғас, Закуан, яҡын-тирәлә кеше-ҡара юҡмы тигәндәй, ян-яғына күҙ йүгертте лә тауышын түбәнәйтеберәк әйтте: — Бында көн дә йөрөп эшләү ҡыйын булһа, йәнә бер кәсеп бар ҙа барлығын…

— Унывы ниндәйерәк эш?

— Һәр кешегә ҡуша торған эш тә түгел инде ул. — Закуан тағы ла әйтергәме, әйтмәҫкәме тигән һымаҡ торҙо. — Хужа миңә яҡшынан тәҙрә, ишек яҡлыҡтар әҙерләтергә ҡушҡайны. Үҙең беләһең, ағай, яҡын-тирәлә тәҙрә яҡлыҡ түгел, мунса бурарлыҡ та ҡарағай ҡалмаған.

— Ҡырып бөткәс, ҡайҙан булһын. Бөрйән йә Биләрет еренә сыҡмайынса, таҡталыҡ ағас табып булмай хәҙер.

— Былай тигәйнем: берәй солоҡ ҡарағайы тапҡанда, һәйбәтләп ярғылаһаң, бөтә өйөнә етер ҙә ҡуйыр ине лә.

Солтанғужа уға аптырап ҡараны.

— Уны ҡайҙан табаһың? Солоҡ ҡарағайҙары бөткән бит инде ул.

Теге Яланҡай һыртында берәү бар бит, шуны йығайыҡ. Барыбер хәҙер уны ябыусы юҡ, тип әйтергә уйлағайны ла, Закуан телен тешләне. Солтанғужа ыҡҡа килер кеүек түгел, йә, унын хужаһы бар бит, Ҡарамыш ҡарт үлһә, улына ҡаласаҡ, хаҡыбыҙ юҡ, фәлән дә төгән, тип һүҙ оҙайтыр.

— Шулай инде унывы, шулай, — тип унын һүҙен йөпләүҙе хәйерле күрҙе Закуан. — Ярар, ағай, йомош-юл төшһә, аптырап торма, кил. — Ул Солтанғужаның ауылда абруйы ҙур икәнен, һәр һүҙе үтемле булыуын белә һәм һөйләшеүҙе йәпле ослап ҡуйырға тырыша ине.

Бында килеүҙән дә күңеленә һиллек өҫтәлмәне Солтанғужаның, әллә ниндәй яманһыу вайымһыҙлыҡ тойғоһо биләп алды. Әйтерһең, уны ниндәйҙер сит-ят ергә килтереп ырғытҡандар ҙа, унан һис ниндәй ҙә ҡотолоу әмәле юҡ.

1. Ауыл халҡы, тирә-яҡтағы тәбиғәт яҙмышы өсөн Солтанғужаның борсолоуын аңлатығыҙ.
2. Сәмиҡҡа, Закуанға характеристика бирегеҙ. Улар кеүек кешеләр тураһында фекерҙәрегеҙҙе әйтегеҙ.
3. Эскелектең, эшһеҙлектең ауыл халҡы тормошона кире йоғонто яһауын аңлатығыҙ. Хәҙерге заманда бындай проблемалар актуалме? Ни өсөн?
4. Әҫәр ни өсөн «Һуңғы солоҡ» тип атала?
5. Әҫәрҙең идеяһына ауаздаш тағы ниндәй әҫәрҙәр уҡынығыҙ?
6. Әҫәрҙең үҙегеҙгә оҡшаған бер өлөшөн рус теленә тәржемә итегеҙ.
7. «Һуңғы солоҡ» әҫәренән һеҙ үҙегеҙ өсөн ниндәй фәһем алдығыҙ? Был турала фекер алышығыҙ һәм фекер йөрөтөү тибындағы инша яҙығыҙ.

**129-сы күнегеү.** II бүлектәге ҡалын хәрефтәр менән бирелгән һөйләмдәрҙә күсмә мәғәнәле һүҙҙәрҙе табығыҙ. Уларҙың тура мәғәнәләрен билдәләгеҙ. Ошо уҡ бүлектән өндәш һәм инеш һүҙҙәре булған өсәр һөйләм күсереп алығыҙ, мәғәнәләрен асыҡлағыҙ.

## СОЛОҠ

Солоҡ — үҫеп ултырған ағасты соҡоп яһалған умарта. Солоғо булған ағас солоҡ ағасы тип йөрөтөлә. Солоҡ, ғәҙәттә, ҡарағайҙа яһала. Был маҡсатта кәмендә 150 йыл һәм унан да күберәк йәшәгән, ерҙән 10 метр күтәрелгәс, уның йыуанлығы кәмендә 60 сантиметр булған ағас һайлап алына. Ағас ни тиклем йыуан булһа, умартаның эсе шул тиклем ҙур, ҡорт йәшәү өсөн йылы һәм уңайлы була. Солоҡ юныу — бик ҡатмарлы эш. Ул кешенән оҫталыҡ, таһыллыҡ, хатта батырлыҡ талап итә. Сөнки солоҡ ерҙән 4—12 метр бейеклектә була. Солоҡсо ҡарағайға ябай кирәм, ваҡ ҡына күн ҡайыштан үрелгән яҫы бау, ярҙамында мենә. Менгән һайын аяҡ осо менән баҫырлыҡ урын соҡой һәм ботаҡтарҙы ҡырҡа бара. Кәрәкле бейеклеккә еткәс, солоҡсо баҫып эшләр өсөн, ләңге бәйләп ҡуя. Ләңгегә баҫып, үҙен һәм ҡарағайҙы кирәм менән уратып бәйләй. Шунан һуң ғына солоҡ юныу башлана. Тәүҙә бейеклеге 90—110 сантиметр, киңлеге 12—18 сантиметр булған шаҡмаҡ рәүешендә эскә табан соҡой, аҙаҡтан оя эсен мөмкин тиклем түңәрәкләй. Әҙер солоҡтоң бейеклеге бер метр, тәрәнлеге 28—35, киңлеге 25—30, ә стенаһының ҡалынлығы 18—34 сантиметр самаһы була. Солоҡтоң түбәһен һәм төбөн тура түгел, ә тышҡы яҡҡа бер аҙ иңкеүләтеп яһайҙар. Был осраҡта түбәлә йылылыҡ яҡшы һаҡлана, ағас үҙәгенән һыу килә ҡалһа, ул ояға эләкмәй, тышҡа аға. Тышҡы яҡҡа һарҡыу итеп яһалған солоҡ төбөн сүп-сарҙан таҙартыуы ла уңайлы. Әҙер солоҡтоң ауыҙы ҡапҡас менән ябыла. Ул ике өлөштән, юғары һәм түбәнге өлөштән, тора. Өҫкө өлөшө ҡыҫҡараҡ була, ә яҫылығы берҙәй, беләккә тиклем ҡул һыйырлыҡ, ә ҡалынлығы 5—6 сантиметр итеп сабыла.

⇆ **130-сы күнегеү.** Түбәндә бирелгән тел берәмектәрен йә өндәш һүҙ, йә инеш һүҙ урынында ҡулланып, һөйләмдәр төҙөгөҙ. Дүрт һөйләмде рус теленә тәржемә итегеҙ.

Дуҫым, юҡ, бәлки, класташ, ағай, әлбиттә, ысынлап та, күрше, Гөлбикә, эйе, имеш, бәхеткә ҡаршы, Алмаз, милләттәш, һеңлем, ҡустым.

## «ҺӨЙЛӘМ КИҪӘКТӘРЕ МЕНӘН ГРАММАТИК БӘЙЛӘНЕШЕ БУЛМАҒАН ҺҮҘҘӘР» ТЕМАҺЫ БУЙЫНСА ҮТЕЛГӘНДӘРҘЕ ҠАБАТЛАУ

**1.** Һөйләм киҫәктәре менән грамматик бәйләнеше булмаған һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр нисек атала?
**2.** Өндәш һүҙҙәр һөйләмдә ниндәй функция башҡара? Улар эргәһендә ниндәй тыныш билдәләре ҡуйыла?
**3.** Ни өсөн һөйләмдәге ҡайһы бер тел берәмектәре инеш һүҙҙәр, инеш һүҙбәйләнештәр, инеш һөйләмдәр тип атала? Улар һөйләмдә ни өсөн ҡулланыла?

*Мәхмүт УРАЗАЕВ*

### ЕҘ ҠУРАЙ

Йылтырап та торған, эй, еҙ ҡурай,
Ҡулдарыңа алып ҡарама.
Тартыр хужаһы ла кем икән, тип,
Кем икән, тип берүк һорама.

Йылтырап та торған, эй, еҙ ҡурай,
Улғынамдың төҫө-сырайы.
Яуҙа ҡалды үҙе, ҡайтты даны,
Ҡайтты урап тағы ҡурайы.

Йылтырап та торған, эй, еҙ ҡурай,
Нур-моң булып йәшә, улҡайым.
Быуын-быуын ҡалһын был ҡомартҡы,
Берҙе генә, ҡана, тартайым.

**1.** Ҡурай образы шиғырҙа ниндәй мәғәнәгә эйә? *Нур-моң булып йәшә, улҡайым,* тигән юлдарҙы аңлатығыҙ.
**2.** Ни өсөн шиғыр «Еҙ ҡурай» тип атала? Тағы ла ниндәй ҡурайҙар була?
**3.** *Йылтырап та торған, эй, еҙ ҡурай,*
*Улғынамдың төҫө-сырайы,* строфаһының мәғәнәһен асығыҙ.
**4.** Ҡурайҙың күңелде дауалаусы булыуын башҡа әҫәрҙәр миҫалында ҡарағыҙ.
**5.** «Ҡурай» темаһына инша яҙығыҙ.

**131-се күнегеү.** Шиғри тексты сәсмә телмәргә әйләндереп һөйләгеҙ. Һөйләмдәрҙең төҙөлөшөндә ниндәй үҙгәрештәр булыуына иғтибар итегеҙ.

## ТУРА ТЕЛМӘР

### Тура һәм ситләтелгән телмәр

Һөйләм ярҙамында кеше төрлө күренештәр, ваҡиғалар тураһында хәбәр итә, белергә теләй һәм уларға ҡарата үҙ мөнәсәбәтен белдерә. Шуның менән бергә һөйләүсе йәки яҙыусы икенсе кешенең әйткән һүҙҙәрен дә башҡаларға һөйләм ярҙамында еткерә ала. Был осраҡта үҙенсәлекле төҙөлөшлө конструкция — тура телмәр — ҡулланыла.

**Тура телмәр (прямая речь)** — икенсе бер кешенең һүҙҙәрен үҙгәртмәйенсә, туранан-тура яҙыу йәки һөйләп биреү. 1. *Ә быға са Әйҙе башҡорттары: «Урал аръяғында ер ҙә юҡ, донъя шунда барып бөтә икән», — тип йөрөр булғандар.* 2. *Биксәнтәй ҡарт: «Бәй, былай булғас, Урал аръяғында ла донъя бар икән дәһә!» — тип ҡуя.*

Ҡайһы берҙә икенсе бер кешенең һүҙҙәре үҙгәртелә, тик мәғәнәһе генә һаҡланып, әйтелә йәки яҙыла. Был осраҡта **ситләтелгән телмәр (косвенная речь)** ҡулланыла. 1. *Ә быға са Әйҙе башҡорттары Урал аръяғында башҡа ерҙең юҡлығына һәм донъя шунда бөтә икәненә ышанғандар.* 2. *Биксәнтәй ҡарт Урал аръяғында ла донъя барлығына ғәжәпләнеп ҡуя.*

Тура телмәрҙе ситләтелгән телмәргә әйләндергәндә, айырым грамматик үҙгәрештәр барлыҡҡа килә:

1) тура телмәр хәбәр һөйләм рәүешендә булһа, ситләтелгән телмәрле һөйләм *әйтте, әйткән, хәбәр итте* ҡылымдары менән тамамлана. Мәҫәлән, *Башҡорт халҡы француздарҙы Мәскәүҙән ҡыуып сығарғас, батша: «Һеҙ минән нимә һораһағыҙ, мин һеҙгә шуны бирәм», — тигән.* Ситләтелгән телмәрҙә биреләше: *Башҡорт халҡы француздарҙы Мәскәүҙән ҡыуып сығарғас, батша уларҙың һораған әйберҙәрен бирәсәген әйтте;*

2) әгәр тура телмәр һорау һөйләм рәүешендә булһа, ситләтелгән телмәрле һөйләмдең аҙағында *һораны* һүҙе биреләә: *Австрия халҡы быларҙы күреп: «Һеҙ ниндәй халыҡ?» — тип һорағандар.* Ситләтелгән телмәрҙә биреләше: *Австрия халҡы быларҙы күргәс, уларҙың ниндәй халыҡ булыуҙары тураһында һорағандар;*

3) әгәр тура телмәр бойороҡ-өндәү һөйләм булһа, ситләтелгән телмәрле һөйләмдең аҙағында *ҡушты, бойорҙо,*

*саҡырҙы* һүҙҙәре килә: *Шунан ҡарт: «Ай, батша, башҡорттар ҙа бит беҙҙең менән бер ерҙе еҫкәгән, бер һыуҙы эскән халыҡ бит, уларҙан ярҙам һора!» — тигән.* Ситләтелгән телмәрҙә бирелеше: *Ҡарт батшаға башҡорттарҙан ярҙам һорарға ҡушҡан.* (Башҡорт халыҡ ижадынан)

Тура телмәрле һөйләмдә **автор һүҙҙәре** лә (һөйләүсенең йәки яҙыусының һүҙҙәре) була. Тура телмәр автор һүҙҙәренең алдынан да, уртаһында ла һәм унан һуң да килергә мөмкин.

1. Автор һүҙҙәренән алда килеүенә миҫал: *«Ой, ниндәй матур бала, ой, ниндәй һөйкөмлө малай!» — тине ул һоҡланыуын йәшермәй.* (Т. Ғиниәтуллин)

2. Автор һүҙҙәренең уртаһында килеүе: *Юлай старшина һөйләгәндәрҙе сәйәхәт көндәлегенә яҙа барған Лепёхин: «Шәп, бик тә шәп!» — тип өҙлөкһөҙ баш ҡаҡты.* (Я. Хамматов)

3. Тура телмәрҙең автор һүҙҙәренән һуң ҡулланылыуы: *Ҡатын уның артынан эйәрҙе, үҙе һаман һөйләнеүен белде: «Кисер, гәфү ит инде, зинһар!»* (Т. Ғиниәтуллин)

Миҫалдарҙан күренеүенсә, тура телмәр ике яҡтан тырнаҡтар менән айырыла, тура телмәрҙән һуң, автор һүҙҙәре алдынан һыҙыҡ ҡуйыла. Әгәр ҙә тура телмәр яңы юлдан башланһа, бында тырнаҡтар ҡуйылмай, тыныш билдәләренән тик һыҙыҡ ҡына ҡуйыла. Мәҫәлән, *Салауат толпарына һикереп менә лә әйтә:*

*— Ир яҙмышы – ил ҡулында, ил яҙмышы – ир ҡулында. Ҡайҙа халҡым — шунда яҙмышым! — ти.* (Башҡорт халыҡ ижадынан)

Тура телмәрҙәрҙә тыныш билдәләре тулыһынса рус телендәге кеүек.

**132-се күнегеү.** Түбәндәге һөйләмдәрҙән тура телмәрҙе табып билдәләгеҙ, уның килеү урынын күрһәтегеҙ.

1. Сәрүәр уларҙы тағы күрҙе: «Иртәгә миңә ун икеләргә килегеҙ. Барырбыҙ», — тине. *(С. Агиш)*

2. «Ҡар, — тине Мәфтуха һәм урынынан һикереп торҙо. — Атай, ниндәй ҡар? Аҡмы, ҡыҙылмы?» *(С. Агиш)*

3. Айбулат, уға ҡыуанып, көлөп яуапланы: «Бик шәп ҡайттым. Үҙең һау ҡартаяһыңмы?» *(Һ. Дәүләтшина)*

4. «Бейеш батыр бына мин булам», — тигән Бейеш. *(Башҡорт халыҡ ижадынан)*

5. — Ҡасим ағай әле иҫәнме? — тип ныҡышты Вәли. *(Р. Ханнанов)*

6. — Ул мәсьәлә, әсәй, уйланылған ул... — тип ебәрҙе Эмир. *(Р. Өмөтбаев)*

7. Лепёхин, йоҡо аралаш бер ни аңламайынса, ҡото алынып һораны: «Нимә булды? Айыу-фәләнме әллә?» *(Я. Хамматов)*

8. Директор: «Хәҙер... бер генә минут», — тип һөйләнде лә контораға инеп китте. *(Н. Мусин)*

**133-сө күнегеү.** Тура телмәрле биш һөйләм төҙөгөҙ. Уларҙы рус теленә тәржемә итегеҙ.

## Диалог

Ике кешенең һөйләшеүен белдереүсе тура телмәр **диалог** тип атала. Диалогтарҙың үҙенсәлеге шунда: уларҙа автор һүҙҙәре диалогтың башында ғына ҡулланылырға мөмкин, сөнки контекстан әйтелгән телмәр кемдеке икәне бик асыҡ күренеп тора.

*Ҡайтып килә лә һорай:*

*— Балыҡ бештеме?*

*— Ҡайҙан балыҡ бешһен. Балыҡ бирҙеңме һин миңә?*

*— Бирҙем дә баһа.*

*— Ҡайҙан тоттоң?*

*— Тауҙан.*

*— Балыҡ тауҙа булалыр шул.*

*— Утындан килгәндә тоттом.*

*— Юҡты һөйләмә, тауҙа балыҡ булмай, — тип ҡатын иренә ҡаршылаша инде.* (Башҡорт халыҡ ижадынан)

**134-се күнегеү.** Диалогтарҙы дөрөҫ интонация менән уҡығыҙ. Тыныш билдәләренең ҡуйылышына иғтибар итегеҙ.

— Ҡояш, һин кемдән көслө? — тип ҡояшҡа киткән бабай.

— Юҡ, мин көслө түгел, мине болот ҡаплай.

— Болот, һин кемдән көслө?

— Юҡ, мин көслө түгел, минән ямғыр көслө.

— Ямғыр, һин кемдән көслө?

— Юҡ, мин көслө түгел, минән үлән көслө, — тигән ямғыр. *(Башҡорт халыҡ ижадынан)*

**135-се күнегеү.** Бергә ултырған класташығыҙ менән телефондан һөйләшеү диалогын төҙөп яҙығыҙ.

**136-сы күнегеү.** Ситләтелгән телмәрҙе тура телмәргә әйләндереп яҙығыҙ. Тыныш билдәләренең ҡуйылышын аңлатығыҙ.

1. Илдус быйыл һигеҙенсе класҡа уҡырға барасағы тураһында әйтте.

2. Уҡытыусы балаларға мәктәптә тәртипле булырға ҡушты.

3. Гөлсибәр әхирәтенән башҡорт теле буйынса ниндәй өйгә эш бирелеүе тураһында һораны.

4. Салауат үҙенең яугирҙарына һуғышҡа күтәрелергә бойорҙо.

5. Ҡала тормошо тураһында Ғайса ағай Әсҡәттән ентекләп белеште.

6. Йыйылышты алып барыусы Төхвәтуллин залда ултырыусыларҙы тыныслыҡты һаҡларға саҡырҙы.

7. Камил иртәгә ауыл мәҙәниәт йортонда концерт буласағы тураһында хәбәр итте.

**137-се күнегеү.** Түбәндәге диалогтарҙы башҡорт теленә тәржемә итегеҙ.

1. — Вы, верно, нездешние?
— Точно так-с: я вчера только приехала из провинции.
— Вы приехали с Вашими родными?
— Никак нет-с. Я приехала одна.
— Одна! Но Вы так ещё молоды.
— У меня нет ни отца, ни матери.
— Вы здесь, конечно, по каким-нибудь делам?
— ...Я приехала просить милости, а не правосудия. *(А. Пушкин)*

2. — Почему у тебя голова перебинтована?
— Да комар укусил...
— Не может быть из-за комариного укуса такая повязка!
— А брат комара лопатой прихлопнул.

3. — Ты слышал, какая ночью была гроза?
— Нет, а что, сильно гремело?
— Ты представить себе не можешь! Такой был гром, будто небо на землю свалилось.
— Что же ты меня не разбудил? Ты ведь знаешь, что я при грозе спать боюсь.

4. Один человек сидит и считает на пальцах, хватит ли сена прокормит скотину до весны:

— Январь, февраль, апрель…

Сын, слушая это, поправляет отца:

— Отец, ты ведь март пропустил.

Отец, взяв сына за ухо, строго говорит:

— Обязательно тебе нужно было влезть не в своё дело! Если бы не ты, хватило бы корма на зиму.

5. — Простите, вы, случайно, не из аула Алабайтал?

— Нет.

— Значит, мы с тобой земляки.

— Как это?

— Я ведь тоже не из Алабайтала. *(Башкирское народное творчество)*

## «ТУРА ҺӘМ СИТЛӘТЕЛГӘН ТЕЛМӘР» ТЕМАҺЫ БУЙЫНСА ҮТЕЛГӘНДӘРҘЕ ҠАБАТЛАУ

**1.** Текстарҙа тура телмәр ни өсөн ҡулланыла?
**2.** Ситләтелгән телмәр тура телмәрҙән нимәһе менән айырыла?
**3.** Нимә ул диалог?
**4.** Тура телмәрҙә ниндәй тыныш билдәләре ҡуйыла?

## ХӘТЕР ҺАНДЫҒЫНА...

Ере байҙың — иле бай.

* * *

Ере барҙың — еме бар, еме барҙың — име бар.

* * *

Туйынған да — ер, һыйынған да — ер.

# ЙӘЙ

*Фәүзиә РӘХИМҒОЛОВА*

## БАЛ ҠОРТО ҺӘМ КҮБӘЛӘК

Осалар болон буйлап
Бал ҡорто һәм күбәләк.
Ҡайҙа матур бигерәк,
Баллы сәскә күберәк.

Жыж-жыж килә бал ҡорто:
«Килдем, — ти, — бында эшкә.
Саҡырып тора мине
Ал, зәңгәр, ҡыҙыл сәскә».

Күбәләк оса ары,
Ҡуна гөлдәргә тағы.
«Мин дә, — ти, — тик тормайым,
Болондо матурлайым».

**1.** Шиғырҙа тәбиғәттең ниндәй мәле һүрәтләнә?

**2.** Бал ҡортоноң да, күбәләктең дә тәбиғәт күрке икәнлеген иҫбат итегеҙ.

**3.** Башҡорт халыҡ ижадында күбәләккә, бал ҡортона бәйле мәҡәл-әйтемдәр бармы? Иҫегеҙгә төшөрөп, әйтегеҙ.

Ⓟ **4.** Тәбиғәткә экскурсияға сығығыҙ, бал ҡорттарының, күбәләктәрҙең тормошон күҙәтегеҙ. Башҡа бөжәктәргә лә, шулай уҡ ҡоштарға һәм үҫемлектәргә лә иғтибар итегеҙ. Уларҙы үҙенсәлектәренә ҡарап, исемләп беләһегеҙме?



## Шакир ЯНБАЕВ

## (1925 — 2005)

Шакир Махиян улы Янбаев 1925 йылдың 29 ноябрендә Күгәрсен районы Бикбулат ауылында тыуған.

1966 йылда «Үләндәге ысыҡтар» тигән тәүге хикәйәләр йыйынтығы донъя күрҙе.

Шакир Янбаев әҫәрҙәрендә үҙ заманының мауыҡтырғыс образдарын тыуҙырыуға иреште.

«Йәшәү һуты», «Ерем — ете ҡат», рус телендә «Серебряная уздечка» кеүек хикәйә һәм повестар китаптары, «Зәңгәр сатыр» романы баҫылып сыкты.

### ДЕГӘНӘК

**Йылы июль төнө.** Бала саҡтағы ғәҙәтемсә, мин соланда йоҡлайым. Ситтә оҙаҡ йөрөп ҡайтһаң, бик ҡыҙыҡ икән ул: тыуған ерҙең төнгө тауыштары ла һағындыра, мин уларҙы ҡолаҡ һалып бик оҙаҡ тыңлап яттым.

Шул тауыштар аҫтында йоҡоға талып күпме ятҡанмындыр, таң алдынан ниндәйҙер ҡыштырлауға уянып киттем. Инде Саҡ менән Суҡ тауышы ла, өйәңке япраҡтарының хәбәрләшеүе лә, Эйек буйындағы һандуғастарҙың сутылдауы ла тынған. **Бөтә ерҙә тик шул ғәжәп шыптырлау ишетелә.** Мин, уның ҡайҙан икәнен аңлай алмай, ҡолаҡ һалып оҙаҡ ҡына тыңлап яттым. Асыҡ ишектән танауға ямғыр еҫе килеп бәрелгәс кенә иҫемә төштө. Был бит кәртә буйында үҫкән дегәнәк япраҡтарында ямғыр тамсылары шулай тыптырлай! Кистән аяҙ ине, ҡайһы арала болото ҡуйырып өлгөргән тиң!

Малай саҡта ла мине шулай ямғыр уята ине. **Уянам да, киренән, рәхәтләнеп, ямғыр тауышына бәүелеп йоҡлап китә инем.** Ә был юлы уяндым да, ҡабат күҙемә йоҡо ҡунманы. Шып-шым ғына килеп яуып торған ямғыр аҫтында шыптырлаған дегәнәк япраҡтары миңә ниҙер һөйләй, ялбара төҫлө тойолдо. Эйе, эйе! Мин, иртән торғас та, был дегәнәктәрҙе соҡоп ташламаҡ булып, үткер көрәк әҙерләп ҡуйғайным бит. Иртәгә һәләк булыуҙарын һиҙгән кеүек борсолалар, минең аяуһыҙлығыма үпкәләйҙәр төҫлө был дегәнәктәр.

Кисә килеп төшкәс тә, кәләшем яратманы уларҙы.

— Ауылда иң яратмағаным — дегәнәк. Ниңә күптән шуның тамырын ҡоротмай, йорт тирәһендә үҫтерәләр икән? — тип, кәртә буйында дегәнәк үҫкәнгә мине ғәйепләгән төҫлө, һөйөклөм күҙҙәремә һораулы ҡараны. — Уның ҡылсығы күҙгә төшә тиҙәр бит!

Дөрөҫөн әйтергә кәрәк, әллә бала саҡта шул дегәнәктәрҙе күреп үҫкәнгәме, ситтә йөрөгәндә уларҙы ла һағына торғайным.

Әле бына иртә таңдан уянып, дегәнәктәр миңә үҙҙәренең файҙаһы тейгән саҡтары тураһында һөйләйҙәр төҫлө. «Малай сағыңда беҙҙең иң яҫы япраҡтарыбыҙҙан кәләпүш яһап уйнағаныңды оноттоңмо ни? Ә балыҡҡа барғанда селәүсенде, сиңерткәне нимәгә төрөп йөрөтә инең? Әсәйең, бесәндән ҡайтҡанда, eләктең иң эреләрен дегәнәк япрағына тиреп, һиңә алып ҡайтып ашата ине. Уны ла оноттоңмо?»

Мин уйға ҡалдым, күҙ алдынан төрлө күренештәр үтте...

...Әллә бал яратҡанға, дегәнәк сәскә атҡанды айырыуса түҙемһеҙлек менән көтә инем мин. «Дегәнәк сәскә атһа, бал бешә», тип атайымдың әйткәне күңелгә һеңеп ҡалған да, әйҙә мин, йәбешкәк тумалсайҙарҙан күҙ ҙә алмай, ҡасан уларҙың тап уртаһында ғына көрән ҡыҙыл сәскә ишараты моронлар икән тип, ашҡынып көт тә йөрө! Атайым, түмәр умарталарҙы асып, кәрәҙле бал алырға бик ашыҡмай: «Ҡорттар бал ташыйҙар әле, уларҙы эштән туҡтатырға ярамай», — ти.

Бына көткән көн килеп етә. Атайым лапаҫ түбәһенә ҡыҫтырып ҡуйылған сөрөктө аласыҡтан төтәтеп алып сыға, әсәйем ҙур ағас ашлауҙы, баллы кәрәҙ ҡырҡа торған оҙон бысаҡты әҙерләп, мине дегәнәк япраҡтары өҙөп алып килергә ебәрә. Ҡапҡасты бик һаҡлыҡ менән генә асырҙан алда, атайым мин алып килгән япраҡтарҙы һәйбәтләп умарта төбөнә түшәй. Сөрөктән осҡон-фәлән төшөп, ерҙәге ҡоро-һары тоҡанып китмәһен, бысаҡ осонан төшөп китә ҡалһа, бал тупраҡҡа буялмаһын тип, япраҡ түшәгәнде беләм, шуға күрә уларҙың иң яҫыларын, ҡарышлауыҡтар тишкеләп бөтмәгәнен алып киләм. Бал ҡорттарын, зәңгәр төтөн менән өшкөтөп, умарта эсенә ҡыуалаған атайым да япраҡтарҙың ҙурлығына аптырап ҡуя хатта.

Беҙҙең ҡорт ҡарағанды әллә ҡайҙан белеп, ишек алдына бала-саға йыйылып китә. **Кәртәгә атланып, умарта эсендә һалабаштан һыҙырған аҡ йүкә кеүек өҫтән аҫҡа һуҙылған**

**кәрәҙҙәрҙе атайымдың үткер бысаҡ осо менән ҡырҡҡанын, ашлауҙың өймәләм булып бал менән тулғанын ҡарап ултыралар.** Әсәйем, мин алып килгән япраҡтар өҫтөнә ҙур-ҙур киҫәк кәрәҙле бал һалып, бөтә балаларға ла өләшеп сыға. Иптәштәрем ыңғайына мин дә япраҡҡа бал һалдырып алам. **Шулай сикһеҙ тәмле күренә...**

Ямғыр көсәйә төштө, ахырыһы, дегәнәк япраҡтары ярһыбыраҡ шауларға тотондолар. Ә минең күҙ алдыма икенсе бер иҫтәлек килеп баҫты. ...Мин армиянан, һуғыш бөтөүгә бер йыл тулып килгәндә, апрель айында ҡайтып төштөм. Ер ҡарҙан әрселгән, кипшенгән тау битләүҙәрен һөрә башлағандар. Ағастар япраҡ ярып өлгөрмәгәнгә, беҙҙең ауылды уратып алған тауҙар өҫтөндәге урмандар, үтә күренмәле булып, шәпшәрә ултыралар. Ағас төптәрендә түшәлеп ятҡан былтырғы япраҡты ҡалҡытып, йәш үлән саҡ моронлап килә. Ҡараға бик ябығып аяҡ баҫҡан малдың теленә эләгерлек түгел әле ул.

Ауыр килде яҙ. Һуғыш йылдарында халыҡты асыҡтырмай күтәреп килгән картуф уңмайынса, инде тыныс тормошта иркенләп тын алам тигәндә, шулай бәкәлгә һуға.

Минең Берлиндан әйләнеп ҡайтҡан һалдат тоҡсайымдың төбөндә лә күстәнәс һай ине. Ҡайҙалыр алған ике әсмүхә цейлон сәйе менән паёкка тейгән шәкәр ҡомонан башҡа әсәйемә сығарып бирерлек бер нәмәм дә юҡ. Уңайһыҙланғанымды күреп, әсәйем:

— **Һалдат — үҙе күстәнәс.** Һинән күстәнәс өмөт итеү ҡайҙа, әллә кәсептә йөрөгән кешеһеңме һин! Шул тиклем ҡырылыштан алты ағзаң теүәл ҡайтып, күҙебеҙгә күренеүең үҙе — тауҙай шатлыҡ! — тип, ҡыуанысынан албырғап, ни эшләргә белмәне.

Самауырҙы борҡотоп, ҡайнатып алып инеп, ҡыҙыл ашъяулыҡ өҫтөндәге батмусҡа сынаяҡтарҙы теҙгәс, әсәйем бик ауырһынып:

— Бер нәмәбеҙ ҙә юҡ шул сәй янына ҡуйырға, өҙөк саҡта ҡайттың. Атайың баҙарға барһа, он табыу хәстәрен күрә торғайны ла ул, был аҙнала Кесе Эйек ебәрмәне, ярҙан ярға ятты, — тип атайыма һораулы ҡараны. Күстәнәс шәкәр ҡомон бармаҡ бите менән генә теленә һалып, татын ауыҙында оҙаҡ тәмләп өндәшмәй тыңлаған атайым уның һорауын аңланы ла булһа кәрәк:

— Ниңә оялаһың, бар, алып ин һыйыңды, — тине. Әсәйем сығып киткәс, ул, минең алда ғәйепле кеше һымаҡ, күҙҙәремә оҙаҡ ҡараны.

— Былар гел шулай ризыҡһыҙ йәшәгән тип уйлама. Икмәкте шаҡара тешләп ашамаһаҡ та, картуфтан өҙөлмәнек. Һыйыр ағы булғас, картуф менән бирешмәй килә инек әле. Былтыр картуфты монар һуғып харап итте.

Беҙ элек умартанан кәрәҙле бал алғанда ғына тотона торған ағас ашлауҙа әсәйем ниҙер боҫратып алып инде.

Картуф тиһәм — оҙонса, сөгөлдөр тиһәм — йыуан түгел. Мин күҙемде алмай оҙаҡ текләп ултырғанмындыр, ахырыһы, атайым ауыҙын мөйтөлдәтеп:

— Аша, улым, аша, бер-ике ҡапҡансы ғына ят тойола, унан, бер өйрәнгәс, үтеп ултыра, — тип мине ҡыҫтаны.

— «Үлмәҫкә — үле балыҡ» тигәндәй, өҙөккә ялғауы булды әле. Ҡаҙырға көс күп кәрәк түлке, — тип әсәйем, гәҙәтенсә, ашлауҙағы ят ашамлыҡтың иң һәйбәтерәген ҡалаҡ менән минең алдыма шылдырҙы...

Аҙаҡ, йылдар имен булып киткәс, атайым да, әсәйем дә, мин дә шул яҙ дегәнәк тамыры ашағанды бер ваҡытта ла иҫкә алып һөйләмәй торғайныҡ. Әле таң алдынан килеп яуып торған ямғыр аҫтында телгә килгән дегәнәктәр һис кемгә һөйләмәй йөрөткән серемде иҫемә төшөрҙө. Әйтерһең, улар: «Беҙҙең дә иң ауыр саҡтарҙа таяныс булғанды оноттоғоҙмо?! Оноттоғоҙмо?! Оноттоғоҙмо?!» — тиҙәр ине.

Мин ҡурғаш шикелле ауыр йоҡоға талғанмын. **Иртәгеһенә һуң ғына уяндым.**

Был ни ғәжәп! Күк йөҙөндә бер генә болотто ла тапмаҫһың. Әллә ямғырҙы мин төшөмдә генә күрҙемме? **Юҡ, төш түгел.** Ана, кәртә буйындағы дегәнәктәрҙең япрағы еүеш бит. Мин, кәртәгә түшем менән һөйәлеп, иртәнге ҡояш йылыһы япраҡтарындағы һуңғы тамсыларҙы ялаған дегәнәктәргә текләп торам.

Эргәмә атайым килеп баҫты.

— **Ниндәй урман үҫтергәнһегеҙ, тип аптырап ҡарап тораһыңмы әллә, улым?** Мин сабып ташларға йыйынғас, әсәйең тыйып ҡуйҙы. Ни өсөн тиһәң, тауыҡ себештәрен ҡарауылларға бала-сағаһыҙ беҙҙең кеүек ҡарттарға ярай әле улар. Яуыз ҡош-ҡорт күрендеме, шунда ҡасып-боҫоп ҡалалар мәхлүктәр. Себештәрҙе әйтәм.

Атайым минең ни уйлап баҫып торғанымды белдеме икән?!

**Эйе, көнгә күренмәй, ер аҫтынан аҡҡан йылғалар кеүек, бер ваҡытта ла тышҡа сыҡмаған уйҙар була кеше күңелендә.** Таң алдынан күңелемдә дегәнәктәр ҡуҙғатҡан уйҙарым да тап

шул ер аҫтынан аҡҡан йылғалар төҫлө. Онотмайым мин уларҙы. Онотһам, бөгөнгө тормоштоң йәме, ҡәҙере кәмер төҫлө күренә.

1. Дегәнәк япраҡтарының шыптырлауы геройҙа ниндәй хәтирәләр уята?
2. Әҫәрҙән дегәнәккә бәйле һынамыштарҙы табып, күсереп алығыҙ.
3. *Онотмайым мин уларҙы; Онотһам, бөгөнгө тормоштоң йәме, ҡәҙере кәмер төҫлө күренә* тигән юлдарҙың мәғәнәһен аңлатығыҙ.
4. Әҫәр буйынса план төҙөгөҙ һәм йөкмәткеһен һөйләгеҙ.
5. Дегәнәк үләненең шифаһы тураһында Интернет селтәренән мәғлүмәт табып уҡығыҙ.
6. Халыҡ дегәнәк үләнен ниндәй ауырыуҙарҙы дауалау өсөн ҡуллана? Ололарҙан һорашып, яҙып килегеҙ.
7. Рим Әхмәдовтың дарыу үләндәре тураһында китабын уҡығыҙ һәм өй тирәһендә үҫкән дарыу үләндәре тураһында әңгәмәләшегеҙ.

**138-се күнегеү.** Әҫәрҙең исемен рус теленә тәржемә итегеҙ. Һеҙ тағы ла ниндәй үҫемлек атамаларын беләһегеҙ? Егерме үҫемлек исемен башҡорт һәм рус телдәрендә яҙығыҙ.

**139-сы күнегеү.** Алдағы әҫәрҙәге ҡалын хәрефтәр менән бирелгән һөйләмдәрҙең төҙөлөшө буйынса төрөн билдәләгеҙ.

## ДЕГӘНӘК

Дегәнәк (тегәнәк, тегәнәк япрағы) (русса: лопух большой, репейник) — ике йыллыҡ үлән үҫемлек; бейеклеге 1,5 метрға етә. Июнь-август айҙарында ҡыҙғылт миләүшә төҫлө сәскә ата, орлоғо июль-сентябрҙә өлгөрә. Дегәнәк әрһеҙ үҫемлек; ташландыҡ ерҙә, юл, соҡор тирәһендә, баҡсаларҙа, торлаҡ эргәһендә үҫә. Республикабыҙҙа киң таралған.

Дегәнәк — шифалы үҫемлектәрҙең береһе. Уның үҙенсәлектәрен барлап, халыҡтың, дауа аяҡ аҫтында ғына, тиеүенә йәнә бер инанаһың. Дегәнәктең тамыры ла, япрағы ла, орлоғо ла ифрат файҙалы. Тамырын май йәки сентябрҙә йыялар. Туҡыманан тегелгән тоҡсайҙа уны биш йыл һаҡларға мөмкин. Япраҡтарын ғәҙәттәгесә киптерәләр һәм бер йыл һаҡларға була. Дегәнәк япраҡтарының һуты ҡанды яҡшы таҙарта. Бигерәк тә фурункулёздан, һытҡы сабыртмаларынан ҡотолоуҙа яҡшы сара. Аллергияға ҡаршы үҙенсәлеге булыуы менән айырыуса ҡиммәтле. Шулай уҡ тирене һәйбәтләүгә,

инсулин бүленеп сығыуға булышлыҡ итә, һыу һәм тоҙ алмашыныуына ыңғай йоғонто яһай. Тамырының төнәтмәһен сирҙәрҙе иҫкәртеү маҡсатында һәр кем эсә ала, сөнки ул һауыҡтырыу үҙенсәлегенә эйә.

**140-сы күнегеү.** Башҡорт телендәге үлән исемдәрен рус телендәгеһе менән тап килтерегеҙ.

| | |
|---|---|
| әрем | щавель |
| һары мәтрүшкә | кислица |
| мәтрүшкә | борщевик |
| бәпкә (ҡаҙ) үләне | тысячелистник |
| балтырған | полынь |
| бысала (меңьяпраҡ) | зверобой |
| юл япрағы | дягиль |
| айыу көпшәһе | свербига |
| ҡымыҙлыҡ | душица |
| ҡуҙғалаҡ | подорожник |
| ҡаҡы | спорыш |

*Айһылыу ЙӘҒӘФӘРОВА*

## КЕСКӘЙ ШИШМӘ

### I

Марат, арбанан һикереп төшөү менән:

— Атай, ҡара әле, ниндәй күңелле бында! — тип ҡысҡырып ебәрҙе. Шунда уҡ йүгереп китмәксе булғайны ла, атаһы:

— Марат, аҡландан алыҫ китмә, аҙашырһың, айыу килеп сыҡһа, көрәшә алмаҫһың, — тип йылмайып малайын туҡтатты.

Марат, ысынлап та мин айыуҙы еңә алмайыммы ни, тигән кеүек үҙенең аяҡтарына, бәләкәс йоҙроҡтарына ҡараны.

— Беҙ кискеһен генә ҡайтабыҙ. Кескәй шишмә эргәһендә генә йөрө, муйыл аша, ҡайынлыҡ араһында бөрләгән күп, эсәйеңә уныһын да йый, һыуһаһаң — һыу эс, — тине атаһы.

— Ә һин, атай?..

— Мин, улым, бесән сабам.

Марат арбала ятҡан сыбыртҡыһын етеҙ генә үрелеп алды ла оҙон үлән араһынан, сыбыртҡыһын шартлата-шартлата, Зөһрә апаһы өйрәткән йырҙы йырлап, бесәнлектең уртаһынан ағып ятҡан Кескәй шишмә буйына төшөп китте.

Шишмә буйы — муйыллыҡ. Үтә күренмәле саф һыуҙа төрлө төҫтәге таштар ялтырай. Ҡарағат ботаҡтары, шишмә һыуына йыуылып, тирә-яҡҡа хуш еҫ бөркә. Ҡыҙыл, зәңгәр сәскәләр ҡояшҡа үрелә. Тал ботағын тирбәтеп, кескәй генә ҡошсоҡ һайрай.

— Шишмәгә бында күңелле, — тип әйтеп ҡуйҙы Марат.

— Бәлки, киреһенсә, мин бында булғанға, башҡаларға күңеллелер, — тип көлдө шишмә сылтырай-сылтырай.

Марат та йылмайҙы, шишмәнең йырлауын тыңлап торҙо.

— Йырлайһың да йырлайһың, әллә бәләкәй булғанға, йырҙан башҡаны белмәйһеңме?..

— Ниңә улай тиһең? — Шишмә үпкәләгәндәй булды. — Бына һин дә минең кеүек бәләкәйһең, тауышың да матур, тик көнө буйы йырлап ҡына йөрөйһөңмө һуң?..

— Ю-юҡ, мин атайыма, әсәйемә ярҙамлашам: ҡаҙ бәпкәләрен ҡарайым, быҙау көтәм, тағы ла...

— Күрәм, күрәм, һин эшсән малай. Ә мин нимәләр эшләйем, тирә-яғыңа ҡара әле?..

— Йырлай-йырлай ағаһың...

— Башҡа эшемде күрмәйһеңме ни?

Марат ҡаштарын йыйырҙы.

— Улайһа, түбәтәйеңә ҡарағат йый — әйтерһең.

Малай ҡап-ҡара, эре, тәмле ҡарағатты бер түбәтәй йыйып алды, үҙе һалҡын шишмәнең эше тураһында уйланы.

1. Кескәй шишмә буйы тәбиғәтенең матурлығын тасуирлап һөйләгеҙ.
2. Марат менән Кескәй шишмә нисек дуҫлаша?

**141-се күнегеү.** Әҫәрҙең тәүге өлөшөндә бирелгән тура телмәрҙәрҙе табығыҙ. Автор һүҙҙәренең килеү тәртибенә иғтибар итегеҙ.

## II

**— Беләһеңме, шишмә, минең әсәйем, баҡсалағы ҡарағат ҡыуаҡтары яҡшы үҫһен өсөн, һәр ваҡыт һыу һибә. Мин дә уға ярҙамлашам. Әгәр һин булмаһаң, ҡарағат, ҡурай еләге ҡыуаҡтары бында үҫә алмаҫ ине. Беҙ ҙә уларҙың емешен ашай алмаҫ инек. Муйыл, балан ағастарының емештәре лә былай эре булмаҫ ине.**

**— Дөрөҫ уйлайһың, малай.**

**— Минең исемем — Марат.**

**— Ә минең исемемде беләһеңме?**

**— Атайым Кескәй шишмә тине.**

**— Дөрөҫ, минең исемем — Кескәй шишмә. Марат, һин миңә ярҙам ит әле. Анау ялбыр муйыл янында кисеү бар. Шул урындан ҙур трактор үтеп киткәйне. Һыу быуылды, сүп-сар йыйылды. Таҙартып, йырып ебәрһәң, яҡшы булыр ине.**

**— Хәҙер, Кескәй шишмә!..**

**Марат түбәтәйе менән сыбыртҡыһын муйыл төбөнә ҡуйҙы ла эшкә тотондо. Бер аҙҙан Кескәй шишмә йырлай-йырлай юлын дауам итте.**

**— Рәхмәт һиңә, Марат, ҙур рәхмәт!**

**Малай, ап-аҡ тештәрен ялтыратып, ҡәнәғәт йылмайҙы.**

**— Мин һиңә һәр ваҡыт ярҙам итермен ул. Һыуһаттырҙы ғына...**

**Малай эйелеп һыу эсте, рәхәтләнеп һалҡын һыу менән битен йыуҙы.**

**— Кескәй шишмә, мин белдем, һинең һыуыңды эсеп, кешеләр рәхәтләнә. Эйе бит?**

**— Эйе, атайың да һыуһағандыр, айран яҙып бир.**

**— Ысынлап та.**

**Марат, түбәтәйендәге ҡарағатын түкмәҫкә тырышып, атаһы эргәһенә йүгерҙе.**

**— Атай, атай, беҙгә Кескәй шишмә ҡарағат бирҙе.**

**— Улай булғас, Кескәй шишмә һине ярата икән.**

**— Эйе... Мин уны быуып ятҡан сүп-сарҙы алып ташланым.**

**— Һәйбәт эш эшләгәнһең, улым.**

Ишбулды ағай, салғыһын бер яҡ ситкә ҡуйып, ҡарағат ашап алды.

— Атай, мин һиңә айран һыулап алып киләм, яраймы?

— Бар, улым, бар. Атты ла һуғарырға алып төш.

Марат, аттың теҙгененән тотоп, яңынан Кескәй шишмә янына төштө.

— Кескәй шишмә, беҙ хәҙер ут яғабыҙ.

— Шулаймы, ә һин йәш ботаҡтарҙы һындырма, башҡа йәш ағастарға үҫергә ҡамасаулаған, ҡороған, һынған ботаҡтарҙы ғына йый, яраймы?

— Ярай, шулай эшләрмен...

...Атты ашатырға ебәргәс, Ишбулды ағай ут яғып ебәрҙе, ә Марат, сәйҙе тиҙерәк ҡайнатыр өсөн, ҡоро сыбыҡтар һалып торҙо.

— Атай, ниңә урманда сәй тәмле икән?

— Кескәй шишмәнең һыуы бик тәмле, улым. Сәйгә мәтрүшкә лә һалдым. Эс, эс...

Ҡояш байыр алдынан, улар ҡайтырға сыҡты.

— Атай, Кескәй шишмә ҡайҙа тиклем аға?

— Күпер эргәһендә Һаҡмарға бер йылға ҡушыла, шуны күргәнең бармы?

— Эйе, Кескәй шишмә кеүек бәләкәй генә.

— Шул Кескәй шишмә лә инде.

Күпергә еткәс, Марат атты туҡтатыуҙы һораны. Кескәй шишмә ҡойған урында Һаҡмар бер аҙ киңәйә төшә.

— Кескәй шишмә, һин Һаҡмарға ҡушылып, уны тағы ла ҙурайтаһың, шулаймы?

— Дөрөҫ, Марат. Мин, Һаҡмарға ҡушылып, уны ҙурайтам, мул һыулы итәм. Артабан беҙ бергә ағабыҙ. Мин Һаҡмарҙың эшсән ҡыҙы. Һин дә атайыңдың намыҫлы, тоғро улы бул. Уның хеҙмәтенә үҙ хеҙмәтеңде лә ҡуш. Ул саҡта тормош тағы ла матурлана төшөр, — тине Кескәй шишмә.

**1.** Кескәй шишмә Маратҡа ниндәй кәңәштәр бирә?
**2.** Мараттың тәбиғәткә ҡарата һаҡсыл ҡарашлы, ололарҙы хөрмәт итеүсе малай икәнлеген текстан миҫалдар килтереп иҫбатлағыҙ.
**3.** Һеҙ ниндәй йылғалар, күлдәр, шишмәләр беләһегеҙ? Теҙеп яҙығыҙ.
**4.** Шишмәнең тәбиғәткә булған файҙаһы тураһында фекер алышығыҙ.
Ⓟ **5.** Халыҡ борон-борондан шишмәләргә ҡарата ниндәй мөнәсәбәттә булған? Интернет селтәренән, энциклопедиянан мәғлүмәттәр табығыҙ һәм сығыш әҙерләгеҙ.

Түбәндәге мәҡәлдәр менән танышығыҙ.

Һыуҙы эскәндә шишмәһен онотма.

Һыуҙың ҡәҙере шишмә ҡороғас беленер.

Һыуы менән ер ҡәҙерле, иле менән ир ҡәҙерле.

Кем ерендә йәшәһәң, шуның һыуын эсерһең.

Һыуһыҙ ерҙә ағас та ҡорой.

**142-се күнегеү.** Тексттың II бүлегенән диалогтарҙы табығыҙ. Унда ҡатнашыусыларҙы билдәләгеҙ. Ҡалын хәрефтәр менән бирелгән өлөшөндә өндәш һүҙҙәрҙе күрһәтегеҙ, уларҙың кемгә йәки нимәгә йүнәлтелгәнен асыҡлағыҙ.



## Рәшит СОЛТАНГӘРӘЕВ

**(1935 — 2000)**

Рәшит Ғимран улы Солтангәрәев 1935 йылдың 25 декабрендә Башҡортостандың Көйөргәҙе районы Таймаҫ ауылында тыуа.

Уның «Тыуған йорт», «Аҡ тирәктәр», «Сәскәләр бүләк итегеҙ», «Йылы ямғыр», «Нефтселәр юлынан», «Умырзая», «Тау», «Беҙҙең дуҫ», «Тыуған яҡҡа ҡайтыу», «Беҙ йәшәгән ер» тигән китаптары билдәле. Айырым әҫәрҙәре рус телендә һәм туғандаш халыҡтар телендә баҫылды.

Рәшит Солтангәрәевкә нефтселәр тормошона арналған әҫәрҙәре өсөн 1978 йылда Салауат Юлаев исемендәге премия бирелде.

1982 йылда уның «Ҡиәмәтлек кейәү» әҫәре буйынса ҡыҫҡа метражлы фильм төшөрөлә.

### ҺУҢҒЫ ҺУНАР

**I**

...Кисә Мырҙамөхәммәттәргә колхоздарының председателе килеп инде. Дөрөҫөрәге, һунарсыны урамға саҡырып алды. Ул йомош менән килгәйне, тик үҙе инеп һорап, дәрәжәһен артыҡ төшөрөргә теләмәгәндер инде.

— Айыу кәрәк, Мырҙамөхәммәт, — тине ул.

Балыҡсыға ете төн уртаһында килеп балыҡ һорауы әллә ни ғәжәп тойолмаһа ла, ҡыш уртаһында председателдең айыу таптырыуы апаруҡ сәйер яңғыраны һунарсыға. Был ваҡытта ниндәй айыу булһын ти инде. Уларҙың өңдәрен әллә ҡасан ҡар күмеп киткән, үҙҙәре, төн уртаһы үтте тип, бер яҡ ҡабырғаһынан икенсе яҡ ҡабырғаһына әйләнеп ятҡан.

Шулай ҙа күпте күргән һунарсы мәрәкәләгән төҫлөрәк:

— Тереләйме ни? — тигән булды.

— Тереме, үлеме — уныһы һинең эш. Тик бик кәрәк, иртәгә үк!

— Был ваҡытта ниндәй айыу ти инде ул?

— Уныһын инде начальство һорап тормай! Юғарынан шундай фарман килде, — тине председатель.

— Һорап тормаһа, үҙҙәре алһын...

Башҡа бөтә нәмәне лә эшләтергә председателдең ҡулынан килә, ә бына һунарсыны ярты ҡыштан һуң айыуға барырға нисек мәжбүр итәһең? Барһаң да, алып буламы һуң әле? Булдырһа ла, ошо Мырҙамөхәммәт менән эте Дункан ғына булдыра алыр. Әгәр ҙә айыу ала алмаһалар, уның район алдында бер абруйы ла ҡалмаясаҡ.

— Өфөнән вертолёт ебәргәндәр, — тине ул, һунарсыға нисек тә ныҒыраҡ тәьҫир итеү өсөн. — Ниндәйҙер бер ҙур кеше килгән икән. Айыу шуға кәрәк, ти. **Айыуҙы вертолёт менән алып китергә тейештәр.**

— Атмаған ҡуян, аҫмаған ҡаҙан. Бынау заман нимәһенә кәрәк булды икән һуң?

— Уныһын ҡайҙан ғына беләйем мин, Мырҙамөхәммәт ағай! Йә тиреһен бүләк итергә уйлайҙарҙыр, йә яңы һуйған ите кәрәктер дауа өсөн. Начальство бит һорап тормай, ҡуша ла ҡуя. Теге бик ҙур кеше, ти. Эш унда түгел, беҙгә бит райондан ғына түгел, Өфөнөң үҙенән шундай ҙур ышаныс күрһәтелгән.

— Был ваҡытта бит айыуға һунарға йөрөргә ярамай.

— Түрәләр үҙҙәре ҡушҡас, ярай ул! Айыу беҙҙе аҙ интектерҙеме ни йәй буйы? Башҡортостанда данлы һунар, айыусылар төйәге булып таба алмаһаҡ, исемебеҙ ҡороһон, Мырҙамөхәммәт ағай! — Һауалы кәйеф менән килгән председатель Ҡыш бабай шикелле ҡымшанмай торған һунарсыға шөбһәләнеп ҡараны. — Хужаларҙың үҙҙәренә кәрәк булғас, премияны ла йәлләмәҫтәр инде ул, — тип өҫтәне.

— Премияһы инде уның... — Үҙ ғүмерендә күп кейек алған һунарсыға быныһы ла әллә ни күренмәне, ахырыһы.

— Өфөнән — беҙҙең районды, ә районда һине һайлағандар, — тип дауам итте председатель. — Был бит теләһә кемдең ҡулынан килә торған эш түгел. Шулай Өфө һынлы ерҙән һиңә тип килгәс, үҙең уйла. Дан китте һинең, Мырҙамөхәммәт ағай, теге Хоҙайбирҙе әйтмешләй, кругом алтмыш саҡрым! Алһа, шул Мырҙамөхәммәт ала инде, тинеләр кисә районда.

**Мырҙамөхәммәт, әйтерһең, ҡылдай тартылған арҡанға баҫып тора...**

Әлбиттә, ул данына ла, малына ла ҡыҙыға торған кеше түгел. **Үҙ ғүмерендә күп йөрөнө, күпте күрҙе.** Һунар бер ваҡытта ла уның өсөн кәсеп булманы, тәбиғәткә хыянат яһаманы — Мырҙамөхәммәт нәфселе кеше түгел.

Тик бына әле председатель һынлы председателдең шулай кеселекле тороуы Мырҙамөхәммәтте йомшарта төштө. Бөтә Башҡортостанда берәү тип үк ебәрҙе лә!.. **Унының, бәлки, арттыралыр...** Бәлки, арттырмайҙыр ҙа. Бөтә Башҡортостанда булмағанда ла, тирә-яҡта уға еткән кеше юҡ инде юҡлығын.

Вертолёт ебәрәләр, тип тә ҡуйҙы бит әле. Ҡара, шул тиклем ерҙән, ә? Ҡулда ҡөҙрәт булғас, ебәрәләрҙер инде. Күктә килгәндә, уларҙың ауылын ҡайҙан, картанан ҡарап тапҡан булырҙармы икән? Килеп төшөп, Мырҙамөхәммәттең йортон һорашырҙар. Хәйер, председатель ҡаршы алыр уларҙы, үҙе алып килер. Күрәһең, бик кәрәктер инде, кәрәкмәһә, улай олоға ебәрмәҫтәр ине.

Бәлки, теге ҙур кешеләрҙең Мырҙамөхәммәтте күргеләре, һөйләшеп ултырғылары килер. **Уны саҡыртып алырҙар.**

Һунарсы нисек итеп махсус үҙе артынан ебәрелгән вертолётта осоп китеп барыуын да, тегеләр менән табындаш булып ултырыуын да күҙ алдына килтерҙе. Ҡыҫҡаһы, Мырҙамөхәммәттә ғүмерҙә булмаған ирәйеү, маһайыу тойғолары тумалып ҡуйҙы. Ярар, тип уйланы ул, ғүмерҙә бер тапҡыр күңелгә ятмаған эш эшләүҙән әллә ни булмаҫ...

— Айыуҙы инде тапһаҡ, алыуы әллә ни булмаҫ беҙгә, — тине ул. — Ваҡытты аҙ бирәләр бит, нисек өңөн табаһың?

— Мырҙамөхәммәт ағай, теләһәң, уны ете ҡат ер аҫтынан да табып ала алаһың инде. Һинең менән Дунканға моңмо ни? Иртәгә вертолёт килә, әҙерләп ҡуйһаҡ, кисен кире оса инде. Һис юғында иртәнән һуң иртә үк килергә тейеш. Юҡһа кәрәге ҡалмай.

— Һы... — Мырҙамөхәммәт беренсе тапҡыр күңеле тартмаған һунарға сығырға булды.

* * *

Олотауға етәрәк, кешеләр саңғыларын кейҙе. **Бында ҡалын ҡар.** Үҙе бата, шуға ла Дункан арттан, саңғы эҙенән килә. «Тураға тау бик текә, шырлыҡ, ҡар тағы ла ҡалыныраҡ, шуға ла урабыраҡ киттеләр, — тип уйланы Дункан. — Әлбиттә, һунарға көҙ йөрөүе күңелле, мәгәр, ауыр булһа ла, һиҙҙерергә ярамай».

Өңөндә ятҡан айыуҙы табыуы еңел эш булманы. Улар батып-сумып байтаҡ йөрөнөләр. Әллә ҡайҙан урап, Олотауға

килделәр. Хужаһы Мырҙамөхәммәт менән һунарсы ауылдашы артыҡ бирешмәне, ә председатель менән теге ят әҙәм бышлығып сыҡты. Ағас араһында ҡар йомшаҡ булғас, саңғының файҙаһы ла юҡ — бата. Мәгәр һунарсыларҙың береһе лә кире боролоу тураһында өндәшмәне.

Олотауға менгәс, кешеләр ҡарға ултырып ашап алдылар, эҫе сәй эстеләр. Дунканға ла өлөш сығарҙылар. Ул баш тартманы, сөнки ярайһы асыҡтырып та өлгөргәйне. Ниҙәлер һунарға сығыр алдынан уны хужаһы самалабыраҡ ашата, сабырға еңелерәк кәүҙәле булыр, ти, буғай.

Тамаҡ туйҙырғас, кешеләр гәп һатырға, ә теге ят әҙәм тәмәке тартырға тотондо. Дункандың быға йәне көйҙө, ҡышҡы тын урманда былай ҙа еҫ һиҙелеп бара, ә ул, етмәһә, тәмәке тарта. Йәнлектәр ҙә тәмәке еҫен һиҙеп ҡаса ул. Йәне көйөүенән Дункан бер яҡ ситкә китте.

Сеү! Әллә?!. Бырх-бырх килеп, ҡарға бата-бата йөрөп ятҡанда, эт ҡапыл таныш сөскөлт еҫ килгән яҡҡа боролоп баҫты. Уның өсөн Олотау ҙа, кешеләр ҙә юҡ булды. Бар иғтибары — күҙгә күренмәгән дошманда.

Дункан бер аҙ шулай ҡылт та итмәйенсә торҙо ла, өркөтмәҫкә теләгәндәй, аҡрын ғына баҫып шикле яҡҡа китте.

Байтаҡ ҡына барғас, эт текә генә ярлау битендәге ҙур имән төбөнә килеп сыҡты. Ошонда булырға тейеш теге яуыз, күпме эҙләнеләр шуны! Ана, бер ерҙә иләк шикелле генә булып ҡар ирегән, эстән һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә боҫ сыға. Быны кешеләр күрә алмай, тик эттәр генә тоя.

Дункандың ҡаны ҡыҙып китте. Өңөндә ғәмһеҙ йоҡлап ятҡан айыу менән оҙаҡламай буласаҡ алыш күҙ алдына килде. Ул ҡаты-ҡаты ғына итеп өрөп алды. Кешеләр ишетер ҙә килер, тип уйлағайны, әммә тегеләр һаман гәпләшеп тәмәке тартып ултыра, күрәһең. Ул бер аҙ ярһып өрҙө лә, барып саҡырырға кәрәк тип, һунарсылар янына китте.

Эт, кешеләрҙе алып килгәс, бына бит таптым, тип маҡтанғандай, лаф-лаф өрөп, өң тирәләй сабыулап йөрөргә тотондо.

Кешеләр өң барлығын күргәс, айыуҙы инде боғалаҡлап алғандай, бер аҙ кәңәш-төңәш итеп, тыныс ҡына торҙолар, һаман ярһый барған этте ситкәрәк ҡыуҙылар. Тик Дункан бер ҙә тыныслана алмай, китеп тора ла, йәнә үҙен үҙе онотоп, ярһып өрөргә тотона.

Бер аҙҙан кешеләр эшкә кереште: өсәүһе мылтыҡтарын әҙер тотоп, өң тирәләй баҫты, ә хужаһы Мырҙамөхәммәт айыу өңөн ҡарҙан әрсей башланы.

Өңдө көрт әллә ни нығ баҫмағайны, бер аҙҙан, ҡарайып, уның ауыҙы ла күренде.

— Был ояны төплө һалғанға оҡшаған, мәмерйә ауыҙымы ни! Ҡарт, хәйләкәр айыу, күрәһең, — тине председатель. — Ҡайҙа әле мин уны хәҙер ҡолға менән гөжгөтөп сығарайым.

Әммә айыу үҙен ҡолға менән төрткөсләгәнде көттөрмәне. Кеше, эт, дары еҫе, һунарсыларҙың ғауғаһы һәм өҫтән төшкән яҡты уны йоҡоһонан уятты, ахырыһы, ул, ете төн уртаһында тартып торғоҙған иҫерек шикелле, алпан-толпан баҫып килеп сыҡты ла яман үкереп ебәрҙе.

**Ике кеше бер юлы атты.** Күрәһең, тумалаҡ ҡурғаштар йән еренә эләкте — теге ергә йығылды. Ҡарға ҡан аҡты.

Уйламағанда уңышҡа юлыҡҡан кешеләр, шау-гөр килеп, айыуҙы өҫкәрәк һөйрәкләргә, пуляның ҡайһы урынға тейгәнлеген ҡарарға тотондо. **Бөтәһенең дә кәйефе шәп.** Атырға өлгөрә алмай ҡалған председатель мылтыҡ көбәге менән айыуға төрткөләп алды ла һунарсының арҡаһынан ҡаҡты:

— Ну, Мырҙамөхәммәт ағай, молодец, бына беҙҙе ҡотҡарҙың бит! Хәҙер район алдында йөҙ яҡты. Һин дә булдырмағас, кем булдыра уны.

Кешеләрҙең хәсрәт бөттө, улар үҙ күҙҙәренә ышанмағандай, һаман айыу эргәһендә оло бола ҡоралар. Дунканды ла оноттолар. Ә тегеләрҙең бер ҡатлылығына эттең йәне көйә, һаман абалап өрөүен белә.

Эттең холҡон белгән Мырҙамөхәммәт Дункан янына килде, иғтибарлап ҡараны ла, ғәҙәтенсә, тыныс ҡына ҡиәфәт менән:

— Егеттәр, тағы берәү! Мылтыҡ! — тине.

— **Кит унан?!**

Һунарсылар үле айыуҙы ташлап, йәһәт кенә мылтыҡтарын алдылар ҙа өң тирәләй баҫтылар, Дунканды йәнә ситкәрәк ҡыуҙылар. **Бөтәһе лә, ышанмаған һымаҡ, өңгә төбәлгән.** Ысынлап та, бер өңдә икәүләп ҡышларға булдылармы икән?

Ул арала эстән йәнә үкергән тауыш ишетелде, йәнә бер айыу килеп сыҡты. Быныһы ла, нимә һеҙ ҡара төндә кеше йортон баҫып йөрөйһөгөҙ тигәндәй, бик асыулы ҡиәфәттә ине, ә күңелдәре үҫеп алған һунарсыларҙың быға артыҡ иҫе китеп барманы, йыртҡысты яҡынырaҡ ебәрҙеләр.

Дункан тегегә ташланырға самаланы, ләкин шул ваҡыт бер-бер артлы атыу тауыштары яңғыраны, әммә был айыу тәүгеһе шикелле тиҙ генә бирешә һалып барманы, ҡанһыраған

көйөнсә үҙен үлтереүселәргә ҡаршы һуғышырға самаланы: үкереп өҫтәренә килә башланы. Дошмандың ниәтен аңлап, Дункан тегенең арт яғына ынтылды. Шул мәлдә бая ата алмай ҡалған председатель айыуға терәп үк тигәндәй атып ебәрҙе.

Оло айыу, ярай, былайға киткәс, һеҙгә мәшәҡәт тыуҙырмайым инде тигәндәй, тағы бик аҙ ғына өҫкәрәк менде лә йығылды, ә кешеләр, йәнә шау-гөр килеп, уны уратып алды.

— Бына әкәмәт, бер өңгә икәүләп ингәндәр!

— Ундай хәлдәр булғылай ул. Йә аталы-инәле булалар, йә береһе өң яһап өлгөрә алмай ҙа икенсеһенә өйҙәш инә, — тине Мырҙамөхәммәт.

— Өсөнсөһө лә юҡмы икән? — тип шаяртты береһе.

— Ҡапҡан һайын ҡалъя булмай!

1. Һунар тыйылған мәлдә айыуға һунарға барыуҙың сәбәбен аңлатығыҙ.
2. Ни өсөн Мырҙамөхәммәттең һунарға сығырға күңеле тартмай?
3. Тәбиғәт ҡанундары менән түрәләр иҫәпләшәме? Бөгөнгө көндә ошондай күренештәр осраймы?
4. Дункан айыу өңөн ниндәй билдәләрҙән белеп таба?
5. Ике айыуҙы атыу мажараһын һөйләгеҙ.
6. Хайуандарға ҡарата ниндәй мөнәсәбәттә булырға кәрәк? Был турала фекер алышығыҙ.

**143-сө күнегеү.** I бүлектәге ҡалын хәрефтәр менән бирелгән һөйләмдәрҙең төҙөлөшө буйынса төрҙәрен билдәләгеҙ.

**144-се күнегеү.** Рус алфавитында булмаған башҡорт хәрефтәрен яҙып ҡуйығыҙ.

1 —..., 2 — ..., 3 —..., 4 — ..., 5 — ..., 6 — ..., 7 — ..., 8 — ..., 9 —... .

## II

Кешеләр, ҡайһы еренә эләккән тип, айыуҙың яраларын ҡарарға, нисек алып ҡайтыу тураһында кәңәшләшергә тотондо. Улар өсөн бола баҫылғайны инде, тик Дункан ғына, ҡоторғандай, һаман абалап өрөүен, өң тирәләй сабыулап йөрөүен белде. Башҡалар уға артыҡ иғтибар итмәне, ә Мырҙамөхәммәт, нимәгәлер шөбһәләнеп, яңынан өң янына килде. Бер аҙ ҡарап торҙо ла үҙ-үҙенә ышанмағандай:

— Өсөнсөһө лә бар... — тине.

Һунарсылар өнһөҙ ҡалды.

— Ысынмы? Әллә күҙеңә генә күренәме?

Тегеләр дүртеһе лә, мылтыҡтарын да ҡорорға онотоп, өң ауыҙына килеп баҫтылар.

Өң эсе ҡараңғы, бер ни күренмәй, тик төптә, ҡараңғыла, быларға төбәлгән ике күҙ генә ялтырай. Кешеләр һаман өнһөҙ, хатта бер аҙ шомло ла булып китте.

— Әллә айыу түгел инде был, — тине кемдер. — Гонаһ шомлоғона оҡшаған.

— Ендер ул!

— Айыулығын айыу ҙа ул, тик бындай хәлде күргән дә, ишеткән дә юҡ ине. Һы... бер өңдә өс айыу, әлләсе!.. — Мырҙамөхәммәт үҙе лә аптырауға ҡалғайны. Кешеләр, тегенең килеп сығыуы барлығын да онотоп, күҙен генә йылтыратып торған айыу тураһында һөйләшергә тотондо. Ахырҙа председатель:

— Хәҙер сығып, осора-осора һуҡһа, белерһегеҙ нимә икәнен! Давай мылтыҡтарҙы! — тине.

— Әллә быныһына теймәйбеҙме? — Мырҙамөхәммәткә айыуҙар йәл дә булып китте.

— Былай булғас, Мырҙамөхәммәт ағай, айыуҙарҙың береһен Өфөгә оҙатырбыҙ, икенсеһе үҙеңә булыр, ә өсөнсөһөн үҙ-ара бүлешербеҙ! — Председатель йомартланды шулай. — Белмәйем, бындай хәлде минең дә ишеткән юҡ ине, бына ғәжәп! Хәбәр итергә кәрәк, әйҙә газетаға яҙып сыҡһындар, радионан һөйләһендәр: ҡыш көнө бер өңдән өс айыу алғандар...

— Әле алмағанбыҙ бит әле.

— Өңдә булғас, беҙҙеке инде ул!

Ә айыу, быларҙың ни тураһында һөйләшкәнен аңлағандай, ҡараңғы өңдә күҙҙәрен хәүефле йылтыратып, тын ғына тора.

— **Һиңә атҡаҙанған һунарсы исемен юллаясаҡбыҙ, Мырҙамөхәммәт ағай. Бәлки, орден да бирерҙәр!** — тип ярһыны председатель.

Көтмәгәндә-уйламағанда килеп сыҡҡан был хәлдәр һунарсының күңеленә уй һалды шикелле. Йөҙө етдиләнеп китте. Нимәгәлер икеләнә ине ул. Беренсенән, тәртипте боҙоп, һунарҙа йөрөйҙәр, икенсенән, бер-бер артлы айыуҙы үлтереүҙән күңеленә яманһыу ҙа булып китте, ахырыһы. Айыу тиһәң дә, ул да йән эйәһе бит. Ана, икеһе былай ҙа ҡанһырап ята. Ул тиклем нәфселе лә булырға ярамай. Мәгәр шул уҡ

ваҡытта бер юлы өс айыу — ите, тиреһе, даны тигән һүҙ ҙә ҡыҙыҡтырып ҡуя.

Председатель, һунарсының икеләнеп торғанлығын күреп, ҡолғаны ҡулына алды:

— Ҡайҙа үҙем! Һеҙ мине һаҡлағыҙ!

Мырҙамөхәммәттең икеләнеүҙәренә ошо һүҙ сик ҡуйҙы, үҙем башлаған эште үҙем бөтөрәйем, тигәндәй, ҡолғаны тегенән алды ла өң янына килде һәм эсен гөргөләргә тотондо. Ул байтаҡ ҡына маташты, әммә был айыу тегеләре шикелле бер ҡатлынан булып сыҡманы. Януар төйәген ташлап китергә теләмәй ине.

— Был, моғайын, бала айыуҙыр, шуға ҡурҡалыр, — тине Мырҙамөхәммәт.

— Ҡайҙа үҙем! — Председатель, нығыраҡ тотонһаң, сыҡмай ҡайҙа китһен, тигәндәй, өң эсен төрткөләргә кереште. — Әҙер тороғоҙ атырға!

Айыу үкерҙе, әммә үҙе бында сығып, кешеләрҙе күрергә теләмәне.

Һунарсылар, алмашлап, берәм-берәм маташты, мәғәнә сыҡмағас, йәнә кәңәшләшергә тотондо.

— Әллә этте ебәрәбеҙме? — тине председатель, баянан бирле ярһып лауылдаған Дунканға ҡарап.

— **Юҡ, уға төтөнлөк һалырға, ыҫларға кәрәк**. Айыу төтөнгә сыҙамай, — тине Мырҙамөхәммәт. **Этен айыу өңөнә ебәргеһе килмәй ине, буғай**.

Һунарсылар ҡолға осона сепрәк бәйләп ут төрттөләр ҙә эскә тыҡтылар. Айыу үкереп ебәрҙе, сығырға самалап, өң ауыҙына килде, әммә ул үҙен бында ни көткәнлеген аңлай ине, үҙенә төбәлгән мылтыҡ көбәктәренә күҙ һалып ҡына алды ла төпкә китте. **Өң, ысынлап та, ҙур, ахырыһы.**

Кешеләр йәнә сепрәккә ут төртөп эскә тыҡтылар, сыбыҡ-сабыҡ йыйып, өң ауыҙына ут яҡтылар. Сей ағас йүнләп янманы, быҫҡыны ла һүнде, ә айыу күренмәне.

— **Ярай, ҡалһын да!** Йәй алырбыҙ. Маяға ла кәрәк тә инде, — тине йәнә Мырҙамөхәммәт, үҙе, оло гонаһынан ҡотолған кеше шикелле, еңел һулап ҡуйҙы.

— Һин ниндәй һунарсы ул, Мырҙамөхәммәт ағай? Кеше бар айыуҙы ташлап китәме ни?! Беҙ китеү менән, ул ояһынан сығасаҡ та береһенә юлығасаҡ. Барыбер атасаҡтар!

— Ни эшләргә һуң?

— Этте ни тип алып килдең һуң бында? Ебәрергә кәрәк! — Председатель муйынсаһынан ысҡынырҙай булып ныҡ ярһыған Дунканға ымланы.

— Айыу талар…

— Ә беҙ бында ни өсөн?! Атабыҙ! Беҙгә эттең тегене эстән быжғытып сығарыуы ғына кәрәк. Айыуҙы ҡалдырып ҡайтһаң, әҙәм көлөр!

Мырҙамөхәммәт, береһенә лә иғтибар итмәйенсә, тамаҡ төбө менән ырылдап, лаф-лаф өргән этенә ҡараны. Бер аҙ тын торҙо. Шунан тәүәккәл ҡиәфәт менән ҡулын эттең муйынсаһынан ысҡындырҙы:

— Һөс!

Ҡасандан бирле ошо һүҙҙе генә көткән ала эт, бер ни уйлап тормай, өң эсенә йомолдо.

Этен ебәреү менән үк, Мырҙамөхәммәттең йөҙөнә хафалы үкенеү ғәләмәттәре сыҡты:

— Ситкәрәк китегеҙ, айыу беҙҙән ҡурҡып сыҡмаҫ!

Һунарсылар дүртеһе лә, мылтыҡтарын алып, ситкәрәк китеп баҫты, ләкин айыу һаман да сығырға уйламаны. Ни ҡыланаларҙыр, һис кенә белерлек түгел, тик уларҙың ырылдашҡан, дөһөрләшкәне генә ишетелә.

**Эстә үлемесле алыш бара, буғай. Айыу, күрәһең, дошманын өңөндә бөтөрөргә самалай.**

Мырҙамөхәммәттә айыу ҡайғыһы китте, мылтығын төшөрөп, тын да алмай тора. Ул өңгә шул тиклем текәлгән, әйтерһең, үҙенә лә «Һөс!» тигән команда ғына кәрәк. Фарман бирелеү менән, Дункан шикелле, һис тә икеләнеп тормаҫтан, өңгә ташланасаҡ.

«Һуңғыһы, бындай гонаһлы һунарға йөрөүҙең һуңғыһы… — тип уйланы Мырҙамөхәммәт. — Ошоһо имен генә бөтһә, башҡаса юҡ…»

Дункан ҡапыл йән өҙгөс итеп саңҡылдап ебәрҙе. Күрәһең, айыу уны тешләп алды. Мырҙамөхәммәт тертләп китте. Үҙе лә һиҙмәҫтән, аяныс тауыш менән ҡысҡырып ебәрҙе:

— Дункан, сыҡ!

Эт ишеттеме-юҡмы, билдәһеҙ, улар бер-береһен ысҡындырмаҫтан йәбешкәйне, буғай. Ҡайһыһылыр еңергә, ҡайһыһылыр еңелергә, донъя менән хушлашырға тейеш.

Эттең хәле мөшкөлләнгәндән-мөшкөлләнә ине, ахырыһы. Ул йәнә бер-ике тапҡыр саңҡылдап алды. Кешеләрҙә баяғы кәйеф бөттө. Дүртеһе лә, тын да алмай, ҡара өң эсенә ҡараған килеш тора.

— Атырға! Айыуҙы атырға!

Урман тып-тын, эстә ырылдашҡан, айыу үкергән, дөпөлдәшкән тауыш ҡына ишетелә. Бер аҙ тынып тора ла йәнә башлана. Уларҙың болғанышынан ер һелкенеп ҡуйғандай була. Бер аҙҙан эттең көнө бөтәсәк.

Председатель, мылтығын алып, өң янына килде. Мырҙамөхәммәт уны туҡтатты:

— Үҙем...

Әммә айыуҙы атыуы еңел эш түгел ине. Уның яҡыныраҡ, йәплерәк килгәнен көтөргә кәрәк, ә йән өсөн талашып айпалашҡан януарҙың бында ҡайғыһы юҡ, улар нисек тә бер-береһен ысҡындырмаҫҡа, бәхәсте үҙҙәре хәл итергә тырыша.

— Дункан, Дункан...

Ниһайәт, эт менән айҡашып йөрөгән айыу өңгә яҡыныраҡ килде. Шуны ғына көтөп торған һунарсы атып та ебәрҙе. Ҡышҡы урманда тоноҡ гөрһөлдәү яңғыраны...

* * *

...Дункан мылтыҡ шартлағанын ғына ишетте. Шартланы ла артынса уҡ уттай эҫе һәм бик ҡаты нәмә уның ҡулбашын тишеп үтте. Дункан үҙенең йәнә саңҡылдап ебәргәнен һәм был ҡараңғы, һаҫыҡ өңдән атылып сыҡҡанын ғына хәтерләй.

Ул ҡыҙыулыҡ менән генә ырғыған, ахырыһы, тышҡа сығыуға, хәле бөттө лә ҡуйҙы. Аяғында торорлоҡ та хәле юҡ, бөтә тәне утлы тимергә бешкән шикелле яна. Ниңә улай хәле юҡ, яраландымы икән? Ошо айыуҙар шикелле ҡанһырап йығылһа, башҡаса ҡуҙғала алмаһа?! **Юҡ, хужаһы Мырҙамөхәммәт был хәлгә ҡалдырмаҫ.** Эт шуға ғына аптырай: донъя, әле тәү тапҡыр күргән һымаҡ, ғәжәп яҡты, саф, матур тойола ине.

Ә кешеләрҙең йөҙҙәре, ниңәлер, бик борсоу, хафалы. Ни эшләп улар эттең хәленә инмәйҙәр, һыҙланыуын бөтөрөргә тырышмайҙар икән?

Дункан башын йөгөнөкләп ултырған хужаһы Мырҙамөхәммәттең ҡулдарына һалды, күҙҙәренә ҡараны. Моғайын, хәҙер хужаһы уны әүәлге хәленә ҡайтарыр, һә тигәнсе аяғына баҫтырыр. Ул бит шундай изге күңелле, аҡыллы кеше.

Тик хужаһы бер ни ҡылманы, әллә ниндәй ят тауыш менән: «Дункан! Дункан!..» — тип йөнөнән һыпырыуын ғына белде.

Әллә ямғыр яуырға итә, тип уйланы эт: уның томшоғона ҡайҙандыр ике бөрсөк тамсы тамды...

Ә хәл һаман-һаман бөтә бара... Хужаһы янында булғанға ғына түҙә ул, юҡһа күптән күҙен йомған булыр ине...

Дункан үлемде белмәй, үҙенең үлеп барғанын да аңламай, сөнки уның быға саҡлы бер ҙә үлгәне юҡ ине. Эткә был донъяла башҡа бөтәһе лә үлә, тик ул үҙе гел генә булыр һымаҡ тойола торғайны.

Тик ниңә шул тиклем хәле юҡ икән? Хәҙер ул, моғайын, бер аҙға йоҡоға талыр, хәл алыр, шунан йәнә хужаһы Мырҙамөхәммәт менән бергә ошо Олотау буйлап китер...

...Бына сасҡау баҫҡан ағастар ҙа ҡарая башланы. Ағастар ҡарайҙы ла, әкрен генә сайҡалып, ҡайҙалыр ҡоланы. Ағастар ғына түгел, ҡояш та, күк тә, хужаһы ла, уның күҙҙәре, хатта күҙендәге йәштәре лә ҡап-ҡара булды. Бөтәһе лә ҡарайҙы ла юҡ булды...

**1.** Өсөнсө айыуҙы алғанда, Мырҙамөхәммәттең күңел кисерештәрен аңлатығыҙ.
**2.** Председателгә характеристика бирегеҙ. Уны кешелек сифаттары буйынса баһалағыҙ.
**3.** Яраланған Дункандың ғазап-кисерештәре һүрәтләнгән урынды текстан табып уҡығыҙ.
**4.** Дунканды ҡомһоҙлоҡ, нәфселек ҡорбаны тип әйтеп буламы?
**5.** Ни өсөн әҫәр «Һуңғы һунар» тип атала?
Ⓟ **6.** «Тәбиғәт һәм кеше» тигән темаға әңгәмә ойошторoғоҙ һәм презентация эшләгеҙ.
**7.** Тәбиғәткә ҡарата мөнәсәбәт хаҡында сығыш әҙерләгеҙ.

**145-се күнегеү.** II бүлектәге ҡалын хәрефтәр менән бирелгән һөйләмдәрҙә инеш һүҙҙәрҙе табығыҙ, уларҙың мәғәнәләрен билдәләгеҙ. Өндәш һүҙҙәрҙе күрһәтегеҙ.

**146-сы күнегеү.** Һөйләмдәрҙе тултырып яҙығыҙ.

1. Ул тиклем нәфселе лә булырға ... . 2. Януар төйәген ташлап китергә ... . Һунарсылар, алмашлап, берәм-берәм маташты, мәғәнә сыҡмағас, йәнә кәңәшләшергә ... . 3. Юҡ, уға төтөнлөк һалырға, ыҫларға ... . 4. Мырҙамөхәммәт, береһенә лә иғтибар итмәйенсә, тамаҡ төбө менән ырылдап, лаф-лаф өргән этенә ... . 5. Һуңғыһы, былдай гонаһлы һунарға йөрөүҙең ... . 6. Дункан ҡапыл йән өҙгөс итеп ... . 7. Эт шуға ғына аптырай: донъя, эле тәү тапҡыр күргән һымаҡ, ғәжәп яҡты, саф, матур ... . 8. Дункан башын йөгөнөклəп ултырған

хужаһы Мырҙамөхәммәттең ҡулдарына һалды, күҙҙәренә ... . 9. Хужаһы янында булғанға ғына түҙә ул, юҡһа күптән күҙен йомған ... . 10. Эткә был донъяла башҡа бөтәһе лә үлә, тик ул үҙе гел генә булыр һымаҡ ... .



## Әнисә ХӘМӘТДИНОВА

**(1927 — 1991)**

Әнисә Әхтәм ҡыҙы Хәмәтдинова 1927 йылдың 13 мартында Башҡортостандың Кушнаренко районы Иҫке Ҡорманай ауылында тыуған.

Әнисә Хәмәтдинованың 60-сы йылдар башында республикабыҙҙың «Пионер» журналы, газета биттәрендә күренә башлаған хикәйәләре балалар тарафынан яратып, мауығып уҡылды. Әнисә Хәмәтдинова балалар тормошон, психологияһын тәрән белеп яҙа.

Уның айырыуса «Ҡыҙҙар», «Шинель кейгән малайҙар», «Илһөйәрҙең дуҫтары» кеүек китаптарына ингән хикәйәләре һәм повестары ҙур популярлыҡ яуланы.

## ЙӘШЕЛ ДАРЫУХАНА

Сәғиҙәнең йөҙө аҡ, нурһыҙ, бәләкәй нәҙек кәүҙәһенә бер ҙә ит ҡунмай, һәр көн кис әсәһе Сәғиҙәгә дарыу эсерә. Дарыу эсмәһә, ул йоҡлай ҙа алмай. Урманға бармай, йылғаға төшмәй, көнө буйы өйөндә ҡурсаҡтары менән уйнай Сәғиҙә.

Ҡайһы бер көндәрҙә уның янына күрше ҡыҙы Нәзирә инеү менән, Сәғиҙәнең өйҙәре яҡтырып киткән кеүек була. Нәзирә һәр ваҡыт асыҡ йөҙлө, уның өҫтөндәге алһыу күлдәге лә көлөп торған һымаҡ. Тик Сәғиҙә кеүек өйҙә ултырырға яратмай ул. Әле лә ишектән керер-кермәҫ үк ҡысҡырып ебәрҙе:

— Әйҙә тышҡа! Ҡыҙыҡлы уйнарбыҙ! Таҡанда атынырбыҙ!

— Минең дарыуханаға йодҡа бараһым бар шул. Бармағымды киҫтем, — тине Сәғиҙә.

Бергә киттеләр. Дарыухана ябыҡ ине. Сәғиҙәнең былай ҙа бойоҡ күҙҙәре тағы моңһоулана төшһәләр ҙә, Нәзирәнең быға бер ҙә кәйефе ҡырылманы.

— Әйҙә, мин һине йәшел дарыуханаға алып барам, — тине ул, үҙ фекеренә үҙе ҡыуанып. — Унда бөтә дарыуҙар ҙа бар. Унан ул һәр ваҡыт асыҡ була.

Тәүҙә бәләкәй йылға аша сыҡтылар. Ваҡ ҡайынлыҡҡа еткәс, Сәғиҙә түҙмәне:

— Барабыҙ ҙа барабыҙ, ә йәшел дарыуханаң һаман күренмәй. Ҡайҙа ул? — тине.

— Хәҙер етербеҙ.

Урман эсенә килеп ингәс, Сәғиҙә сәскә йыйырға тотондо.

Сәскә өҙә-өҙә Сәғиҙә мыжғып торған ҡырмыҫҡа ояһына килеп сыҡты. Ҡырмыҫҡаларға иҫе китеп ҡарап торҙо. Инде ул, дарыухана тураһында бөтөнләй онотоп, ағас төбөндә һары сәскә һуты һурып ултыра ине, Нәзирәнең тауышын ишетте:

— Сәғиҙә, бында кил әле! Һиңә дарыу таптым!

Сәғиҙә килгәс, Нәзирә һөйләнә-һөйләнә, уның бармағын япраҡ менән ураны:

— Бына был үләндән йод эшләйҙәр. Шуны бармағыңа урап йөрөт. Яраңды хәҙер киптерер.

Нәзирәнең ҡулындағы төрлө үҫемлектәрҙе күреп, Сәғиҙә аптырап ҡалды:

— Былар һиңә нимәгә кәрәк?

— Ә-ә-ә! Улар бит ябай үҫемлек түгел, — тине Нәзирә. — Бына был — һары мәтрүшкә тигән үҫемлек. Болонда ла, урманда ла үҫә. Ҡара әле, ҡара, ике япрағы бер ерҙән ҡапма-ҡаршы үҫеп сыҡҡан. Сәскәләрен, япраҡтарын киптереп дарыуханаға тапшырһаң, уларҙан үпкә, нервы ауырыуҙарынан дарыуҙар эшләйҙәр. Бешкән ерҙе, яраларҙы ла төҙәтә ул.

— Ә бына был шыма япраҡлы үлән?.. — тине Сәғиҙә, Нәзирәнең ҡулындағы үләнде ҡапшап. — Ҡыҙыҡ, япраҡтарҙың өҫтө һалҡын, ә аҫҡы яғы йылы, йомшаҡ.

— Үгәй инә үләне ул. Унан йүтәл дарыуы эшләйҙәр. Ә быныһы — көтөүсе муҡсаһы. Ул ҡан ағыуҙы туҡтата. Бына был ынйы сәскә. Унан йөрәк дарыуҙары эшләйҙәр. Беҙ үткән йыл апайым менән был сәскәне бик күп йыйҙыҡ. Йыйҙыҡ та киптереп дарыуханаға алып барып бирҙек. Ынйы сәскәһен йыйғандан һуң, ҡулдарҙы яҡшы итеп йыуырға кәрәк, сөнки уның ағыуы бар. Уны тәмләп ҡарарға ла ярамай. Беҙ апайым менән бына ошондай аҡ сәскәләрҙе лә йыйып тапшырҙыҡ. Улар күп бит. Бөтөн ерҙә лә үҫә.

Сәғиҙә үҙе Нәзирәне тыңланы ла, үҙе былай уйланы:

«Нәзирә минән бер класҡа түбән уҡыһа ла, бөтә нәмәне белә. Ниңә мин бер нәмә лә белмәйем икән? — Был минутта Сәғиҙә үҙен әллә нисек тойҙо. — Минең дә тәнем шулай ҡояшта янған булһа ине! Нәзирәнең күҙҙәренән осҡондар сәселеп тора...»

— Сәғиҙә, — тине Нәзирә, ҡыуаҡлыҡҡа күрһәтеп, — бына ҡомалаҡ сәскәһе, быныһы йүкәнеке. Уларҙан да дарыу эшләйҙәр.

— Дарыу ҙа дарыу тиһең, — тип бүлдерҙе уны Сәғиҙә, — йәшел дарыухана ҡайҙа һуң?

— Йәшел дарыухана ошонда инде, — тине Нәзирә, ҡоластарын йәйеп. — Йәшел дарыухана — ул урмандар, ҡырҙар. Бындағы үҫемлектәрҙең күбеһенән һин барырға уйлаған дарыухана өсөн дарыуҙар әҙерләйҙәр ҙә инде...

**Ошо ваҡиғанан һуң, Сәғиҙә йәй буйы Нәзирә менән урманда йөрөнө. Улар төрлө үләндәр киптерҙеләр. Дарыуханаға бик күп гөлйемеш йыйып тапшырҙылар. Хәҙер Сәғиҙә дарыу үләндәренең исемдәрен дә белә. Урман-ҡырҙарҙа йөрөп, ул ҡояшта янды, үҫте, һауыҡты.** Дарыу эсеүҙе иҫенә лә төшөрмәй, сөнки уға кәрәкле нәмәләр йәшел дарыуханала булған икән. **Саф һауа, ҡояш нурҙары, йылға, йомшаҡ үлән, матур сәскәләр — кешегә иң кәрәкле дарыуҙар шулар бит!**

1. Сәғиҙәнең йыш ауырыуының сәбәбен нимәлә күрәһегеҙ?
2. Нәзирә Сәғиҙәгә нисек ярҙам итә?
3. Ҡыҙҙар ниндәй файҙалы эштәр башҡаралар?
4. Ни өсөн әҫәр «Йәшел дарыухана» тип атала?
5. Шифалы үҫемлектәр, уларҙың кеше сәләмәтлеге өсөн файҙаһы тураһында фекер алышығыҙ.

**147-се күнегеү.** Алдағы әҫәрҙәге ҡалын хәрефтәр менән бирелгән һөйләмдәргә синтаксик анализ эшләгеҙ. Һуңғы абзацты рус теленә тәржемә итегеҙ.

## ХӘТЕР ҺАНДЫҒЫНА...

Йәй көнө бик ҡыҙҙырһа, ямғыр булыр.

* * *

Йәйең рәтле булһа, сәйең шәрбәтле булыр.

* * *

Ҡыш аҙығын йәй йыйна.

* * *

Ҡышҡа керһәң, йәйҙе уйла, йәйгә керһәң, ҡышты уйла.

* * *

Йәйҙең өйө киң.

* * *

Вайымһыҙ йөрөһәң йәй көнө, алымһыҙ булырһың көҙ көнө.

* * *

Йәй эшләмәһәң, ҡыш ашарға тапмаçһың.

* * *

Йәйҙең бер көнө ҡыштың бер айынан ҡиммәт.

# ҺҮҘЛЕК

**А**

**абалап өрөү** — бросаться, набрасываться с лаем
**ажарлы** — отважный
**айран** — пахта, айран
**алыпһатар** — перекупщик
**алҡым** — горло, глотка
**алғасҡы** — авангард
**аманат** — то, что доверено хранить как святыню

**Б**

**баҡырса** — медный чайник
**башаҡ** — колос
**белеш** — знакомый
**бетеү** — амулет, талисман
**биләү** — пелёнка
**бишек** — колыбель
**боғаҙ** — глотка, горло
**бөрлөгән** — ежевика
**бәлтерәү** — становиться вялым, апатичным
**бәҫ** — иней, изморозь
**бәхилләшеү** — прощаться

**В**

**вариҫ** — наследник, преемник
**вафат** — смерть

**Г**

**гонаһ** — грех

**Ғ**

**ғазап** — мука
**ғәжәп** — изумительный

**Д**

**даръя** — большая река
**дыуамал** — безрассудный
**дәлил** — доказательство, аргумент, довод
**дәрәжә** — престиж, авторитет
**дәүләт** — государство

**Е**

**ейеү** — есть, кушать; преть
**елен** — вымя
**ерек** — ольха
**етди** — серьёзный

**И**

**илдәш** — соотечественник
**иман** — вера, совесть
**инаныу** — верить, веровать во что-то
**иркәк** — самец; мужчина
**ирәйеү** — чувствовать себя свободно, возомнить о себе
**иҫәр** — глупый
**ишара** — жест, намёк

### Й

**йоҙроҡ** — кулак
**йомош** — нужда, поручение
**йор** — остроумный, проворный
**йөн тетеү** — трепать, раздёргивать шерсть
**йүгән** — узда
**йүкә** — липа
**йәтмә** — вид ловушки

### К

**кейеҙ** — войлок
**киндер туҡыма** — холщовая ткань
**кир** — мухортый
**киҫәтеү** — предупреждать
**көйшәү** — жевать
**көмөш шөңгөр (көмөш ҡыңғырау)** — серебряный колокольчик
**көпшә** — стебель
**көр** — упитанный
**күмәс** — булка
**кәбән** — стог

### Ҡ

**ҡамғаҡ** — перекати-поле
**ҡан ҡәрҙәш** — кровное родство
**ҡарағура** — бурьян
**ҡаулан** — прошлогодняя трава
**ҡашлаҡ** — косогор, скат
**ҡот** — уют, счастье, удача
**ҡәлғә** — крепость
**ҡәтғи** — категорически
**ҡуй, һарыҡ** — курдючная овца
**ҡуйын** — пазуха
**ҡурай еләге** — малина

### Л

**ләғнәт** — проклятие

### М

**мая** — подкладень (яйцо, подкладываемое в гнездо, чтобы курица неслась в определённом месте)
**милләттәш** — одной национальности
**миндек** — банный веник
**михнәт** — страдание
**моҙға** — короб из бересты (для временного помещения пчёл)
**моҡсай** — мешок
**мөләйем** — обаятельный
**муйыл** — черёмуха
**мәғлүм** — известно
**мәкерле** — коварный
**мәрхәмәт** — милость
**мәрәкә** — забавный

### Н

**наҡыҫ** — скудный
**нахаҡ** — несправедливый
**ниғмәт** — богатство
**нәфрәт** — ненависть

### О

**оран** — клич
**орлоҡ** — семена

### Ө

**өлкәр** — созвездие
**өлөш** — часть, доля, порция
**өмә** — коллективная помощь
**өн** — явь

### С

**сайыр** — смола
**серем итеү** — дремать
**сибек** — слабый, хилый
**ситән** — плетень

**сөскөлт** — пресноватый
**сусайыу** — выступать
**сүс арҡан** — толстая верёвка, аркан
**сыраҡ (сыра)** — лучина
**сыраҡҡа төшөү** — лучить рыбу
**сәйер** — странный, чудный

**Т**

**тамға** — родовой знак
**тараф** — сторона, направление
**теҙген** — повод
**тентеү** — обыскивать
**тол ҡатын** — вдова
**тоноҡ** — прозрачный, отстоявшийся
**тунау** — сдирать, обдирать (шкуру)
**түшәк** — постель
**тәғәм ризыҡ** — пища на один приём

**У**

**уйпат** — впадина
**упҡын** — пропасть
**ураҙа** — ураза
**ураҡ** — серп, жатва
**услам** — пучок
**утлау** — пастись, пастбище

**Ү**

**үрәсә** — грядки у телеги

**Ф**

**фарман** — указ, приказ; сила, мощь
**форсат** — благоприятный момент

**Х**

**хаҡлыҡ** — правота
**хикәйәт** — легенда
**хилаф** — противоречивый
**хәйер** — милостыня
**хәрәм** — запрещённый, недозволенный, нечестный

**Һ**

**һалдау** — острога
**һандал** — наковальня
**һөмһөҙ** — бесстыдный, бессовестный
**һуҡа** — соха
**һуҡмаҡ** — тропинка
**һый** — угощение

**Ш**

**шанлы** — славный
**шаһит** — свидетель
**шуҡ** — озорной
**шыйтыҡ** — упругий, гибкий
**шымсы** — сыщик
**шәм** — свеча

**Ы**

**ыҙғарлы** — морозный; трудный
**ырыуҙаш** — сородич
**ыумас** — затируха
**ынйы** — жемчуг

**Ә**

**әкәмәт** — диво
**әүеҫлек** — навес

**Я**

**ярһыу** — разъяряться; горячий, пылкий

## ЙӨКМӘТКЕҺЕ


**Мәктәп — белем шишмәһе**

*С. Әлибай*. Мәктәп юлы . . . . . . . . . . 3
Ябай һөйләм синтаксисы . . . . . . . . . . 4
Һүҙҙәр бәйләнеше. Һөйләм . . . . . . . . . . 4
*Н. Мусин*. Һабаҡ . . . . . . . . . . 5
*Р. Тимершин*. Уйлап табыусы . . . . . . . . . . 16
Һүҙҙәрҙең үҙ-ара бәйләнеше . . . . . . . . . . 18

**Халыҡ ижады — халыҡ хазинаһы**

Ике сәсән . . . . . . . . . . 24
Сура батыр . . . . . . . . . . 25
Һүҙҙәрҙең һөйләмдә үҙ-ара бәйләнеү юлдары . . . . . . . . . . 26
«Ябай һөйләм синтаксисы» темаһы буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау . . . . . . . . . . 27

**Көҙ — хеҙмәт һәм байлыҡ миҙгеле**

*З. Биишева*. Көҙгө ямғыр . . . . . . . . . . 31
*Х. Назар*. «Көҙгө көн. Болотло. Һалҡын...» . . . . . . . . . . 32
Һөйләм төҙөлөшө . . . . . . . . . . 33
Һөйләмдең баш киҫәктәре . . . . . . . . . . 34
*Р. Ханнанов*. Икмәк ҡәҙере . . . . . . . . . . 35
Икмәк . . . . . . . . . . 44
Балан ҡамыр ашата . . . . . . . . . . 45
*Рамазан Өмөтбаев* . . . . . . . . . . 46
*Р. Өмөтбаев*. Әмир баҫыуы . . . . . . . . . . 46
Ҡурмас . . . . . . . . . . 56
Художестволы әҫәрҙең композицияһы . . . . . . . . . . 56

**Уҡытыусы — ниндәй гүзәл исем!**

*Р. Ғарипов*. Уҡытыусыма . . . . . . . . . . 58
*Р. Шаммас*. Күперһеҙ йылғалар... . . . . . . . . . . 59

**Башҡортостан — алтын бишек**

*А. Игебаев*. Башҡортостан — илгенәм! . . . . . . . . . . 66
*А. Игебаев*. Башҡортостан . . . . . . . . . . 67

*И. Кинйәбулатов.* Дуҫлыҡ төйәге . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 68
Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 69
Тиң һәм тиң булмаған аныҡлаусылар . . . . . . . . . . . . . 70
*Н. Нәжми.* Өфө йүкәләре . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 71
Тултырыусы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 72
Тура һәм ситләтелгән тултырыусылар . . . . . . . . . . . . . 75

**Салауат батыр ир ине**

Салауат батыр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 77
*Ф. Рәхимғолова.* Салауат . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 78
*Т. Дәүләтбирҙина.* Салауат рухы . . . . . . . . . . . . . . . . . . 79
*Ф. Күзбәков.* Яу ораны бит һин, Салауат! . . . . . . . . . . . 80
Хәлдәр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 82
*Яныбай Хамматов* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 83
*Я. Хамматов.* Салауат . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 83
Һөйләм киҫәктәрен бер-береһенән айырыу . . . . . . . . . 98

**Ҡыш**

*Ш. Бабич.* Ҡышҡы юлда . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 100
*Булат Рафиҡов* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 101
*Б. Рафиҡов.* Бүреләр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 101
*И. Теләүембәтов.* Маралым таңы . . . . . . . . . . . . . . . . . 120
*О. Перовская.* Мишка . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 126
«Һөйләмдең баш киҫәктәре» һәм «Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре» темалары буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау . . . . . . . . . 134

**Данлы йылдар, шанлы йылдар**

*М. Кәрим.* Үлмәҫбай . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 135
Лиро-эпик поэмаларҙың үҙенсәлектәре . . . . . . . . . . . . . 144
*Н. Ғәлимов.* Яуҙан ҡайтҡан ҡурай . . . . . . . . . . . . . . . . 145
*Р. Өмөтбаев.* Башҡорттар китте һуғышҡа *(«Генерал Күсимов» әҫәренән өҙөк)* . . . . . . . . . . . . . . . . . 148
*В. Шукшин.* Ҡайғы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 163
Һөйләмдең тиң киҫәктәре . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 168
«Һөйләмдең тиң киҫәктәре» темаһы буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 170

**Әсәйем — күңел ҡояшым**

*Ш. Бикҡол.* Әсәйемдең кәңәштәре . . . . . . . . . . . . . . . . 171
Ике һәм бер составлы һөйләмдәр . . . . . . . . . . . . . . . . . 173
Бер составлы һөйләмдәр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 174
Билдәле эйәле һөйләм . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 175
Дөйөм эйәле һөйләм . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 175

Билдәһеҙ эйәле һөйләм . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 176
Эйәһеҙ һөйләм . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 177
Атама һөйләм . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 178
*Т. Ғиниәтуллин.* Әсә һәм бала . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 179
Тулы һәм кәм һөйләмдәр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 189
«Ике һәм бер составлы һөйләмдәр» темаһы буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 191

**Әҙәп барҙа — иман бар**

*Хәсән Назар* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 193
*Х. Назар.* Өс һүҙ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 193
Һөйләмдә эйәрсән киҫәктәрҙең айырымланыуы . . . . . . . . . . . . 194
*Мәүлит Ямалетдинов* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 195
*М. Ямалетдинов.* Иман . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 195
*З. Ғәлимов.* Ялан сәскәләре . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 201

**Шаулап-гөрләп яҙ килә**

*Р. Ғарипов.* Яҙғы йыр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 206
*Зиннур Ураҡсин* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 207
*З. Ураҡсин.* Алмағас . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 207
Сәскә ғүмере . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 208
*Рафаэль Сафин* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 210
*Р. Сафин.* Тол ҡатындар һәм аяҡһыҙҙар бейеүе . . . . . . . . . . . . . 210
*Р. Мифтахов.* Өскөл хаттар . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 212
Ябай һөйләм синтаксисы буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау . . . . . . . 212

**Ай Уралым, Уралым!**

*Ҡәҙим Аралбай* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 214
*Ҡ. Аралбай.* Ер тураһында ете һүҙ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 214
*Баязит Бикбай* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 215
*Б. Бикбай.* Ер *(Поэманан өҙөк)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 216
Һөйләм киҫәктәре менән грамматик бәйләнеше булмаған һүҙҙәр. Өндәш һүҙҙәр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 221
*Ж. Кейекбаев.* Урал тураһында ҡобайыр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 222
Инеш һүҙ һәм инеш һүҙбәйләнештәр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 225
*Н. Мусин.* Һуңғы солоҡ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 227
Солоҡ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 241
«Һөйләм киҫәктәре менән грамматик бәйләнеше булмаған һүҙҙәр» темаһы буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау . . . . . . . . . . . . . 242
*М. Уразаев.* Еҙ ҡурай . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 242
Тура телмәр. Тура һәм ситләтелгән телмәр . . . . . . . . . . . . . . . . . 243
Диалог . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 245
«Тура һәм ситләтелгән телмәр» темаһы буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 247

**Йәй**

*Ф. Рәхимғолова.* Бал ҡорто һәм күбәләк . . . 248
*Шакир Янбаев* . . . 249
*Ш. Янбаев.* Дегәнәк . . . 249
Дегәнәк . . . 253
*А. Йәгәфәрова.* Кескәй шишмә . . . 254
*Рәшит Солтангәрәев* . . . 258
*Р. Солтангәрәев.* Һуңғы һунар . . . 258
*Әнисә Хәмәтдинова* . . . 269
*Ә. Хәмәтдинова.* Йәшел дарыухана . . . 269
Һүҙлек . . . 273

*Учебное издание*

**Хажин** Вакил Исмагилович
**Вильданов** Ахат Ханнанович
**Аккужина** Фаурия Ахтямовна
**Карабаев** Мунир Иделович

**БАШКИРСКИЙ ЯЗЫК И ЛИТЕРАТУРА**

**Учебное пособие для 8 класса
для изучения родного (башкирского) языка и литературы
в общеобразовательных организациях
с русским языком обучения**

*(на башкирском языке)*

*Уҡыу баҫмаһы*

**Хажин** Вәкил Исмәғил улы
**Вилданов** Әхәт Ханнан улы
**Аҡҡужина** Фәүриә Әхтәм ҡыҙы
**Ҡарабаев** Мөнир Иҙел улы

**БАШҠОРТ ТЕЛЕ ҺӘМ ӘҘӘБИӘТЕ**

**Уҡытыу рус телендә алып барылған
дөйөм белем биреү ойошмаларының
8-се класы өсөн тыуған (башҡорт) телен һәм
әҙәбиәтен өйрәнеү өсөн уҡыу ҡулланмаһы**

Редакция мөдире *Г. А. Раянова*
Мөхәррире *Н. Х. Исхаҡова*
Биҙәлеш мөхәррире *З. И. Кәримова*
Техник мөхәррире *Г. Р. Исхаҡова*
Корректорҙары *Л. Ф. Саниева, Г. Р. Попова*

Баҫырға ҡул ҡуйылды 13.06.2017. Форматы $60 \times 90^1/_{16}$. Офсет ҡағыҙы. Офсет ысулы менән баҫылды. BTSchoolBook гарнитураһы. Шартлы баҫма таб. 17,50 + 0,25. форз. Шартлы буяу отт. 19,00. Иҫәп-нәшер таб. 16,61 + 0,40 форз. Тиражы 11560 дана. Заказ 1.0143.17.

Башҡортостан Республикаһының Зәйнәб Биишева исемендәге
Башҡортостан «Китап» нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.



КИТАП